# Ағиҙел

Өфө,
июнь
2012

6(1070)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Ҡамилә ДӘҮЛӘТОВА
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары),*
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире),*
Ноғман МУСИН,
Риф ТОЙҒОНОВ,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире),*

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ғәйнуллина *(яуаплы сәркәтип),*
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире),*
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир),*
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),*
Гүзәлиә Тутаева, Рүзилә Саптарова *(корректорҙар),*
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Хәзиева *(компьютерҙа йыйыусылар),*
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе),*
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар).*

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 1.06. 2012. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
"Times" гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 572 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0086.12.

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel-rb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**© «Ағиҙел», 2012 (6,1070)**

# БЫЛ ҺАНДА:

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Талха Ғиниәтуллин.** Өс хикәйә. ......................................................5

ШИҒРИӘТ

**Фәнил Күзбәков.** Торналар сыңы. Д а с т а н . ...............................21
**Гүзәл Ситдиҡова.** Күҙгә Инйәр. Ш и ғ ы р ҙ а р . ............................69
**Рафаил Хафизов**. Ил өҫтөндә. Ш и ғ ы р ҙ а р . ...............................74

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Ринат Камал.** Беләҙекүл. Р о м а н . ..............................................79

ЖУРНАЛ УҠЫУСЫЛАР ИЖАДЫ

**Рәсимә Ғайсина.** Хәтирәләр. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..............................146
**Фәнил Хөснөтдинов.** Төштәремә кер һин. Ш и ғ ы р ҙ а р . .........148

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Лилиә Басирова.** Мостай Кәрим һабаҡтары. .............................149

БЕҘҘЕҢ ЮБИЛЯРҘАР

**Рәйеф Әмиров.** Күктәргә яҙылған ер яҙмышы
*(Әсхәл Әхмәт-Хужаға 70 йәш).* ....................................................156
**Сабир Шәрипов.** Калугала йәшәй ҡәләмдәш. .............................161

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Әхмәт Мәхмүтов.** Заманының шанлы йырсыһы
*(Шамун Фидаиҙың тыуыуына 110 йыл).* .....................................163
**Таһир Ғәбитов**. Баҫалҡылыҡ, егәрлелек менән
*(Раил Байбулатовтың тыуыуына 75 йыл).* ................................164
**Бүләк Исмәғилева.** Тел байлығы – күңел байлығы. ....................165

*2012 – Имен бала саҡ һәм ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу йылы*

**Мәхмүт Хужин.** Бала күңеле – аҡ ҡағыҙ. ....................................167

СӘНҒӘТ

**Таңһылыу Ғәйнуллина.** Нурлы ижад. ........................................179

«АҒИҘЕЛ»ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПРОЗА И ПОЭЗИЯ

**А. Генатулин.** Три рассказа.
**Ф. Кузбеков.** Журавлиная песнь. *Дастан.*
**Г. Ситдыкова, Р. Хафизов.** *Стихи.*
**Ринат Камал.** Блязекуль. *Роман.*

ТВОРЧЕСТВО ЧИТАТЕЛЕЙ

**Р. Гайсина, Ф. Хуснутдинов.** *Стихи.*

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**Л. Басырова.** Уроки Мустая Карима.

НАШИ ЮБИЛЯРЫ

**Р. Амиров.** Судьбоносные строки земли
(70 лет Асхаль Ахмет-Хуже).
**С. Шарипов.** Живет в Калуге Салават.

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**А. Махмутов.** Поэт своего времени
*(110 лет со дня рождения Шамуна Фидаи).*
**Т. Габитов.** Скромность и трудолюбие.
*(75 лет со дня рождения Раиля Байбулатова).*
**Б. Исмагилова.** Богатство души.

*2012 — Год благополучного детства и укрепления семейных ценностей*

**М. Хужин.** Душа ребенка — чистый лист.

ИСКУССТВО

**Т. Гайнуллина.** Лучезарное творчество.

ПИСЬМА В «АГИДЕЛЬ»

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА...

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



Талха
ҒИНИӘТУЛЛИН

# ӨС ХИКӘЙӘ

## Көтөүсе

Йылға буйынан ҡайтҡанда һоро сентябрь көнө иртә төшкән эңер ҡараңғылығына сорнала башлағайны. Тыҡрыҡтан өй яғына боролһам – ҡапҡам төбөндә ят кешене шәйләнем. Һағайҙым, сөнки был мәлдә берәһен дә көтмәйем, килер кешем юҡ. Ауылға тиҙгә генә ҡайтҡанмын, ауырып киткән ҡатыным Мәскәүҙә ҡалды. Ҡапҡам төбөнә еттем дә, уның ҡала кешеһе икәнен самалап, русса өндәштем:

– Һеҙ миңәме?

– Эйе, һаумыһығыҙ.

Ул миңә ҡулын һондо, мин дә ҡул бирҙем. Күрешеүҙе өнәп бөтмәйем, йыш ҡына, бигерәк тә йәшерәктәр, минең ҡарт, сибек бармаҡтарҙы нıҡ ҡыҫа, әйтерһең, үҙҙәренең был ҡылығы менән «ҡартайған, үлергә лә күп ҡалмағандыр» тигән йәшерен уйын аңлатырға тырыша. Таныш түгел кешенең усы киң һәм ярайһы уҡ ҡаты ине – эшсе ҡулы икәне һиҙелеп тора.

– Һеҙ Тәлғәт бит? – тип һораны ят кеше.

– Эйе, Тәлғәт.

– Һеҙҙе ауылдың иң өлкән кешеһе тип әйттеләр.

– Минән дә олораҡ берәү бар, тик ул хәҙер йөрөй алмай.

– Һеҙ, бәлки, минең атай-әсәйҙе хәтерләйһегеҙҙер? Һорайым-һорайым, бер кем дә белмәй. Детдомға алып киткәндән бирле ауылға ҡайтҡаным юҡ. Атайҙың ҡасан үлгәнен дә, ҡайҙа ерләнгәнен дә белмәйем.

– Исеме кем ине?

– Ғәлимнур. Көтөүсе булған. Ауыл һарыҡтарын көткән.

*Талха Ғиниәтуллин (1925) Учалы районының Ураҙ ауылында тыуған. Өфөлә, Мәскәүҙә нәшер ителгән байтаҡ китаптар авторы, хикәйә, повестары сит телдәргә лә тәржемә ителгән. Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, С. Аксаков исемендәге Бөтә Рәсәй әҙәби премияһы лауреаты.*

– Ә-ә, Акэ көтөүсе, – минең иҫкә төштө. – Беҙҙең аймаҡта йәшәне бит.

– Эйе, уны Акэ тип йөрөткәндәр шул. Ә мин – Акэ малай. Беҙ һеҙҙең менән уйнай торғайныҡ. Иҫегеҙҙәме?

– Иҫкә төшкәндәй була. Мин үҙем дә ҡырҡ беренсе йылда ФЗО-ға киттем, ауылға илленсе йылда ғына ҡайттым, ул саҡта атайыңдың ауылда икәнен хәтерләмәйем. Ҡырҡ өсөнсө йә ҡырҡ дүртенсе йылда үлгәндер. Ул йылдарҙа ауыл ныҡ асыҡты, кеше күп ҡырылды. Ә бына ҡайҙа ерләгәндәрен әйтә алмайым. Һуғыш йылдарында мәйеттәрҙе зыяраттың ауыл яҡ осонда күмә торғайнылар. Ул тирәлә ер йомшағыраҡ, ҡаҙыуы ла еңелерәк.

Акэ малай мине бүлдермәй генә тыңланы, бер аҙ өндәшмәй торҙо, унан һорап ҡуйҙы:

– Шул урынды һеҙ миңә күрһәтә алмаҫһығыҙмы икән?

Бынау болотло, күңелһеҙ көндә зыяратҡа һис барғы һәм иҫке ҡәберҙәрҙе тапап йөрөгө килмәй ине. Беҙҙең ауыл зыяратында Акэ көтөүсенең ҡәбере юҡлығын ныҡлы беләм, әммә улының изге теләген нисек кире ҡағаһың? Атай һынлы атай ҡәберен эҙләп ҡайҙан ҡайҙа килгән бит.

Ул сәйер кешенең беҙҙең ауылға ҡайҙан килеп сығыуын бер кем дә белмәй ине. Дөрөҫөрәге, беҙ, бала-саға, үҫмерҙәр, белмәнек, ә олораҡтар, беҙ тыуғансы йәшәгәндәр, уның атаһының егерме беренсе йылдағы аслыҡта аҡылынан яҙғанын һәм ҡатыны менән балаларына: «Балалар, асыҡмағыҙ, мине ашағыҙ, юҡһа үләһегеҙ», – тип бысаҡ менән үҙенең муйынын салғанын хәтерләйҙәр. Атайҙың итен кем ашаһын инде? Был оло ҡайғы ҡатындың, балаларҙың аслыҡтан үлемен яҡынайта ғына. Һөҙөмтәлә балаларҙан олоһо ғына иҫән ҡала. Нисек иҫән ҡала – бер кем дә белмәй. Һәм ауылдан юғала. Ҡаҙаҡ далаларына олаҡҡан да бай ҡаҙаҡҡа көтөү көтөргә ялланған, имеш, тип һөйләнеләр аҙаҡ.

Кәүҙәгә ҡураныс ҡына кеше ине был. Артынан ҡараһаң, үҫмер малай тип торорһоң, боролһа – оло кешенең иртә ҡартайған йөҙөн, мәңге ҡырылмаған эйәгендә тырпайған бер нисә бөртөк һаҡалын күрәһең. Ауылдың туған телен онотмағайны, хәбәренә йыш ҡына алыҫ дала яғынан алып ҡайтҡан һәм беҙҙең өсөн ят, аңлайышһыҙ һүҙҙәр ҡушып ебәрә. Һүгенеү-әрләшеүе тик ҡаҙаҡса: «Акинг авзынг!» Беҙ, үҫмерҙәр, хатта үҙебеҙҙең уҡытыусыларға ҡушамат тағыусы оҫталар, был ҡаҙаҡ һүҙенең мәғәнәһен белмәгәс, көтөүсене «Акэ» тип кенә йөрөнөк. Бәлки, был аңлайышһыҙ ике һүҙ «ауыҙыңа төкөрәйем» тигәнде аңлатҡандыр?

Йәшәүе лә бәләкәй генә өйҙә булды. Өйөнөң урамға ҡараған тәҙрәләре нигеҙ тупрағы тәңгәлендә. Көтөүсе ауылға ҡайтмаҫ борон әле мин, мәктәпкә төшмәгән малай, ҡурҡа-ҡурҡа ғына ошо нигеҙ тупрағына менә лә тәҙрәнән буш өй эсен күҙәтә торғайным – ташландыҡ йорт ҡараңғылығында мин белмәгән ниндәйҙер серле һәм ҡурҡыныс йән эйәһе йәшәйҙер һымаҡ. Яланғас һике, емерек мейес. Мейестең кирбестәрен кемдер һүтеп, үҙенең кәрәгенә ташып алған. Ошо ташландыҡ өйҙә урынлашҡас, Акэ яңынан мейес һалманы, таштан, балсыҡтан боронғо сыуал ҡорҙо. Төтөнө түбә таҡтаһындағы иҫке мейес тишегенән сыға. Сыуалындағы көлдә көлсәләр бешерҙе.

Үҙе көтөүсенең дә көтөүсеһе ине. Бер ҡасан да сыбыртҡы йөрөтмәне. Һарыҡтарҙы көтөүгә ҡыуманы – улар бер нисә йөҙ баш – ә үҙе, ғәскәр алдында барған полководец һымаҡ, алдарынан атланы. Артына боролоп та ҡарамай торғайны, ҡысҡырмай ҙа. Уның артынан вожактар – һарыҡ тәкәһе менән кәзә тәкәһе – барҙы. Улар артынан – әлеге күп һанлы көтөү. Кем белә, бәлки, улар үҙҙәренән

саҡ ҡына ҡалҡыуыраҡ был ике аяҡлы йән эйәһен үҙҙәре ише мал тип ҡабул иткәндер ҙә шуға буйһонғандыр.

Ауыл осондағы аяуһыҙ ҡояш нурҙарынан көйгән ҡалҡыулыҡтарҙа мал-тыуар ҡырсынлы-ташлы тупраҡ араһынан һирәк үҫентеләрҙе ялмай. Көн уртаһында, ҡояш баш осона етеп ныҡлап ҡыҙҙыра башлағас, һирәк үләндәр араһынан ҡалҡынып, көтөүсе йылға яғына ҡуҙғала. Шуны ғына көткән көтөү дәррәү рәүештә уның артынан эйәрә. Шаршыла туйғансы һыу эсеп, кипкән талдың шыйыҡ күләгәһендәге ҡалын тиҙәк менән ҡапланған кәртәгә инеп тын ҡала. Көтөүсе берәй кәзәне һауа, көлсәһе менән ҡушып һөт эсә лә әлеге тал күләгәһенә ятып йоҡоға тала. Эҫелек бер аҙ кәмегәс уяна һәм көтөүен ҡалҡыулыҡ битләүенә кире эйәртеп алып китә.

Бындай ирәүән тормош йәй уртаһына тиклем генә дауам итә, унда ла йәшенләп ямғыр ҡоймаһа. Ундай саҡта кәзәләр, һарыҡтарҙан айырылып, ҡаяларға менеп китә йә ауылға ҡайта: «Әйҙәгеҙ, ҡайтайыҡ, бынау ямғырҙа һыуланып йөрөргә беҙ бит аңра һарыҡ түгел!» Ә һарыҡтар берәй ҡайын төбөнә өйөлөшә лә һыуланып тик тора. Кәкре мөгөҙлө, һаҡаллы йән эйәләренең тәбиғәтен яҡшы белгән көтөүсе ауыл яғына ыңғайлаған кәзәләрҙе борорға уйламай ҙа, арттарынан «Акинг авзынг!» тип әрләп ҡала. Ауылдағы кешеләр башҡаларҙан ни яғы менәндер айырылып торғандарға – сәйерлеге йәки физик зәғифлеге – улар хаҡында көлкөлө ваҡиғалар ҙа уйлап сығарырға әүәҫ ине. Ул ваҡиғаларҙы үҫмерҙәр ҙә ишетә. Акэ көтөүсе тураһында, мәҫәлән, ул шул тиклем һантый – ел ҡапҡаларының бағаналарының нәҙек осон ергә күмә йәки күршеһе Һабрай быға керһә, көтөүсе сәй эсеп ултыра һәм «Әйҙә, ултыр, сәй эсәйек» тип саҡыра. Һабрай һикенең ситенә сүгәләй. Акэ мейестән эҫе көлсәне ала ла ғәҙәте буйынса көлөн күршеһенең йөҙөнә ҡарап өрә. Һуңынан Һабрай: «Вәт яуыз ҡаҙаҡ, мине сәйгә саҡырҙы ла эҫе көлсәһенең көлөн йөҙөмә өрҙө», – тип һөйләп йөрөнө.

Ауылдың әсе телдәрен бигерәк тә көтөүсенең нишләп һаман да өйләнмәүе ғәжәпләндерә ине. Яңғыҙаҡ тормош ысынлап та биҙҙерҙеме – көтөүсе өйләнергә булды. Тик кемгә? Ауылдың буйсан йәш егеттәре менән һис ярыша алмай, етмәһә, ҙур һуғыш алды булған егерменсе йылдарҙа малайҙар күп тыуҙы, шуға ла утыҙынсы йылдарҙа кейәүҙәргә ҡытлыҡ юҡ ине ауылда. Уйланы-уйланы ла көтөүсе, балтаһына ҡарап ағасы тигәндәй, йә ултырып ҡалған, йә зәғиф, аҡһаҡ йә бөкрө булһа ла, берәйһен табырға ҡарар итте. Мәңге бисәһеҙ йәшәй алмай бит инде.

Һарыҡтары күрше колхоздың ерҙәренән йыраҡ та түгел ҡалҡыулыҡ баштарында йөрөй. Шундағы тау араһында Һарыгөл тигән бәләкәй генә ауыл йәшеренгән. Көтөүсенең унда бер ҡасан да булғаны юҡ. Бер ваҡыт ул ҡыҙыҡһынып ошо ауылға төштө. Тәүҙә ауыл ниңәлер буш, кешеһеҙ күренде. Үҙенең өйө һымаҡ бәләкәй генә өй тапҡырына еткәйне, ихатала бер ҡатынды шәйләне. «Аллаһы Тәғәлә миңә буласаҡ бисәмде күрһәтә», – тип уйланы ниңәлер. Ҡатын уны әллә күреп, әллә күрмәй өйөнә керергә йыйынғанда, көтөүсе уға өндәште: «Эй!» Ҡатын туҡтаны ла, ҡурҡып, уға текәлде. «Ҡурҡма, мин көтөүсе, һарыҡтарым ана теге ҡалҡыулыҡ артында», – тине ул һәм, яҡынайып, үҙенән биш башҡа оҙонораҡ, эре һөйәкле, киң яңаҡлы, ҡуйы ҡашлы ҡатынды күрҙе. Түштәренең дә мул икәнен шәйләгәс, юҡ, бармаҫтыр, ат кеүек ҙур, ҡулдары ла оҙон, туҡмар, тип уйланы. Шулай ҙа һөйләшергә булды – өндәшкәс ҡырҡа боролоп китә алмай бит инде.

– Һинең өйөңмө был?

Ҡатын ләм-мим, аңра һарыҡ һымаҡ уға текәлеп тик тора.

– Үҙең генә йәшәйһеңме?

Ҡатын баш ҡаҡты. Тимәк, яңғыҙы.

«Яңғыҙ булғас яҡшы», – тип уйланы Акэ һәм яҙмышын хәл итә торған һорауын бирҙе.

– Миңә кейәүгә сығаһыңмы?

Ҡатын һаман да шымтайып тора ине, шулай ҙа был юлы ҡалын ирендәрендә йылмайыу ғәләмәте шәйләнде.

– Һин нимә, һөйләшә белмәйһеңме әллә? – тип һораны көтөүсе, аптырап.

– Мин әрләшә беләм, – тине ҡатын ирҙәрсә ҡалын тауыш менән. Көтөүсе тертләп китте, иҫәр, тип уйланы, шунан, бара, тигән һығымта яһаны ҡапыл.

– Әҙер тор. Иртәгә алырға киләм. Ошондай уҡ бәләкәй өйҙә йәшәргә алып ҡайтам.

Ҡатын бер нәмә лә әйтмәне, боролдо ла мөштөм генә өйөнә инеп китте.

Иртәгәһенә иртәнсәк Акэ көтөүен ҡалҡыулыҡ битләүенә килтерҙе лә, көн уртаһы еткәс, ике вожактың көтөүҙе йылғаға төшөрәсәгенә ныҡлы ышанып, ауылға әйләнеп ҡайтты, күршеһе Һабрайҙың ваҡытлыса буш торған арыҡ бейәһен утын арбаһына егеп, ҡатынды алырға китте. Ҡатын уны кисәге һымаҡ өнһөҙ ҡаршыланы, ҡабаланмай ғына ваҡ төйәген – одеял, яҫтыҡ, юрған – йыйып төйнәне. Ҡашығаяҡтарын иҫке һандыҡҡа тултырҙы, самауырын – өйҙәге берҙән-бер йүнле нәмәһен – ҡултығына ҡыҫтырҙы. Сепрәк-сапраҡ һалынған төйөнсөктө аҫтына һалып, көтөүсе алға ултырҙы, янына һандыҡты урынлаштырҙы, аяҡтарын һәлендереп, ҡатын арбаның артына сүгәләне. Бейә ялҡау ғына ҡуҙғалып китте, түбәнгә лә шәбәймәне, яйлап ҡына барҙы. Акэ ара-тирә баш осонда дилбегәһен өйөрөлтөп, һөрәнләп тә ала:

– Но-о-о, йоҡлап киттеңме әллә?

Ҡыуған саҡта бейә арбаны ҡапыл тарта ла бер нисә аҙым ҡыҙыу ғына бара, шунан йәнә «йоҡлап» китә.

Ауылды сығып байтаҡ ара килгәнсе көтөүсе бер тапҡыр ҙа артына боролоп ҡараманы. Күпергә яҡынайғас ҡына, арбаның еңел барыуын самаланы. Әйтерһең дә, йөгөн бушаттылар. Әйләнгәйне – ҡатыны арбала юҡ! Бәй, ҡайҙа булған һуң? Менеп ултырғайны, эйе, ҡуҙғалып киткәндә лә бар ине. Шул саҡ уның дала киңлегенә күнеккән күҙҙәре ике саҡрым самаһында самауырын ҡултығына ҡыҫтырған ҡатындың кире ауылы яғына китеп барғанын күрҙе. Уның ат ҡапыл тартҡанда арбанан төшөп ҡалғанын фаразланы. Нишләп ҡайтып бара һуң? Көтөүсе һүгенде: «Акинг авзынг!» һәм атын кире борҙо. Ҡыуып еткәс, һораны:

– Һин нишләйһең ул, ә?

– Йығылып ҡалдым.

– Йығылып ҡалдым... Ниңә кире китеп бараһың?

Ҡатын өндәшмәне.

– Ултыр, бүтән йығылма. Юҡ, артҡа түгел. Аяҡтарыңды һәлендереп ҡабырғанан ултыр. Миңә яҡыныраҡ.

Күпергә яҡынлағас, ҡатын һораны:

– Исемең кем?

– Ғәлимнур. Ә һинеке?

– Сәхибә. Ауылда «Ҙур Сәхибә» тип йөрөтәләр, – бер аҙ өндәшмәй килгәс, өҫтәп ҡуйҙы. – Мужит кәрәкмәйҙер, ә?

– Нимә кәрәкмәй?

– Мине алырға?

– Нишләп кәрәкмәй?

– Кеше көләсәк.
– Үҙҙәренән көлһөндәр.

Ауыл буйлап барғанда ҡыҙыҡһыныусылар, мәҙәк күргәндәй, тәҙрәләргә ҡапланды, ҡайһылары ихаталарына, хатта ҡапҡа  алдарына сыҡты, йәнәһе, ҡара, ҡара: Акә бисә  алып ҡайтып килә!

Бер минут та эшһеҙ тора белмәгән йәш ҡатын  килеүенең беренсе көндәренән үк көтөүсенең емерек  хужалығын аяҡҡа баҫтырырға тотонды. Ватыҡ кирбестәрҙән һәм таштарҙан – сатнаған плитәне түңәрәктәре менән өй артындағы сүплектән тапты – усаҡ һалды. Уны һыланы, ағартты. Өй ҡыйығындағы торбанан төтөн сыҡты. Шулай итеп ғаилә усағы тоҡанды. Атаһының иҫке кейемдәренең ҡайһыларын ҡыҫҡартып, ҡайһыларын  киренән тегеп, Сәхибә ирен кейендерҙе.

Ауылдың сүбәк сәйнәүселәре Ғәлимнур менән Сәхибәнең тыныс тормошонда барыбер ҙә көлкөгә һәм мыҫҡыллауҙарға сәбәп таба торҙо. «Акә мендәрҙә йоҡлаған һымаҡ  йоҡлай икән  бисәһе өҫтөндә», – «Бәй, шулай булмайса, эргәһендә ятһа,  һыта бит ул».

Ауыл  һарыҡтарын хәҙер улар икәүләп көтә. Акә, ғәҙәттә, алдан бара, ҡатыны, киндер тоҡсай йөкмәп, көтөү артынан юрғалай. Көн  уртаһы етһә, Сәхибә һыулауға төшә лә, усаҡ яғып, ашарҙарына әҙерләй.

Көҙөн, ҡышын икеһе лә  фермала: Акә мал ҡараны, Сәхибә һыйыр һауҙы. Телдәр бисәләр уны бында ла тыныс ҡалдырманы, бигерәк тә  бер-ике  рюмка төшөрһәләр, телдәре  асыла ла хәбәрҙәре яҙыҡ юҫыҡҡа төшә лә китә.

– Йә, нисегерәк, булдыра аламы?
– Тырыша, – тип яуаплай ҡатын теләр-теләмәҫ кенә.

Беҙҙең  аймаҡтың  боҙоҡ үҫмер малайҙарын, хулиган һәм бурҙарын шулай уҡ тәбиғи булмаған ҡыҙыҡһыныусанлыҡ  өтөп  алып бара. Бер көн кис дуҫым Баҡый менән тегеләрҙең нигеҙ тупрағына мендек тә өй эсен тыңлай башланыҡ. Оҙаҡ та үтмәй, беҙҙең бурҙарса ҡылыҡты нисектер һиҙеп ҡалып, Сәхибә килеп сыҡты ла  ҡалын тауыш менән ирҙәрсә һүгенә, башҡортса, унан рус һүҙҙәрен ҡушып – ундайҙарҙы иҫерек  ирҙәр ҙә әйтмәй – беҙҙе ҡыуып  ебәрҙе. Һуңынан ирҙәр көтөүсенән һорай икән:

– Бисәң шулай һүгенергә ҡайҙан өйрәнгән ул?
– Ул тракторист булып эшләгән, йылдың йылы урман йығырға ла ебәргәндәр.

«Шунда өйрәнеп ҡайтҡан» тип әйтергә теләүе инде көтөүсенең.

Ғәлимнурҙан Акә малай тыуҙы. Мин уның менән уйнаманым. Ул тыуғанда мин үҙемдең аймаҡ малайҙары менән уйнай инем, ә үҙебеҙҙең «банда»ға бәләкәстәрҙе  беҙ бик индермәнек.

Әгәр ҙә бер ваҡиға килеп сыҡмаһа, был ике ябай кеше, тирә-яҡтағы кешеләргә лә, тәбиғәткә лә бер ниндәй зыян килтермәй, үҙҙәренең ябай тормоштары менән оҙаҡ йәшәрҙәр ине әле.

Яҙ көнө Тирләндә йәшәгән урыҫ «ызнакумы» Мукасеевҡа барырға шайтаны ҡоторҡандыр инде көтөүсене. Мукасеев көтөүсене  элек тә төрлө эштәренә йәлеп иткеләгән. Урмандан утын  ташып, уны бысып, ярып, өйөп ҡуйғылаған, хужалыҡтағы башҡа мәшәҡәттәрен дә башҡарҡан. Акә бригадирҙан колхоз атын  инәлеп һорап ала ла,  иртәгә үк ҡайтасағын  вәғәҙәләп, аҙнаға юғала ла ҡуя. Күршеһе Һабрайҙың утын ташыу өсөн ҡулайлаштырылған, әммә алыҫ юлға уңайһыҙ арбаһын һорап тора. Ә был юлы көтөүсе үҙе менән ҡатынын да, улын да ала. Малайына ул листопрокат заводында һыҙғырған, бышҡырған паровозды күрһәтергә ниәтләнә. Тирләнгә барғанда юл иреп ятһа ла, йылғалағы боҙ ныҡ була әле.

Мукасеевтың эше, һәр ваҡыттағыса, күп була. Мунсаһында мейесе емерелгән, мейес мәсьәләһендә Сәхибә оҫта: һүтте лә өр-яңынан сығарып та ҡуйҙы. Акэ серегән иҙәндәрен алыштырҙы. Эш араһында Марюсаның мул аш-һыуын ашап, Мукасеевтың көмөшкәһен эсеп икенсе аҙна киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалдылар. Мукасеев:

– Ғәлимнурка, һиңә ҡайтырға кәрәк, боҙ ҡуҙғалды, тауҙарҙан ташҡын төшә оҙаҡламай, – тине. – Йә һыу ҡайтҡанын көтәһең инде.

Йәшлек йылдарын ҡаҙаҡ далаларында үткәргән көтөүсе тау йылғаларының холҡон белмәй ине. Бер һикереүҙә сыға алған был йылғаны ташҡан хәлдә лә ат эсенә лә тейҙермәй үтәсәк, тип уйланы ул. Әммә көндәр ҡапыл йылытты, тауҙарҙа, тау битләүендәге урмандарҙа ҡар дәррәү ирей. «Ызнакум»ының ҡат-ҡат иҫкәртеүенә, Марюсаның «батюшки, батюшки» тигәненә ҡарамай, көтөүсе ғаиләһе менән ҡайтыр юлға сыҡты.

Йылға күтәрелгән, шулай ҙа ярҙарынан ашмағайны әле. Йәйге һәм көҙгө барыуҙарында кисеүҙәге һыу аттың тубығынан ғына була торғайны. Хәҙер, моғайын да, күп тигәндә ҡорһағына етер. Тәрәнерәк булһа ла,ҡурҡыныс түгел. Аттар һыуҙан ҡурҡмай. Шулай ҙа, бәләһенән баш аяҡ тип, көтөүсе малайын үҙе менән атҡа менгәштерә, Сәхибә аяҡтарын күтәреп арбала бара. Йылға уртаһында Һабрайҙың арбаһы һыуға бата. Сәхибә лә биленән һыуҙа. Күршеһенең арбаһы һыу аша сығыу өсөн ауыр, артҡы яғы кендегенән ысҡына һәм аға ла китә. Йылға арба менән Сәхибәне аҫҡа, кисеүҙән байтаҡҡа аҫтағы сөңгөлгә, ағыҙа. Сәхибә йөҙә белмәй, шунлыҡтан тәрән һыуҙан ҡурҡа. Әммә ирен ниңәлер ярҙамға саҡырмай, ҡаршы яҡ ярға сығып еткән ире менән улына текәлеп, өндәшмәй генә ағыуын беләә. Аға торғас, арба менән ҡушарлап һыу төбөнә китә. Көтөүсе яр буйлап йүгерә: «Сәхибә, Сәхибә, һин ҡайҙа?» – тип һөрәнләй. Ярҙа ла, һыу өҫтөндә лә уны тапмай. Аты менән улы эргәһенә килә лә: «Ой, Сәхибжан, ҡатыным минең, батыуыңды белһәм, Тирләнгә алмаҫ инем...» – тип һыҡтап-һыҡтап илай. Һуңынан да «Ой, Сахибжан!» – тип байтаҡ һыҡтап йөрөнө...

Ҡырҡ беренсе йылда мин ФЗО-ға киттем һәм көтөүсенең артабанғы тормошо хаҡында бер нәмә лә белмәнем.

Үлеме ҡырҡ дүртенсе йылда булғандыр, тип уйлайым. Был һуғыш осороноң иң ас йылы ине. Ил бөлдө, ҡатын-ҡыҙ, үҫмерҙәр, ҡарт-ҡоро ғына эшкәрткән ерҙәрҙең уңдырышлығы ҡалманы, ярлыланды, егер аттарҙы армияға алып китеп бөттөләр, тракторҙар ватылды. Бөтәһе лә фронт өсөн, бөтәһе лә еңеү өсөн!

Фронтта беҙҙе һөжүмгә барыр алдынан ғына туйғансы ашаталар ине, тере ҡалһаң – һуғыш араһындағы ҡыҫҡа ял ваҡыттарында. Беҙ «икенсе фронт» тип атаған Американан килгән сусҡа тушенкалары һалдат ашҡаҙанын һис туйҙырманы. Ә ауылда колхозсылар, дөрөҫөрәге, һуғыштағы шул колхозсының ҡатындары, балалары, әгәр һарыҡтарын, иң ҡурҡынысы – һыйырҙарын көҙҙән үк һуйып ашаған булһа, аслыҡ уларҙы ҡыш башында уҡ «ҡыуып» етте. Кем көҙҙән әҙме-күпме запас әҙерләгән, ҡара ҡышҡа ниммәһендер йыйып-йәшереп ҡуйған йә кемдең бүре аяғы, йырткыс булдыҡлылығы бар – шулар ғына аслыҡтан шешенмәне ул йылдарҙа.

Мәйеттәрҙе ерләргә лә кеше табыуы ҡыйын ине бит. Хәлһеҙ кешеләрҙең туң ерҙе соҡоу түгел, хатта лом күтәрергә лә көстәре етмәй торғайны. Көн йылына килә, үлгәндәрҙе старателдәр ҡалдырған шурфҡа ташланылар, ҡаты һыуыҡтарҙа – ферма артындағы тиреҫлеккә күмделәр. Янған тиреҫ өйөмө һуңынан бейек, ҡуйы сүп үләне, үтеп сыҡҡыһыҙ алабута, кесерткән менән ҡапланды ла тыл

геройҙарының туғандар ҡәберлегенә әйләнде. Бәләкәй кәүҙәле көтөүсенең дә һөйәктәре шунда ятыуы ихтимал. Уға зыяратта ҡәберҙе кем ҡаҙһын инде... Әлбиттә, уның улына, хәҙер инде олоғайып барған Акэ малайға, был хаҡта әйтә алмам... Әйҙә, атайым зыяратта ерләнгән, тип уйлаһын.

Беҙ зыяратҡа индек, һәм мин Акэ малайҙы ауыл яғы өлөшөнә йүнәлттем. Һуғыш йылдарында аслыҡтан, сирҙән үлгәндәргә рәшәткә йәки һәйкәл ҡуйманылар. Иң яҡшы тигәндә, ҡәбер өҫтөнә химик ҡәләм менән мәрхүмдең исем-фамилияһы яҙылған таҡта киҫәге ҡаҡтылар. Йылдар үтә килә, был таҡталар серене лә, ауып, тупраҡҡа әйләнде. Үлән ҡаплаған ҡәбер ҡалҡыулыҡтары тегендәбында әле лә шәйләнә, ҡайһылары эскә өңөлгән, тәрән соҡор хасил булған.

Бейек үлән араһында тапанып тороп, көтөүсенең ҡәберен тапмай, беҙ зыяраттан сыҡтыҡ. Акэ малай тәмәке тоҡандырҙы.

– Бынан ҡайһы яҡтан автобус туҡталышына яҡынараҡ?

Мин юл күрһәттем дә:

– Төнгә ҡарай юлға сыҡмағыҙ, миндә йоҡлап, иртәгә китерһегеҙ, – тинем.

– Рәхмәт. Юҡ, китәм, – тине ул төшөнкө генә тауыш менән. Хушлашҡас, өҫтәп ҡуйҙы. – Ҡәберенә һәйкәл ҡуйырмын тигәйнем дә... Үлән баҫҡан икән...

## Урмансы

Бер йәй ауылыма сираттағы ҡайтҡанымда урамда сәйер генә малай яныма килде. Сәйерлеге шунда: миңә, хәҙер инде оло йәштәге кешегә, нурлы күҙҙәре менән шул тиклем аптырап, һоҡланып ҡараны, – әйтерһең дә, сибек кенә кәүҙәмдә ниндәйҙер ғәжәйеп ылыҡтырғыс, әммә үҙе өсөн аңлашылмаған нәмә табырға тырышты.

– Ағай, һеҙ шағирмы? – тип һораны ул ҡапыл ғына.

– Юҡ, шағир түгел. Мин проза яҙам, – тинем мин. «Проза» һүҙен ул, моғайын да, белмәйҙер һәм үҙенең урынһыҙ һорауына яуап ала алмағас, янымдан китер, тип уйланым. Әммә малай минең уның менән һөйләшергә теләмәгәнемде аңламаны һәм эргәмдән китмәне.

– Ағай, ә шағир булыу өсөн нимә эшләргә кәрәк?

– Махсус рәүештә нимәләр эшләргә кәрәкмәй, әгәр талантың бар икән, шиғыр яҙырға ғына кәрәк. Хатта һин талантлы булһаң да, шағир булыу өсөн бөтә ғүмерең етмәйәсәк. Нимә, шиғыр яҙаһыңмы әллә? – тип һораным. Үҙем, был малай хәҙер шиғырҙарын уҡый башлай йәки миңә уҡырға бирә инде, тип тә уйлайым.

Әҙәбиәт институтын бөткәндән һуң беҙҙең курстағы «гений»ҙарҙың береһе лә артабан билдәле яҙыусы булып китә алманы. Үҙемдең Мәскәүҙәге уңышһыҙлыҡтарҙан һуң әҙәбиәтте тормошта үҙ-үҙеңде раҫлауҙың төп шөғөлө тип һайлаған, иң насары – дан һәм аҡса өсөн һайлаған кешеләргә мин оло шик менән ҡарай башлағайным.

– Эйе. Бер дәфтәрҙе тултырҙым инде. Уҡытыусым Зоя Вәлиевна, һинең талантың бар, ти.

– Ә уҡытыусың шағир булыу өсөн күп уҡырға, күпте белергә, уйларға һәм фекерләргә кәрәк икәнен әйттеме һуң? Һин, шағир булмаған хәлдә лә, белемле кеше буласаҡһың һәм үҙеңә йәшәүе лә күңелле, ҡыҙыҡ буласаҡ. Әгәр яҙаһың икән, яҙ...

Күрәһең, бигүк аңлашылып бөтмәгән кәңәштәремде аңларға тырышыптыр,

малай өндәшмәне. Мин, ғәҙәт иткәнсә, төштән һуң йылға буйына сыҡҡайным, был артымдан эйәреп бара күрмәһен тип, кире боролдом да ихатама инеп киттем.

Һуңынан, үҙгәртеп ҡороу йылдарынан һуң, күпмелер осор билдәле яҙыусылар рәтендә йөрөп алғас, кухня маргиналдары һәм офис «гений»ҙары мине ошо билдәлелектән бәреп төшөргәнсегә тиклем әле, мин йәнә ауылға ҡайтып төштөм.

Нисектер матур бер көндә ауылдан өҫтәрәк ятҡан быуала спиннингҡа балыҡ тотоп маташтым. Ярты көн буйы һелтәндем дә һелтәндем. Бер бөртөк балыҡ эләкһәсе! Арып-талып, уңышһыҙлыҡтан тамам кәйеф төшөп ҡайтырға сыҡтым. Оҙаҡ та үтмәй, мине арбалы ат ҡыуып етте лә туҡтаны, һәм кемдер, исемемде әйтеп, ултырырға ҡушты. Мине ауылда белгәндәр исемем менән өндәшә, быныһына күнеккәнмен, ә үҙем күптәрҙе, бигерәк тә йәштәрҙе, йүнләп танымайым.

– Кем булаһың? – тип һораным, арбаға менеп ултырғас.

– Дамир. Хәтерләмәйһеңме?

Балалыҡтары ауыр һуғыш йылдарына тура килеп, туҡһанынсы йылдарҙа йөҙҙәрен ел йырғыслаған, тәмәке, араҡы есе аңҡыған, ябай ғына кейенгән бындай йәш ауыл ирҙәрен мин бөтөнләй белмәйем.

– Дамир? Юҡ, иҫкә төшмәй. Ҡайҙан киләһең?

– Из лесу, вестимо.

Яуап һағайтты: Некрасовты белә. Тимәк, бигүк ябай түгел, ә баҙарға барһа, Белинский, Гоголдең китаптарын һатып ала торған ир.

– Ҡарағайҙарымды ҡарап ҡайттым, – тип өҫтәне ул.

– Ниндәй ҡарағайҙар?

– Лесник мин, – тип көрһөнөп яуапланы ир. – Посадкаға барҙым. Ана тегендә, Китекаяҡта, үҫә минең ҡарағайҙар. Бер алтмыш йылдан унда ҡарап туйғыһыҙ урман буласаҡ! Үҙе бер поэма!

Мин кемдең арбаһында китеп барғаныма төшөнгәйнем инде. Был бынан байтаҡ йылдар әүәл минән «Шағир булыу өсөн нимә эшләргә кәрәк?» тип һораған нурлы күҙле сәйер малай ине. Ул саҡта мин, уҡырға, күп уҡырға, фекерләргә өйрәнергә кәрәк, тигәйнем. Күрәһең, урман техникумын тамамлаған да бөгөн лесник булып эшләп йөрөй.

Тома наҙан йә дүрт йәки ете класс бөткән колхозсылар, үҙҙәренең балалары үҙҙәре һымаҡ белемһеҙ һәм меҫкен ҡалмаһындар өсөн, уларҙы уҡытырға, кеше араһына сығарырға тырышты. Тиҙәктән йырағыраҡ китһә – бигерәк тә яҡшы. Әммә бик һирәктәргә генә институтҡа, университетҡа инергә яҙҙы. Унда керә алмағандар төрлө техникумдарға, ситтән тороп уҡыуға юлланды. Һирәктәре диплом менән ҡала асфальтына йәбешеп ҡала алды, ҡайһылары ауылға әйләнеп ҡайтты ла председатель, ауыл хужалығының берәй белгесе булып эшләне һәм яйлап эскелеккә бирелде. Ә лесниктар тыуған урмандарға ҡайтып, лесхозда ун йыл тирәһе эшләне лә шулай уҡ эскеселәр армияһын тулыландырҙы.

Ҡышын башлыса ҡайын утын яғып йылытылған беҙҙең ағас йорттарҙа урмансы ихтирамлы кеше ине. Ул ағасты законһыҙ ҡырҡыусыларға бармаҡ аша ҡараны, шуның өсөн үҙен яраттылар ҙа. Улай итмәҫ тә ине, үҙенең ауылында ғына түгел, күрше ауылдарҙа ла яҡын кешеләре йәшәй: тотҡан хәлдә лә, балалыҡ дуҫына йәки класташына, ҡоҙаһына йәки туғанына нисек штраф һалһын? Артабан улар менән бергә йәшәргә кәрәк тә баһа. «Урман беҙҙең ғүмергә етә. Ҡырҡмаһаң, барыбер ҡартайып ауа йә дауылда йығыла».

Лесниктарҙы ихтирам иттеләр, саҡырҙылар, ҡойҙолар. Беҙҙең ауылдан ғына

миңә туған тейешле Фәриттең, күршем Хәйрүктең эскесегә әйләнгәне, йәшереп ҡырҡыусыларҙы, урлаусыларҙы тотҡан, штраф һалған Бәҙретдинде урманда үлтереп китеүҙәре хәтерҙә...

– Шиғырҙар яҙаһыңмы? – тип һорайым.

– Яҙам. Ике том булды.

– Маяковскийҙағы кеүек «По деревням сидят папаши, стихи попишут, землю попашут...»

– Ә минеке былай: «По деревням сидят лесники, водочку попьют, попишут стихи». – Урмансы көлдө.

– Баҫалармы һуң?

– Юҡ. Кире ҡайтаралар. «Есенинщина, үҙеңдең ауырыу күңелеңдә ҡаҙыныу» тип яҙалар. Идеяһыҙ шиғырҙар, йәнәһе. Башҡортса сыҡҡан журналдар мине баҫмай, сөнки мин русса яҙам. Талантлы малай тип, атайым мине, яҡшы белем алыр өсөн, Уральскиҙағы рус мәктәбенә бирҙе. Мин рус шағирҙарын күп уҡыным, шуғамылыр үҙемдекеләр башта тик русса ярала, күпме тырышһам да, башҡортса яҙа алмайым.

– Яҙ русса, тик яҙ ғына. Шундай кәңәш һиңә. Есенинға оҡшатырға тырышыуыңда бер ниндәй ҙә насарлыҡ юҡ. Бөтәһе лә кемгәлер оҡшарға тырыша. Тик араҡынан алыҫыраҡ бул. Күпме талантты әрәм итте ул йәшел йылан. Гениаль Есенин да шуның ҡорбаны...

Ир өндәшмәне, байтаҡ килгәс, күңелһеҙ генә әйтеп ҡуйҙы:

– Аңлайым... Тик беҙҙең заманда ауылда йәшәп, эсмәү мөмкин түгел. Тирә-яҡ ҡола ялан бит. Пушкиндағыса: «Влачишься в мрачной пустыне, духовный жаждою томим...» Һөйләшер кеше юҡ. Китап уҡыу, шиғыр яҙыу ауылда тилелек иҫәпләнә. Ҡатын аңламай. Әгәр урман һәм минең ҡарағайҙарым булмаһа... Престижный вузға үтмәгәс, үҙемде бәхетһеҙ тип иҫәпләгәйнем, хәҙер үкенмәйем...

– Балың етмәнеме ни?

– Етте. Эште балдар хәл итмәне. Үҙең беләһең... Райондан унда өсәү барғайнылар. Береһе – район ОРС-ы начальнигының, икенсеһе – колхоз председателенең улы, өсөнсөһө – умартасыныҡы. Һин уны беләһең. Тупойҙар. Диплом алдылар. Ә хәҙер улар ҡайҙа? Береһе Себергә олаҡты, икенсеһе эшләмәй, эскесегә әйләнде, өсөнсөһө Афғанда һәләк булды. Ауыр тупрағы еңел булһын. Үкенмәйем.

*Не жалею, не зову, не плачу,*
*Все пройдет, как с белых яблонь дым.*
*Увядания золотом охваченный,*
*Я не буду больше молодым.*

Уҡыны ла көлөп ҡуйҙы. Килә торғас, ул атын бейек, матур йорттоң ҡапҡаһына борҙо. Мин рәхмәт әйттем дә, арбанан төшөп ҡалып, үҙ юлым менән киттем. Ул йылда уны башҡаса күрмәнем.

Киләһе йылына, ғәҙәттәгесә, май айында ҡайтҡас, ауылдағы бөтә ығы-зығыны, хәл-әхүәлде, ғаиләләрҙәге бәхәс-талаштарҙы белеп торған күрше ҡатынҡайҙан урмансы Дамирҙы ҡатыны ташлап киткәнен, уны айныҡ көйө бик һирәк күргәнен белдем.

Бына бер көн уны урамда осраттым. Шуныһы ғәжәп: байтаҡ йылдар элек сәйер малайҙы күргән йортом ҡаршында, эскесегә әйләнгән Камалдың ҡапҡаһы төбөндә. Дамир төшөргәйне, осрашыуға шат та һымаҡ. Шундуҡ шиғыр уҡый башланы:

*Устал я жить в родном краю*
*В тоске по гречневым просторам,*
*Покину хижину мою,*
*И уйду бродягой и вором.*
*Пойду по белым кудрям дня*
*Искать убогое жилище.*
*И друг любимый на меня*
*Наточит нож за голенище.*
*Весной и солнцем на лугу*
*Обвита желтая дорога,*
*И та, чье имя берегу,*
*Меня прогонит от порога.*
*И вновь вернусь я в отчий дом,*
*Чужою радостью утешусь.*
*Зеленый ветер под окном*
*На рукаве своем повешусь.*
*Седые вербы у плетня*
*Нежнее головы наклонят.*
*И необмытого меня*
*Под лай собачий похоронят.*
*А месяц будет плыть и плыть,*
*Роняя весла по озерам...*
*И Русь все так же будет жить,*
*Плясать и плакать у забора.*

Унның эскелектән йонсоған йөҙө буйлап күҙ йәштәре аҡты.

– Есенин, – тинем.

– Шулаймы? Ә мин үҙемдеке тип уйлаған буламсы. Минекенә ныҡ оҡшаған.

Ҡапыл миңә ҡыҙыҡһыныуы бөтөп, Дамир янымдан китеп барҙы.

Ул йылды май айындағы бер күкрәп үткән ямғырҙан һуң йәй буйы ергә бер тамсы төшмәне. Ҡаҙаҡ яғынан иҫкән ҡоро ел Көньяҡ Урал күген тамам киптерҙе. Йәшелләнеп тә өлгөрмәгән ҡалҡыулыҡ биттәре көйҙө, туғайҙарҙа үлән ҡалҡа алманы, игендәр тамырында уҡ янды. Июлдә ҡайын япраҡтары һарғайҙы ла ҡойола башланы. Йылға һайыҡты һәм ниндәйҙер ағыулы үлән менән ҡапланды, күк йөҙө көнө буйы яланғас һәм буш.

Ҡайғы яңғыҙы ғына йөрөмәй: үткән йылғы кипкән үләнгә ут ҡапты, ҡоро ел уны ҡыуып таратты һәм ялҡын ағастарға үрмәләне. Ауылдың төньяҡ осондағы тау битендәге ағастар янды, унан ут заповедниктағы ҡарағайҙарға һикерҙе. Зәңгәрһыу төтөн, көйөк еҫе тауҙарға, уйһыулыҡтарға йәйелеп таралды. Китекаяҡтағы посадка төтөнгә сорналды. Дамирҙың ҡарағайҙары янды. Ололар: «Ахрызаман етте, тереклектең һуңғы көндәре килде», – тине, аптырап, борсолоп. Кешеләр үҙ ғүмерҙәрендә тәбиғәттәге ахрызаманды байтаҡ күрһә лә – ҡоролоҡ, ашлыҡ уңмау, һыу баҫыу, ҡойондар – бигүк бөтөрөнмәне һәм «Һуғыш ҡына була күрмәһен» тип ҡабатланы, сөнки барыһына ла түҙеп өйрәнгән халыҡҡа һуғыш ҡына ысын ахрызаман ине.

Ауыл Советы бинаһы янында Дамирҙы осраттым. Ул айыҡ, әммә йөҙө борсоулы, туҡмалған кеүек йәмшәйгән, ҡоромға буялған, ҡаштары янған. «Нимә булды?» тип һорауыма, үҙенең посадкаға барыуын һәм ҡайын ботаҡтары менән утты һүндерергә маташыуын әйтте.

– Ауылда пожарниктар юҡмы ни?

– Юҡ. Ҡасандыр бар ине, хәҙер юҡ. Бынау демократтар... Пожар сыҡҡан һайын районға йә Уральскиға шылтыратабыҙ. Улар килгәнсе өй урынында торонбаштар менән көл генә ҡала. Килгән хәлдә лә, тау битләүенә менә алмай машина. Мин ҡарағайҙарҙы ултыртҡанда, бураҙна һөрөү өсөн хатта тракторҙар саҡ-саҡ менде.

– Халыҡты ойошторғанда?

– Әкиәт! – тине Дамир, үпкәләгәндәй. – Халыҡ өс саҡрымдағы быуанан биҙрә менән һыу ташый буламы? Бер кем дә сыҡмаясаҡ. – Ул өндәшмәй торҙо ла өҫтәне: – Янды минең ҡарағайҙар!

Ахрызаман дауам итте. Көньяҡтан, ҡоро тупраҡты уйнатып, эҫе ел иҫте. Тыҡрыҡ мөйөшөндәге йорт янып китте, ҡоро ел утты ҡыуҙы, уныһы һалам өйөмө ише тоҡанды, ут арғы күршеһенә күсте һәм артабан рәттән газ баллондары шартлай башланы. Ут телдәре Ғәлибә ҡарсыҡтың һарайын ялмағас, ҡарсыҡ телдән яҙҙы. Кем өлгөрә, ут эсенән телевизорҙарын, кейем-һалым, башҡа әйберҙәрен, көслөрәк ирҙәр һыуыткыстарын алып сыҡты. Күрше урамдарҙан йыйылған халыҡ утҡа текләп тора: ҡайһыларына был әллә мәҙәк, әллә шок, әммә ярҙамға ташланыусы юҡ. Өйҙәре күҙҙәре алдында янған һәм ғүмер буйы тир түгеп йыйған мөлкәттәре юҡҡа сыҡҡан бәхетһеҙ кешеләр менән ут телдәре әлегә барып етмәгән, ҡыҙыҡ итеп тамаша ҡылып ҡарап торғандар араһында үҙҙәре лә аңлап-төшөнөп етмәгән ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡ бар ине. Был ауылдаштарҙың хәленә килеү, аңлау, теләктәшлек белдереү йә ҡайғыһына һөйөнөү түгел, бәлки, ситләшеү, йыраҡлашыуҙыр. Шулай ҙа араларында бер игелекле кеше табылды: бульдозерға ултырҙы ла утҡа ҡаршы китте – Ғәлибә ҡарсыҡтың күршеһендә ут геүләгән урамына кереп, һарайҙы, башҡа ҡоролмаларҙы тапап үтте, осло төрәне менән ерҙе аҡтарып, межа һалды һәм уттың юлын быуҙы. Әммә ауыл уртаһындағы туғыҙ йортто ахрызаман үҙенең утлы теле менән ялап өлгөргәйне инде.

Уттың ҡайҙан сығыуын күптәр һиҙә ине: тыҡрыҡ мөйөшөндәге йорттоң мунсаһында көмөшкә ҡыуғандары барыһына ла мәғлүм, әммә, күп балалы ғаиләне йәлләп, береһе лә һөйләнеп, нимәлер талап итеп йөрөмәне. Күптәр «Быяла ватығынан сүп-сар өйөмөнә ут тоҡанған» тигән хәбәргә ихлас ышанды... Ышанмаһа ла ышанды.

Иртәгәһенә идара йорто алдында мин урмансыны йәнә осраттым . Ул иҫерек ине, иҫәнләшеү урынына:

– Һәләк булды минең ҡарағайҙар. Ниндәй урман үҫер ине! – тине хәсрәт менән.

Үртәлгән йөҙөн күреп, асыуым килде лә, үҙем дә абайламаҫтан, уға тупаҫ йыуатыу һүҙе әйттем. Йәнәһе: ниңә ул ҡәҙәре бөтөрөнәһең, һинекеме ни ул, тирә-яҡта күпме урман, – исмаһам, шуларын һаҡла.

– Уларҙы ҡырҡалар. Ҡара, биләндә күпме ағасты ҡырҡтылар. Тауҙы яланғасландыралар, оҙаҡламай унда таштар ғына ятып ҡаласаҡ. Посадка ултыртырға аҡса юҡ. Был – үрт һалыу. Минең ҡарағайҙарым кемгәлер ҡамасауланы. Кемдер ойошторҙо быны...

– Посадканы яндырыу кемгә кәрәк инде? Берәйһе үтеп барған да тәмәке төпсөгө ташлағандыр.

– Һин тағы, ут үләнгә быяла ярсығынан йәки ысыҡ тамсыһынан тоҡанған, тиң. Бред! Һин бит оҙаҡ йәшәгәнһең, минән яҡшыраҡ беләһең. Урманға, һыуға, һауаға тик кеше генә зыян килтерә. Ниндәйҙер ахмаҡ һүнмәгән тәмәкеһен ташлаған. Юрамал ташламаған ул, үрт һалырға теләмәгән, әммә ул барыбер ҙә

ҡәбәхәт, хыянатсы. Ҡыҙыл таш аръяғында һуғышҡа тиклем уҡыусылар ултыртҡан посадка бар. «Урманда тәмәке тартыу тыйыла!» тигән яҙыулы таҡта ҡаҙаҡланым. Көлдөләр. Китапты, шиғриәтте, талантлы кешеләрҙе күрә алмаған күпме бәндә бар донъяла! Һәм тәбиғәтте яратмағандар.

– Битарафтар күп. Йәш талантлыларҙан, белемлеләрҙән көнләшеүселәр күп.

– Юҡ, күрә алмаусылар. Һәм уйламағандар, уйлай белмәгәндәр. Донъя матурлығын күрә алмаусылар. Тормош мәғәнәһен. Иҫереклегем ялҡытманымы әле? Ялҡытмаһа, бер генә фекер әйтәм дә китәм. Бына күктә йондоҙ, звезда – беҙ уны Ҡояш тип йөрөтәбеҙ. Яна, йылыта, яҡтылыҡ бирә. Ошо Ҡояш тирәләй Ҡояш менән сағыштырғанда күпкә бәләкәй, дүрттән өс өлөшө тоҙло һыу менән тулған таш шар әйләнә. Тоҙло һыу булмаған ерҙә, йәғни таштарҙа ағастар үҫә. Ағастар! Имән, ҡарағай, шыршы, пихта, ҡайын, йүкә, башҡалары. Ни өсөн ҡарағай йәки ҡайын ғына түгел. Ә-ә-ә, кешеләргә ағас, төҙөлөш материалы булараҡ ҡына кәрәкмәй, матурлығы өсөн дә кәрәк. Ҡара, ағастар нindәй матур. Торғаны бер шиғриәт үҙе!

– Аллаһы Тәғәлә белгән, – тип төҙәттем мин уны.

– Минең өсөн тәбиғәт шулай уҡ Аллаһы Тәғәлә. Ағастар – аҡыллы кеше өсөн бүләк. Улар тере йән, ә аҡылдары бармы, юҡмы – белмәйем. Әммә улар изге. Улар изгелек эшләй: кислород бирә, ерҙе йәмләй. Ә беҙ уларҙы ҡырҡабыҙ, үлтерәбеҙ. Тағы бер фекер. Кеше үлһә, яман еҫләнә, тиҙерәк ергә күмеп мәйеттән ҡотолорға тырышалар, ә ағас үлә – тәмле еҫ килә, шыршы, ҡарағай, пихта йә саған ниndәй хуш еҫле! Юныҫҡылар, таҡталар – һулап туймаҫлыҡ бит! Ҡайҙалыр уҡығайным, изге кешеләр үлгәс шулай уҡ еҫләнмәй икән. Ярай. Шиғыр тыңларға теләйһеңме? Есениндыҡы түгел, үҙемдеке.

Яуап биреүемде лә көтмәй, Дамир уҡый башланы:

*Когда умру, не врите,*
*Что я хороший был шагир.*
*Лучше тихо похороните*
*У подножия горы Мышагыр.*
*И постояв в раздумье,*
*И печалясь слегка,*
*Идите слушать в лесном шуме*
*Печаль поэта-лесника.*

Туҡтағас, ул һораулы ҡарашын миңә төбәне.

– Насар, – тинем мин.

– Насар икәнен үҙем дә беләм. Мин Есенин түгел бит.

– Шиғырҙарыңда үлем тураһында күп булыуы насар.

– Тормош шулай булғас, нишләйһең?..

– Эсмәҫкә кәрәк. Ул бит – үлемгә алып бара торған юл. Эсһәң, бер нәмәгә лә өлгәшеп булмай. Айыҡ йәшә... – тинем. Был турала уға әйткәнем бар ине инде.

Урмансы миңә ҡасандыр ҡараған нурлы күҙҙәре менән текәлде, әйтерһең дә, миндәге күңел серен аңларға тырышты, әммә аңлай алманы – ҡулын һелтәне лә ҡабаланып китеп барҙы.

Ул йәйҙә мин уны бүтән осратманым.

Киләһе яҙ ауылға ҡайтҡанымда уның ҡыш ысҡынғанын һәм, эскелеген күтәрә алмай, аҫылынғанын ишеттем.

Шағир-урмансының ҡарағайҙары, күпмелер ваҡыт ауырып ултырғандан һуң, ямғырлы йылда йәнә үҫә башланы...

# Һабансы

Ғүмеремдең ун туғыҙынсы яҙын тыуған яҡтарҙағы тау, урман, яландарҙан алыҫта, Померания тип аталған сит-ят немец ерендә ҡаршыланым. Одерҙың теге яғына сыҡҡас, ҡышҡы һуғыштарҙа һәләк булған немец һәм беҙҙең һалдаттарҙың мәйеттәре ҡар ирей башлау менән баҫыу-яландарҙа тәртипһеҙ рәүештә һерәйешеп ятҡаны күренһә, Померания баҫыуҙары, һабансының сәсеүгә төшөүен түҙемһеҙлек менән көткән һымаҡ, яҙғы ҡояш нурҙарында уйнай ине. Һуғыштар бында әле лә бара, шулай ҙа дошман көнбайышҡа сигенә, һирәкләп булһа ла ҡаршылашып-тешләшеп ала йә, төнгө ҡараңғылыҡтан файҙаланып, марштағы колоннаға ата, йә ауыл, хутор сарҙағынан очередь бирә. Йыш ҡына ул атыусылар һалдат та түгел – үҫмерҙәр. Хатта ҡыҙҙар ҙа осрай. Ата башлаһалар, беҙ эйәрҙән һикереп төшәбеҙ ҙә, аттарҙы коноводтарға тоттороп, ергә ятабыҙ. Шулай бер ваҡыт ергә һуйҙайыуым булды, пулемет очереды минең танау төбөндә генә йомшаҡ тупраҡты телгеләне (әгәр пулеметсы саҡ ҡына өҫкәрәк тоҫҡаһа, мин был турала яҙа алмаҫ инем). Йөҙөмә һибелгән дымлы, йәбешкәк Померания тупрағы беҙҙең бәләкәй баҡсалағы һәм ауыл осонан уҡ башланған баҫыу еҫе һымаҡ аңҡый ине.

Хуторға етергә саҡрым тирәһе ҡалғас, беҙ аттарҙан төштөк тә, уларҙы коноводтарға тапшырып, йәйәүләп киттек. Бигүк бай булмаған болдорло йорт, лапаҫ, бейек сарҙаҡлы һарай, һиртмәле ҡойо – барыһы ла уртаса муллыҡта һәм таҙалыҡта, тәртиптә йәшәгән немец крәҫтиәненең билгеһе.

Беҙҙең килгәнде күрептер, болдорға йүгереп тигәндәй бер ҡатын килеп сыҡты ла ҡабаланып кире инеп китте. Беҙҙән, киң яңаҡлы, сит-ят телле халыҡтан, немец ҡатындары ҡырағайҙарса ҡурҡа ине. Бар һуғыштарҙағы һымаҡ, ирҙәренең гонаһтарын улар түләй...

Карабиндарҙы әҙер тотоп, беҙ һаҡ ҡына йортҡа яҡынланыҡ. Тауыҡ ҡытҡылдауынан, ҡыш сыҡҡан турғайҙарҙың күңелле сутырлағанынан башҡа өн-тауыш ишетелмәй. Тегендә, Одерҙан көнсығышта, халыҡ булмағас, беҙ буш өйҙәргә бара ла керә инек – ишектәр асыҡ, күрәһең, ҡырағай һалдаттар ватмаһын, емермәһен тип, хужалар бикләмәй киткән. Хәйер, ул буш өйҙәрҙә барыбер ҙә бер нәмә лә булмай торғайны. Ә хәҙер фронт буйынса командующий бойороҡ сығарҙы: урындағы халыҡты ҡыйырһытмаҫҡа, өйҙәрен таламаҫҡа, ә ҡатын-ҡыҙҙарҙы көсләгән өсөн – трибунал...

– Ғәйнуллин, сарҙаҡты тикшер! – тип бойорҙо миңә взвод командиры ярҙамсыһы.

Карабиндың штыгын асып, һарай стенаһына терәүле баҫҡыс буйлап сарҙаҡҡа күтәрелдем. Сарҙаҡ тулы бесән. Ул беҙҙең лапаҫ башындағы ҡоро бесән һымаҡ аңҡый. Бер нисә тапҡыр штык менән бесәнде төрткөләнем дә, шикләнерҙәй бер нәмә лә тапмай, кире төштөм.

Коноводтар аттарҙы килтергәнсе взвод ял итте. Тәмәке көйрәттеләр, юҡ-бар һөйләштеләр, арала иң аҡыллы «копытник» тип иҫәпләнгән Винокурҙы тыңланылар. Мин был оҙон һары егетте яратмайым, дөрөҫөрәге, унан шөрләй инем.

Бөтә взвод ун биш атлынан һәм ун биш «монголка»нан ғына тороп, бер отделение ҡәҙәре генә булһа ла, үҙенең погондарындағы өс лычкаһы арҡаһында, ул отделение командиры иҫәпләнә. Сержанттың аҡайып сығып торған һоро күҙҙәрендә үҙемә ҡарата күпме битарафлыҡ күрәм! Ошо битарафлыҡ йыш ҡына әҙәмгә һанамау, күрә алмаусанлыҡ, мыҫҡыллау менән алышына. Ә былдай

мөнәсәбәттең сәбәбенә һис төшөнә алмайым. Бәлки, рус булмағаным өсөндөр? Улай тиһәң, сержантыбыҙ Мостафин менән дуҫ. Мостафин взводтың беренсе ошаҡсыһы, ялағай һәм ҡуштан. Взвод командиры мине шулай уҡ һөйһөнөп етмәй, етмәһә, артығы менән талапсан. Бүтәндәр эсә, әсирҙәрҙән сәғәттәрен һалдырып ала, ҡайсаҡ шаярып-ҡотороп атып та йыға – быларҙың барыһын да күрмәмешкә һалыша. Минең елкәгә аҫып йөрөмәле сумкала спирт заводында тултырып алған спиртлы фляга ята ине, шуны тентеп алып (Мостафин ошаҡлаған, әлбиттә), спиртын түкте лә флягамды ағас араһына быраҡтырҙы. Спирт тултырылған ундай флягалар барыһында ла бар, ә сержантҡа мотлаҡ минекен түгергә кәрәк. Винокур минең ҡаҡса кәүҙәне... үҙе тураһында минең нимә уйлағанды белгәне өсөн күрә алмай. Ә уның тураһында мин бына нимә уйлайым. Һуғышҡа тиклем аттарҙы киноларҙа ғына күргән был грамоталы ҡала малайы берәй подразделениеның штабында ултырырға, ауыр артиллерияла йәки пехота майорының ординарецы булып йөрөр урынға кавалерияға килеп эләгә. Мине өнәп бөтмәүен белдереү формалары күп. Мәҫәлән, мин уға былай тим: «Иптәш сержант, минең аттың дағаһының щипы һынды». Ул миңә: «Икенсене бороп ҡуй», – тип яуаплай. «Минеке бүтән юҡ». Ул атылып сығырға әҙер күҙҙәрен упайта ла: «Яҡшы кавалерист дағаларҙы, щиптарҙы сумкаһында йөрөтә һәм атын үҙе дағалай».

Мин взвод командиры ярҙамсыһы Морозовҡа, сарҙаҡтағы бесәндә шикләнерҙәй бер нәмә лә тапманым, тип доклад бирҙем.

– Һин насар эҙләгәнһең. Унда бер бисә йәшенде. Бар, ентекләберәк ҡара, – тине мәкерле һәм төртмә тел Морозов.

– Уға нимәгә бисә? Ул бит әле ҡатындар тәнен бер ҙә татып ҡарамаған, улар менән мөғәмәлә итә белмәй, – тине Винокур.

Улар менән мөғәмәлә итә белгәндәр үҙҙәренең аттары һымаҡ кешнәште.

Винокурҙың подхалимдары мине шулай мыҫҡыллағанда, һәр һүҙемдән ниндәйҙер мәрәкә табып көлөргә тырышҡанда, мин һәр ваҡыт өлкән лейтенант Ковригинға ҡарайым. Һуғышҡа тиклем ул Уралдағы ниндәйҙер ауылда уҡытыусы булып эшләгән. Минең үҫмер аңымса, был профессия кешеһе – ғәҙәттән тыш кеше. Ғәҙел, изгелекле, мәрхәмәтле. Шундай сифаттар булмаһа, баланы уҡытыуы мөмкин түгел. Уйлап ҡараһаң, мин бит үҙем – һаман етенсе класс малайы! Сөнки уны һуғыш алдынан ғына тамамланым. Ә минең күреүемсә, һуғыш Ковригиндағы уҡытыусылыҡтың тап ошо сифаттарын бөтөргән. Егеттәр мине мыҫҡыл итә, ә өлкән лейтенанттың, мине яҡлар урынға, йөҙөндә – ауыр һуғыштарҙан арыған ҡарт һалдат ҡәнәғәтһеҙлеге.

Беҙ штакетник ҡағылған кәртә буйлап ҡапҡа төбөндә ултырабыҙ. Был эскәмйәлә, күрәһең, элек хужалар ял иткән. Әммә ул тыш яҡлап түгел, эс яҡлап, ихата эсендә. Эскәмйәлә – өлкән лейтенант, сержант Винокур, йәнә Маштаков ише әшнәләре. Ихатаның арғы яғы, һарай һәм лапаҫ яғы асыҡ, кәртә-рәшәткә юҡ, һәм ихатанан беҙҙең баҡсаларҙан байтаҡҡа ҙур һәм киң баҫыу башлана. Баҫыу буйлап йыраҡҡа-йыраҡҡа һөрөлгән ҡара полоса һуҙыла, теге яҡлап ихата яғына табан яй ғына эш аты килә, ат артынан кеше күренә – ошо баҫыу хужаһы һабан тотоп килә. Был ваҡытта беҙҙә ер һөрмәйҙәр әле. Әммә Германияла мартта уҡ йылы, шуға ла сәсеүгә иртә төшәләр.

Һуғыш алдынан үҫмер генә көйө Талышман йылғаһы аръяғында колхоз баҫыуын һөрөүем иҫкә төштө. Һыуыҡ, дымлы ерҙә ялан аяҡ атланым, сыбыртҡы менән атҡа һуҡтым. Һуҡтым да йәлләнем. Кисенә өләсәйгә атты йәлләүем,

норманы тултырмауым, бригадир Мулләхмәттең мине әрләүен әйттем дә, ҙур, көслө, аҡыллы аттар ауыр эшкә, сыбыртҡы менән ярыуға нисек түҙә, ниңә улар урманға, тауға ҡасмай, тип һораным. Юҡты һөйләйһең, Аллаһы Тәғәлә аттарға кешегә ярҙам итергә ҡушҡан. Улар кешене йәлләй, шуға ла түҙеп кешегә эшләй, тип яуап бирҙе өләсәйем.

Хәҙер мин, шул ваҡиғаларҙан дүрт кенә йыл үткәс, мыйыҡ та сыҡмаған үҫмер малай, Талышман йылғаһынан йыраҡта – ҡоралы «копытник», маршта үҙемдең ун туғыҙынсы яҙымды ҡаршы алам һәм немец атмаған арала кешенең ер һөргәнен күрәм. Һабансы һабан тотоп килә икән, тимәк, һуғыш, ысынлап та, тамамланыуға табан бара.

Мин башҡаларҙың нимә уйлағанын, ниндәй тойғолар кисереп ултырғанын белмәйем. Улар ҙа йәш, ирҙәр тормошона өлгөргәндәр (Морозов һәм ҡарт коноводтарҙан башҡалары), яҙ уларҙы ла зарыҡтыра, хыял донъяһына әйҙәйҙер. Йылмайышыуҙарына ҡарағанда (атыш бармаһа, һуғышта һәр ваҡыт күңелле), һәр ҡайһыһы ҙур түҙемһеҙлек менән һуғыш бөтөүен көтә – оҙаҡламай ҡайтыу яғына юлға сығасаҡтар, туған-тыумасалары, ҡатындары менән осрашасаҡтар. Ә минең уйҙа быларҙың береһе лә юҡ. Ауылда атай йорто ла юҡ – миңә, етемгә, күлдәк-ыштан алыр өсөн һуғыш алдынан уны һатҡайныҡ – атай үҙе лә, әсәй ҙә юҡ. Һуғыш һәм аслыҡ төрлө тарафҡа һибеп тараҡҡан туғандарыма минең кәрәгем шулай уҡ самалы. Һуғыштар менән инеп төҙөк һәм бай немец ҡалаларын күргәндән һуң, колхозға әйләнеп ҡайтып, йәнә бригадир Мулләхмәткә йәки һаман да председатель булып йөрөгән ҡарт иҫәр Шәриповҡа буйһоноу... Ә хаттарҙы тик шиғыр формаһында ғына яҙған ҡыҙ өсөн – үҙе миңә бер ҙә яуап бирмәне – һаман ҡара һуҡбай, аскернә, әлбиттә.

Ат менән һабансы, ниһайәт, был яҡҡа уҡ етте, һабанға өйрәтелгән ат боролдо ла баҫыуҙың теге осона китер өсөн бураҙнаға баҫып туҡтаны. Ошо мәл ҡатын болдорға сыҡты, һабансыға ҡараны ла кире өйгә инеп китте. Һәм һабансы, оҙон кәүҙәле немец, һоро мундирлы, козырегы оҙонса фуражкалы милләттәштәренән бер нәмәһе менән дә айырылмай ине.

– Ҡарағыҙ, һул ҡулы юҡ! – тине Винокур үҙенең асышына ифрат ҡыуанған тауыш менән. – Һуғышта булған, ҡәбәхәт фашист.

Немецты мин дә ҡараным: курткаһының ҡул еңе ысынлап та буш һәм кеҫәһенә тығып ҡуйылған. «Йә, шунан?» – тип уйланым мин. Минең уйҙы ҡеүәтләгәндәй, өлкән сержант Морозов:

– Булһа ни? Һуғышмаған кешене һин хәҙер табып ҡара, – тине.

– Беҙҙекеләрҙе байтаҡ ҡырғандыр был гад! – хәҙер инде тамам ярһыны Винокур.

– Партизандарҙы аҫыуы ла ихтимал, өйҙәрҙе лә яндырғандыр. – Былай ғына, асыуһыҙ, хатта уйсан итеп һүҙ ҡыҫтырҙы Маштаков.

Винокур эскәмйәнән ҡалҡынды, штакетникка һөйәлгән карабинын алды, затворын этте лә немецҡа ҡарай китте. Беҙ, ҡыҙыҡһынып, уның киң арҡаһына, һары елкәһенә текәлеп ҡарап ҡалдыҡ – артабан ни булыр?

Һабансыға барып етеп, ә ул яңы бураҙна яра башлағайны, Винокур аҡырып ебәрҙе:

– Х-а-а-льт!

Немец атын туҡтатты ла боролдо. Йөҙө тыныс ине, хатта еңелсә генә йылмайғандай ҙа итте, әйтерһең, көтмәгәндә шаярттылар. Винокур ҡул ишараһы менән ситкәрәк китергә ҡушты. Немец бер нисә аҙым ситкә шылды ла йөҙө

менән шаяртыусыға боролоп бaçты. Винокур етеҙ һәм ҡабалан хәрәкәт менән карабинды күтәрҙе лә немецҡа тоçҡап атып ебәрҙе. Оҙон кәүҙәле немец бөгөлмәй генә арҡаһына яуҙы. Винокур әйләнеп килде, карабинын штакетникка һөйәне, эскәмйәгә ултырҙы ла ҡарһаланып тәмәке тоҡандырҙы. Ауыр тынлыҡ урынлашты. Мин һәр ваҡыттағыса өлкән лейтенантҡа ҡараным һәм ҡаты һуғыштарҙан һуң арыған ҡарт һалдат йөҙөн күрҙем.

– Ниңә быны эшләнең инде? – тине, ниһайәт, өлкән сержант Морозов.

– Мин бойороҡ үтәнем, – тип яуапланы Винокур.

– Ниндәй бойороҡ?

– Һеҙ нимә, гәзит уҡымайһығыҙмы? «Немецты үлтер, күпме күрәһең, шул ҡәҙәр үлтер».

– Ҡасанғы бойороҡ… Һуғыш бөтә бит инде… Хәҙер үлтереүҙең ниндәй хәжәте бар?

Мин шунда атыу тауышына немец ҡатынының болдорға сыҡҡанын һәм таш һындай ҡатып ҡалғанын шәйләнем. Үлтерелгән немецты, уның ҡатынын йәлләү йөрәкте ҡыçты. Ҡатын һөрөлөп бөтмәгән баçыу менән яңғыҙы ҡалды. Винокурҙың ҡылығын аңларлыҡ, аңлатырлыҡ түгел ине, киләһе атыш-алышта мин уға үлем теләнем хатта.

– Ул ғәйепле түгел. Уны бит фашистар һуғышырға мәжбүр иткән… Ул һалдат… – тинем мин, асыуым ҡабарып. – Ул ғәйепле түгел!

– Улар бөтәһе лә ғәйепле, һәр кеме ғәйепле, – тине Винокур йәмһеҙ, ҡырағайҙарса йылмайыу менән.

Ҡатын болдорҙан төштө, бәүелә-сайҡала бураҙна өçтөндә ятҡан иренә йүнәлде. Ҡарап тороуға ябай ғына ауыл ҡатыны ине ул, ундайҙар Рәсәйҙә күп, беҙҙең ауылда ла күп. Крәçтиән. Ул үҙенең һабансыһын төшкө ашҡа көткән. Үле иренең йөҙөнә өндәшмәй генә оҙаҡ итеп ҡарап торҙо һәм ҡапыл мин аңлап-төшөнөп етмәгән ниндәйҙер бер тәүәккәллек менән һарай ҡапҡаһына йүнәлде лә шунда инеп тә китте.

Шул саҡ коноводтар аттарҙы килтерҙе, «По коням!» тигән бойороҡ яңғыраны, һәм беҙ ары ҡуҙғалдыҡ. Әллә яңы алыштарға, әллә һуғыш аҙағына.

Хуторҙан йыраҡ та китеп өлгөрмәнек, Маштаков сафтан һурылып сыҡты ла артҡа юртты, атын штакетник янында ҡалдырып, ихатаға инде һәм баçҡыс буйлап сарҙаҡҡа күтәрелде. Шундуҡ тигәндәй ҡабаланып кире төштө. Атына менгән саҡта һарай ҡыйыҡында шыйыҡ төтөн күренде. Төтөн яйлап ҡуйырҙы, ҡарайҙы, хутор өçтөнә таралды. Унан сарҙаҡ башында ут телдәре ялпылданы. «Копытниктар» күңелсәк кенә артҡа ҡараны. Хутор өçтөндәге был ҡара төтөн һуғыштың бары тик хисләндергес бер картинаһы – яҙғы баçыуҙарҙа төрлө ҡиәфәттә һибелеп ятҡан мәйеттәр һәм еңелгән илдең ҡурҡҡан, йонсоған ҡатын-ҡыҙҙары кеүек күҙ өйрәнгән бер картинаһы ғына ине.

Ә немец ҡатыны янған һарайҙан сыҡманы…

**Руссанан Әмир ӘМИНЕВ тәржемәһе.**



**Фәнил**
**КҮЗБӘКОВ**

# ТОРНАЛАР СЫҢЫ

## ДАСТАН

### *Пролог*

*Һары тунын күптән һалған урман —*
*Йылыталмай миләш усағы ла.*
*Әсе елдән биҙрәп бар тирә-йүн*
*Ҡара көҙҙөң ингән ҡосағына.*

*Ишетелеп ҡала:*
*бүре олой,*
*Ай йөҙөндә ниндәйҙер шом табып.*
*Ҡош Юлынан торна сыңрауҙары*
*Ҡойолғандай яҡты һағыш һалып.*

*«Бирәһен биргәнмен...» — тиептәр Ер*
*Аҡ биләүгә төрөнөргә теләй.*
*Ҡаралыҡты ағартыусы Илаһ*
*Ҡотоп яҡтарында аҡ он иләй...*

* * *

*Ғаләм бөтөн булһын!*
*Ер иңендә*
*Әйлән-бәйлән килә Көн менән Төн.*
*Ҡистән тыңдырҙы ла*
*Таң елендә*

*Фәнил Күзбәков (1952) Мәләүез районы Әбет ауылынан. Башҡортостан һәм Рәсәй Яҙыусылар союзы ағзаһы, бер нисә шиғри йыйынтыҡ авторы. Әҙәби тәнҡитсе. Филология фәндәре докторы, профессор.*

*Ап-аҡ сафлыҡ япты ерҙең өҫтөн.*
*Тап шул мәлдә Хоҙай яралғыһы —*
*Сабый тауыш бирҙе туң Йыһанға.*
*Фәрештәләр ҡанаттарын ҡаҡты, —*
*Хыҙыр Ильяс билен быуҙы юлға.*

## Исем туйы

*Бәүелә Ер аҡ биләүҙә,*
*Иренсәк ҡарҙар яуа.*
*Ҡара күҙ үҙәккә үткән —*
*Был сафлыҡ йәнгә дауа.*

*Аҡ биләүҙәге сабыйҙың*
*Тирбәлгәндә бишеге,*
*Усаҡта ут — йортоңда ҡот!*
*Тик кем булыр исеме?!*

*Бит осҡайы алһыу алма,*
*Бал тәме иреңендә.*
*Балалы йорт — ырыҫлы йорт, —*
*Сәңгелдәге түрендә.*

*Йорт йылыһын — тормош ҡотон*
*Тотһа балалы ҡатын,*
*Мал-тыуар, ил хәстәрҙәре*
*Иңдәрендә ир-аттың.*

*Саманы сама килтереп,*
*Йоланы итеп йола —*
*Шәмгә ут алғас, түренде*
*Ҡолаҡҡа ҡаты мулла.*

*Әҙәм күҙенән йәшерер*
*Хилафлыҡтар юҡ-юғын.*
*Тик силсәүит белгәненән*
*Белмәүе яҡшы бөгөн.*

*Киң урындыҡты ян-яҡлап*
*Алғас тәғәйен урын,*
*Йылы ҡомған һыуы менән*
*Һәр кем сайыны ҡулын.*

*Мөхәмәҙи күҙ йүгертә,*
*Ҡыра биреп тамағын;*
*Сал һаҡалын һыпырғылай,*
*Төҙәтә таҡыяһын.*

*Һәр бер ҡараш, ым-ишара —*
*Оло-ғара тантана.*

*Ҡыуығына тиклем балҡып,*
*Етеле шәмдәр яна.*

*Бында бер ғаилә инде –*
*Яҡын туған, күршеләр.*
*Кендек әбейе лә мотлаҡ*
*Теләктәрен инселәр.*

*Мөхәмәҙиҙең ҡарашы*
*Малайҙарҙа туҡтала.*
*Иҫләй әле исемдәрен*
*Тәкбир әйтеп ҡушҡанға.*

*Быныһы Ғәле бәлүән бит,*
*Теге ҡараһы – Батыр.*
*Арғыһының баш аҫтында*
*Һәр саҡ китабы ятыр.*

*Исемдәр, эйе, тап килә –*
*Әүлиәлек бар, буғай...*
*Тик был ара, мәсет яҡлап,*
*Әхирәт йыры сыңлай.*

*«Бәрәкалла!.. Йә башланыҡ*
*Хоҙай рәхиме менән:*
*Был сабыйға исем-шәриф*
*Ҡушыла «Сәми!» тигән!..»*

*Гел итеп ҡалды урындыҡ:*
*Көлһәң көл, йәки – ила!*
*Исем бит ул – есемгә тиң:*
*Яҙмышыңа юл һыҙа.*

*«Сәми түгел – Фәнзил! Бабай!»–*
*Ҡысҡырып әйтә Ғилем.*
*«Шулай, тим, шул, Сәми булыр!..*
*Ә һин һуң нимә тиһең?!.»*

*Илап ебәрҙе сабый ҙа:*
*Уйнайҙар яҙмыш менән –*
*Күп тә үтмәҫ, был аталмыш*
*Бәйләнер һалмыш менән.*

*Күмәкләшеп тәкрарлағас*
*Фәнзил тигән исемде, –*
*Ниһайәт, мулла яғынан*
*Кәкреһе төҙәйтелде.*

## 2. Олатай

*Йүнсел ине Абыҙгилде...*
*Баҫылыу менән бола,*
*Атайҙан ҡалған ат менән*
*Һабанды алды ҡулға.*

*Ер эшенә һыуһағайны, —*
*Елеккә үтте һуғыш:*
*Дүрт йыл окопта...*
*Һуңынан*
*Ил эсендәге ыҙғыш.*

*Мусаның бригадаһында*
*Юденичты баҫмаҡлап,*
*Орден алды, яра алды, —*
*Үткәндәргә — салауат.*

*Үҙең яулап алған тормош, —*
*Белер кәрәк ҡәҙерен.*
*Быуынға ултырып килә*
*Уланым — Йәнтимерем.*

*Эшкә сымыры күренә,*
*Йорт эсендә лә бөтмөр;*
*Алыштырғыһыҙ ярҙамсы, —*
*Хоҙай рәхмәте төшкөр.*

*Сәсте, урҙы, мал ишәйтте,*
*Йөрөнө баҙарына;*
*Ил эшенән дә ҡалманы, —*
*Өлгөрҙө барыһына.*

*Һиллек ойотҡан, күрәһең,*
*Һиҙҙермәй килде дауыл:*
*Ҡайталмаҫлыҡ араларға*
*Олаҡты сирек ауыл.*

*Бер һүҙ етте — «Мортазинсы!..»*
*Алдылар төндә килеп.*
*Үкенесе — өлгөрмәне*
*Тимерҙе ир еткереп.*

*Өлгөрмәне...*
*Уларҙы ла*
*Өлгөртөр йәнә һуғыш.*
*Дәһшәтлеһе, ҡот оҫҡосо...*
*Яҙмыштан бармы уҙмыш?!.*

## 3. Атай

*Сәсец бөткәс өйләнде ул, —*
*Бесән сабыр алдынан.*
*Мөхәй димләгән йәш ҡыҙҙа,*
*Тау ашаһы ауылдан.*

*Төҫкә-башҡа ҡойоп ҡуйған,*
*Буй-һыны ла ыҡтымат.*
*Яулыҡ ҡайырып кцҙ атты, —*
*Тулған ай ҡалҡты һымаҡ.*

*Аҙна-ун көн цткәндерме*
*Сымылдыҡҡа инецгә, —*
*Көнбайышта дауыл ҡупты,*
*Утлы ҡойон-өйөрмә!*

*Бал айында,*
*йцкәләрҙән*
*Бал тамғанда һығылып,*
*Йәнтимер биштәрен аҫты, —*
*Төш булғандыр сымылдыҡ...*

* * *

*Ҡандан алда ете тирҙе*
*Һуғыш ағыҙа икән!*
*Их-х, туйғанса бер йоҡлаһаң!..*
*Ул мәлдәр ҡайҙа икән?!.*

*Ишелеп йоҡлай һалдаттар, —*
*Утар өйөндә — тыныс.*
*Алдараҡ, һулда фашистар...*
*Хатта тынлыҡ ҡурҡыныс.*

*Ҡистән килеп ингәйнеләр,*
*Арып-талып, арманһыҙ...*
*Әмер цтәп: «Тирә-йцндә*
*Хәлдәрҙе асыҡлағыҙ!»*

*Асыҡланды...*
*Хәҙер кире*
*Ҡайтыу кәрәк һуңламай!*
*Таң һарғая...*
*Уянырға!*
*Бер нигә лә ҡарамай.*

*Йәнтимер йоҡоға уяу, —*
*Үҙ-цҙенә бойороҡ:*

*Аяҡтарына баҫтырҙы*
*Барыһын да торғоҙоп.*

*Саҡ-саҡ сығып өлгөрҙөләр, —*
*Утарға илткән юлда*
*Немец танкыһы күренде —*
*Һәләкәт көткән бында!*

*Уяныр етмәгәндең дә*
*Шундуҡ осто йоҡоһо.*
*Икенсе һулышты асты*
*Тән-йән һаҡлау тойғоһо.*

* * *

*Һуғышта минёр бар эшен*
*Төндә генә башҡара:*
*Йә һөжүмгә «юл таҙарта»,*
*Йә дошманға «баҙ ҡаҙа».*

*Саҡ ҡына яңылышһа ла,*
*Буласаҡ үл берҙән-бер;*
*Һөйәгеңде лә тапмаҫтар, —*
*Ер менән тигеҙләнер...*

*Был юлы, үйламағанса,*
*«Юл асылып» бөтмәҫтән*
*Дошмандың ал һыҙығында*
*Ҡойон ҡупты көтмәҫтән.*

*Олоп оса снарядтар*
*Баш осонан тиерлек:*
*Тән ҡурыша, йән бөрөшә, —*
*Ҡарға, ергә һеңерлек.*

*Уңарсы булмай, батальон*
*Дәһшәтле «Ур- ррр-ааа!» менән*
*Атакаға күтәрелде*
*Минёрҙарҙың эҙенән.*

*Йүгерәләр йәнтәслимгә,*
*Тоҫмал менән атышып;*
*Тәгәрәйҙәр йә хәл өсөн,*
*Йә йән өсөн тартышып.*

*Ҡолаҡта тик геүләү тора,*
*Башты бер үй быраулай:*
*Бурыс үтәлде!..*

Ҡайтыуға
Ниңә йәһәт боролмай?..

Батальон һөжүмгә бара, —
Нисек шыуаһың артҡа?!
Ә приказ?
Патрондар ҙа
Бирелгән һанап ҡына.
.............................................
Ә штык? Ике граната?
Эй, Йәнтимер, атайыңдың
Яугирлыҡ рухы ҡайҙа?!.

Арыҫландай ырғып торҙо,
Һеләүһендәй атылды;
Ут сәсеп алға ырғылды, —
Баҫыр өсөн ялҡынды.

Дошмандың тәү траншеяһын
Осоп ҡына үттеме?
Ә артабанғы ҡул-алыш
Дауамлымы? Бөттөмө?..

(Бөтәме һуң?!.
Бындай мәхшәр
Ғүмергә эҙәрлекләр...
Олоғайған көнөңдә лә
Төндә килеп йәшенләр.)

Командир менән аңлашыу
Уставса булды кисен:
Тәртип өсөн — гауптвахта!
Орден — батырлыҡ өсөн!

## 4. Әсәй

Һәр балаңдың илауы ла,
Көлөүе лә үҙенсә, —
Йөрәгеңде ярып сыҡҡан
Үҙгәрешһеҙ көйөнсә.

Тәүгеһе ҡарында ҡалды
Тимер фронтҡа киткәндә.
Йәшәү өсөн хәбәр һалды
Февраль еле өткәндә.

*Аҙ иланы...*
*Илаусылар*
*Етерлек бит, тигәндер, —*
*Ҡырҡ икенсе йылғыларға*
*Наҙ ҙа, күҙ ҙә тейгәндер.*

*Ҡул араларына инде,*
*Ҡарашты туғандарын.*
*Китап ҡулынан төшмәне,*
*Бәпләне хыялдарын.*

*Ғәлейәне тиҙ төшөндө:*
*Эмей юҡ — иламаһаң.*
*Үҙенекен ала белде:*
*Бирмәҫтәр — һорамаһаң!*

*Батырҙың ҡалын тауышын*
*Айыралды бар тирә, —*
*Ете йорт аша яңғырап,*
*Ишетелгәнгә күрә.*

*Фәнзилдең мөлдөр йәштәре*
*Эленеп керпегенә,*
*Кибер ине таммайынса*
*Кемгәлер рәнйешенә.*

*Йәштәрегеҙ үҙәгемдә,*
*Көлөүегеҙ хәтерҙә.*
*Һәр берегеҙҙең хафаһы*
*Тамға һалған бәғергә.*

## *5. Бесән өмәһе*

*Эй, йәйге таңдағы йоҡо —*
*Татлыларҙан татлыһы,*
*Төштәрҙең иң серләләре, —*
*Ҡатлыларҙан ҡатлыһы.*

*Лапаҫ башында төн сығыу,*
*Йондоҙҙарҙы ябынып.*
*Эңер сапҡан бесән еҫе*
*Танауҙы бара ярып.*

*Кисә кистән һөйләшеүҙәр —*
*Ысынмы ул, бушмы ул?*
*Күктә сабышҡан йондоҙҙар —*
*Хыялмы ул, төшмө ул?*

*Биҙрәне зыңғырлата һөт —*
*Арияң ары торһон.*
*Аһ, көтөүсе сыбыртҡыһы...*
*Ҡолаҡты ярмай торһон!*

*...Яра шул ул.*
*Ҡап уртаға*
*Бүлде инде донъяны.*
*Йәншишмә тегендә ҡалды,*
*Бында һыуҙың буръяғы...*

* * *

*Бөгөн Фәнзил ат башында[1] —*
*Өмәгә сыға ауыл.*
*Дәррәү ҡубып бесән эшләү —*
*Бороңғо йола ла ул.*

*Ә көнө һуң?!*
*Күк көмбәҙе —*
*Фирүзә ҡашлы йөҙөк!*
*Алтын ҡояш...*
*Был донъялар*
*Илаһи,*
*теүәл,*
*төҙөк!*

*Төнгөлөктән[2] аттар ҡайтҡан.*
*Ҙур баҙар — ялан кәртәң.*
*Малайҙар атҡа атлана —*
*Һыбайға донъя бүтән!*

*Батыр быйыл ат сапҡыста —*
*Йүгәнләгәс бүртәһен,*
*Фәнзилгә тотоп биреште*
*Аттың бына тигәнен.*

*(Ағайҙарым — ҡаяларым,*
*Күрғаусыларым минең —*
*Һеҙ булғанға, имгәнмәйсә,*
*Нығына бара билем.*

*Әлдә үҫтә: Ғәлейәне*
*Атҡа мендерешкәне,*

---

*[1]Элгәре бесән өмәһендә 8-12 йәшлек малайҙар ат менән фурманка тип йөрөтөлгән тирәсле махсус арбала кипкән бесәнде эҫкерт булаһы ергә ташырҙар — йәғни «ат башында» йөрөрҙәр ине.*
*[2]Аттарҙы төнөн ашатыу.*

*Лҫрт-лҫрт юртҡан ат йәнәшләп,*
*Ялҡынға ут өҫтәүе.*

*Ә Ғилеме етәкләне*
*Ҡитап тигән илдәргә,*
*Елеп тә етмәҫ ерҙәргә,*
*Мөъжизәле төндәргә!*

*Ярһыуыраҡ ҡонан инде —*
*Ҡарат — ул мал ырыҫы.*
*Ҡолон саҡтарынан уны*
*Үҙ иткәйне мырысы.*[3]

*Аталары аңғартҡайны:*
*«Ҡарат тамырҙарында*
*Ырыу ҡото булған малдың*
*Ярһыу ҡандары аға...»*

*Ҡолхозлашыу дәүерендә,*
*Йәшен һис тә тыялмай,*
*Етәкләп илткән аҫауы*
*Һаман иҫтән сығалмай...*

* * *

*Ике тышауҙай артылған —*
*Ҡояш ҡарай үҙ яйын.*
*Бесәнселәр яңғырата*
*Күҙле Шишмә туғайын.*

*Ҡисә сапҡан бесән бөгөн*
*Ҡипкән —*
*тауыш бирерлек,*
*Өс йәпле ағас һәнәктә*
*Устарҙа һикертерлек.*

*Ҡыҙҙарҙың еңел тырмаһы*
*Ер сәсен тараймы ни?!*
*Тимер һәнәкле үҫмерҙәр*
*Бесәнгә ҡараймы ни?!*

*Урын һайлап, төп һуҡтылар,—*
*Көн ҡыҙыуға эш ҡыҙа.*
*Әйләнә лә күҙ төртөлә*
*Күбәләктәй бер ҡыҙға.*

---

*[3]Мырыс — көньяҡ һөйләшендә ҡустыны, мырҙаны уғата яҡын итеп, яратып, «мырыс» тип йөрөтәләр.*

*Ярыш сәме малайҙарҙан*
*Күсә өлкәндәренә.*
*Күҙ эйәрмәй*
*һәнәктәрҙең*
*Күбә сәнскәндәренә.*

*Юрттырып ҡына ташыйҙар,*
*Күмәк эш — байрам икән!*
*Теге ҡыҙ керпеген ҡаҡты —*
*Ҡарашы хайран икән!*

* * *

*Ит боҫорай ҡоштабаҡта,*
*Мәтрүшкәле сәй еҫе,*
*Ҡояш ҡайын сатырында —*
*Ожмах кәрәкмәҫ төҫлө.*

*Ололар ҡырын ятышҡан,*
*Йәш-елкенсәк ситтәрәк.*
*Уларға — ҡайҙа булмаһын —*
*Ҡыҙыҡ табырға кәрәк.*

*Төшкә туҡтальан арала*
*Һынашалар билдәрен.*
*Батыр, ана, бер-бер артлы*
*Тәкмәстерә тиңдәрен.*

*Ахыр сиктә ҡаршы сығыр*
*Табылмағас ҡыйыуы,*
*Өлкәнерәген саҡырҙы, —*
*Ҡатҡыл, буғай, быуыны.*

*Тик тегеһе баш сайҡаны —*
*Көлкөгә ҡалғы килмәй:*
*«Ҡулды күберсеттем әле,*
*Һәнәккә лә эшкинмәй!»*

*...Терһәккә тиклем һыҙғанып*
*Аҡ күлдәгенең еңен,*
*Фәйзулла ағай ит бүлә,*
*Самалап һумын, тиңен.*

*Киҫәк-киҫәк өлөштәрҙән*
*Малайҙар күҙен алмай.*
*Ас түгел дә...*
*Ит тигәнең*
*Өйҙә эләгеп бармай.*

*Ашаған малда өмөт бар —*
*Бабайҙар әйткән белеп.*
*Малайҙар ашҡа талымһыҙ —*
*Ҡолаҡтар тора бейеп.*

*Мәтрүшкәле эҫе сәйҙе*
*Эсеп берәр көрөшкә,*
*Эт ниткәнсе әйләнделәр*
*Ат йөҙҙөрөп Нөгөштә.*

* * *

*«Эй-й, Ишбулды, кил әле, кил!*
*Ҡош балаһын ҡаптырҙым;*
*Ҡанаты саҡ сығып килә, —*
*Осортоп уйнатырһың».*

*(Ишбулды ул һис тиктормаҫ*
*Биш-алты йәшлек малай*
*Аш бешереүсе әсәйҙең*
*Бер ҙә артынан ҡалмай.)*

*Еңел эшләпәһе менән*
*Ерҙе ҡаплаған Әхмәт.*
*Йүгереп килде тегеһе:*
*«Ҡана, тиҙерәк күрһәт!»*

*«Минең ҡулға бәләкәй ул,*
*Һиңә булыр сап-самай.*
*Ипләп кенә ҡулыңды тыҡ, —*
*Һай, маладис, шәп малай!»*

*«Әһ-һә, йылымыс икәнһең, —*
*Хәс тә шамбы ҡолағы...*
*Эләктерҙем!..»*
*Ә ҡулында...*
*Был ни?!.*
*Һыйыр «ҡоймағы»!..*

* * *

*Күләгәлә ҡырын ятып,*
*Ғәббәс һүтә бәйәнен:*
*«... Башҡорт айбарлы булған ул:*
*Әҙер тотҡан йәйәһен.*

*Оранды ғына көткәндәр,*
*Ер-һыу өсөн, ил өсөн*

*Яуҙар сапҡан —*
*һис бирмәгән*
*Хоҙай биргән өлөшөн.*

*Салауаттың яуында ла*
*Берҙәй булып ҡалҡкандар —*
*Беҙҙең яҡтың бөрйәндәре,*
*Ҡыпсаҡ белән тамъяндар...»*

*Малайҙарҙың күҙҙәр яна:*
*Эх-х, һуңыраҡ тыуылған...*
*Яугир олатайҙар һыны*
*Уҙҙы Таллы тауынан.*

* * *

*Фәнзилдең хәтер күгендә*
*Ялтланы ырыу даны:*
*Париж яулап, миҙал алған*
*Олатай олатаһы.*

*Миҙал нимә?*
*Француз ҡыҙын*
*Эйәрҙә апҡайтҡан ул!*
*Яугир рухын*
*«ауропалы»*
*Ҡанында «сайҡатҡан» ул.*

*Торна сыңрауын иш иткән*
*Булон[4]дың һандуғасы.*
*Ҡеуәтләнеп тармаҡланған*
*Ырыуҙың ҡарағасы.*

* * *

*Төшләгөнә тиклем ҡояш*
*Менә, ти, үгеҙ менән.*
*Ҡалған яртыһы кәм түгел*
*Ҡуян етеҙлегенән.*

*Шуға йәй мәшәҡәттәрен*
*Бик ҡыҙыу тота халыҡ:*
*Көнөндә осона сыға,*
*Бөтһә лә арып-талып.*

*[4]Булон — Париж эргәһендәге урман.*

*Ҡумаҡлағас, эш тә ырам, —*
*Уйын-көлкө, мәрәкә.*
*Әле ҡыҡрәкләйҙәр ине,*
*Эш еткән ос һәнәккә.*

*Ниһайәт, осланы, буғай,*
*Хәмзә дилбегә һорай.*
*Һабантуймы тип торорһоң, —*
*Яңғырап тора туғай.*

* * *

*Ҡыйып ҡына ҡарағыһыҙ, —*
*Эш тиһәң дә эш булды:*
*Рәссам рухландырыр эҫкерт*
*Ҡойоп ҡына ҡуйылды.*

* * *

*Ҡайтыу юлына ҡуҙғалғас,*
*Аттары арыһа ла,*
*Үҙлегенән башланды бит*
*Ҙур бәйге*
*арбаларҙа.*

*Олораҡтар ултырғаны*
*Арттараҡ ҡалды тороп.*
*Ҡалғандары йомолдолар*
*Бер саң болото булып.*

*Дилбегә лә ҡаҡтырмайса*
*Ҡарат саба иң алдан.*
*Фурманды алыштырғанмы*
*Әкиәттән ел арбаң?!*

*Ергә тейә, теймәһә юҡ —*
*Тәгәрмәстәр зыр килә.*
*Әллә тояҡтар тупылдай,*
*Әллә йөрәк елкенә.*

*Ҡалды Рауилдың Саптары,*
*Әллә ҡайҙа Аҡбәкәл,*
*Ҡолайғыр ҙа ыраталмай,*
*Турат ҡына тәүәккәл.*

*Уның менән дә аралар*
*Алыҫая һиҙелеп.*
*Ҡыҙа ғына бара Ҡарат, —*
*Алып ҡасты тиерлек.*

*...Берәй ташҡа эләктеме —*
*Ныу һикертте...*
*Һикертте!*
*Кендектән ысҡынған фурман*
*Ҡара ергә һөрлөктө.*

*Нисек арбанан осҡанды*
*Инде иҫләрлек түгел.*
*Әммә дилбегә ҡулында, —*
*Ныҡ тотто уны Фәнзил.*

*Ярһыу ат ауылға инһә,*
*Бөттө баш, эштәр харап!..*
*Ҡаты ҡулды һиҙҙе малҡай, —*
*Ҡыҙыуын баҫты Ҡарат.*

*Батыр сабып килеп еткән:*
*«Ай, ҡурҡыттың бит, мырыс!..*
*Йөрәк тә бар икән һиндә —*
*Уҙыш тиһәң дә уҙыш!..»*

*Ғилем ағаһы ла янда, —*
*Орошорға самаһы:*
*Бындай хәйерһеҙ уйындың*
*Йүнле бөтмәй аҙағы.*

*Ғәле менән дуртәүләшеп,*
*Кендекте турайтҡылап,*
*Арбаны кире ҡуйҙылар, —*
*Ҡаҡҡылап та һуҡҡылап.*

## 6. Ҡиске табын

*Барыһы күтөп алған мәл —*
*Ҡәҙимге киске табын...*
*(Ҡәҙимге... Тик күңелдәрҙе*
*Мәңге биҙәр!..*
*Йә, Раббым!..)*

*Атайға хөрмәтле урын,*
*Әсәй инде түр яҡлап.*
*Өләсәй ҡашында кинйә —*
*Әмир алыр ҡунаҡлап.*

*Атайҙың уңында Фәнзил,*
*Уның янында Батыр.*
*Ғәле, Ғилем, аяҡ бөкләп,*
*Урындыҡты уралтыр.*

*Атай әсикмәкте теләй,*
*Әсәй аш ураштырған.*
*Ғәле ҡорот ҡыра,*
*Батыр*
*Һуғанды әрсеп ҡуйған.*

*Шулайтып, Ғилем иртәгә*
*Ситкә уҡырға китә.*
*Белемле хәҙер ҡәҙерле —*
*Беләклене һелкетә...*

*«Һелкешеп ҡарарбыҙ, ағай,*
*Йәнә бер нисә йылдан!..»*
*Батыр, мутлашып, күҙ ҡыҫа, —*
*Беләктәрен һыҙғанған.*

*Иркә Әмир ҙә күркәләй,*
*Юҡ, күркә түгел — бөркөт!*
*Ул да мәктәп юлын башлай*
*Таң менән,*
*түште киреп...*

* * *

*Үҫә торор, оса торор*
*Һайлам уҡтай биш егет.*
*Һәр береһе үҙгә яҙмыш —*
*Күҙ тергән биш өмөт.*

*Ә әлегә өләсәйҙең*
*Риүәйәт-бәйәндәре,—*
*Ер менән Күктәгеләрҙең*
*Сеймәлеп бәйләнгәне:*

*«Ҡан замандарҙан да әүәл,*
*Нух пәйғәмбәрҙән алып,*
*Осар торналар сыңрауын*
*Изгеләштергән халыҡ.*

*Әүлиә генә ишетер*
*Зәңгәр күк сыңлағанын.*
*Тик изгеләр генә аңлар*
*Торналар сыңрағанын.*

*Был сыңдарҙа әруахтарҙың*
*Фатиха-күҫәтеүе;*

Ҡыҡтәгенең ерҙәгене
Ҡурсалап иҫкәртеүе...»

* * *

Ҡашығаяҡты йыуғанда
Бейем-килен үҙ-ара
Һәүетемсә, көңгөр-ҡаңғыр
Ҡиҫте төнгә уҙғара.

— Ҡинйәкәйҙе артығыраҡ
Һәстүкләйһең һин, килен...
— Әллә инде...
Әсә наҙы
Артыҡ микән ни, бейем?!

— Хатта ҡояштың йылыһы
Саманан китһә сығып,
Бар тереклек ямғыр көтә,
Төндө көтә зарығып.

Һөйөклө бала — көйөклө, —
Белеп әйтелгән, килен!
— Бигерәк һөймәлекле шул...
Ярай,
аңланым,
бейем.

## 7. Хыялды ҡотҡарыу

«Ағиҙел» журналы килгән —
Мөғжизә ҡабатлана.
Эш атын ҡалдырып, Фәнзил
Дөлдөлдәргә атлана.

Был көн — тылсымлы әкиәт,
Бай күңелдәр байрамы.
Тик ҡайһы саҡ
бигүк һәйбәт
Барып бөтмәй аҙағы.

Ҡыҡтең етенсе ҡатынан
Ергә төшөүҙәр?..
Ай-һай...
Әммә күҙ асып-йомғансы
Башҡара уны атай.

*Бына тағы*
*(ни арала?)*
*Ҡуйырған күктә болот:*
*Шайтан сыбыртҡыһы шартлай,*
*Урала йәшен булып:*

*«Бер әйтәһең, ике әйтәһең, —*
*Күпме була әйтергә?!.*
*Һеҙҙе кәрәк*
*ныҡлы ҡыҙған*
*Табала бейетергә!..»*

*Тартып алды «Ағиҙел»де —*
*Йотто уны зәһәр ут.*
*Бейешмәгеҙ, эй, осҡондар!*
*Күҙҙә — йәш, үҙәктә — ут.*

*Усаҡтағы утта дөрләй*
*Мең ғазап «Мәскәү юлы»[5],*
*Асыулы ҡарай Шамун ҡарт[6]:*
*«Был ниткән шайтан туйы?!.»*

*Тыҡты ҡулын утҡа Фәнзил,*
*Ҡалды осҡон сәсерәп.*
*Ә йөрәккә эләккәне —*
*Әселәрҙән әсерәк.*

*Ялпылданы ялҡын-ҡағыҙ,*
*Йотолдо ус эсендә.*
*Уттай тышҡа осто малай*
*«Еңеү!..» элеп битенә.*

*Күктәнме, ерҙәнме килә*
*Торналарҙың сыңрауы?*
*Килә берсә йырлағылар,*
*Килә берсә илағы...*

*Ҡотҡарҙы ул Һомайғошон,*
*Мөғжизәгә өмөтөн,*
*Тылсымдарға ышанысын —*
*Ай,*
*Ҡояш,*
*Ер —*
*бер бөтөн!*

---

[5] *«Ағиҙел» журналындағы Динис Исламовтың Бөйөк Ватан һуғышын сағылдырған «Мәскәү юлы» романы.*
[6] *«Мәскәү юлы» романы геройы.*

## 8. Бүреләр

*«Э-һе-һе-һей!!!*
*Кәрәген бир!*
*Шеш ҡолаҡына тондор.*
*Нәҫел-нәсәбе ҡороһон —*
*Бот араһына йомдор!»*

*Был ни ғиллә? Был ни тауыш —*
*Әсәй йөрөй өлтөрәп:*
*Ишеккә керһәм, элде,*
*Тәҙрәгә һала кәләп.*

*«Ни бар унда?» — Китабынан*
*Фәнзил ҡалҡытты башын.*
*«Был бүреләр*[7]
*ҡан ҡойошһоҙ*
*Үткәрмәҫ һуғым ашын.*

*Әле бына, йә, Хоҙайым!*
*Ташланғандар Ҡуянға...*
*Атайың да әллә ҡайҙа,*
*Ҡыҫылмаһа ярай ҙа...»*

*Бүреләр килмешәклеген*
*Тик Мөхәмәҙи белә.*
*Сиселмәҫлек төйнәп ҡуйған*
*Ныҡлы хәтер ебенә.*

*Бер өс быуын элгәрелер —*
*Бүреләр күбәйгән йыл —*
*Йот йылында был ауылға*
*Килеп сыҡҡан тоҡом был.*

*Баштараҡ баш баҫһалар ҙа,*
*Күрһәттеләр кемлеген:*
*Утыҙ етелә бирҙеләр*
*«Дошман»дар исемлеген.*

*Хәҙер шуларҙың береһе*
*Йөрөй бригадир булып.*
*Ҡолой кантон ҡайтҡанмы ни?! —*
*Ҡылыҡ тиһәң дә ҡылыҡ...*

---

[7] *Бүре, ҡуян, торна — ауылдағы аралар исеме.*

*...Атаһы ла ҡыҫылған шул.*
*Ҡыҫылмаһа ни булған?!*
*Бүреләрҙең кемеһелер*
*Күҫәк менән һыҙырған.*

*Аяҡ терәүе лә хәҙер*
*Олоғара бер аҙап...*
*(Торна ботон ҡыҫтырған, тип*
*Һөйләр булдылар аҙаҡ.)*

*Бынығы әле ни генә?!*
*Ҡараһаң ҙурҙан ҡубып:*
*Уҫлаптай ир, иҫтән яҙып,*
*Ята ҡандарға туҙып...*

## 9. Ҡышҡы еләктәр

*Фәнзил менән Әмирйәнде*
*Уяттылар иртәрәк:*
*«Атаң аяҡҡа баҫалмай —*
*Һалам апҡайтыр кәрәк!»*

*Киң ләжәнкәле санаға*
*Һәнәк, бауҙарҙы һалып,*
*Кәртә артлап юл сыҡтылар,*
*Билбауырҙан көрт ярып.*

*Күҙ ҡамашыр аҡ яланда,*
*Булып тәбиғәт күрке,*
*Рәжәп ҡарамалығына*
*Боҫҡан һалам эҫкерте.*

*Уралтып ҡарап сыҡтылар —*
*Кемдер бында баш һалған:*
*Эште буйтым еңеләйткән, —*
*Боҙло ерен аҡтарған.*

*Тапай-тапай тейәнеләр:*
*Күбәләй булды был йөк.*
*Еңел генә меналмаҫһың, —*
*Дөйәләй ҡалҡыу, бейек.*

*Әмир алдан, Фәнзил арттан*
*Ҡуҙғалдылар ҡайтыуға.*
*Өйҙә йылы аш... Китаптар...*
*Йөк тә еңел һарҡыуға.*

*Тырылдаған‌дай ине шул*
*Шамырҙан тракторы.*
*Шишмә эҫкертен һөйрәтеп,*
*Үткән юлды арҡыры.*

*Тура һуҡтырған фермаға, —*
*Ҡарҙар ята ишелеп.*
*Бер елле һәнәктәй булыр, —*
*Бесән ҡалған бүҫелеп.*

*Бирәйем тигән ҡолона —*
*Һалып ҡуйыр юлыңа.*
*Хоҙай рәхмәте төшкөрө:*
*Иш-ҡуш һәүкәш һыйына.*

*Ҡара әле, араһында*
*Ҡипкән еләктәр баҙлай.*
*Ҡышҡы юлдың күстәнәсен*
*Тәмләне ике малай.*

*«Еләкле урын ине шул:*
*Әйҙә, ауыҙ ит, Әмир!*
*Абзаң йәй йыйған еләк ул, —*
*Арыу-талыуың кәмер».*

*Бәйҙе ысҡындырмай ғына,*
*Йөк өҫтөнә, йәтешләп,*
*Фәнзил бесәнде ырғытты,*
*Баҫтыра сәнсте һәнәк.*

*Ҡайҙа былай һыбай сыҡҡан*
*Быригадир Бирҙеғол?!*
*Ҡамсыһы йыландан былай —*
*Өҙөлдө, бүленде юл.*

*«Хатта һаламға рөхсәт юҡ, —*
*Ә былар бесән йолҡҡан!*
*А ну фермаға илтегеҙ,*
*Инәгеҙҙе эт йыҡҡан!!!»*

*(Әллә ниткән тәртиптер ул, —*
*Ауыл халҡы аңламай:*
*Иген ик,*
*тапшыр —*
*һаламға*
*Ҡағылырға ярамай!)*

*Аты менән менеп килә —*
*Бүре тиһәң дә бүре!*
*Фәнзил һәнәккә тотондо,*
*Ҡаранды ары-бире.*

*«Илтермен бына, илтмәй ҙә!» —*
*Ҡайҙан былай ҡыйыулыҡ?!*
*Күҙҙә — осҡон, ҡулда — һәнәк, —*
*Түгел тотоп тыйырлыҡ.*

*Берәйһе йәүкәләгәндер —*
*Туйтаңлап атай сыҡҡан;*
*Айыуҙы ни, Батыр саба, —*
*Ҡултыҡҡа тәртә тыҡҡан.*

*Эшләй — әйтә, әйтә — эшләй,*
*Ә йоҙроҡ янда ла ул.*
*Ошо ҡарасман егеттән*
*Терт итеп тора ауыл.*

*Алан-йолан ҡаранды ла,*
*Артҡа сигенде бүре:*
*«Ярай инде, апҡайтығыҙ...»*
*(Эх-х, булһамы өйөрө!..)*

*Сананы ауҙарҙы Фәнзил:*
*«Үҙеңә булһын, бүре!*
*Бынан бәйре баҫма юлды, —*
*Беҙҙән арыраҡ йөрө!»*

*«Дөрөҫ, мырыс, әйҙә алһын...*
*Ә айлы төн, юл таҡыр —*
*Теге әҫкерттән берәй йөк*
*Ҡураға ҡайтып ятыр...»*

*Шулай булыр...*
*Тик мырысың*
*Оҙаҡ әле ут йотор.*
*Ыржайған бүре тештәре*
*Төшөндә лә йонсотор.*

*Кеше бүренән дә яуыз*
*Нисек булала икән?*
*Әллә айырмалыҡтары*
*Шулай юғала микән?!*

*Сыңранымы торройҡ торна,*
*Әллә Күк иланымы?!*
*Яҙмыштың был һынауымы,*
*Йәиһә һорауымы?*

*Үкһеҙ һорау—ҡыңғыраўҙар,*
*Ә яуап үттәй әсе.*
*Кипкән ҡыҙыл еләк ҡарҙа, —*
*Гүйә, ҡанлы күҙ йәше...*

## *10. Айбарлыҡ*

*Ярһыу Нөгөш туңыу менән*
*Башлана ҡышҡы уйын.*
*Боҙло айҙарҙы сәкәнһеҙ*[8]
*Күҙаллауы ла ҡыйын.*

*Бына әле малды ҡарап,*
*Утын ярғас еткелек,*
*Рауилға һыҙғырҙы Фәнзил:*
*«Бөттөмө эш? Кем элек?»*

*Быймаға ҡайыш бау менән*
*Нығытҡас конькиҙарҙы,*
*Ел дә ҡыуып етә алмаҫ*
*Был йылғыр малайҙарҙы.*

*Күҙ бәйләнгәнсе һуғырҙар*
*Йоҙ(о)роҡтай йөн тубын.*
*Һөрән-ҡыйҡыу шаулап торор,*
*Бер итеп йылға буйын.*

*Тик бөгөн генә кинәнеп*
*Уйнау яҙмаған икән:*
*Боҙ — боҙ инде,*
*ереӊ түгел, —*
*Бәләһе менән көткән.*

*Тирләп тә өлгөрмәнеләр...*
*Эй-й, малайҙар!..*
*Ишбулды...»*
*Салих, бейәләйе менән*
*Күҙҙәрен ыуа-ыуа,*
*Илай-илай, ауа-түнә,*
*Туӊ быймаһында шыуа.*

---
[8]*Сәкән — хоккей.*

«Ишбулдыға ни булды?!.»
«Тегендә...
Боҙ убылды...»

Йәшен йәшнәне тиерһең, —
Китте уйын ҡайғыһы.
Боҙ аҫтында ғына икән
Аҫау йылға ярһыуы.

Тап Сөйрөлмәк тапҡыры шул —
Туңһа, иң аҙаҡ туңыр,
Оҙонлоғо ик(е)-өс ҡолас,
Иңе бер ҡолас булыр.

Был «мәке»гә яҡынларға
Уйлағайны ла кемдер,
Боҙ сытырҙай башлау менән,
Ҡуяндай артҡа елдер.

Аръяҡтан —
тал шырлығынан
Күренде шул саҡ Батыр.
Ҡолғалай ҡыу ағас һөйрәй:
«Китегеҙ!.. Шайтан алғыр!..»

Бына уның аҫтында ла
Боҙ сытырҙап ярыла...
Әммә егет боҙға ята,
Ағасы алға шыла.

Шыуа торғас, барып етте
«Мәке»гә ағас осо.
Эй-й, Ишбулды, йәбешә һал, —
Ҡотолоу юлы ошо.

Тик тегеһе ашыҡманы
Ағасҡа тотонорға.
Яҡынланы Батыр тамам
Ялмауыҙ ауыҙына.

Аһ, бейәләйҙәге ҡулы
Боҙ ситенә туңған бит.
Ҡарашы ла һүнеп бара, —
Һүҙ аңлауҙан уҙған бит.

Эйәк менән, ҡулдар менән
Тора боҙға эленеп—

*Һыу ағышы аҫҡа һөйрәй, —*
*Саҡ-саҡ тора бәүелеп.*

*«Мәке» аша үтеп ятты, —*
*Эй-й, һынып ҡуйма, ағас!*
*Был урында һис бер нәмә*
*Һине алыштыралмаҫ.*

*Барып етеү менән, Батыр*
*Малай хәлен аңланы.*
*Ағасын ысҡындырмайса,*
*Бишмәтенән ҡарманы.*

*Ағас шыуа, аяҡ шыуа, —*
*Эй-й, күк боҙ, аяһаңсы:*
*Тайҙырмайса, ярылмайса,*
*Бер аҙға сыҙаһаңсы!..*

*Елкәлектән эләктереп,*
*Йәтешләп, аҙлап-аҙлап,*
*Көс-хәлгә һөйрәп сығарҙы, —*
*Һыу, тир аға субырлап.*

*Ҡыймылдарлыҡ әмәле юҡ —*
*Бары шаҡылдай теше.*
*Ҡулы турайырлыҡ түгел, —*
*Сәкән таяғы ише.*

*Икеһен дә оҙаттылар*
*Булған ғына мунсаға;*
*Аҙаҡ хәмер йотторҙолар*
*Һыуыҡтарын ҡыумаға...*
*Боҙҙан алды, утҡа һалды, —*
*Шайтан һыуы тиҙәрме?!.*
*... Йылдар үтер...*
*Был һыу йотор*
*Батыр кеүек ирҙәрҙе.*

## 11. Мәктәп юлында

*Төнө буйы ыжғырҙы ел —*
*Көрттәрен өйҙө генә.*
*Шомландырып йоҡоһоҙҙо,*
*Һуҙҙы бер көйҙө генә.*

*Мейестә ут дөрләп яна,*
*Ни хәлдәлер ҡышҡы юл?!*

*Әсә мейес ҡаршыһында —*
*Уйы менән тышта ул.*

*Йоҡлаһынмы?*
*Икеләнде, —*
*Бигерәк әсе буран.*
*Ә тегеһе*
*ағаһынан*
*Иртәрәк килеп торған.*

*Эй-й, йоҡоһоҙ!*
*Тас атаҡас!*
*Турғайы һары таңдың, —*
*Ғилем ағайыңдан былай,*
*Уҡыу тип ҡанатландың.*

*Ярай, баҫылғандай, буғай,*
*Иншалла, бирешмәҫтәр!*
*Әсә утты ҡағаштырҙы, —*
*Көндәлек бер иш хәстәр.*

* * *

*Иҫнәй-иҫнәй, ашап-эсеп,*
*Барлап кәрәк-яраҡты,*
*Батыр менән Фәнзил сыҡты*
*Юлға алып сыраҡты.*

*Кәрәсинде нык һеңдергән*
*Тығыҙ уралған йомғаҡ.*
*Тимер таяҡ башында ул*
*Үҙе бер суҡмар һымаҡ.*

*Юлды ла яҡшы яҡтырта,*
*Ут булғас, күңелле лә.*
*Алты саҡрым мәктәп юлы*
*Бер тирләм йәйәүлегә.*

*Егермеләп ҡыҙ-малайҙар,*
*Ҡош тубылай ойошоп,*
*Ҡышҡы селлә һыуығында*
*Бара йомаҡ ҡойошоп:*

*«Был донъяла ете юҡ?..»*
*— Йомортҡаның йөйө юҡ...*

— Ҡуккә менер баҫҡыс бармы?..
Менһәң, төшөр арҡан юҡ!

— Өй булмаһа, көйөң юҡ...
— Үҙе юҡтың күҙе юҡ!
— Эй, малайҙар, юҡтың юғы
Яҙа киткән һыйғыр уҡ!..

Туңғайынды артылғанда
Инде тамам яҡтырҙы.
Сағанлыҡҡа еткәс, Батыр
Сыраҡ һабын ҡалдырҙы.

Ҡайтҡанда кире алыр ул, —
Кәрәктең-ауыры юҡ!
Иртәгә лә ҡараңғыны
Сигендерер ялҡын-ут.

* * *

Әҙәбиәт диңгеҙендә
Илатыр ҙа, көлдөрөр —
Рим Хәйри улы
мәктәптә
Тылсымдың нәҡ үҙелер.

Һиҙмәйһең дә ваҡыт барын, —
Бар дәрестәргә дәрес:
Йылт итеп ҡала...
Тап шулай
Эшләнһен ине һәр эш.

Бөгөн ҡушты «Бишенсе»гә
Ҡарарға шиғыр яҙып.
Әйтте:
кәрәк быныӊ өсөн
Һәләт өҫтөнә зауыҡ.

Фәнзилдең күҙе алдынан
Торналар үтте осоп;
Зәңгәр күктә бер аҡ һыҙат
Тынлыҡты бара ҡурсып.

Шул тынлыҡты ишеттерер
Һүҙ табып була микән?!.

*... Күҙҙе ниҙер ҡысыттыра,*
*Күкрәккә ҡуҙҙар төшкән.*

* * *

*Тәнәфестә ҡыҙыҡ уйын:*
*Ҡар батшаһы — тау батша!*
*Кем тәгәрәмәйсә аҫҡа*
*Оҙаҡ ҡалала башта.*

*Фәнзилдә көс, таһыллыҡ бар,*
*Йылъырлыҡ та етерлек,*
*Ялтанып та тороп ҡала, —*
*Матадор был тиерлек.*

*Тик «үгеҙҙәр» берәү түгел, —*
*Күмәктәр шул, күмәктәр...*
*Ҡыҙа уйын —*
*батша башта, —*
*Аҫҡа кемдәр түкмәсләр?*

*...Ерле юҡтан намыҫланып,*
*Йоҙроҡланды ла Дамир*
*Эскә бирҙе...*
*Аһ!..*
*Күк ауа, —*
*Тын тартыуҙары ауыр.*

*(Бурҫлаҡ Дамир,*
*һәр класта*
*Ултырып икешәр йыл,*
*Фәнзилдәрҙең араһына*
*Эләккәйне шул быйыл.)*

*— Кеме шулай һине, мырыс?!.*
*Батыр икән...*
*Һын ҡатҡан...*
*Ә Дамир,*
*шырҙы ебәреп,*
*Табанын ялтыратҡан.*
*Сәм дә бар, ъәрлек тә килә, —*
*Фәнзил сәйнәне уртын...*
*Тик Батыр, шундуҡ асыҡлап,*
*Бурҫлаҡтың алды ҡотон.*

*Бынан аҙаҡ һис бер кемдән*
*Күрмәне Фәнзил йәбер.*

*Арҡа терәр ағай булыу —*
*Һәр кемгә теймәҫ ҡәҙер.*

## 12. Туй

*Туй килә!..*
*Ҡыңғырау сыңы*
*Тарала алыҫ-алыҫ.*
*Кемгәлер был моң дәрт өҫтәй,*
*Кемгәлер һала һағыш.*

*Батыр өйләнә.*
*Ҡәләше*
*Айҙан ғына төшкәнме?*
*Шундай һылыуҙар булыуын*
*Күрһәтергә ҫҫкәнме?*

*Фәнзил өсөн Йөҙөм еңгә —*
*Тулышып бешкән емеш.*
*Ағай — һайлам уҡтай,*
*еңгә*
*Һаҙаҡ булырға тейеш.*

*(Һоратырға барғанда ла*
*Уны ҡалдырманылар.*
*Йәнәһе лә, унда аҡҡош,*
*Бында мәргән аусы бар.)*

*Егет аҙағыраҡ белер:*
*Туй күлдәге сер икән, —*
*Ғүмерҙең йондоҙло мәлен*
*Мәңгелектәй күр икән!*

*Ҡәйнеш тә ул, йәш ҡоҙа ла —*
*Өлгөрә барыһына:*
*Ҡоҙасаларға күҙ ҡыҫа —*
*Туй иһә ҡыҙа ғына.*

*Эй, һары бал, һары бал да,*
*Һары балды кем эсер?*
*Йөҙөк ҡашы ҡыҙ үҫтергән*
*Ҡоҙа-ҡоҙағый эсер.*

*Ҡырлы стакан мөлдөрәмә —*
*Мөлдөрәмә шатлыҡтар.*
*Тик әсәйҙең ҡарашында*
*Бер аҙ ғына һағыш бар.*

*Уйлана шул...*
*Туйҙар уҙа,*
*Аҡ күлдәктәр ҙә туҙа,*
*Гөлләмәләр урынына*
*Донъя сәнскәген һуҙа.*

*Ҡулдарыңды ғына түгел*
*Күңелеңде яралар;*
*Ысын һөйөүҙәрең генә*
*Яраларҙан аралар.*

*Һөйөүҙәрҙе һаҡлай алыр*
*Йөрәкле булған ғына...*

*Баш ҡоҙаны сығарҙылар*
*Туйҙың ҡап уртаһына.*

*Байыҡ үҙеме тиерһең! —*
*Торош,*
*һыны,*
*килбәте.*
*Һалмаҡ ҡына баҫа ҡоҙа,*
*Ҡоҙағый ҙа һиммәтле.*

*Йыуасаһын сәсеп үтте,*
*Йыртышын да өләште.*
*Төп ҡоҙағый йомартлығы*
*Туй һыйына тиңләште.*

*Туй күрке — йыр-бейеүҙә шул,*
*Уйнап-көлөп йөрөүҙә;*
*Һыналған йолалар аша*
*Бер-береңде белеүҙә.*

*Һандыҡты —*
*килен бирнәһен*
*Һарыҡ хаҡына асып,*
*Бүләктәр биреп-алышып,*
*Аралар ҡоҙалашып;*
*Аҡ теләк менән йәштәрҙе*
*Оҙатҡас аҡ киләткә,*
*Таң алдынан ятыштылар*
*Барыһы бер халәттә.*

## 13. Хәрби бурыс

*Поляр төндәр...*
*Диңгеҙ тулҡынының*
*Електәргә ұтә һыуыҕы.*
*Хәрби бурыс ұтәп, эсминец ҡайта,*
*Альбатростар оса ҡыйылып.*

*Бик көсөргәнешле ҡүнекмәләр*
*Үткәндән һуң*
*күптәр йоҡола.*
*Фәнзил генә*
*төньяҡ һаҙағайын,*
*Мөғжизәләй күреп,*
*төн сыға.*

*Сеү...*
*Арттараҡ*
*ниндәй шомло шәүлә*
*Ҡильватерға ятты...*
*Бик оҡшаған*
*Дошман «суртан»ына буй-һыны.*
*Нейтраль һыуҙа*
*дошманға йөҙгә-йөҙ?*
*Асмаҫ тимә диңгеҙ ҡуйынын.*

*Рубкалағы вахтенныйҙы күреп,*
*Хәбәр һалды Фәнзил, ашығып.*
*Шундуҡ эсминец хәрби хәлгә килде, —*
*Утҡа ҡаршы дауыл асырлыҡ.*

*Белә Фәнзил:*
*эфир тулы хәбәр*
*Оса алыҫтағы ярҙарға.*
*Ике караптың да капитаны*
*Приказ көтә...*
*Ә сәс ағарған.*

*Утһыҙ дуэль күпме дауам итте —*
*Мәңгелеккә илтер мәл микән?*
*Фәнзил генә торна сыңрауҙарын*
*Ишеткәндәй булды мәшриҡтән.*

*Тулҡындарға сумды дошман «суртан», —*
*Тобаһына ҡарай юл алыр...*
*Ә мәшриҡтә ал таң*
*төн ҡараһын*
*Диңгеҙ һыуҙарында йыуалыр.*

## 14. Университет

*Фәнзилгә лә, Әмиргә лә*
*Гел өлгө булды Ғилем.*
*Уға һәр саҡ тартылдылар —*
*Тормошта кәрәк белем.*

*Ике уйламайса, Фәнзил,*
*Ҡайтыу менән флоттан,*
*Документын вузға илтте*
*Тельник[9] һалып тормаҫтан.*

*Әмир асты Питербурҙың*
*Хәрби диңгеҙ мәктәбен, —*
*Һыу аҫты кәмәләрендә*
*Һаҡлар илдең сиктәрен.*

*Фәнзилгә артылыу бурыс*
*Рухи осош үренә,*
*Шиғыр, ғилем аша үтеү*
*Һүҙ тылсымы серенә.*

*Иң тәүҙә һүҙ булған, тиеп*
*Әйтелмәгән тикмәгә:*
*Һүҙ — күпер ул иртәгәгә,*
*Һүҙ — асҡыс ул үткәнгә.*

*Һүҙ — бөйөк!*
*Шул бөйөклөктө*
*Аңлайһы ла һанлайһы.*
*Һүҙ — бейек!*
*Шул бейеклекте*
*Яулайһы ла данлайһы.*

*(И, нараси бер ҡатлылыҡ!*
*Һүҙҙә күрҙең яҡтылыҡ.*
*Кем уйлаған:*
*һүҙ артында*
*Боҫҡанын ҡараңғылыҡ...)*

* * *

*Төркөмдөң комсоргы Сәғит*
*Үткәрә бөгөн «йыйын».*
*Ҡемдер өсөн был — күҙ буяу,*
*Ҡемдер өсөн был — уйын.*

---

[9]*Тельник — тельняшканы матростар шулай исемләй.*

*Комсомолға алынырға*
*Йөрөй икән Сөләймән.*
*— Ниңә мәктәптә инмәгән?*
*— Райком аша үтмәгән!*

*— Сәбәбе?*
*— Һорағандар:*
*«Һиңә нигә комсомол?»*
*— Көтөү менән йөрөгәндәр*
*Һис ҡасан аҙашмай ул...*

*«Мал көтөүенә тиңләне!» —*
*Кире борғандар быны.*
*Хәҙер иһә йүнле ерҙә*
*Барыһы партиялы.*

*— Инде нисек яуапларһың:*
*Комсомол нигә һиңә?*
*— Устав ҡушҡанса йәшәргә...*
*(Партияға инергә...)*

*— Устав талабын үтәүҙәр*
*Булмаҫмы ҡыйынырак?*
*— Корчагиндай сынығырбыҙ!..*
*(Хәҙер беҙ аҡыллыраҡ...)*

*— Ярай, оҙаҡҡараҡ китте...*
*— Һәйбәт егет...*
*— Алайыҡ!*
*(Һыра эсерәм тигәйне —*
*Һуңға, тием, ҡалмайыҡ!)*

*— Ҡаршылар юҡ? Юҡ!*
*Битарафтар?*
*— Улар*
*йыйылышҡа ҡалмаған...*
*— Ҡотлайбыҙ һине, Сөләймән!*
*(Арындырҙыҡ «хата»нан.)*

* * *

*— Һорауҙар бармы? —*
*доцентҡа*
*Хәҙер лекция бәлә!*
*Клёш салбарлы бик йыш ҡына*
*Ҡуя уңайһыҙ хәлгә.*

*Бына тағы тороп басты, —*
*Юҡтыр шып-шым ҡалғаны:*
*— Ил тарихын әҙәбиәт*
*Күҙаллата аламы?*

*— Әлбиттә, иҫәпкә алһаҡ,*
*Был төрҙөң үҙгәлеген...*

*— Эйе, әҙип тормоштағын*
*Үҙенсә сағылдыра...*
*Әгәр ҙә ул хеҙмәт итһә*
*Власҡа, идеяға?*

*— Был иҫкәрмәләрҙе лә*
*Иҫәпкә алыу кәрәк...*

*— Иҫкәрмәләр күбәйгәндә*
*Ҡағиҙә боҙолмаймы?*
*— Уйлашайыҡ...*
*Был һорауың*
*Айырата ҡатмарлы...*

*Яуап эҙләү дауам итә*
*Ятаҡтағы бүлмәлә.*
*Уҡыған, ишеткән, күргән*
*Һалына бер бизмәнгә.*

## 15. Йәнде бөтәйтеү

*Лекцияға ваҡыт еткән —*
*Бара йүгерә-атлап,*
*Бөйөктәрҙең әйткәндәрен*
*Эстән ҡабатлап-ятлап.*

*Аҙым эре, мәртәбәле —*
*Юл бирә барса халыҡ:*
*Гүйә, оло карап килә,*
*Сал тулҡындарҙы ярып.*

*Сигеү сигәме ни: бер ҡыҙ*
*Юрғалай юл ситләтеп,*
*Иңендәге сәс болотон*
*Елдәрҙән иркәләтеп.*

*Йәшенләне ап-аяҙ күк —*
*Тәндән ток үттеме ни?!*
*Ғүмер буйы ярты йәнең*
*Был мәлде көттөмө ни?!*

*Уҙа бирҙе...*
*Үҙлегенән*
*Күҙ һалды ҡайырылып.*
*Ҡарашҡа ҡараш ҡағылды –*
*Бармы көс айырырлыҡ?!*

*«Йә, Хоҙа!..*
*Минең өлөшкә*
*Күктәрҙән төшкән көмөш!..»*
*Ҡойолдо торналар сыңы –*
*Бар тирә-йүн моң, имеш...*

* * *

*– Ҡыҙҙар!*
*Фәнзил шиғыр яҙған:*
*«Ирендәрең, иренең!*
*Татымағанды татыным, –*
*Иренем мин, иренем...»*

*Бар(ы)һы Ләйсәнгә төбәлде,*
*Көнләшеп тә ҡыҙығып,*
*Ә тегеһе башын баҫты,*
*Йөҙөн баҫты ҡыҙыллыҡ.*

* * *

*«Шиғриәт шишмәләре»нең*
*Ташып урғылған мәле:*
*Ҡыҙыу бәхәс бара...*
*Доцент*
*Тоталмай дилбегәне.*

*– Шиғырҙың йәне образда:*
*Юҡ икән – юҡ шиғырың!..*
*– Асыш яһай... Аксиома...*
*– Ныҡ тапалған был уйың.*

*– Тапалған, тиеүең үҙе*
*Йөҙөнсөгә тапалған!..*
*– Нимә? Әйтмәксеһегеҙме:*
*«Беҙгә бер ни ҡалмаған?»*

*– Йәмәғәт! Туҡтағыҙ әле!*
*Әйткәнде ишетәйек:*
*Тапалған тип, хәҡиҡәтте*
*Юл ситенә этмәйек.*

*Шиғыр түгел, хатта роман*
*Образһыҙ — тере мәйет!*
*Әммә фекерһеҙ ҙә булмай...*
*Йә, ни әйтерһең, Сәғит?*

*— Фәнзил менән килешмәйсә*
*Мөмкин микән — белмәйем?*
*Уң ҡулдың да, һул ҡулдың да*
*Булыуын мин теләйем...*

*— Баш эшләһә, йөрәк типһә,*
*Йондоҙ янһа күгеңдә...*

*— Сеүегеҙ!..*
*Шиғыр ярала...*
*Сере ҡалһын үҙеңдә...*

* * *

*Был «профессор» яҙмалары*
*Бөткән туҙып, һарғайып...*
*Декан булып йөрөгәс ни, —*
*Һүҙ әйталмай халайыҡ.*

*Йә, ярай, ваҡыт ҡәҙерле, —*
*Эштәреңде барлап сыҡ.*
*Осош өсөн, башың етһә,*
*Һәр бер мәлең майҙансыҡ.*

*Ятаҡта, китапханала*
*Булғанда яҡшыраҡ та.*
*Тик «профессор» ҡаты ҡуллы, —*
*Тикшереп аптырата.*

*Эш бир, китап исемлеген,*
*Ә һуңынан талап ит!*
*Ана, Заһир Вәли улы*
*Тап шулай уҡыта бит.*

*Һорауҙарыңа яуапты*
*Белһә лә әйтә һалмаҫ.*
*Йүнәлеш бирер, ҡул һуҙыр, —*
*Буш һүҙ менән «алдамаҫ».*

*Факультетта берәү шул ул, —*
*Үәт профессор, исмаһам!*
*Ҡыҙғаныс, коллегалары*
*Үсеүенән туҡтаған.*

*Ҡырҡа ҡарар итте Фәнзил:*
*Ваҡыт бушҡараҡ уҙа...*
*Әлегә һуң булмаҫ борон*
*Күсергә башҡа вузға.*

* * *

*Данлы Питер!*
*Һәр ташында*
*Шанлы тарих эҙҙәре,*
*Мәҙәнилек тамғалары,*
*Рухи осош билдәһе.*

*Мәрмәр һәйкәл, суйын күпер,*
*Атыла фонтандары.*
*Мәлде граниттан юнғандар, —*
*Тарихтан уҙғандармы?!*

*Универ, китапханалар —*
*Белем-ғилем һарайы.*
*«Йә, ни эш ҡыйратырһың?» — тип*
*Ломоносов ҡараймы?*

*Ял мәлдәре музейҙарҙа,*
*Нева буйы, паркта,*
*Ә тәүлектең ҡап яртыһы*
*Конспектҡа, китапҡа.*

*Белем алыу — ҡойо ҡаҙыу.*
*Бар ҡоралың — бер энә.*
*Тик етергә генә яҙһын*
*Ниәтләгән ереңә.*

*Таҙа һыуынан ғәм халыҡ*
*Һыуһындарын ҡандырыр.*
*Йәшәү йәме, тормош тәме*
*Мотлаҡ шулай табылыр.*

* * *

*Данил Василич атайҙай,*
*Оло хәстәрлек менән*
*Диплом яҙғанда өйөнә*
*Ихлас саҡырҙы гелән.*

*Аспирантураға бәйле*
*Һүҙҙе үҙе тағатты:*
*«Икеләнмә!*
*Һулышың киң, —*

Ҡирер кәрәк ҡанатты!»
Ҡирер кәрәк...
Ҡанатлының
Яҙмышы — ҡанатында.
Ер менән күк араһында, —
Осошто яратыуҙа.

## 16. Һынау

Ғилем ауылдан беренсе
Техникум тамамланы.
Мастер булып эш башланы, —
Еңелде һайламаны.

Уның тилбер ҡул йылыһы
Яғылды күпме йортҡа?!
Үҙе иһә йәшәй бирҙе
Бараҡтағы һыуыҡта.

Әммә зарлана белмәне.
Барына шөкөр итеп,
Ситтән тороп вуз бөтөрҙө, —
Иң әүәл — белем, тиеп.

Берҙән-берәү...
Гел беренсе... —
Һынауҙарға һынауҙыр.
Был һынауҙа
бик-бик күптәр
Һынмаҫ ерҙән һыналыр.

Аҡрын-аҡрын тамыр йәйҙе
Юҡтан да ҡупырайыу,
Танау буйҙарынан ҡарау,
Ҡояштан һуҡырайыу.

## 17. Ҡанат киргәндә

Ҡафедра ултырышында
Һыпырып ялтас башын,
Мөдир Нәзир тырышһа ла
Яҙалмай ялбыр ҡашын:

— Сессияның һөҙөмтәһе
Насар түгел-түгелен,
Тик ҡай берәү «биш»кә һаран...
(Белмәй кеше күңелен.)

Балды йәлләмә!
Студенттар

*Ҡитерҙәр ҡанатланып.*
*Ҡафедраның да йөҙ яҡты...*
*(Йөрөрбөҙ яҡшатланып.)*

*— Ҡоллегалар!*
*Студенттарға*
*Ҡуяйыҡ ғәҙел талап...*

*— Абыҙгилдин!*
*Яратаһың*
*Аҡыл өйрәтеү яғын.*
*Башың ингән,*
*әммә вузға*
*Инмәгән бит аяғың.*

*— Ишеккә ҡыҫылыуы бар...*
*— Тупһаға эләгеүе...*
*— Эште эшләп ҡарамайса,*
*Еңел ул һөйләнеүе.*

*— Беҙҙең төп ҡоралыбыҙ — һүҙ!*
*Башлайыҡ эште һүҙҙән.*
*Проблемаларҙы хәл итеү*
*Торор, әлбиттә, беҙҙән!..*

*Мөдир ялтас башын ҡыҫа*
*Йөнтәҫ ҡулдары менән:*
*Яйы сығыр...*
*Ҡотолорға*
*Кәрәк был үҙһүҙленән.*

*Танау аҫты ла кипмәгән —*
*Күпте ала үҙенә...*
*Ҡафедранан ҡолаҡ ҡаҡһаң,*
*Кем инде һин —*
*кем генә?!*

*Бөгөнгө алғыр заманда*
*Һүҙҙән эшкә күс, имеш...*
*Өлөшһөҙ ҡалмайым тигән*
*Бүре булырға тейеш.*

*Яйлай белһәң, ялҡау студент*
*Һауын һыйырыңа тиң!*
*Ата-әсә: «Бала!..» — тиеп*
*Итәк ҡырҡыр, ялғар еңд.*

## *18. Инешкә ҡайтыу*

*Кендек ҡаның тамған ергә*
*Һәр саҡ тартыла йәнең;*
*Яҡты һағыштар ҡамалай,*
*Яҡтыра таңғы мәлең.*

*Юл саңын баҫырлыҡ ҡына*
*Һибәләп килә ямғыр.*
*Ялан аяҡланып йүгер —*
*Тауҙарың һине таныр.*

*Бесән сапҡан болондарҙан*
*Йәшлек осоп барғандай,*
*Үтәгән һыртында*
*ниҙер*
*Онотолоп ҡалғандай.*

*Һибәләп кенә килде лә*
*Тауҙарҙы япты болот.*
*Үҙ инешенә ҡайтҡандыр*
*Тамсылар*
*ямғыр булып.*

* * *

*Батыр белеп бөткән:*
*Фәнзил*
*Ҡунаҡҡа ҡайтҡан һайын*
*Йә Таллыға күтәрелә,*
*Йә урай Бүләк тауын.*

*Йәйәү йөрөй, һис йыбанмай —*
*Иртән китһә, кис ҡайта.*
*Шуға аңғартып ҡалдылар:*
*«Кеше йыябыҙ ашҡа».*

*Мансур баҡсаһын буйланы,*
*Сейәлеккә һуғылды.*
*Ә тегеһе, үҙ итепме,*
*Битен-ҡулын һыҙырҙы.*

*Сейәһенән ауыҙ итеп,*
*Шишмәһенән һыу эсеп,*
*Сирәмдәрендә аунаны, —*
*Танһығым ҡанһын, тиеп.*

* * *

*Батыр —*
*атай нигеҙендә*
*Һаҡлай ырыу усағын.*
*Ҡасан ҡайтма —*
*ҡаршы ала*
*Ихлас йәйеп ҡосағын.*

*«Мырыстарым — ҙур кешеләр! —*
*Яурындарынан ҡаға, —*
*Һирәгерәк ҡайтаһығыҙ,*
*Ә ғүмер һыуҙай аға...»*

* * *

*Фәнзил ҡайтыу шатлығынан*
*Мәжлес ингән ғәҙәткә.*
*Батыр шулай мырысына*
*Ҡәҙер-хөрмәт күрһәтә.*

*Яҡын туғандарҙы йыйып,*
*Күрше-күләнде алып,*
*Батыр оло табын ҡора,*
*Көрәйткән һарыҡ салып.*

* * *

*— Ғәле абзый булалыр ул?*
*— Тауыш иттек итеүен...*
*Тик, үҙенә ялланғандай,*
*Ҡарай башмаҡ көтөүен.*

*— ?!.*

*— Быйыл яҙҙан эре малын*
*Еткерҙе егермегә.*
*Берәйһенә ҡушһа була, —*
*Юҡ инде — киреләнә.*
*Йәнәһе,*
*йәтешлеһе юҡ, —*
*Йыйын ялҡау, эскесе...*
*Көнө-төнө үҙе саба, —*
*Юҡ иртәһе, юҡ кисе.*

*Үҙгәрҙе ул...*
*Имәнлегә*
*«Килен» булып төшкәндән.*

*Әйтә, тимә, көнләшкәндән,*
*Әйтә, тимә, эскәндән.*

*Йә, кем мал,*
*сабынлыҡ тип,*
*Ауылын алыштыра?!.*
*Ә ул ирлек-егетлеген*
*Һалды аяҡ аҫтына...*

*Ул да түгел...*
*Өндәшкәйнем:*
*«Бер орғасы тана бир...»*
*Әйтте:*
*«Әҙәм малы башҡа, —*
*Булғанда ла ҡаны бер...»*

* * *

*Фәнзил һорай ауыл хәлен,*
*Яуап тота ил өсөн.*
*— Миңлебай ысҡындыра бит*
*Ишектәрҙең элгесен...*

*— Сит-яттар ҡалъя һонһа ла,*
*Бәйләп ҡаптырмаҫ тимә!*
*Үҙебеҙҙең ҡулдар барҙа*
*Ҡайҙандыр ярҙам ниңә?!.*

*— Сәүит ҡайышты нык ҡыҫты,*
*Ҡорҙо тимер шаршауын...*
*— Ә хәҙер өйҙә ел уйнай...*
*— Тапмаҫһың араҡыһын...*

*— Бикләнеп нисек йәшәмәк?!*
*— Бүре ҡуян буламы?!*
*— Ярай, торнала ҡанат бар*
*Күктәргә ашырғаны.*

*— Ағай-эне, был төйөндәр*
*Сиселмәҫлек төйнәлә.*
*Былдай саҡта ил-йорт борон*
*Йыйылған ҙур тирмәгә.*

* * *

*— Ҡәйнеш, һин әйтеп ҡарәле —*
*Абзыйың бит һуң ара,*

*Ишбулды менән бергәләп,*
*Эскелә көн уҙғара.*

*Тегеһе әрменән ҡайтты, —*
*Бер ҙә юҡ айнығаны.*
*Донъя көтөргә кәрәк тә,*
*Ә бесән сабылманы.*

*Тракторын да алһалар...*
*Ә ул уйлап та бирмәй!*
*Эстениһә, донъя теүәл, —*
*Бер ни ишетмәй, күрмәй...*

*— Әйткәнем бар инде, еңгә,*
*Вәғәҙәһен дә алам...*
*(Был һаҙлыҡҡа эләккәндәр*
*Әллә, тим, тамғаланған.)*

*Өмөтһөҙ — шайтан...*
*Кешенең*
*Барыһы ла үҙенән:*
*Һуңғы сиккә етмәй*
*үҙыу*
*Сират күперҙәренән.*

* * *

*— Абзый!*
*Күп тапҡыр һөйләштек,*
*Булдыҡ наркологта ла.*
*Беләһең бит: был эскенән*
*Ауыл, ил-йорт тарҡала.*

*Һаулығыңды бөтөрәһең...*

*Уйламаһаң үҙеңде,*
*«Балаларым хаҡына!» — тип,*
*Туҡтал!*
*Ит ирлегеңде.*
*Ырыу-затта булмаған хәл...*
*Ә үҙең Салауаттай!*

*— Ҡисәгенән ҡалды микән? —*
*Тамаҡ кипкән, баш сатнай...*

## 19. Әмир

*Айҙан ашыу булыр:*
*океан төбөн,*
*Йылға буйы күреп,*
*үҙ итеп,*
*Ҡойроғон да һелкмәй*
*«суртан» шыуа,*
*Бар балыҡтарҙы ла өркөтөп.*

*Диңгеҙҙән дә тиңһеҙ көскә эйә*
*Уран ғына атлы яғыулыҡ.*
*Вагон, цистерналар кәрәк түгел, —*
*Шырпы ҡабына ла һалырлыҡ.*

*Хәрбиҙәргә тыуған йорт тиерһең, —*
*Уртына ут йотҡан был «суртан».*
*Тотош бер ҡалаңдан көл ҡалдырыр,*
*Ауыр бәшмәгеңде ултыртһаң.*

*Старлей*[10] *Әмир, вахтаһын тапшырып,*
*Ҡойкаһында һәлмәк тирбәлә.*
*Күҙ алдында ғына Бүләктауы,*
*Күҙле Шишмә йылтлай эргәлә.*

*Күбәләктәй еңел Гөлгөнәһе,*
*Кисеп ап-аҡ сәскә диңгеҙен,*
*Көлә-көлә, ҡоралайҙай елә, —*
*Асып ҡуйып елгә иҙеүен.*

*Әмир уны ҡыуа...*
*Кинәт диңгеҙ*
*Атты өҫкә ажар тулҡынын.*
*Аҡсарлаҡтай осоп,*
*койкаһынан*
*Килеп төштө егет,*
*йолҡоноп.*

*Ҡолаҡтарҙы ярҙы әсе тауыш, —*
*Төштәр татлы, өндәр — аяныс:*
*«Суртан» тәнен көҙәндәр йыйыра,*
*Ә тыуған яр алыҫ —*
*бик алыҫ...*

---

[10]*Старлей — өлкән лейтенант.*

*Реакторлы отсек, гүйә, ситлек,*
*Унда үрһәләнә аждаһа.*
*Ут-шайтанды кире шешәһенә*
*Индерһәңсе үҙең, эй, Алла!*

*Үҙе ҡом бөртөгө булған атом*
*Өскә, дүрткә, меңгә ярыла,*
*Үҙ тиреһенә лә һыймайынса,*
*Ғифрит-дейеү бәйҙән арына.*

*Приказ урынлымы?*
*Ә үтенес?*
*Һалырғамы әллә йәрәбә?*
*Ә һәр секунд —*
*мәңгелектең мәле*
*Һуңғыһылай тере йәндәргә.*

*Махсус кейем тиҙ-тиҙ кейә һалып,*
*Ҡулға алып кәрәк-ярағын,*
*Әмир үтте реактор эсенә*
*Имләр өсөн уның «яра»һын.*

*Һәрмәп тапты тамыр-торбаларҙы,*
*Һә тигәнсә вентиль боролдо.*
*Әммә керпек ҡаҡҡан араларҙа*
*Үлемесле нурға ҡойондо.*

*Гүйә, йәнә түңкәрелде диңгеҙ —*
*Баштан аша тулҡын ҡапланы...*
*Торна сыңын марш итеп, Әмир*
*Мәңгелеккә ҡарай атланы.*

* * *

*Алып ҡайттылар егетте*
*Асылмаҫтай табутта.*
*Һүрәте генә күренә*
*Ус аяһы ярыҡта.*

*«Рәсәй Геройы» таҫмаһын*
*Наҙлы ел үтә һөйөп.*
*Күк тә,*
*Ер ҙә*
*кешеләрҙән*
*Нимәлер көтә кеүек.*

*«Сәңгелдәгем ауыр, Әсәй!*
*Бәцелтмә, —*
*етмәҫ көсөң...*
*Ҡисер мине...*
*Ҡуккә йәнем*
*Еп-еңел осһон өсөн...*

*Гөлгөнәм!..*
*Йәнеңде өҙмә, —*
*Рухҡынам осһон бейек:*
*Ерҙә керһеҙ һөйөү барҙа*
*Хатта бер мәл мәңгелек!*

*Ҡан-ҡәрҙәштәр!*
*Һыҡранмайса,*
*Ҡутәралһаҡ ил йөгөн,—*
*Яҙмыштар менән яҙырбыҙ*
*Йәшәүҙең бөйөклөгөн...»*

*«... Ҡолонсаъым!*
*Ҡинйәм минең!!!»*
*Иңрәү ҡалды быуылып...*
*Әсә өсөн Ҡук иңрәне,*
*Түгелде ямъыр-болот.*

*Эстән һыҙҙы...*
*Тышҡа хатта*
*Сыъарманы төтөнөн.*
*Тиҙ биреште...*
*Әсә-бала*
*Яҙмыштары бер бөтөн.*

## 20. Тормош асылдары

Бер ҡатлы йән!
Буламы һуң ҡара төндө көн яһап,
Иң изге уй-ниәттәрең янһа ла урғып-ҡайнап.
Маҡсатыңа ынтылаһың, ныҡышмал ҡабаланып,
Намыҫ тигән тоғро дуҫты юлдашҡа һайлап алып...

(Н.А.Некрасов «Белинский иҫтәлегенә»)

*Ғилми кәңәш.*
*Көн тәртибе.*
*Мәсьәлә берәү бары:*
*Декан һайлау...*
*Факультетта*
*Болоттар ҡабаръаны.*

*Ҡабарыр ҙа, йәшенләр ҙә, —*
*Сафлана донъя шулай.*

*Тик кемгәлер*
*үҙгәрешһеҙ,*
*Йәшенһеҙ йәшәү ҡулай.*

*Әммә әҙәм йәшендән дә*
*Таба йәшенеү юлын.*
*Ышыҡтан тороп күҙәтә*
*Ғәрәсәтен, дауылын.*

*Ана Нәзир Вәзир улы*
*Ҡайҙа табан һуҡтыра:*
*— Заманыбыҙға ярашлы*
*Ике кандидатура!*

*Яҡшынан яҡшыны эҙләү*
*Кәрәкмәй, коллегалар.*
*Деканыбыҙ бына тигән, —*
*Шәкертте йәне һанар.*
*Утыҙ өс йыл эшләгәнде,*
*Йәнә лә эшләр әле...*
*— Эйе...*
*— Шулай!..*
*— Дөрөҫ әйттең, —*
*Баш ҡаҡты эшнәләре.*

*— Йәмәғәт!*
*Беләһегеҙ бит:*
*Икенсе хәҙер тормош.*
*Донъя тиҙлеген үҙгәртте, —*
*Тәүлеге айға торош.*

*Ҡусәгилешлек һаҡланһын,*
*Йәштәргә ышанайыҡ.*
*Дилбегәне ваҡытында*
*Уларға тапшырайыҡ.*

*Абыҙгилдин һәр йәһәттән*
*Тап килә:*
*үйлай төптән.*
*Питер мәктәптәрен үтте,*
*Һүҙ айырылмай эштән.*

*Тормош талабына яуап*
*Булыр*
*уны һайлаһаҡ.*
*Ғилем-фәнде, уҡыу яғын,*
*Ҡиләсәкте үйлаһаҡ...*
.............................................

*Фәнзил түгел,*
*хатта остаз*
*Белмәй ине асығын:*
*Вазифаның ай элгәре*
*Долларға һатылыуын...*

* * *

*Һирәгәйә Урал урмандары, —*
*Ҡайҙа бүреләргә ҡасыр шырлыҡ?!*
*Әҙәм ҡулы төпкөлдәргә үтә, —*
*Ә тоҡомдо һаҡлай бары тынлыҡ.*

*Хатта сүл бүреһе ышыҡ эҙләй, —*
*Еткән ул да Урал итәгенә.*
*Ырымбурҙың иңләп далаларын,*
*Килеп сыҡҡан Таллы битләүенә.*

*Тауҙар менән дала ҡауышҡан ер —*
*Күҙгә күренмәгән бер сик кеүек.*
*Сал Уралдың урман бүреләре*
*Һаҡлай уяларҙы бишек күреп.*

*Ана тағы, ахыры, көтөп ятҡан, —*
*Ҡапыл ябырылды һоро ҡойон:*
*Темеҫкенгән дала януарына*
*Юҡтыр бында һыйынырҙай урын.*

*Инабатһыҙ бер йомғаҡтай булып,*
*Нәҫелдәштәр хәтәр өҙөшәләр.*
*Бер-беренә тороштармы икән?*
*Ниҙе табып, ниҙе бүлешәләр?*

*Көтмәгәндә торна сыңрауҙары,*
*Йәшенме ни,*
*үтте күкте телеп.*
*Тертләне лә, тағатылды йомғаҡ, —*
*Ике яҡҡа сапты ике кейек.*

## ***Эпилог***

*Уралыма арҡа терәгәндә,*
*Сыңрағанда торна күктәремдә,*
*Йөрәк һүҙҙәремде әйткәнемдә*
*Мин йәшәйем әле.*
*Мин тере!..*

**Июнь 2009 — май 2011.**



Гүзәл
СИТДИҠОВА

# КӨҘГӨ ИНЙӘР

## *Мираҫ*

*Ергенәһе ҡәҙерле бит,*
*Баһалы бит халҡыма.*
*Ҡуҡҡә осҡанда ла, ерҙән*
*Ҡеүәт алып ҡалҡына.*
*Ни кисерһәк — еребеҙҙә,*
*Халҡым һүҙенән беләм:*
*Ул — йығылып ятып илай,*
*Тәгәрәп ятып көлә.*
*Бәхете лә — ошо ерҙә,*
*Ләхете лә — ошонда,*
*Ҡанбаба ҡаны һуғарған*
*Урал тигән йортонда.*
*Ҡайғылары еңелерәк,*
*Шатлыҡтары татлыраҡ*
*Ҡараңғы төн — яҡлаусыһы,*
*Ә ҡояшы — яҡтыраҡ.*
*Беҙ бахыр, тимәгеҙ аслан —*
*Был һүҙҙәр төптө ялған.*
*Ерҙән дә ҙур мираҫ бармы*

*Гүзәл Ситдикова (1952) Белорет районы Инйәр ҡасабаһынан. Силәбе дәүләт мәҙәниәт институтын тамамлай. Яҙыусылар союзы ағзаһы.*
*Ҡәләмдәшебеҙҙе күркәм юбилейы менән ихлас тәбрикләйбеҙ.*

*Олатайҙарҙан ҡалған?!*
*Кендек бауым күмелгән ер!*
*Күмелеп беркетелгән.*
*Һиңә йығылып илайым,*
*Һиндә тәгәрәп көләм!*

## Иҫәп

*Күп байлыҡҡа мохтаж түгел кеше*
*Ҡабынғанда ғүмер усағы:*
*Кәрәк уға бары өс монаят —*
*Биләү, бишек, әсә ҡосағы.*
*Йөрәгегенән сыға тиҙ үк сабый,*
*Кәрәк булмай башлай бишек тә,*
*Әсә ҡала балаһын оҙатып*
*Ҙур донъяға сыҡҡан ишектән.*
*Ҙур донъяла — ҙурҙан теләктәр ҙә,*
*Арта ғына бара талаптар.*
*Нәфсе — төпһөҙ, туя белмәҫ ғифрит,*
*Булмай икән уға ярап та.*
*Донъя ҡыуып һанһыҙ көндәр уҙа,*
*Бер кем дә юҡ ҡыуып еткәне,*
*Онота кеше ғүмер ахырында*
*Фәҡәт өс монаят көткәнен.*
*Бар малынан мәхрүм ителәүл,*
*Мәңгелеккә күскәс усағы,*
*Өс монаят ҡына йәнә кәрәк —*
*Биләү (кәфен), бишек (табут),*
*әсә (еркәй) ҡосағы.*
*...Ҡылғанына иҫәп бар тағы.*

## Усағым икмәге

*Ут сәсеп торманы*
*Аҙ һүҙле һөйөүең,*
*Кәрәкмәй икән дә*
*Уттарҙа бейеүең.*
*Бар ине ҡыҙылға*
*Ҡыҙыҡҡан саҡтар ҙа,*
*Һоҡланғыс тойолдо*
*Тауҙарҙы аҡтарған.*
*Тиҙ үңды ҡыҙылдар,*
*Тиҙ һүнде ҡойондар,*
*Ялҡыны үрләмәй*

Ҡарайҙы торондар.
Ә һинең тандыр ут
Йылдарға бирешмәй.
Ризамын барына —
Бит икмәк һалырға
Ҡыҙыу ут килешмәй...

## Әрме

*Хәрби хеҙмәттә*
*һәләк булған туғаныма*

Түгелептәр илай таулы һуҡмаҡ
Ҡойоп яуған ямғыр артынан,
Бер баҫырҙы әллә унар баҫып
Шул һуҡмаҡтан үргә артылам.
Ошо үрҙән һуңғы ҡараш ташлап
Хушлашҡанһың икән, туғаным.
Белмәнек шул күктәр алдан күреп,
Үкһеп-үкһеп йәшен ҡойғанын.
Бер баҫырҙы унар баҫып менәм
Ауылыңдың текә үренә,
Урман эстәренә ингән юлда
Һинең һының, гүйә, күренә.
Олоғаябыҙ, ә һин һаман йәп-йәш,
Әрмеләргә китеп барышың,
Яулыҡ болғай ҡыҙҙар кемуҙарҙан,
Кем оҡшарҙан һиңә, ярышып.
Тиҫтерҙәрең инде атай булып
Улҡайҙарын әрме ебәрә.
Яҙмаһы шул бишек бәүетергә
Һинең өсөн тыуған сибәргә.
Олоғайҙы ҡыҙҙар ятаҡтарҙа,
Афған, чечен алды иштәрен.
Ә егеттәр һаман китә тора —
Иңдәрендә һалдат биштәре.
... Яҙған булһын иҫән-һау ҡайтырға,
Ҡаршы алһын шатлыҡ йәштәре.

## Инәйҙәр

Әберкәле күлдәк, бәрхәт камзул,
Ап-аҡ ойоҡ, кизе яулыҡтар,
Аҙымдары еңел, танып киләм,
Инәкәйҙәр — беҙҙең халыҡтан.

*Ҡараштары сабыр, һөймәлекле,*
*Көләүҙәре шундай яғымлы,*
*Ябайыраҡ кейек, алсағыраҡ*
*Инәйҙәре тыуған яғымдың,*
*Иңдәренә һуғыш йөгөн һалған,*
*Көндәренә йылдар тиңләйҙәр.*
*Ә зарҙарын беҙ ишеттек һирәк.*
*Инәкәйҙәр — түҙем инәйҙәр.*
*Атын еккән, иген иккән улар,*
*Шәл бәйләгән, киндер иләгән.*
*Ҡулдарынан ниндәй эш килмәйҙер!*
*Инәкәйҙәр — уңған инәйҙәр.*
*Тәмле ашы, тәмле һүҙе менән*
*Ҡаршылларҙар: әйҙүк, ин әйҙә!*
*Һорап алмаҫ, әммә һораттырмай*
*Һуңғы телемдәрен бирерҙәр*
*Инәкәйҙәр — беҙҙең инәйҙәр.*
*Һеҙ лайыҡлы ине мул тормошҡа,*
*Ә ул муллыҡ китте эт-ҡошҡа,*
*Тик шунда ла һис зар түкмәйһегеҙ,*
*Хеҙмәтебеҙ китте, тип, бушҡа.*
*Рәнйеһәгеҙ, төшөр рәнйешегеҙ,*
*Ҡарғаһағыҙ, төшөр ҡарғыштар,*
*Тик һаман да сабыр итәһегеҙ,*
*Шөкөр итәһегеҙ яҙмышҡа.*
*Шөкөр итеү менән бәхетле һеҙ,*
*Алтынығыҙ — бары сабырлыҡ,*
*Эй, байһығыҙ ошо алтындарға —*
*Юлығыҙға түшәп һалырлыҡ.*
*Әлдә Хоҙай һеҙгә түҙем биргән,*
*Йәшәй беләһегеҙ алғышлап.*
*... Рәнйеһәгеҙ — төшөр рәнйешегеҙ,*
*Ҡарғаһағыҙ — төшөр ҡарғыштар.*
*Хаҡлыһығыҙ...*

## ***Шәжәрә***

*Ҙур түмәрҙә — ике балта,*
*Уйынсыҡтай бераүһе.*
*Дәү-дәү тырмаларға рәттән*
*Бәләкәсе тераүле.*
*Ат өҫтөндә — кескәй малай,*
*Һөйрәтеп килә күбә.*

*Олатай атлай янынан —*
*Күктәргә тейгән түбә.*
*Һуйған да ҡаплаған — үҙең,*
*Тип әйткәндәр күршеләр,*
*Әйтерһең дә, миҙал тағып*
*Ҡуйған кеүек түшенә!*
*Икәү килә ялан буйлап,*
*Йәшел бесән тейәнеп.*
*Олатай атынан төшкән,*
*Эйәрендә — ейәне.*
*Аттан төшкәнгә лә кеше*
*Ҡыуаныр икән шул һан!*
*Ҡыуаныр шул — эйәренә*
*Атланыр ейән булһа.*

## ***Көҙгө Инйәр***

*Ҡурғашланған Инйәр һыуы,*
*Тулҡыны ҡағыр-ҡаҡмаҫ,*
*Йондоҙ булып яуып төшкән*
*Япраҡтар ағыр-аҡмаҫ.*
*Туғарылған аттар кеүек,*
*Кәмәләр ярҙа бәйле...*
*Йөрәктәргә һағыш һалып*
*Күҙҙәрҙең киткән мәле.*
*Тәүге ҡар яуыр ҙа тиҙҙән,*
*Көҙгөләнер һыу өҫтө.*
*...Япраҡтарҙың ыуыҙ ғына*
*Сағы иҫемә төштө.*
*Инйәр ниндәй ярһыу ине,*
*Күк ниндәй бейек ине,*
*Хистәрем дә ябай түгел,*
*Хистәрем бөйөк ине.*
*Олпатланған даръя һыуы,*
*Тулҡыны ҡағыр-ҡаҡмаҫ.*
*Йондоҙҙар ята төбөндә —*
*Ҡалыр инде боҙ аҫтында,*
*Башҡаса улар ҡалҡмаҫ.*



**Рафаил**
**ХАФИЗОВ**

## *Ил өҫтөндә*

*Иҫә елдәр, яңы йырымда*
*Тыуған ерем моңо — терәгем.*
*Шәрҡ яҡтан иҫкән сал елдәр*
*Хәбәр һөйләй, тыңлай йөрәгем.*
*Төнмө-көнмө, ҡайһы осорҙан*
*Дала гөжләй, яна усаҡтар.*
*Аттар кешнәй — ниҙән, ниңә һуң*
*Хәтеремде биләй шул саҡтар?*
*Ҡыҫыҡ күҙҙәр, ҡоңғорт, саңлы йөҙ,*
*Таныш кеçек, таныш түгел дә,*
*Билдә суҡмар, ҡылыс, уҡ-һаҙаҡ,*
*Ауыр тойғо ҡала күңелдә.*
*Ни касафат унда, ут йотоп,*
*Яу сабыумы, нигә юлдаһыҙ?*
*Һеҙ — ҡыпсаҡтар, ғәҙ мин бик шат,*
*Йыраҡ нәҫелемдән булһағыҙ.*
*Ҡылыс көсө менән ил тотҡан*
*Хакимдар ҡояшы тиҙ бата.*
*Эҙләгән Һомай ҡош табылмай,*
*Дәүерҙә мең төрлө сер ята.*
*Һомай ҡош — азатлыҡ, хәҡиҡәт.*

---

*Рафаил Хафизов (1949) Илеш районының Лена ауылында тыуған. Дүртөйлө ҡалаһында йәшәй. Яҙыусылар союзы ағзаһы. Бер нисә шиғри йыйынтыҡ авторы.*

*Легенда булһа ла, хаҡлыҡ бар.*
*Ирекле, етешле донъяны*
*Ер буйлап эҙләйҙәр халыҡтар.*
*Тарихҡа ҡағылһаң, осо юҡ,*
*Дәүләттәр йәшәгән, юҡ булған...*
*Саҡырам: шул ҡанлы осорҙан,*
*Ҡанбабам, ҡунаҡҡа кил, туған!*
*Һөйләрме осорон: ниндәй ғәм*
*Ҡындарҙан сығартҡан ҡылысты?*
*Булғанмы үс-ҡоһор, уйлаһаң,*
*Һуң бөгөн ер өҫтө тынысмы?*
*Килгәндәр, кем булһын, илемә*
*Үс менән һуҙмаһын ҡулдарын.*
*Еремде изгеләп эшләһен,*
*Йөр(ө)мәһен ғүмерен уҙғарып.*
*Сере юҡ, был йомаҡ бороңғо:*
*Азатлыҡ үҙе юҡ, һүҙҙә бар.*
*Быуаттар аңында булған ғәм —*
*Хәҡиҡәт ерҙә юҡ, күктә бар.*
*Афәтме? Күсәйә кафырлыҡ,*
*Долларға баш һала халыҡтар.*
*Аҙғынлыҡ, эскелек, ҡот осҡос,*
*Иман һатасаҡ маңҡорттар.*
*...Иҫә елдәр, яңы йырымда —*
*Уяу булайыҡсы, ҡәрҙәштәр:*
*Ер ҡеүәте, Һомай йөрәге...*
*Ил өҫтөндә иблис өрәге.*

## ***Мин – башҡортмон***

*Мин — башҡортмон.*
*Илем — Башҡортостан,*
*Белем алдым тормош вузында.*
*Күрше булып, урыҫ, татар йәнәш*
*Ҡыҙындыҡ бер усаҡ ҡуҙында.*
*Ул усаҡтың ҡуҙы көйрәп тора,*
*Йылылығы тарта үҙенә.*
*Һайрай ҡоштар, ҡарай һөйөнөшөп,*
*Ҡурай моңло изге еремә.*
*Өс тел белеп, уҡып-һөйләп үҫтем,*
*Маҡтамайҙар, мине әрләйҙәр:*
*Татар — «башҡорт», башҡорт —«татар», тине,*
*Әле, шөкөр, «урыҫ» тимәйҙәр.*
*Был шаяртыу ине, өс халыҡтың*

*Йыры менән моңға күмелдем.*
*Туҡай, Бабич, Пушкин — аһәңдәштәр,*
*Ынйылары ихлас күңелдең.*
*Бөйөктәрҙән төшөр яҡтылыҡтар*
*Урын ҡалдырмайҙар тарлыҡҡа.*
*Ысын дуҫлыҡ быуауҙарҙы өҙә —*
*Һоҡланырлыҡ беҙҙең яҙмышҡа!*
*Әсәйемдең бишек йырынан тыш*
*Моңон оттом урыҫ, татарҙың...*
*Беҙ йәшәнек иңгә-иң терәшеп,*
*Йөрәгемдә йырын һаҡлармын.*
*Боронғолар һүҙе, аманат был:*
*«Дуҫың булһын, төнөң көн булыр.*
*Аманатты боҙһаң, ҡоһорланһаң,*
*Матур көнөң ҡара төн булыр».*
*Яттарға бит ихлас асылыу юҡ.*
*Дуҫың килһә, күңел һөйөнә.*
*Табын күрке — ҡымыҙ, килгән ҡунаҡ*
*Инмәйенсә китмәй өйөмә.*
*Башҡортостан — күркәм берләлекте*
*Күрһәтеүсе оло көҙгө ул.*
*Милләт-ара татыулығы менән*
*Бөтә халыҡтарға өлгө ул.*
*Салауаттар рухы илде ҙурлай,*
*Ысын дуҫлыҡ — эҙле, аҙашмай.*
*Дуҫлығында иң изгеһе — тиңлек,*
*Тиңлек бөтһә, кеше ярашмай.*
*Тиңең тиңләй, халҡым алдашмай,*
*Үс-ҡоһор юҡ, беҙҙә отҡорлоҡ.*
*Бөйөк шағир Мостай ҡыуанғанса,*
*Башҡортостан — унға торорлоҡ.*
*Башҡортмон мин — ниндәй ғорурлыҡ!*

## Ҡайттым

*«Мин ҡайтырмын, көт», — тигәнгә*
*Ауылым моңһоу ҡалды.*
*Баҡсабыҙҙа үҫкән ҡайын*
*Мине борсоуға һалды.*
*Ҡайттым. Бик күп йылдар үткән,*
*Бәләкәй ауыл күскән.*
*Үпкәләп ҡалған ҡайынды*
*Кемдер утынға киҫкән.*
*Тормош аяуһыҙ икән...*

## *Йәшем кипте*

— Эй, улым, ҡайтырһың,
Саҡырыр «Ҡайынлыҡ».
Ҡөтөрмөн. Төп йортта
Айырым ҡайғы юҡ.
(Әсәйем хатынан).

*Шундай көн был, «Ҡайынлыҡ»та*
*Әруахтар уянған саҡ.*
*Йома көндә, өйлә үткәс,*
*Доғанан ҡыуанған саҡ.*
*Ҡәбереңә килдем, әсәй,*
*Ҡайғым күктәргә ашҡан.*
*Мин генә лә түгелдер ул*
*Донъяһында аҙашҡан.*
*Киткән инем, гармун тартып,*
*Эҙләп шаулы донъяны.*
*Бәхет ҡошон эҙләй-эҙләй,*
*Йөрөп юлым уңманы.*
*Фанилыҡтан улын көткән*
*Әсәйемде ер алды.*
*Ҡайтыуымды көткән йорттоң*
*Уттары һүнеп ҡалды.*
*«Тыуған йорт, әсә йылыһы*
*Донъяларҙа бер генә», —*
*Бер йырлайым, бер илайым,*
*Һуң йыуатыр кем генә!*
*Сәждә ҡылып, Аллаһынан*
*Күңел мәрхәмәт һорай.*
*Кипте йәшем. Үкенеүҙән*
*Йән генә иламһырай.*

## *Уралтауҙа*

*Сал Уралдың ҡаяһында*
*Ҡурай моңо, башҡорт йырлай.*
*Ҡабатланмаҫ аҫыл йыры*
*Күңелемде моңға сорнай.*
*Тау бөркөтө — башҡорт йырлай,*
*Ярһыу йөрәк күкте иңләй.*
*Башҡорт йыры — тыуған ере*
*Уралтауҙа сикте белмәй.*
*Башҡорт моңо урман-ҡырҙың*
*Бал ҡортолай һутын йыйған,*

*Сәскәләрҙең еҫен, төҫөн*
*Ҡушып, һутлы кәрәҙ ҡойған.*
*Йырсы башҡорт аһәңендә*
*Илдең-ерҙең аҡыл көсө.*
*Олатайҙар кеҫек олпат,*
*Халҡым кеҫек заты көслө.*
*Уралтауҙың ҡаяһында*
*Йыр яңғырай, ерҙе ҙурлай.*
*Уҡ-йәйәле яу ораны —*
*Башҡортомдоң рухы йырлай.*
*Урал тауһыҙ башҡорт булмай,*
*Ят-ситтәргә телең һыймай,*
*Уйнай ҡурай. Илем-ерем*
*Быуаттарҙың һүҙен тыңлай.*
*Хакимдар бит һорап тормай,*
*Намыҫ боҙор әмер яҙа.*
*Буталды ил, ҡибла тапмай,*
*Көфөрлөктән әҙәм аҙа.*
*Яңы афәт, яңы тәҡдир*
*Илһеҙ-ерһеҙ ҡол төҫөндә.*
*Илем, ерем, телем — тәсбих —*
*Ҡылдан нескә ҡыл өҫтөндә.*
*Уралтауҙа ҡайһы башҡорт*
*«Урал» көйөн һуҙып йырлай?*
*Ирек даулап йыр йырлаған*
*Ул Салауат батыр, буғай.*
*«Батыр тыуһа — ил бәхете, —*
*Аҡһаҡалдар әйткән белеп, —*
*Ил исемен ташҡа яҙма,*
*Йөрәгеңә яҙ һин элек».*
*Уралтауҙа башҡорт йырлай,*
*Ҡурай уйнай, моңо сыңрай.*
*Әй, һин, халҡым! Уян, ҡалҡын,*
*Салауаттар рухы һорай.*



Ринат
КАМАЛ

# БЕЛӘҘЕКҮЛ

## РОМАН

Беләҙекүл. Ни дәүерҙәр емелдәйһең көн битендә, сибәркәй, ни замандар ярыңа тулҡындарыңды сәпелдәтеп ятаһың! Бер наҙыңа тулышып иркәләнәһең, бер, төҫ боҙоп, буйҙан-буйҙарға сабырға, дау ҡуптарырға тотонаһың – үҙгәреүсән холҡоң; бер һырт бирәһең, бер йөҙөңдө асаһың… Әле ҡолондай ирәйеп сырҡырайһың сәхрәләрҙә, баш бирмәй еләһең, әле моңһоуланып хискә тарыйһың, һағышҡа тартаһың, әле туҙаһың – сығырыңдан-сығып бырхытаһың ҡош-ҡортоңдо, дауылдар ҡуҙғатаһың – ҡылансыҡ бисәләр шикеллеһең, әллә был көнитмешең асылымы? Һин ирекле бер йәнме – болоттарға, елдәргә, күктәргә бәйлеме хәлең, елдәргә иркәләргә, күктәргә ғашиҡ булырға йөрьәт итәһеңме, аҙаҡ бәхетеңдән яҙып, үкенестән һыҙып бер булаһыңмы? Көнөң алмашынып тора, яҙмышың хәтәр, холҡоң көн торошона ла, елдәр йүнәлешенә лә бәйле – заманалар һиңә лә аяуһыҙ.

Булмышың да сәйер. Әй төбәгеңдә, беләҙек яһап, ер тәненә уйылғанһың, тәғәйен исем-шәриф алғанһың. Оло һыу ҡуйынындағы зиннәтле йөҙөк һин, күҙҙәң яуын алаһың; һыныңа кемдәр ымһынмаған, кемдәрҙең зары, һөйөнөсө буйыңа һеңмәгән. Әсе йәш түгелгән, шат ауаздар һибелгән тәнеңә, һөйөү, кинәнес күргәнһең; ҡыҙҙар көлөүеләй мөләйемһең, Беләҙекүл! Был алдаҡ ҡына тормоштоң һин сағылышы, төпһөҙ күк иңдәренең ялтырағы, кеше яҙмыштарының салыш көҙгөһө… шәп саҡта ялтырайһың да көйһөҙ көндә төҫ боҙаһың. Һинме бойоҡ йән, әллә бәндә үҙе көйһөҙмө? Ҡояштанмы, күктән, әллә елдәрҙәнме мәрхәмәт юрайһың? Үҙ ихтыярың, иркең бармы?

---

*Ринат Камал (1954) Мәсетле районының Дыуан-Мәсетле ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай. Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты.*

*«Ҡотлояр — Бәхтейәрҙәр» шәлкеме — социализм осоронда йәшәгән бер ғаилә тормошо хаҡында бәйән. Ошо шәлкемгә ингән «Беләҙекүл» романындағы ваҡиғалар беҙҙе уҙған быуаттың 20-се йылдарына алып ҡайта. Илдә — аслыҡ, власть башына килгән коммунистар Мәғжән волосында хәлде нисек тә яйға һалырға ынтыла. Волкомда эшләүсе элекке ҡыҙылармеец Ҡамса, уға ғашиҡ йәш ҡыҙ бала Мөнирә, артабан уның ире буласаҡ учитель Бәхтейәр, башҡа геройҙар менән осрашасаҡбыҙ әҫәрҙә.*

Беләҙекүл өнһөҙ, бәндәләргә битараф. Ул юрый ғына шулай ялтырай, буғай – әүрәтә, шаярып ҡына емелдәй, ҡылансыҡ килендәй, һибә һыртына ынйы-мәрйендәрен, күҙ баулай, күҙ ҡамаштыра, сабый балалай күреп алдаштыра. Тормош – нәжәғәй уйыны, Беләҙекүл – ялағай сағылышы, ай-ҡояш ялтырағы. Күктәргә ғашиҡтар уға ла ғашиҡ, елдәргә әүрәүселәр уны ла һөйә... Әкәмәт тамаша: күктә нәжәғәйҙәр уйнай, ерҙә – Беләҙекүл!

Ат менән бисәгә таянма, ир, Беләҙекүлгә һин ышанма! Беләҙекүл буйындағы мөхәббәт тә һине һис бәхетле итмәҫ.

## Беренсе киҫәк

I

Мең дә туғыҙ йөҙ ҙә егерме беренсе йыл.

Ҡамса көнө-төнө һалым тип саба, яңы тормош төҙөйбөҙ тип ҡырталаша. Ил эсендә хәл ҡатмарлы: һуғыш бара, өҫтәүенә, аслығы бәкәлдән йыҡты – халыҡ себендәй ҡырыла. Мәғҙән волосы ауылдары мәйет менән тулды, кешеләр өйө-өйө менән ятып үлә – бөтәһе өсөн дә волисполком рәйесе яуаплы, ул эште ойоштора белмәй. Советтар сыҡҡас, һуғыш башланды, яңы властың продотрядтары халыҡты таланы, шуға аслыҡ килде, тиҙәр. Ҡамса ҡыҙылармеец әллә был хәбәрҙәрҙе ишетмәй йөрөймө, дошман ҡотҡоһона бирелмәҫ ерҙән бирелер сараһыҙ халыҡ. Юғарынан ҡыҫалар, үҙенең дә йәне көйә, уртын сәйнәй – ул шул эш башына ҡуйылған, уның үҙенән талап итәләр, халыҡ хәсрәтен күреп тә йән әрней. Сәстәр ағармаҫ ерҙән ағарыр. Бер нисә ауылда яман эштәр асылды: урлашыу, төнөн юл баҫышыу – бер хәл, ә көпә-көндөҙ кеше талау... Волость башлығы ике ут араһында: юғарынан талап итәләр, бындағы халыҡ та әжәл менән тереклек сигендә. Ауылдарҙа мәйеттәрҙе күмеп өлгөрмәйҙәр.

Башта бөтәһе лә уң булыр кеүек ине. Ҡамса тамсы ла икеләнмәне: эшебеҙ хаҡ, тип тамаҡ ярҙы. Бары ун туғыҙынсы йылдың йәйе һуңында, аҡтарҙы Силәбе, Красноуфим яғына ҡыуғас, властары нығынды, шуға саҡлы аҡты-ҡараны айырмай, икеләнмәй көрәштеләр: дошман ҡаршыла, власть ҡулдан ҡулға күсте.

Улар еңде, ҡыҙыл ғәскәр тантана итте, яңы власть тауҙай вәғәҙәләр яуҙырҙы, «ҡыҙыл» һүҙҙәр һөйләне, яҡты киләсәк бына-бына тыуыр төҫлө ине, ә еңеү артынан аслыҡ килде. Ҡамса ҡыҙылармеецҡа иһә аҡтарҙы Ҡолатау битләүенән ҡыуыу менән оло дәрәжә – волисполком рәйесе булыу мәртәбәһе йылмайҙы.

Өйләнгәйне инде ул. Факиһа менән фронтта таныштылар. Фельдшер ҡыҙ үтә лә ипле, тәртипле булып тойолдо. Күп һөйләшмәй, эшенә ҡыҫылмай. Хатта уйҙары ла бер юҫыҡта һымаҡ. Ҡамсаның башы кәңәшмә, ултырыштан сыҡмай, волость идараһынан ҡайтып кермәй. Факиһа ла халыҡ араһында, аслыҡ, тиф уны ла аяҡтан йығыр хәлгә еткерҙе. Балалары юҡ, ил тип, йәмәғәт эше тип сабалар – ғөмүмән, шәхси тормоштары булманы тиерлек.

Ҡамса – күренекле ир, үткер ҡарашлы, ҡылыс танаулы. Ҡуңыр йөҙлө. Теләһә, йолаһына тура килтереп, икенсе бисә лә йәрәшер ине, Факиһаның түле булмаһа ни, бүтәндән итәк тулы бала таптырыр ине – ваҡыты юҡ, яңы тәртип быға юл да ҡуймаҫ. Большевик башына, иҫке ғөрөф-ғәҙәткә эйәреп, шәриғәткә буйһонһонмы?

Ҡамса – ут ир, Ҡамса – уйнаҡлап торған айғыр, юлына осрап торғас, яҙмыш үҙен баш әйләндергес үрҙәргә күтәргәс. Ул илдең күҙ алдында, йөҙөктөң ҡашы, илдең ҡашҡаһы. Ғәйбәтселәр генә һөйәркә һанай, исемлек төҙөй, ә бисә-сәсә бер-береһен белмәй ҙә, күрмәй ҙә, хатта Факиһаһы ла бының менән ҡыҙыҡһынып йөрөмәй.

Ҡамса уны Беләҙекүл буйында осратты. Ул ят, ул ҡырағай ҡолонсаҡ. Күҙҙәре осҡонло, бит алмалары соҡорло – ир ундайҙы әлегәсә күргәне лә юҡ, ә йылмайыуы, ә күҙҙәре... Осҡон сәсә, нур тарата бар донъяға, шул нурҙан тирә-йүнгә хәс тә яҡтырып китә, был булмыш үҙе әкиәткә әйләнә: ҡамыштар шыбырҙаша, ерек-талдар бейешә, ҡаҙаяҡ үләндәр баҙлай башлай. Тормош шундай гүзәл, тирә-йүн – гөл баҡсаһы, ағастарҙа ҡоштар һайраша... Хәс тә донъяның бар көйөнөстәре юҡҡа сыҡҡан, был ғүмерҙәр – рәхәтлек кенә, наҙға ҡойонған ил.

– Һин кем ҡыҙы, туғаным?

– Мин?.. – Ҡыҙ күҙен йәшерҙе.

– Һин тим дә...

– Мин был ауылдыҡы түгел. Әпшәндән мин, бында Ҡотой быуайымдарҙа* торам.

– Ә-ә... – Ир бүтән һүҙ тапманы, теленән яҙҙы.

– Мин ашығам... – Ҡыҙ бала күнәгенә һыу һирпеп алды ла күҙҙән юғалды.

Ай, иҫәр ир, был Ай ҡыҙы бит, ергә төшкән хур ҡыҙы.

Ҡамса күҙен бер асты, бер йомдо: күҙемә күренәме әллә, тип уйланы.

Тағы әкиәт тигәне ысынға оҡшаған: теге зат яр башына менеп бара, йомро янбаштары борғолана, шәп-шәп баҫа. Шунда ир әллә ни эшләне: хыялы менән шул иркә, шул хаҡһыҙ затты ҡосағына ҡыҫты. Ә теге ҡолонсаҡ сая: юрғалай ғына, ҡаса... Нескә биле, аяҡтары етеҙ. Ир иҫерҙе: күргәне ысын да, түгел дә кеүек. Шунда Бәлхиә ҡарсыҡты сырамытты. Сихырсы былай табан ыңғайлай. Әле генә яр башында берәү ҙә юҡ һымаҡ ине.

– Бәлхиә апай...

Ҡамсаның һаман тәне ҡорошоп торҙо, зиһене тарҡалды. Әллә уны сихырланылармы, имсе ҡарсыҡ юрый, һынамаҡ өсөн генә алдына хур ҡыҙын сығарып баҫтырҙымы?

Кеше һәр даим һынау ҡаршыһында. Еңәме, еңеләме? Яҙмыш елдәре һәр мәл бәндәне атынан бәреп төшөрөргә яҫҡына. Рухың һынмаҫмы, бәндә, ахырҙа йөрәгең таш булып ҡатмаҫмы? Тормош кисеүҙәрен һин нисек үтерһең?

## II

Ҡотой ҡарттың өйө текә яр башында. Мөнирә уянһа, күл битен күрә, Беләҙекүл, гүйә, сырайын асып, уны көтә була. Тор, йоҡосо ҡыҙ, һуҙылма! Шаян күлдең алсаҡ ҡыҙ менән серләшкеһе киләлер, күлбикә әхирәтен көтөп зарыҡҡандыр... Улар хәҙер ныҡ дуҫлашты. Әлегәсә Мөнирә бойоҡ ине, Әпшәндә кисергәндәренән айный алманы: төшөндә атаһын, ағаларын күрҙе, атаһын ҡылыс менән сабалар, имеш, тип һаташты... Бисараны шул шаян күл һауыҡтырҙы, шул ялтырбикә ярҙам ҡулы һуҙҙы.

Ике көн эсендә бай ҡыҙы ярлы-ябағаға әүерелде, ике көн эсендә үкһеҙ йәтим иттеләр. Өйөр-өйөр йылҡылары сырҡырап йөрөй ине Ҡолатау битләүендә, туп-туп ҡаҙҙары, батман-батман майҙары – ҡайҙа китте шул ирәүән тормош, ҡайҙа тороп ҡалды сәхрә йәйләүҙәре? Инде ул етем-еһер, алыҫ туғандарына һыйынған үкһеҙ, кейем-һалымы, артынан килер малы-ҡалымы юҡ. Ярай, бынау күл ҡаршыһында йәйрәй, шул уны ымһындыра. Беләҙекүл – шаян да, алсаҡ та әхирәт, хафаларына шифа. Мөнирә – йәтимәк, шул һыу ярында ултыра, бойоғоп, һыуға йомро таш тәмә, быҙау көтә, бәпкә ҡарай. Кер сайҡау ҙа – уның эше, малға һыу ташыу, емеш баҡсаһына һыу һибеү – Беләҙекүл уны көтөп кенә тора. Мөнирә шунда әйлән-бәйлән уйнарға әүәҫләнде. Һөйөнһә лә, бойоҡһа ла, күлгә ашыға.

---

**Бабайымдарҙа (диал.).*

Ҡомташтарҙы усына йома, ҡомташтар менән уйнай, тулҡындар менән шаяра. Ялан аяҡ һыуҙы сәпелдәтә, тулҡындарҙы ары, күл уртаһынаса ҡыуа. Яр ситенә сүкәйеп кенә ултыра ла ишенә серен сисергә тотона.

Мөнирә – Әпшәндең иркәһе. Болондарҙа, сәхрәләрҙә бәй белмәй елгән ҡолонсаҡ. Шаталаҡ, гел йылмайып тора. Әйтерһең, был шуҡ өсөн донъяла бер хәсрәт тә, бер хафа ла юҡ. Шулайҙыр ҙа. Ул үҙе лә һөт өҫтөндәге ҡаймаҡ һымаҡ үҫте бит: атаһы Ғәбделнафиҡ – бай. Ғәбделнафиҡтың бер туғандары Ғәбделхалиҡ та, Ғәбделмәлик тә – Әпшәндең иң дәрәжәле байҙары: әйләнә-тирә халҡын усында бейетеп тота. Донъя, ысын, Ғәбделнафиҡ, Ғәбделхалиҡ, Ғәбделмәлик ҡулында. Донъяға Мөнирәнең зат-зәүере баш!

Әпшәндә ирәүән тормош: Ғәбделхалиҡ ағаһы бер көрөшкә һары майҙы күтәрә лә эсә. Ғәбделмәлик ағаһы ла унан ҡайтыш түгел: ҡалын кәүҙәле, уҫал. Туғандары араһында иң хәтәре, иң хәйләкәре лә шулдыр – йыйын халыҡты артынан эйәртә ала. Уның һүҙе генә һүҙ.

Бай ҡыҙына ел-ямғыр теймәне, ҡыйынлыҡ тигәнде белмәне; уның да һүҙе һүҙ, теләге теләк ине, теләгәне алдына килеп кенә торҙо. Ата-бабаларҙың биләмәләре иркен, мал-тыуары бихисап-бинаһая. Әпшән туғайҙары, гүйә, мал һимертергә генә яратылған: үләне ат бауырынан, һауаһы саф, һыуҙары татлы... Ҡош-ҡорт, еләк-емеш – шунда кинәнеп йәшә лә йәшә, һис ҡайғы-хәсрәт күрмә! Ят күҙҙәрҙән алыҫта, төпкөл яҡта ята Әпшән иле, текә тауҙар, оло һыуҙар аръяғында. Ҡолатау бер яғында һаҡта, икенсе башында – икһеҙ-сикһеҙ Оҙонтал шырлығы... Уның бер осо Әй йылғаһына барып төртөлә.

Бер мең дә туғыҙ йөҙ ун туғыҙынсы йылғаса өнһөҙ-тынһыҙ, үҙ яйына йәшәне әле Әпшән, бындаса оло донъяның тыны-һулышы килеп етмәне. Ғәбделнафиҡ менән Ғәбделхалиҡтар һаман өйөр-өйөр бейә бәйләне, тәпән-тәпән бал һарҡытты, батман-батман май яҙҙы... Ҡеүәт бар инде, бар был байҙар нәҫелендә: бер туғандар иңгә-иң терәп, аяҡ тибеп, ни ҡылһаҡ та хөкөмкәйҙәребеҙ үҙ иркебеҙҙә, тип йәшәп ята. Тик бер көн Ғәбделмәлик Мәсәғүт кантонынан «ҡыҙылдар Өфөнө алған» тигән хәбәр алып ҡайтты. Шунан был ил-йорттоң тыныслығы юғалды: бер туғандар ғауғалаша, ҡайҙалыр саба башланы, ә Мөнирәкәй иркә бер ни ҙә аңламаны.

Июлдең һуңында ысын ғәрәсәт ҡупты: ауылда «Дыуан яғынан ҡыҙылдар аҡтарҙы ҡыуа килә» тигән хәбәр таралды. Ғәбделхалиҡ та, Ғәбделмәлик тә донъяһын йыйыштырҙы, кәрәк-ярағын төйнәштерҙе, бер Ғәбделнафиҡ ҡарт – Мөнирәнең атаһы ғына мыжмырланы, ыжламаны ла.

– Мин ауылдан китәм! – тип белдерҙе Ғәбделмәлик. – Ҡыҙыл көсөктәрҙән аяу булмаясаҡ, ун һигеҙенсе йылды ла хәтергә төшөрәсәктәр.

– Әгәр ҡыҙылдарҙы Әй аръяғында туҡтатып булмаһа, мин дә аҡтарға ҡушылам! – тип һалды Ғәбделхалиҡ та.

– Ә мин ништәргә лә белмәйем, – тип торҙо бәлтерәп төшкән Ғәбделнафиҡ ҡарт.

Оҙаҡламай Мәсәғүт яғынан ауылға һалдаттар килеп тулды, Ғәбделнафиҡ ҡыҙҙарын ҡайһыһын ҡайҙа йәшереп бөттө, Мөнирәләр йәйләүгә ҡасты. Уларҙың ике ҡатлы таш өйөн аҡтар штаб кеүек итеп һайлағайны инде, Ғәбделнафиҡ та, Ғәбделхалиҡ менән Ғәбделмәлик тә аҡтарға булышып, аҙыҡ-түлек йыйнашып йөрөнө. Аҡ армия Әй йылғаһының был ярында нығынырға, ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙе туҡтатырға ҡарар иткән. Ҡолатау һыртында ашығыс рәүештә траншея һыҙаты ҡаҙыла башланы, ауылдағы бөтә ир-атты шунда ҡыуҙылар. Ғәбделмәлик менән Ғәбделхалиҡ та шунда. Аҡтар был байҙарҙы әпшәндәр өҫтөнән башлыҡ итеп ҡуйған. Ваҡыт тар, ҡыҙылдар бөгөн-иртәгә бында буласаҡ, пулеметтарҙы,

пушкаларҙы позицияға ҡуйып өлгөрөргә, дошманды ут менән ҡаршыларға! Әй ярында ҡаты алыш буласаҡ!

Аҡтар аттарын урман араһына йәшерҙе, пушка-пулеметтарын траншеяларға ҡаҙып ултыртты. Икенсе көнгә «ҡыҙылдар кисләтеп Мәғҙән ауылына тулған» тигән хәбәр алынды. Ҡолатауҙағылар әҙер ине, ғәскәр башлығы һил мәлдән файҙаланып ҡалырға ҡарар итте: таң атыу менән ауыр туптар телгә килде. Ҡолатау бите, урман шырлығы тетрәп тора, бар донъя һелкенә. Ҡолаҡтар тона, баш әйләнә. Тау башынан бинокль менән Мәғҙәнде күҙәтеүсе офицер үрле-ҡырлы һикерергә тотондо: йәнәһе, ура, ярты ауыл яна, ярты Мәғҙән ут эсендә! Шул кәрәк һеҙгә, Мәғҙән таҙҙарына! Аҡ армия һалдаттарына икмәк бирмәнегеҙ, һырт бороп торҙоғоҙ – кәрәгегеҙҙе алығыҙ!

Ҡолатауҙағы ғәскәр тантана итте. Тик улар был мәлдә ҡыҙыл ғәскәрҙең Яуыш тарафына тайыуын белмәй ине. Мәғҙәндә бер генә ҡыҙыл һыбайлы ла ҡалмаған, ҡыҙылдар Әйҙе төньяҡтан урап кисергә ниәтләгән... Мәғҙәндә был ваҡытта аҡтар тубынан бары тыныс халыҡ ҡына ҡаза күрҙе: Күл яҡ урам тоташлай тиерлек янып бөттө, Мотаһар урамы ла тар-мар ителде; ҡайҙа дәү-дәү бүрәнәләр, бүрәнәләрҙәй кеше кәүҙәләре туҙышып ята. Берәү балаһын ҡосаҡлап ауған, берәү, мунсаһына ашығып, яңылыш йәҙрә аҫтында ҡалған; унда-һанда ут көлтәләре, баш осонда шыжлап туптар оса – был таңда ауылда ысын мәхшәр ҡупты, Мәғҙән тамуҡ ояһына әйләнде.

Күрәһең, аҡтар сигенгәндер, юғиһә, улар артынан ауылға ҡыҙылдар тигән ғәскәр тулмаҫ ине. Улар, ғәм халыҡты болартып, аранан аҡтар яҡлыларҙы юллап йөрөнө. Ғәбделмәлик аҡтар менән ҡасып өлгөргән, ә Мөнирәнең атаһы Ғәбделнафиҡ ҡыҙылдар ҡулына эләкте. Уны ихатаһында тоттолар. Күрәһең, берәйһе башырғандыр*, бай йортона төртөп күрһәткәндер. Бөр төркөм һыбайлылар артҡы ҡапҡанан инде лә һарайҙан сбруй сығарып килгән хужаға тондо; Мөнирә лапаҫ башында бесән араһына боҫҡан, таҡта ярығынан күрҙе: ерән һаҡалтай йән асыуына киҙәнеп атаһын ҡылыс менән урталайға ярҙы.

Аҙаҡ иҫен юйып һаташып ятҡан ҡыҙ балаға һөйләнеләр: Ғәбделхалиҡ ағаһын да лавка ҡаршыһында, ғәм халыҡ алдында, ҡылыс менән тураҡлағандар.

Мөнирәнең әсәһе Миңжиһан да күпкә сыҙаманы был хәлдән, өнһөҙ генә был донъянан тегеһенә күсте. Комбед тигәндәре оло ике ҡатлы таш өйҙәрен конфисковать итте, малдарын хөкүмәт ҡарамағына тапшыртты. Мөнирә ике көн эсендә үкһеҙ йәтим, малһыҙ-мөлкәтһеҙ ҡалды, өҫтәүенә, иркә бай балаһын урамға ҡыуалап сығарҙылар.

Игелекле туған-тыумасаһы ярҙамында ҡыҙҙы, ярай, Мәғҙәндәге сыбыҡ осо туғандары Ҡотой ҡарттарға оҙата һалдылар.

Шулай Мөнирә уйламаған-нитмәгән ерҙән Мәғҙән кешеһе булып китте.

## III

Беләҙекүл өнһөҙ. Күптәрҙең серен үҙендә һаҡлай ул.

Ҡыҙ күҙен йома. Күҙ алдына ҡабат ул баҫа. Йылмая. Шундай яғымлы, моңло итеп ҡарай – ҡыҙҙың йөрәге өҙөлә. Ниңә, ниңә шундай яҙмыш яҙҙы икән уға? Ниңә уның ғына бәхете китек, уның өлөшөнә төшкән көмөш яттар ҡулында? Был мөхәббәт хатта мөхәббәт кеүек тә түгел, ә торғаны менән бер гонаһ... Ғишыҡ-ғишрәт тиер инең, уларҙың бер тапҡыр ҙа икәүҙән-икәү аңлашҡаны юҡ. Ул оло, дәрәжәле зат, волоста ҙур түрә. Большевик. Ә Мөнирә кем? Бай балаһы,

*Ошаҡлағандыр (диал.).

волисполком түрәһе уны хатта күҙенә лә элмәйҙер, ә Мөнирә май шәмеләй эстән генә һыҙа.

Мөнирә һыу алырға ғына төшкәйне... Ялантәпәй баҫмаға баҫты, тонйораған һыуға төбәлде. Шунда үҙенә текәлгән ҡараштан ҡото осто: Беләҙекүлдән батыр ҡалҡты. Хәрби гимнастерка кейгән, тирәсле фуражкаһы үҙенә килешеп тора. Тишеп ҡарай. Эй, һантый бала! Шул һүҙҙәрҙе һаман иҫләй:

– Һин кем ҡыҙы?.. Исемең дә, үҙең дә матур, – тип ҡалды теге ағай, ә ҡыҙҙың теле көрмәлде, бите ут булып янды. Шунда әллә нимәнән сихырланды: йөрәге елкенде, бармаҡтары ҡалтыранды. Теҙ быуыны йомшарыуын тойоп, ихата эсендә ҡапҡа төбөндә торҙо ла торҙо.

Аҙаҡ шул осрашыу өсөн Беләҙекүлгә рәхмәттәр уҡыны. Йәнәһе, күл уны ер йөҙөндәге иң сибәр егет менән ҡуша була.

Ҡыҙ уны иртә һайын көттө. Тәҙрәнән күҙәтте. Ә теге һыуға батҡандай юҡ булды ла ҡуйҙы, тотош йәй буйы күҙгә-башҡа салынманы.

Ул арала ҡыҙ күп нәмә белде. Ҡамса өйләнгән, имеш, ҡатынының исеме – Факиһа. Факиһа ла төҫкә-башҡа төшөп ҡалғандарҙан түгел икән: тәбәнәк булһа ла, ыҡсымай, сәсен ҡыҫҡа итеп ҡырҡтырған, фельдшер пунктында эшләй. Мөнирә кеүек, ул да ситтән. Ире менән фронтта табышҡандар: Ҡамса лазаретта ятҡан, шунда уны ошо ҡыҙ тәрбиәләгән. Фельдшер ҡыҙылармеецты яу ҡырынан алып сыҡҡан икән.

Мөнирә үҙен Ҡамсанан түбән күрҙе. Теге – уҡымышлы, ул – етем-еһер, был ауылда ғына түгел, ә бөтөн был донъяла бер таянысы ла юҡ.

Йәшертен-боҫортон ғына медпунктҡа барҙы, көндәшен ситтән күҙәтте. Тегеһе – эшем эйәһе, аҡтан кейенеп алған, хәс тә фәрештә. Ҡайҙан уға тиңләшергә, уйлама ла. Юҡ, юҡ, ымһынма ла! Ҡыҙ башын эйеп ҡайтты, тағы бөткөһөҙ өй мәшәҡәтенә сумды, мал менән булды. Башында – бер уй, ҡаршыһында – шул яғымлы һын. Башынан сығарып ташлай алмай шул уйын, әллә ниндәй мофталларға төшөп бөттө, әллә ниндәй сиргә һабышты.

Уларҙы Мөнирә Беләҙекүл буйындағы киске уйында ла күрҙе. Улар – кәләше менән икәүһе. Факиһа апай ҡаласа кейенгән, тар юбкаһы нескә билен белендерә, йоҡа кофтаһы ла үҙенә бик килешә. Ул бик бәхетле заттыр, үҙен ауыл халҡы алдында өҫтөн тота, күҙҙәрен йәшермәй.

Мөнирә яҙылып китә алманы. Шундай йылы кис, үлән еҫе аңҡый. Бар тирәйүн әллә ниндәй аһәң менән һуғарылған: сафлыҡмы, тантаналыҡмы һулышы һиҙелә, күкрәк киңәйә, ҡараштар үткерләнә. Аяҙ төн, болотһоҙ күк бите, бары яңғыҙ ай ғына – юғарыла, ә түбәндә – Беләҙекүл буйында – бейеүселәр, ай нурына ҡойонған кешеләр. Йәштәр, йәшел тибен. Фельдшер ҡатын һәр кемгә йылмая, һәр кем менән ҡуша бейей.

Мөнирә баҙаны, эйе, шунда йөрәгенә тулған хистән иҫерҙе. Быуыны ҡатты, тәне ҡорошто. Әүәл был киске уйындарҙа ул гел уртала була торғайны.

– Мөнирә, һерәймә! – Ҡыҙҙар сылбыры тегене уртаға һөйрәкләне. Шунан ҡыҙ аяҡ аҫтындағыһын юғалтты: оса-оса өйөрҙөң уртаһына барып юлыҡты. Юғарыға аштымы – күл буйы, өйҙәр, күктәге ай өйөрөлә башланы; бар донъя хәрәкәткә килде, ҡыҙ иҫен юйҙы: ул инде ул түгел ине, тәне, беләктәре иркенә буйһонманы – ул, иңдәрендә ҡанаттар яралғандай, осто ғына, Беләҙекүл өҫтөнән ҡанат йәйҙе, әйтерһең, ҡыр ҡаҙҙары сылбырына тағылды, Ҡамса менән Факиһа апайҙы өҙөк-йыртыҡ ҡына шәйләп ҡалды. Ҡыйынһыныуҙы онотто, ҡаны ҡыҙҙы, ер менән күк араһында уралды, табаны ҡатыны тойманы. Әкиәт ине был, ул,

алйот, дәрәжәле ағай менән ҡуша бейей, теге ҡултыҡлап өйөргәндә тәне ирей, ҡайнар һулышы битенә бәрә. Күҙҙәре генә осраша, бармаҡ остары эләгешә. Барса донъя: ағастар, тауҙар, Беләҙекүл, өйҙәр урынынан ҡупҡан.

Башы әйләнде ҡыҙ баланың, тыны ҡыҫылды, ниндәйҙер мәлдә тимерҙәй ҡулдар йоҡа тәнен һығып та алғандай итте. Бер генә мәлгә! Берәү ҙә иҫләмәне, шай, берәү ҙә улар яғына ҡайырылманы. Шунда Мөнирәнең юҡҡа сыҡҡыһы, кеше күҙенән юғалғыһы килде, онотолһа, бүтән илдәргә тарыһа...

Ә уйын тынманы, берәү ҙә Ҡотойҙоң сыбыҡ осо туғанына иғтибар итмәне. Хатта был кистә ҡылыс танаулы Ҡамса ла, Факиһаһы ла ҡыҙға һүҙ ҡатманы, йылмайһалар ҙа, бүтәндәргә лә йылмайҙылар. Бейеү тыныу менән улар, йәштәрҙән айырылып, ауылға табан ыңғайланы. Бер-береһенә һыйынышып, ҡулға-ҡул тотоношоп атланы ағай менән апай, шул хәлдә ҡараңғылыҡ ҡосағында иренеләр.

Ә ҡыҙ бала эстән әллә ниҙәр уйлап бөттө, үҙен апай урынына ҡуйып та ҡараны. Имештер, улар йәнәш... Киске уйында ла ҡуша бейенеләр, икеһе генә әйләнбәйлән өйөрөлдө, беренсе тапҡыр, алдан һүҙ ҡуйышып, күл буйында осраштылар. Хәҙер ҙә икәүләшеп-етәкләшеп билдәһеҙлеккә йотолдолар. Беләҙекүл буйында икәү сихри кис үткәрҙе, эйе, бар күл буйы бөгөн уларҙың бәхетенә шаһит булды!

...Һантый, тип әрләне үҙен ҡыҙ бала, төнө буйы керпек тә ҡаҡманы. Күҙен йомһа, даръяла – тулған ай, ярында – йәштәр. Факиһа апай үпкәләп ҡайтып китте, ә улар... Донъяларын оноттолар. Әсәһе Миңжиһан белһә, оят та, бит тә юҡ, тиер ине.

Ҡыҙ хыялыйланып бара, ахырыһы: гел шул ағай тураһында уйлай, гонаһлы хыялдарына баш була алмай. Был өйҙә ул – хеҙмәтсе көнөндә, хоҡуҡһыҙ бер бала: мал, ҡош-ҡорт ҡарай, аш-һыу әҙерләй, усаҡ тирәһенән китмәй. Уны бары шул иҫәр хыялы ғына йыуата. Шул уға көс бирә, билдәһеҙлек осондора. Кис була ла таң ата, тағы ҡояш бата, ҡыҙ башын күтәрмәй. Тамаҡ ялы хаҡына – Ҡотой ҡарттарҙа хеҙмәттә. Аҫрау бала ирәүән көндәрен, Әпшән донъяһын һағына. Әле генә бойороусы ине, һөт өҫтөндәге ҡаймаҡ, аҡыҡ алҡаның ҡашы, даръялағы зифа ҡамыш ине, ә бөгөн?..

Әпшән – әкиәт ине, һис иҫенән сыҡмаҫ инде. Иң төрлө төҫтәр, мең төрлө ауаздар: бал ҡорттары гөжләүе, иңкештәр быжылдауы, ҡолондар сырҡырауы... Әпшән иле ҡояш нурҙарында ирәйә. Буйҙан-буйҙарға, иңдән-иңдәргә һуҙыла. Икһеҙ-сикһеҙ даръя! Мөнирә һаман – шунда.

Аяуһыҙ яҙмыш бөтәһенән яҙҙырҙы, байлыҡтарын туҙҙырҙы, ирәүән тормоштарын ҡараңғы төнгә әйләндерҙе. Сыбыҡ осо туғандарында сырай һытып игелек күрһәтәләр, әҙәп һаҡлап йылмаялар, баш тартмайҙар былай туғандарынан, башҡортта ундай йола ла юҡ. Мөнирә белә: был үҙе үк гонаһ булыр ине, Хоҙай алдында Ҡотой ҡарт улай ҡылана алмай, алмай. Ғәбелнафиҡ еҙнәһенең әүәл Ҡотой йолҡошҡа күпме игелеге тейҙе, Ҡотой шуны онотһа, ер йотор.

### IV

Ҡотой аслыҡ башланыу менән тағы зимагурға әйләнде: йә Һатыйға, йә Златоусҡа сығып китә, суйын юл буйында эшләп, кешегә яланып йә мал көтөп, йә бесән сабышып ята. Тапҡан-таянғаны юлда ҡойолоп ҡала, тамағынан да артмай. Өйҙә ғаиләһе тамағын сөйгә элеп ултыра, мыжыҡ бисәһе туҙына:

– Һин китәһең, бында – йәтим бала... Беҙ уны ни тип аҫрайбыҙ?

– Ғаҡилә, Хоҙайҙан ҡурҡ, Мөнирә – Миңжиһан апайым яғынан туған...

– Икеме, өсмө быуын...

– Башҡортта ете туғанғаса – туған, беҙҙең нәсел биш быуынғаса туғанды туған күрә.

– Үҙебеҙ ас ултырабыҙ...

– Мөнирә мал ҡарай... Бөтә эш – уның елкәһендә...

– Ә мин эт һуғарам...

– Һин бала ҡарайһың... Мына Себер яғына китһәм, малға тейенермен. Унда завуттар төҙөйҙәр, ти, ҡайтып торормон йә аҡса ебәрермен.

– Аҡса, имеш, тот ҡапсығыңды киңерәк! Үҙең ас йөрөмәһәң ярай әле... – Ғаҡилә ауыҙынан сыҡҡанды эт тә эймәҫ. – Беҙ мында тағы ас ултырабыҙ, кит! Йә бөтә ҡырылып ятырбыҙ.

– Ни ҙә булһа эшләргә кәрәк.

Ҡотой тағы станцияға юллана, тормош көндән-көн хөртәйә. Хужа китеү менән, өйгә кәкре танау Бәлхиә эйәләште. Ҡотойҙоң алыҫ туғаны, Ғаҡиләнең күҙ көйөгө, Мөнирәгә һырышып бара. «Мин һиңә ике яҡлап та туған, әтейең Ғәбелнафиҡ киленемен – һиңә еңгә лә тейеш кешемен», – ти. Ғаҡилә уны сихырсы тип яратмай. Бәлхиә үҙе тоноп бара, себен шикелле күҙгә инеп бара. Аҙаҡ хужабикә лә күнде: Бәлхиә ауылдың бөтә хәбәрен белә, бөтә яңылыҡты өйҙән өйгә ул ташый. Ҡаты күҙле, сихыр эйәһе, яңғыҙы йәшәй. «Өй эсе ен менән тулған, Бәлхиә ҡарсыҡ шулар менән бергә ашай, эсә, бергә ятып йоҡлай», – тип һөйләйҙәр. Ендәр менән ауылға ҡаршы хөсөт ҡыла, был аслыҡ тигән зәхмәт шул сихырсының ғына эше түгел микән? Әгәр ул ендәр менән бәйле булһа, кешеләргә бәлә-ҡаза яуҙыра башлаһа...

Ғаҡилә хәҙер Бәлхиә ҡарсыҡ менән һаҡ булырға, һүҙен үлсәп һөйләргә тырыша. Мәзин был аслыҡты «Хоҙайҙың тыйнаҡһыҙ бәндәләренә ебәргән ҡарғышы» тип бара. Ә Бәлхиә үҙе иблистәрҙе ғәйепләй. Ул иблистәр, ендәр тураһында бик күпте белә. Ғаҡилә донъяның арҡыс-торҡос килеүенә, ауылға афәт ябырылыуына аптырап ултыра-ултыра ла мәзин һүҙенә ышанып та ҡуя. Мәзин ир затынан, Бәлхиә – иренең туғаны, Бәлхиә менән көн дә көрешергә тура килә. Күрше торғас ни.

– Кешеләр бер-береһенең боғаҙына йәбешһә, ҡая-таш ярыҡтарына йәшеренгән ен-пәрейҙәр иреккә сығыр, ти. – Бәлхиә ауыҙын тултырып һөйләне, был да һимеҙ иренле, табаҡ битле Ғаҡиләгә оҡшап бөтмәне. Күҙҙәре ялт-йолт итте. Мөнирә ҡото алынып күҙәтте сихырсы ҡарсыҡты. – Кешеләр мәж килгән арала, иблистәр донъяны баҫыр, ен-пәрейҙәр ер йөҙөндә үҙ хакимлығын урынлаштырыр. Ел-дауыл ҡубыр, туфан һыуы ҡалҡыр, үләндәр ҡыуарыр, йәнлектәр ҡырылыр, ҡояш та баш осонан китмәҫ. Башта бер тамсы ямғыр яумай йонсотор, аҙаҡ себен-серәкәй яуы ябырылыр. Мал-тыуар ятып үлер, кешеләр астан ҡырылыр. Үлән, бөтә йәшеллек кибер, шишмәләр ҡорор, Әй һайығыр. Ахрызаман тигәндәре шул булыр, тигән боронғолар.

– Әле беҙ шул көндә ултырабыҙмы, Бәлхиә? Мәзин дә яңы властарға ҡарғыш яуҙыра...

– Мәзин дөрөҫ әйтмәй. Был Хоҙай ҡәһәре түгел, ә ен-пәрейҙәр болаһы!

– Ун һигеҙенселәге бола кеүек буламы? – Ғаҡилә, шөрләп, яулыҡ осо менән ауыҙын ҡаплай.

– Шул уҡ мәхшәр, тағы күрербеҙ әле...

– Кеше асыға, Азамат урамында Сәмсетдиндең, Мөхәммәтйәндең, Миндеәхмәттең өй эсе шешенгән, балалары ҡыбырҙай алмай ултыра, ти...

– Ха! – Бәлхиә ҡул һелтәне. – Аслыҡ – әжәл салғыһына тиң, ен-пәрей болаһы! Оло урамды тифме, мифме ҡыра. Ул да аслыҡтан...

– И-и, Хоҙайым!

– Ханнандарҙан башланы, Жиһангилделәргә керҙе... – Бәлхиә сиселде. – Урам буйлап төшә, өй аша йөрөй. Ҡара, Ғаҡилә еңгә, башта урамдың бер яғына сыға, шунан икенсе яғына...

– Әжәл сатрашлап йөрөй.

– Ҡот осҡос, ахрызаман! Йәнәштәге өйгә кермәй, ә урам аша һикерә...

Мөнирә ҡобараһы осоп тыңлай. Ололар үлемде шулай һүрәтләй. Имеш, әҙәм башын ҡыйып йөрөй әжәл салғыһы: бөгөн бер өйҙән, иртәгә мура ашағыһындағы өйҙән мәйет сыға...

– Ҡайҙан башланды икән ул тифы? Ваба ла, тиҙәр...

– Нейә, ас кешегә ябырыла, ти, ул. Хәлһеҙ бәндәне ҡармаҡлай. Ен-пәрей өшкөртөлмәгән өйгә эйәләшә, иблис тә көсһөҙҙө, асты һағалап тора. Ә һеҙҙең өй, еңгә, өшкөртөлгәнме?

Ғаҡилә һағая.

– Әллә? Үткән йыл үҙең өшкөргәйнең түгелме?

– Эйе лә, иҫләнем. – Бәлхиә, был хәйләһе барып сыҡмағанына үкенеп, тағы ҡул һелтәй.

– Был тағы мәзиндең эше түгел микән? – тип һалды Ғаҡилә, телен тешләп. Оло затҡа тел тейҙерә.

– Мәзиндә лә ғәйеп барҙыр. – Бәлхиә уны яратмай. – Советтар сыҡҡас, ахрызаман тыуҙы, Ҡиәмәт көнө етте, тип ул әйтте бит. Донъяға ен-пәрей тулды, кеше башына бәләләр ябырылды – иблистәр кешенән үс ала. Халыҡ та аҙҙы бит, Хоҙай шуға үс итәлер, ергә афәт ебәрәлер.

Мөнирә ҡымшанмай ҙа. Ике ҡарсыҡ ҡурҡыныс нәмәләр хаҡында тылҡый. Өйҙә ашарға юҡ, шулай һүҙ бутҡаһы ғына бешермәһәләр. Ғаҡилә сихырсынан нисек ҡотолорға белмәй: теге ҡайтып китһә, баҙға йәшерелгән ҡул тирмәне менән тал ҡабығын тартыр, кискә шул тал оно менән алабутаны бутап, йәймә бешерер ине. Теге хәбәрен һуҙа, еңгәм өҫтәлгә ни ҡуйыр икән, тип көтә. Мөнирә сихырсы уйын белеп тора: тамаҡ тип йөрөй асарбаҡ. Мөнирәләрҙең үҙҙәренең ашарына юҡ, Ҡотой быуаһы Себер олаҡты.

Ҡотойҙоң ирекһеҙҙең көнөнән зимагур булғанын белмәйме ни мәғҙәндәр. Ун туғыҙынсы йылда таҡтылар шул исемде – зимагур. Ҡотой йолҡош иһә Мәғҙәндән ситкә аяҡ та баҫҡаны юҡ ине – Герман һуғышына ла сулаҡ тип алманылар. Гел мал тирәһендә йөрөнө, аттан айырылманы. Ауылға аҡтар ингәс, тәүләп уны ылауға әйҙәнеләр. Ҡотой Әпшәндәге Ғәбделмәлик еҙнәһенең аҡтар яғында йөрөүен ишетһә лә, шуларҙан игелек көтмәне. Бер яйын табып, ҡасты. Ғаҡиләһе илап бөткән, балалары имен-аман ҡайтырына өмөт өҙгән. Шул йоҫоҡҡа Мәғҙәндең әсе телдәре үҙенә исем таға. Зимагур кем була? Ҡотой, был бәләнән ҡотолғанына шөкрана ҡылып, Әпшәндәге баш ҡәрҙәштәренә туғанлығын йәшереп йәшәне. Улар өсөн дә ул йолҡош ине бит, бай нәҫелдең ырыҫы уға йоҡманы. Шулай ҙа Ғәбделнафиҡ еҙнәһе менән Миңжиһан апаһының үкһеҙ етем ҡыҙын үҙе барып алды. Ҡотой берәүҙән дә һораманы, өркмәне лә, бисәһе мыжыуын да тыңламаны. Апаһы менән еҙнәһенең йәне йәннәттә булһын, ә тереләргә йәшәргә кәрәк. Мөнирә – уның ҡаны. Ҡотой шул балаға һөйөнә, уны үҙ балаһылай итә. Аслыҡ килгәс, аҡылынан яҙыр сиккә етте, бисәһе ҡыҙ баланы артыҡ тамаҡ күрә, үҙ балалары ла ас ултыра. Әллә шуға, «ас тамағым, тыныс ҡолағым» тип, зимагур башын ситкә алып сығып киттеме икән?

Мөнирә көн дә Ҡотой быуаһын көтә, ул байлыҡ тейәп ҡайтыр тип өмөтләнә. Сулаҡ булһа ла, ир кеше бит. Башта Мөнирә бирешмәне: Беләҙекүлдең бөтә талы уларҙыҡы ине, ашлыҡ баҫыуындағы алабута, сырмалсыҡ үлән дә – ҙур байлыҡ.

Әлегәсә алабута, кесерткәндән өҙөлгәндәре булманы, кеше унығын да тапмай. Асарбаҡ ише, ер ҡыртышын ғына ҡалдырҙылар: Күл яҡ урамда хатта тәтәй үләне лә бөттө, унан Беләҙекүл тирәһендәге ҡаҙаяҡҡа ябырылдылар. Берәҙәк эт, бесәй ҡалманы. Кемдер балыҡ тота, кемдер йомран аулай. Балыҡ та, йомран да бөттө. Кеше һүләйеп тупһаға арҡыры ятты. Ас йомранға түгел, Беләҙекүлгә барып етә алмай.

Мөнирәләрҙең алабутаһы, тал ҡабығы, ҡарама ҡайрыһы етерлек. Әлегә ике ҡатын сер бирмәй килә. Ғаҡилә балаларын ҡурсалай, Мөнирә уға хәленсә булыша. Тағы ул да бала хоҡуғында инде.

Әкәмәт булды ул тифе: Оло урамдан башланы, Азамат урамына сыҡты, ә Күл яҡҡа теймәне. Ун туғыҙынсы йылда Күл яҡ тоташлай янды, әллә шуға Хоҙай араланы. Кешеләр ҙә бер-береһенән ҡаса башланы, өйҙө бикләп ашарға ултыралар. Хәйерселәр күбәйҙе, бурҙар аҡтыҡ әйбереңде алып китә. Ҡышты саҡ сыҡтылар, көҙгәсә үк бар мал һуйылып бөткәйне. Етерлек бесән дә йүнләй алманылар. Бөтә үлән көйҙө, кеше себендәй ҡырыла, зыяратҡа илтеп өлгөрмәйҙәр. Яҙ ҙа һөйөнөстән бигерәк көйөнөс килтерҙе.

Мөнирә лә, Ғаҡилә лә көн дә берәүҙең әжәле тураһында ишетеп ҡайта. Үҙҙәре өйҙән сыҡмаһа, сихырсы килеп етә. Өйгә элек бик һалыу ғәҙәте юҡ ине; Бәлхиә бигеңде лә астырыр. Ысын, эстән бикләйҙәр – Бәлхиә һин дә мин килеп инә, әллә аңдып тора, әллә келәне сихыры менән астыра? Мөнирә лә уны буйлатты, шай: еңгәһенән йәшереп кишмиш бирҙе, ондан өлөш сығарҙы. Сихырсы эс-бауырыңа инеп бара, ҡыҙҙы яҡын күрә.

– Мөнирә, һин – минең туғаным. Ғаҡилә еңгәм мыжыҡ, беҙҙе ят итә, бер-беребеҙҙе ташламайыҡ. – Шунан сихырсы үткәнгә төшөп китә, нәҫел тамырын юллай башлай. – Мин һиңә ике яҡтан да туған.

Бәлхиә Ғәбделнафиҡтың ата бер, инә башҡа туғанына кейәүгә сыға. Теге Япон һуғышынан ҡайтмай.

– Беләһеңме, аҙаҡ миңә Мәлик ҡайнағам ҡармаҡ һалды: еңгә ти ҙә килә лә етә, килә лә етә, атаҡай, ун һигеҙенсе йылғаса эҙ һыуындырманы. Дан ир ине, ҡеүәтле бай. Һауалы, ҡаты ҡуллы. Ул, ишеткәнһеңдер, Әпшәндең боронғо Дәүләтхан бай кейәүе; тегенең бөтә байлығы Мәлик кейәүенә күскән. Шуға был тирәлә Мәликтән дә байыраҡ кеше юҡ. – Сихырсы ян-яғына ҡарана, гүйә, береһе уларҙы аңдып-тыңлап тора. – Шул шөһрәтле ир – минең яҡыным. Шуға мине Ғаҡилә еңгәм дә яратмай, яҙыҡ юлда йөрөй, тип ғәйепләй. Ә мин, хәләлемдән бигерәк, шул Мәлик байҙы һөйҙөм. Атаҡай, ниндәй бүләктәр ташый торғайны! «Алтын-көмөшкә күмәм үҙеңде, ишегең гел шар асыҡ торһон!» тиер ине, мин ни әҙер… Бошмай, донъя тип көймәй йәшәнем, балда, майҙа йөҙҙөм.

Апаһы ыңғайына Мөнирә лә әүәлге етеш тормошто хәтерләй, күҙ алдына батман-батман бал һарҡытҡан, көбә-көбә ҡымыҙ бешкән саҡтар баҫа, хатта күҙҙәренә йәш тула, йөрәге ҡаға башлай. Бәлхиә хәбәрен сурыта ла сурыта, Мәлик бай менән һөйөшөүҙәрен һөйләй, төнө буйы әкәмәттәр ҡылып бөтөүҙәрен тасуирлай.

– Мин оятын үткәм инде, һин дә ҡатын кеше. Быны ғәйеплегә һанамаҫһың, – тип ҡуя сихырсы. – Бисә ни өсөн тыуа? Һөйөшөү, ир наҙлау өсөн! Бисәнең урыны ҡайҙа? Түшәктә! Бисә түшәктә генә матур, ул унда бәхет кисә – ул бәхеткә, бел, бер бәхетең дә етмәй. Бисә түшәк өсөн тыуған ул, ҡыҙым, шуны онотма!

Әллә нәмәләргә төшөп китә, әллә ниҙәргә өйрәтә был эт бисә. Ғаҡилә еңгә өйҙә юҡта ҡыҙ баланың күңелен аҙҙырып, йәнен ҡуҙғытып ҡайтып китә. Мөнирә иһә уның тураһында уйлай, Бәлхиә ҡарсыҡ өсөн Мәлик хыял сиге

булһа, уға гимнастеркалы шул ағай оҡшай. Ул да, апаһы һымаҡ, волисполком башлығын һөйөр ине, ул да түшәктә йофарҙай уйнар ине.

– Сабаҡ – күлдә, ә ҡыҙсыҡ түшәктә уйнай, – тип өйрәтә бит Бәлхиә апаһы, дөрөҫ әйтә. Мөнирә шуны ғына белмәйме! Ҡотой ҡарттар ҙа саҡ ҡына унын башын ашаманы. Теге мәзингә өсөнсө бисәлеккә килешеп бөткәйнеләр, ризалығын алып тороу ҙа юҡ. Эстән Мөнирә үҙе лә күнгәйне, һуңынан, мәзинде күргәс, күңеле ҡайтты. Мөнирә ир ҡуйынына инергә әҙер ине, йәше лә үтә, ултырған ҡыҙ һанала. Хыялы – буй еткеһеҙ волком рәйесе – һонолоп та етә алмаҫ ҡош, бейектә оса. Ә Мөнирә – бай ҡыҙы, бөгөн Ҡотой ҡартта хеҙмәттә булһа ни... Тағы шул түрә ағай тип ул бушҡа ымһынырға тейешме? Башы ҡатты.

Элекке заман булһа, бөгөн мәзин ҡосағында иркәләнер ине. Былай аслыҡтан миктәгәнсе, өсөнсө, дүртенсе бисәлеккә лә риза. Хәҙер егет ҡайғыһы китте, уйында ашау, ашау ғына, мәзингә түгел, шайтандың үҙенә барырға риза. Шундай шайтан табылһа, ул бай ҙа булһа, үлтермәй ашатһа...

Мөнирә хыялыйланып бара, буғай. Сихырсы ҡарсыҡ та күҙҙән юғалды, Ғаҡилә еңгәһе лә ҡайҙалыр олаҡты. Ә сабыйҙары ҡайҙа икән? Еңгәһе уларҙы күрше ауылдағы атаһына илткәйне, әллә үҙе лә шунда микән, уларҙан ҡасты микән? Унда ашарға барҙыр, унда еңгәһе үлмәҫ... Улар бөтәһе лә үкһеҙҙе ташлап китте, Ғәбделнафиҡ бай ҡыҙын оноттолар.

Мөнирә ғәрлегенән илай. Ҡасан ғына тал ҡайрыһы оно, алабута бар ине – ашап бөттөләр. Ғаҡилә еңгәһе күнәк төбөн ҡырып-һепереп кергәйне – Мөнирә үҙ күҙҙәре менән күрҙе, еңгәһенә иҫкәртмәй, артынан барып ингән булғайны. Соланда йәшерелгән бер нәмә лә ҡалманы микән? Ҡыҙ бала әлһерәгән быуындарын яҙылдырып торҙо, абына-һөрлөгә оло мейескә етте. Стенаға тотона-тотона барҙы, ҡараңғыла оҙаҡ һәрмәнеп-төртәләнеп йөрөнө. Әллә ниндәй йәшниктәргә абынды, ҡоштабаҡтарҙы түңкәрҙе. Күҙ алды томаланған, ҡайһы берҙә ҡаршыла ваҡ ҡына йондоҙсоҡтар һикерешә башлай, өнө менән төшө бутала. Соланда оҙаҡ эҙләнде асарбаҡ, бер ни ҙә тапманы. Тоҡтар буш, йәшниктәр түңкәрелгән, мәтрүшкә менән юл үләненән башҡа бер ни ҡалмаған... Бәй, мәтрүшкә тигәне тал сыбығы булып сыҡты. Шуны тарттырырға йыйынғайнылар. Ҡайҙан балта табып тураҡларға? Онтап, шуны һыуға ыуып ҡайнатырға...

Уйы шул тәңгәлгә еткәс, йығылды. Оҙаҡ ятты, иҫе юйылғайны. Оҙон бер дәүер үткәндәй итте. Тағы айныны, үҙендә әллә ниндәй көс табып, өйгә кире инде.

Бәлхиә ҡарсыҡ ни йомошо менәндер ҡабат һуғылғайны Ҡотой ағаһы йортона. Ғаҡилә һаман ҡайтмаған, өй эсе буш. Әллә бөтәһе лә үлеп бөткәнме? Мөнирә ҡайҙа? Әле генә хәбәр тыңлап, өйҙә ултырып ҡалғайны ла.

Сихырсы ҡыҙ баланы ишек тупһаһында тапты. Үлгәндер тигәйне башта, түшендә леп-леп тауыш итә. Леп-леп тигән өн серәшә, йән әйәһен был донъя менән бәйләй әле. Шул нескә еп тә өҙөлһә...

Ҡарсыҡ урамға ташланды, тура волость идараһына юл тотто, ҡабаланып тура башлыҡ кабинетына барып инде.

– Ҡамса, унда... Унда Мөнирә ҡыҙым... Ул һине ярата, һин тип бөтөрөнә. Мөнирә... Астан йығылды!

– Ҡайҙа?

– Ҡотой абзыйым өйөндә.

– Үҙе ебәрҙеме? – Ҡамса, дәрәжәһен онотоп, малай-шалай шикелле сәбәләнде.

– Бер кем дә юҡ, бөтәһе лә ташлап ҡасты!

Ҡамсаға ла ут ҡапты, бүркен эҙләне. Теге имсе лә мәкерле:

– Улым, ыумасҡа бер ҡаҙаҡ он яҙ! Ул – ас!

Ҡамса аҡты-ҡараны айырманы, аяғы тейгән ергә тейҙе, теймәгән ергә – юҡ. Күҙ алдында бер һын ғына һикерешә – ҡамыштан зифа һын. Күҙ алдында – шул һын, ҡолаҡ осонда – Бәлхиә ҡарсыҡтың өнө: «Ул һине көтә, һин тип йән ата...» Ул ел ҡапҡаны ҡайырып ҡына асты, күтәрмәгә һикереп менде. Солан ишеге лә шар...

Күл ҡыҙы түшәккә һуҙылып төшкән. Ҡаштары ҡыйғас, ирендәре килешле, шунда йылмайыу йомолоп ҡалған. Был – Мәғҙәндә генә түгел, ә ер йөҙөндә тиңе булмаған сибәр, астан йығылған...

Хур ҡыҙы күҙ ҡабаҡтарын күтәрҙе. Оҙон керпектәр аша был донъяға баҡты. Ҙур, зөмрәт күҙҙәр... Тирә-яҡ яҡтырғандай итте, ҡотһоҙ өйгә ҡот ҡунды, төҫһөҙ йыһаздар балҡыны. Әкиәт ҡыҙы менән, гүйә, был донъя ла терелде.

– Миңә рәхәт, – тигән һүҙҙәрҙе ишетте ир. Әллә ҡыҙ бала «мин ас» тип әйттеме?

– Мөнирә...

Түшәктәге зат йылмайғандай итте, ир тертләне. Ҡыҙ бала, һыҙланып: «Килдеңме?» – тине. Һылыуҡай көскә этеп сығарҙы күкрәгенә тулған тынды. Наҙы ла, аңлашыуы ла шул ғына булды, инде аралағы кәртәләр емерелде, улар күҙ ҡараштары менән һөйләште.

– Ниңә оҙаҡланың? Мин һине шундай оҙаҡ көттөм...

– Мин бушаманым – эш күп, ауыл асыға. Көн дә үлем, көн дә... Кантком бушатмай. Кәңәшмәләр...

– Йонсоноңмо? – Хәлһеҙ устар ҡырыҫ ирҙең иңбашын һыпыра, сәсенән йөрөй. – Хәл йый! – Яңаҡтарын иркәләй йоҡа устар. – Мин һине көттөм...

– Мөнирә... Мин ҡыйманым, Мөнирә...

– Мин – юҡ!

– Кеше һүҙенән ҡурҡтым...

– Мин – юҡ!

– Һин – батыр, Мөнирә.

– Һин – ҡыҙылармеец!

– Һине бай ҡыҙы тиҙәр, мин бит...

– Мин һине көттөм... – Ҡыҙ ҡалҡына биргәндәй итте, тағы һыҙланып, түшәгенә ауҙы.

– Мөнирә, һин тереләсәкһең...

Сихырсы ҡабалана, ләкин үҙ эшен белә: ҡыҙҙы кире йоҡларға һала. Теге бер ни аңғармай. Ул хатта Ҡамсаны ла танымаы, бары тормошҡа сатырман йәбешеү тойғоһона буйһоноп ҡына ашаны, хәбәр һөйләне. «Хәҙер терелер», – тине имсе, волисполком рәйесенә баш ҡағып.

Унынһы бынан һуң Ҡотой ҡарт йортона йыш һуғылыр булып китте, имсе лә шунда буталды – улар Мөнирәне ҡуша тәрбиәләне, бер-береһенә өйрәнешеп бөттө.

Мөнирә яйлап йүнәлде. Ул түшәктә аунаған арала Мәғҙәндә күп хәл-әхүәлдәр булып алды. Властар асығыусыларға Америка ярҙамы менән бушлай ашхана асты, шулай ҙа күптәрҙе ҡотҡарып булманы: тиф менән ваба Оло урам менән Азамат урамының яртыһын ҡырҙы; ни мөғжизә менәндер, Күл яҡ урамға ҡағылманы; күрәһең, Хоҙай аралағандыр. Хатта зыяратҡа илтер өсөн кеше таппай башланылар. Әжәл һаман сигенергә теләмәне, балалар шешенде, күптәр бер ҡашыҡ ҡатыҡҡа зар-интизар булып ултырҙы.

Ҡамса шул мәхшәр эсендә ҡайнаны, үҙе лә ҡырағайланды. Ярай, балам юҡ, бисәм ҡыҫыр, тип йыуанды. Ҡотой йорто, Мөнирә донъяһы шул хәсрәт дарьяһы

уртаһындағы тылсым утрауы һымаҡ ине. Шунда ашыҡты, шунда ҡырыҫ ир йәнелә ял тапты.

– Атты юрый Беләҙекүл буйына тышайым...

– Һин...

– Көн дә үҙем килеп алам, көтәм: был күҙемә салынмаҫмы, тим.

– Ҡамса...

– Кис тағы – күл буйына! Беләҙекүлгә төшмәҫһеңме, күрешмәҫбеҙме, тим.

– Ҡамса...

–... Күңелем булыр, йәнем баҫылыр ине...

– Мин хыяллана ла алмайым, мин – өркәк ҡолон... – Ҡыҙсыҡ шыпырт ҡына көлә, йәнәһе, буш өйҙә берәйһе ишетә була.

– Мөнирә, мин...

– Һин... – Көлә ҡыҙ бала, башын ирҙең ҡалҡыу күкрәгенә һалған да түгелә.

– Мин башыма ла килтерә алманым.

– Һин... – Күҙен йәшерә ҡыҙ.

Былар тағы сабый балаларҙай шаярыша, шулай көндәре үтә. Күпме осрашһалар ҙа, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй.

– Ә мин һинән ҡурҡтым...

– Ә мин кешеләрҙән ояллдым, Мөнирә...

– Мин дә Ғаҡилә еңгәмдән тартындым, Ҡотой быуайымдан өркөм, Факиһа апайҙан шөрләнем. Теге ваҡыт күл буйында киске уйында бейегәндә икегеҙҙән күҙемде яҙҙырманым!

– Мин дә!

– Мин һинең менән бейер инем...

– Күл буйында кеше бит...

– Булһын!

– Беҙҙең балабыҙ юҡ!

– Факиһа апай бар...

– Әйҙә, был турала һөйләшмәйек.

Һүҙҙе икенсегә боралар. Һирәк-һаяҡ өйгә Бәлхиә ҡарсыҡ һуғыла. Тегеләр уға өйрәнеп бөткән. Бәлхиә әбей – үҙ кеше, Мөнирә – хужабикә, ә Ҡамса – уның ҡунағы. Уларға бергә рәхәт...

Әйләнә-тирәлә – мәхшәр, аслыҡ, тиф ҡотора, ә бында – йәннәт, бәхет утрауында ғашиҡтар, затлы ҡоштар һымаҡ, мөхәббәт телендә сутылдаша. Емеш ағастарынан балдар тама, сәскә-гөлгә сумған был ил, сәскә-гөл уртаһында шәрбәт күлдәре хасил иткән. Шул күл буйында – ғашиҡтар.

Башын юғалтты ир, мөхәббәт шарабынан иҫерҙе. Ҡасан килеп етә, хужабикәһе лә көтөп тора. Урамда – мәхшәр, бында – бүтән донъя, ят кешеләр, икенсе телдә һөйләшәләр. Урамда күҙҙәр асыла, бында – томалана, гөл баҡсалары үҫә, ғашиҡ ҡоштар һайраша. Шул тутыйғоштарға ем һибеп тороусыһы ла бар: Бәлхиә әбей тәртибен белә, эшен оҫта башҡара.

Күҙ алдында ғына тора, гүйә, шул картина. Һылыу – салҡатан, бит остарына йылмайыу йомолған. Ир ойой, тәнен тоймай. Әллә сихырланылармы? Әллә был Бәлхиә ҡарсыҡ эшеме? Волисполкомға йүгереп барҙы... Аҙаҡ, был хаҡта һөйләгәс, Мөнирә көлә... Әгәр шунда имсе ҡарсыҡ булмаһа, ул бөгөн көлөп ултырмаҫ ине.

Улар һөйөш уйындарынан арманһыҙ була. Аҡ сабаҡ түшәктә уйнай: бер ҡалҡына, бер төшә, бер ҡарпый, бер күҙҙән юғала; йомро беләктәре муйынына урала, тағы онотола. Тәне йоп-йоҡа, бал ҡортондай нескә генә биле, йомро ҡулбаштары, янбаштары – ир һаташа.

## V

Ҡамса Мөнирәне Америка ярҙамы менән асылған ашханала әпәй бешереүсе итте, хәҙер апай менән ҡыҙының көнө еңеләйҙе. Ҡотой зимагурҙан да, Ғаҡилә еңгәнән дә ҡош телендәй хәбәр юҡ.

– Гонаһтарға баттым, Ҡамса, бисәле ирҙе һөйҙөм...

– Мин ғәйепле: бисә өҫтөнән йөрөп, йәп-йәш йәр һөйҙөм, икеһен дә бәхетле итә алманым. Йә бисәм күнмәҫ, йә һин йәш...

– Миңә урамға сығырлыҡ, кеше күҙенә күренерлек түгел. Бәлхиә апай, Ҡамса һине ас үлемдән ҡотҡарҙы, ти.

– Һин миңә бурыслы түгел, мин һинең сараһыҙ сағыңдан файҙаландым.

– Мин һине үҙем саҡырҙым бит. Әлдә килдең. Мин һине тыным менән һурып алырҙай булдым.

– Барыбер үҙем ғәйепле: белһәләр, вазифамдан төшөрәсәктәр.

– Ҡурҡаһыңмы, ҡуян йөрәк?

– Юҡ.

– Улайһа, миңә өйлән! – Шарҡылдап көлдө шаян.

– Һин миңә икенсе бисәлеккә ризаһыңмы?

– Риза. Бөтәһе лә икенсе бисә ала, әтейем дә... Боронғо ғәҙәт.

– Хәҙер бүтән заман.

– Ҡурҡаҡ! Ә әтейем бик ҡыйыу булған. Ғәбделхалиҡ абзыйым да, Ғәбделмәлик абзыйым да...

– Контрҙар! – Ҡамсаны ҡорт саҡтымы ни?

– Шаҡый. Улар һинең ише өркөп йәшәмәне, ә аяғүрә баҫып үлде. – Күҙҙәре зәһәр сәсте. – Һин йәшеренеп ятып йәр һөйәһең.

– Мөнирә...

– Бүтән килмә!

– Һин ауырлы бит...

– Ауырымды төшөртәм, көймә, муйыныңа аҫылынмам. Бәлхиә апайым... кендек әбейем дә булыр. Һин бер минең менән генә йөрөмәнең бит, ана, астан шешенгән күпмеһе һинең аҫтыңа ятты. Улар бөтәһе лә ауырҙарын Бәлхиә апайымдан төшөрттөрҙө.

– Мөнирә!

– Дөрөҫлөк күҙгә төртәме? Ҡамса түгел, ә ҡамсы һин! Бар, Факиһаңа ҡайт, мин дә һиңә тағылып ятмам: бел, астар ғорур була ул, ир тип ялбармай. Уларҙың ашағыһы, йәшәгеһе генә килә, бары шул ғына.

– Минең ни ғәйебем бар? Бөтә ил асыға, бөтә Рәсәйҙә ваба, тиф.

– Һин Мәғҙәндә, налог тип, бөтә кешенең һуңғы бөртөк ашлығын ҡырып-һепереп оҙаттырҙың!

– Юғарынан ҡуштылар!

– Һин үҙеңдең башыңды ғына уйланың, вазифаңдан яҙыуҙан ҡурҡтың. Налог, налог – бар белгәнең шул булды.

– Мин – эш кешеһе, Мөнирә, һинең менән шулай һөйләшкәс тә...

– Һөйләшмә, килмә, күҙемә күренмә!

Мөнирәне алмаштырып ҡуйҙылармы ни! Ауырға ҡалыуын белгәс шулай яһилландымы? Шаярҙы, көлдө, хәсрәт күрмәй үҫте. Аслыҡ, Әпшәндәге һуйыш уның күҙен асты, уны уҫал итте.

Ул волисполком рәйесенән ауырлы. Волисполком башлығынан күп бисәләр йөклө, тип һөйләйҙәр. Шул һүҙҙәр, был тормош, аянызлы яҙмыш Мөнирәнең дә йәнен иҙә, уны ла уттан алып һыуға һала. Ул да яһилланырға, асырғанырға мәжбүр, ул да үлем менән яғалашты; Әбделнафиҡ байҙың иркә ҡыҙын тормош күҙенә тура ҡарарға өйрәтте.

## VI

Мөнирә, ашханала эшләй башлағас, йомролана төштө, тәненә ит ҡунды. Бите түңәрәкләнде, күҙенә элекке осҡон, нур ҡайтты. Еңел һөйәкле ине лә ул, бал ҡортондай нескә билле, ҡулдарына күҙ эйәрмәй, бай балаһы булһа ла, эш рәтен белә, нимәгә тотонһа ла, ҡулынан килә. Хәлһеҙ балаларҙы бигерәк үҙ итә, уларҙы һөйөп ебәрә. Уның ҡулы йомшаҡ, ҡул арты ла еңел, тиҙәр. Яңы хужабикә күптәргә оҡшап өлгөргән. Кеше араһына сыҡҡас, был һөйкөмлө баланы тиҙ үк күрҙеләр, артынан һөйөп яраттылар. Алдынан да, артынан да маҡтап һөйләнеләр. Имеш, Мөнирә – сибәр, мөләйем зат, имеш, уның ҡулы шифалы, күҙҙәре нур ғына бөркә. Әбей-һәбейҙәр ҙә һөйләне, ир-аттар ҙа таныны: был бала кем өлөшөнә яҙған көмөш?

Мөнирә үҙе иһә был хаҡта баш ватмай: йәше етһә лә, кейәүгә сығыу хаҡында уйламай, ул берәүҙе һөйә бит, ул – берәүҙең йәриәһе.

– Ҡамса, миңә яусы килде…

– Нисек? – Ирҙең йөҙө ҡарайҙы.

– Һатыйҙан, Бәхтейәрҙән! – Мөнирә көлә. Сысҡанға – үлем, бесәйгә – көлкө.

– Бәхтейәр? Бухаринсы!

– Әллә мин Бәхтейәрен дә, Бухайырын да белмәйем.

– Бохайыр түгел – Бухарин! – Ҡамса ишекле-түрле баҫа. – Бәхтейәр – нэпман!

– Уныһы кем тағы?

– Нейә, лавочниктар, кулактар… Улар кире ҡайта, магазин аса, ашлығын баҙарға сығарып һата.

– Теге Коля кире ҡайтамы? Лавкасы. Уны ҡасҡан тиҙәр бит, әллә ун һигеҙенсе йылдағы болала үлгәнме?

– Коля ла кире ҡайтыр, таш лавкаһын да асыр; буржуйҙар кире үҙ фабрикаларын, заводтарын ала, тағы эс кәпәйтеп йөрөй.

– Кем, Бәхтейәр ҙә лавочникмы? – Ҡыҙ йәнә көлә.

– Ул – учитель… Нэпман! Байназар бай балаһы! Һатыйҙа айырым хутор төҙөп йәшәй, шунда нэпман булып байып ятмаҡсы. Йән тартмаһа, ҡан тарта…

– Бер ни ҙә аңламаным. – Мөнирә башын сайҡаны. – Аңлат!

– Аңлат тип… – Ҡамса тыныс булырға тырыша. – Нэпман тиеүем шунан: Бәхтейәр учителдең башы шул яҡҡа ҡарап тора, ул үткән заманды һағына, шай, гел байҙарҙы, уҙған тормошто маҡтап һөйләй. Уны тыңлаһаң, большевиктар яман, ә совет хөрт, беҙҙең волисполком йүнһеҙ, халыҡтың асығыуына ла яңы власть ғәйепле. Большевиктар килде – һуғыш сыҡты, артынан продотрядтар халыҡты таланы, аҡтыҡ ашлыҡты һепереп алды, шул арҡала волоста аслыҡ башланды, ти иҫәр. Улайға китһә, бөтә кантон, бөтә Башҡортостан, Рәсәй асыға. Беҙ генә мофталлаға төштөкмө? Граждандар һуғышы ғәйепле, ҡоролоҡ булды, байҙарҙың Алла быуайы ямғыр яуҙырманы – шуға аслыҡ килде. Беләһеңме, Мөнирә, Бәхтейәр учитель тыумыштан нэпман, уның ҡанында бар… – Ҡамса төкөрөгөн сәсә, әллә ниҙәр иҫбатларға тотоноп китә, Бәхтейәрҙе нисек кенә яманларға белмәй. – Беләһеңме, уның ҡарттаһы Байназар ауылда иң ҙур бай булған, өйөр-өйөр йылҡы тотҡан, көтөү-көтөү мал. Улар Азамат урамы башында торған. Хеҙмәтселәре лә күп булған, ярты Мәғҙән уға ялланған. Байҙың оло бисәһе Шәһәр ҡарсыҡты Зәһәр ҡарсыҡ тип йөрөткәндәр. Имеш, шул әйтә була: «Каштаҡтау емерелһә емерелер, тик минең байлығым емерелмәҫ!»

– Эребикә булғандыр ул, – тип ҡуйҙы Мөнирә ниңәлер.

– Солтанбикә итеп хис иткән үҙен – ни ҡылһа ла, хаҡ.

Шунда хәбәр өҙөлә. Ир шымған ишенә ҡабат һарыла. Ҡабат тәндәр ҡушыла, инде тағы донъя ойой, ауаздар тыма. Был булмышта хәҙер икәү генә, иштән-иш тибә йөрәктәре…

...Икенсе тапҡыр Ҡамса үҙе ҡабат Бәхтейәр учитель тураһында һүҙ ҡуҙғатты:
– Бәхтейәр өйләнгән бит, бисәһе бар.
– Бисәһе менән хөрт йәшәйҙәр, ти Бәлхиә апай, – Мөнирә лә яуабын таба.
– Хөрт ни, яҡшы ни – барыбер йәшәйҙәр: ир менән бисә.
– Һинең дә бисәң бар, – Мөнирә көлдө.
– Мин бит... – Ҡамса әйтеп бөтөрмәне.
– Бисәң бар, ә миңә киләһең, өйләнергә жыйынмайһың, былай ғына йөрөйһөң. Йәшертен-боҫортон, ҡаса-боҫа! – Мөнирәнең күҙҙәрендә ят осҡондар сәсрәне.
– Мөнирә, ни бит... – Ир тотлоҡто, уның менән нисек һөйләшергә белмәне.
– Ә Бәхтейәр миңә өйләнергә теләй, бөтә кеше алдында яусы ебәрә, һин миңә кейәүгә сыҡ, йәмәғәт алдында ир менән бисә булайыҡ, ти.
– Яңы власть күп ҡатынлыҡты хупламай...
– Ә йәшертен-боҫортон рөхсәтме?
– Юғарыла белһәләр...
– Урыныңдан алырҙар, вазифаңдан ҡолаҡ ҡағырһың!
– Мөнирә, тыңла: Бәхтейәр һине икенсе бисәлеккә ала бит – хурлыҡ! Һин йәш, һин... – Ҡамса ҡабат тонсоҡто.
– Хурлыҡ, имеш. Мин былай ҙа хурлыҡта йәшәйем, уйнаш итәм...
– Мөнирә, һин саф, һин һыу һөлөгө... – Ҡамса ары һүҙ тапманы.
– Оло гонаһ алдым башыма: беҙҙе мулла ла, бер кем дә ҡушманы, кешеләр, шәриғәт алдында ғәйеплебеҙ.
– Мин һине яратам...
– Факиһа апайҙы ослатһам, йә урап, йә баш баҫып уҙам. Йөҙөнә ҡарай алмайым.
– Һин әллә ысынлап Бәхтейәргә сығырға жыйынаһыңмы? – Ҡамса асырғанып ҡысҡырҙы.
– Белмәйем, башым ҡатты, бер ни ҙә уйларлыҡ хәлдә түгелмен. Былай ҙа килешмәй.
– Уныһына ҡурҡма!
– Инәйемдәр, ҡыҙ бала иргә барырға, ир менән йәшәргә тейеш, тип өйрәтте, зина – Ҡөрьәндә лә гонаһ... Ә һин мине аҙҙырҙың, һин күп ҡыҙҙарҙы юлдан яҙҙырҙың. Аслыҡта Мәғәндә, нәҫел айғыры кеүек, бисәнән бисәгә йөрөнөң. Усында власть тотҡас ни.
– Мөнирә...
– Мөнирә, имеш. Бисәләр һөйләй.
– Ғәйбәт! Мин һине генә яраттым. – Ҡамса үрһәләнде.
– Һин хәҙер, мине бераҙ яусылағас, йүгереп килеп еткәнһең.
– Бәхтейәр һиңә тиң түгел, ҡарт...
– Һинең тиңең! Мине үҙеңдең йәриәң итеп тотмаҡсыһың, ә үҙең өйләнмәйһең...
– Мин – большевик!
– Башҡаларҙы миңә яҡын юлатмайһың!
– Мөнирә, мин һине... онота алмаясаҡмын!
– Миңә саҡлы йәшәгәнһең.
Ҡамса тағы, тағы килде, тағы ялбарҙы:
– Мөнирә, һин ысынлап хәл иттеңме?
– Юҡ, башым тубал...
– Мин һине яратам.
– Бер балыҡ башы... Факиһа апай менән балаларығыҙ юҡ, ә һин бала яратаһың. Минең һинән балам буласаҡ!

## Икенсе киҫәк

Әшем эйәләре уны, тормош арбаһынан төшөп ҡалған, ашарын ашаған, эсерен эскән, тип һанайҙыр; урамда ла күрмәй үтәлер... Хәҙер ул хәтирәләрендә йәшәй, үткәндәге шатлыҡтан да олораҡ шатлыҡ, кисергәндәренән дә олораҡ бәхет булмаҫтыр. Теге хәтәр хәбәрҙе алғас, иҫе яңырҙы.

Оло ҡыҙы менән әсәле-ҡыҙлы донъя көтәләр. Аш-һыу өлгөртә, мал-тыуар ҡарай. Туған-тыумасаһы ишле, Мәғҙәндә лә, Бурансыла ла, Кәшкейәктә, Дневаловкала, Мәсәғүттә, Дыуанда, Йыланышта, Һатыйҙа, Әбсәләмдә, Мөлкәттә, Мәрйәмғүлдә, Арыйҙа, Һикеязда, Йоноста, Йосопта, Әпшәндә, Ҡаранайҙа, Әптерәштә, Яуышта, Үгеҙҙә, Мишәрҙә, Бәләкәй ауылда, Ясинда, Аҡҡында, Тимерәктә, Аҙанғолда, Тайышта, Әбдрәхимдә, Төрөпкилделә, Айыпта, Ләмәҙтамаҡта, Һабанаҡта, Һөләймәндә – күп улар. Был өй хәҙер – нәҫелдең төп йорто, бөтә нәҫелнәсәп шунда йыйыла. Йөҙө яҡты, һыйы татлы. Туғандар был заттан рух ныҡлығы, күңел бөтөнлөгө ала. Юлдары уңмаһа, ҡашығаяҡта һауыт-һаба шылтыраһа, ҡайғы-хәсрәткә батһалар ҙа, уға һырығалар. Инә ҡорт тере саҡта ғына күс йәшәй. Ул йәндәрен баҫыр, кәрәкле һүҙен әйтер... Таш менән атҡанға ла аш менән атыр, һис әрләшә белмәҫ, шелтәһен дә йылмайып, мәрәкәләп белдерер. «Бәй», «и-и» тиеүе иң оло ғәйепләүе булыр. Уны, хатта ирен ғәфү иткән, тип һөйләйҙәр. Көндәше сырхағанда, Дыуанға барып, тегенең балаларын да ҡарашҡан икән. Ниндәй зат шулай итә ала? Ир бирмәк – йән бирмәк тә!

Ә был – сабыр бәндә... шуға иплегә һырығалар, шуға ул тоҡом дилбегәһен тотоп тора.

### I

Имсе Бәлхиәнең йәйеңке ирендәре көрән сейәләй күм-күк, күҙҙәре төпкә батып киткән, үтәнән-үтә күрә, тишә ҡарай.

Ҡыҙҙың йөрәге сәнсә, битен ҡыҙыл тут баҫҡан. Теге саҡта Ҡамса, Бәхтейәр нэпманға сыҡма, тип йөрөнө. Бәлхиә апаһы ла инде...

Ҡыҙҙың бөгөн әллә нимәгә йәне көйөп тик торҙо.

– Һин хәҙер мине ғәйепләйһеңме?

– Юҡ. – Мөнирә өҙлөктө. – Мин хәҙер ниндәй ҡиәфәттә, шунда астан үлеп кенә ятһам...

– Атаҡай!

– Гонаһтарға баттым, апай, нишләйем? Мин кешеме? Берәүҙең яҫтығы!

– Ас үлемдән ҡотҡарҙым – шулмы рәхмәтең?

– Апай...

– Туҡта, тыңлап бөт! Был – тәҡдир, һинең маңлайыңа яҙылғаны...

– Апай...

– Ҡурҡыныҫмы? Ҡотой абзыйым – Себерҙә, еңгәм өйөн ташланы, ауыл мәйет менән тулды, балалар шешенә, мәйеттәрҙе бүрәнә ише өйөп ҡуялар... Ҡамса ашханаға ҡуйҙы, тамағыңды туйҙырҙы... Һеҙ күктә фәрештә булып осоп йөрөгән сағығыҙҙа уҡ бер-берегеҙгә инселәнгәнһегеҙ; бары ерҙә әҙәм сүрәтендә яралғас, иблис аймылыштырған: Ҡамса – Факиһа, һин – етем... Бары табыштығыҙ! Күҙҙәрегеҙ күреп туймай, тәнегеҙ тартыла – мин күрмәйемме? Әллә нисә саҡрымдар һеҙгә ара түгел, әллә нисә бәләләр һеҙгә кәртә түгел! Һин Беләҙекүлде күҙәтәһең... Әллә мине күрмәй тимең? Беләҙекүлдә – ғашиҡтар, күҙҙәрегеҙ әйтә, им-ишарағыҙ һата, һеҙ – бер иш, ҡушар ҡанат. Мин һеҙҙе бары ҡуштым ғына. Шунда волисполкомға бармаһам, ғәфү итмәҫ инең... Аҙаҡ ни булһа ла, кемгә тормошҡа сыҡһаң да, кеше аңлар... – Имсе тынманы. – Мин ете ҡат ер аҫтында йылан көйшәгәнен дә һиҙәм. Һеҙҙең һөйөнөсөгөҙ – күҙҙәрегеҙ ҙә, бәхетегеҙ анау Биҙәртау саҡлы. Йөҙөңә баҡ – ул ни һөйләй, күҙҙәреңә...

Һатый – тәбиғәт бишеге, еләге турғай ҙурлыҡ, айыу көпшәһе beləк йыуанлыҡ; серәкәйҙәре иңкештәй, ә иңкештәре сыйырсыҡҡа тиң. Ә һыуҙары? Шәрбәт тәме әйтә, һалҡынлығы теште ҡамаштыра, үләне ат бауырынан. Бында ла Әпшәндәгесә иңкештәре гөжләй, еләк есенән баш әйләнә, һауала ут таны – уф тип әйт, гөлтләп тоҡанып донъяһы. Утлы ул табаҡ баш осона ҡаҙаҡлап ҡуйылған төҫлө – көн буйы ҡымшанмай.

Һатый – донъяның төпкөлө, кешеләр бында ял итә. Бәхтейәр ҙә Һатыйға тормоштан, революцияларҙан, Мәғҙәндең үҙенән ҡасып килгән. Һатыйҙа тыныс, берәү менән дә бәхәсләшмәйһең.

Ҡамса кеүек үк ҡалҡыу һынлы. Баҫалҡыраҡ, хатта аҡыллыраҡ та һымаҡ. Ауырыраҡ... Мөнирә Бәхтейәргә бисә өҫтөнә бара.

Туй аттары Бәхтейәр ҡапҡаһына етте, сапсып торған була малҡайҙар, ә ихатала шыш та быш та юҡ. Ҡаршы алыусылар ҡайҙа? Берәү ҙә аттарҙың башынан тотмай, муйынынан аҫа таҫтамал һалыр ҡоҙалар ҙа күренмәй.

Бәхтейәр ҙә ғәрсел – сер бирмәй, кырандастан төшмәй, йәнәһе, йола тота, әҙәп һаҡлай Ҡотой ҡарттар ҡаршыһында. Ни саҡлы ғүмер үтә.

Һуңынан аңғарыуҙарынса, оло ҡатын ҡапҡаны астырмаҫҡа ҡушҡан икән. Өй эсе хужабикә һүҙен йыҡмаған. Ул – оло көндәш, кесе көндәшен күрмәмешкә һалыша, күҙгә элмәҫкә маташа. Барыбер яҙмышына күнмәне: донъяһын йөкмәп, ауылына ҡайтып китте. Хатта хушлашҡанда әйткән һүҙҙәрен онотмаған: «Уңмаҫһың, рәнйешемде алып килдең, хәҙер элекке заман түгел, был хәҙер – яҙыҡ; бисә өҫтөнә бисә йәрәшеп, Бәхтейәр үҙе лә мандымаҫ – ҡыҙыл тиҙ уңа, Бәхтейәр – сәскәнән сәскәгә ҡунған иңкеш, ғүмере шулай уҙыр. Һин тәүгеһе түгел, һуңғыһы ла булмаҫһың».

Бәхтейәр – уҡымышлы кеше, әллә ниндәй гәзиттәр алдыра, Мәғҙәнгә йөрөп уҡыта, донъяһы ята, көн буйы мәктәптән ҡайтып инмәй. Мөнирә һиҙә: Ҡамса кеүек Бәхтейәр ҙә ил, донъя хәл-әхүәлдәре менән ҡыҙыҡһына, улар икеһе лә – политиктар. Тағы шуныһы ла билгеле булды: Бәхтейәр яңы властарҙы бик һөйһөнмәй икән, иҫкене һағынғаны һиҙелә. Бисәһе лә, бай ҡыҙы булғас, уйындағыһын йәшермәй. Ә Мөнирә һаман уны уйлай. Уның өнө ҡолаҡ осонда сыңлап тора:

– Һин бай түгел, үкһеҙ етем, һин – Ҡотойҙарҙа хеҙмәтсе көнөндә...

– Әтейем бай ине, йылҡы малынан ғына йөҙәр башлап бейә бәйләнеләр.

– Улар бай булған, байлыҡтары үҙҙәре менән киткән, ә һин...

– Мин – Ғәбделнафиҡ балаһы, мин әтейемдән баш тартмайым!

– Һин – ҡыйыу ҡыҙ!

– Байҙарҙы күрә алмайһың, уларҙы ҡырып-эсеп апараһың, ысын – ҡамсы... Мин дә бай ҡыҙы! Ә мин һинең ҡыҙылармеецтарыңды күрә алмайым. Улар минең күҙ алдымда... Һин дә улар йырын йырлайһың, улар һүҙен һөйләйһең – һин дә ҡыҙылармеец.

– Минең һинең алдыңда ни ғәйебем?

– Һин дә – ҡанһыҙ.

– Мөнирә...

– Һин шул байҙың ҡыҙын һөйәһең!

Ҡамса байҙарға рәхмәт уҡый алмай, ә Мөнирәнең табанын үбергә лә әҙер. Мөнирә белә: Ҡамса уны ярата, ә Бәхтейәр?.. Бәхтейәр уны бисә өҫтөнә алды, ә Ҡамса?

Мөнирә уларҙың икеһен сағыштыра, Мөнирә уларҙы сағыштырып йәшәй. Ҡамса яңы власть тип йән ата, яңы тормош ҡорам тип саба, ә Бәхтейәр ҡыҙылға ҡыҙыҡмай, уға большевиктарҙың бер эше лә оҡшамай, бер яңылыҡтарына ла һикереп төшмәй. Ҡаршы ла сыҡмай, өндәшмәй ҙә, тешен ҡыҫа. Ҡамса шикелле

яндырай түгел, тейешен генә әйтә – гел унынса сыға. Мөнирәнең быны һынағаны бар.

Мөнирә үҙе лә Бәхтейәр ыңғайына йәшәй, унынса уйлай. Бәхтейәр Ҡамсаны әрләһә генә, Ҡамса яғына баҫа. Хәс тә был өйҙә Бәхтейәрҙең дәғүәсеһе Ҡамса ла йәшәп ята. Ул өҫтәл артында ултыра, төнөн Мөнирә йәнәшенә ята. Бигерәк тә төндәрҙе әллә ниндәй йөрәкһенеү менән көтә бисә: түшәктә тағы осрашалар, һөйөнөстәренең иге-сиге юҡ, шунан икеһенең генә һөйөш уйындары башлана. Ҡамса ныҡ итеп ҡосаҡлай, улар тағы бәхетле. Ҡараңғыла иренең йөҙөн сырамытмай, мине тағы Ҡамса ҡоса, имеш, тип ҡаңғыра, йөрәге тулай.

– Ниңә илайһың?

– Иламайым, – тип баш тарта Мөнирә, үҙе танһыҡ иткән ишенә һырығып бара, һырығып бара, күңеленән «Нығыраҡ ҡос, Ҡамсам, нығыраҡ» тип ялбара, йөрәге өҙөлә.

– Йәнем, – тиһә, һылыуҡайҙың йәне ирей, һөйөклөһөнә бөтә йәне-тәне менән бирелә, күҙ алдында тегенең ҡылыс танауы, ҡуңыр йөҙө, яғымлы күҙҙәре, йылмайыуы – йөрәге яҙыла бисараның. Һөйөклөһө түҙемһеҙ. Улар бөгөн дә наҙ татыны. Бәләкәс кенә Мөнирә, Ҡамса ҡосағында юғала.

Мөнирә Ҡамса менән йәшәне, түшәктә уның ҡосағында иҙрәне. Күҙҙәрен йомһа, Ҡамса пәйҙә: Ҡамса йылмая, Ҡамса шашына... Ниңә кеше шулай ымһынып йәшәй, һаран ғына бәхетен көтә, ниңә булғаны менән хушһынмай, ә хыялдағыһына ашҡына икән. Быны аңлауы ҡыйын. Мөнирә яҙғанына күнмәй, һаман мөғжизәгә ышана. Ҡайҙа ул һөйөнөс, беҙ белмәгән, татымаған бәхет? Был донъяла мөғжизә бармы, юҡмы ул? Хыял ғына һәр саҡ яҡты, ымһындырғыс.

Мөнирә был төпкөл төбәктә – ышыҡта, серҙәре менән ишкә ҡуш. Был йәшел бишек ят күҙҙәрҙән, оҙон ҡолаҡтарҙан һаҡлай: тау битенә һеңдерә, яҫы таш аҫтына һала, һыуға батыра үткәндәге гонаһтарҙы. Эйе, күп тарихты йәнендә өнһөҙ һаҡлай Һатый.

– Ун туғыҙынсы йыл әтейемде күҙ алдымда һуйҙылар... – Мөнирә көрһөнә.

Шунан Бәхтейәрҙең ҡыҙылдарға нәфрәте тағы көсәйҙе, уларҙы асыҡтан-асыҡ ғәйепләй башланы.

– Мин дә бай түгелмен: крәҫтиән алдында – бай, бай алдында – фәҡир, ә икеһе лә ҡаршыһында – учитель. Бар байлығым – китап. Ҡартатайым – шөһрәтле Байназар бай, уның улы – Муллабай; бәхеткә ҡаршы, Муллабай атай малын таратып бөткән, беҙ шул арҡала ғына ун һигеҙенсе йылғы ҡазанан ҡотолоп ҡалдыҡ.

Көлә Бәхтейәр. Ә Мөнирә көлә алмай: уның тоҡомо шул байлыҡ арҡаһында ҡороно бит. Уны яңы власть ныҡ рәнйетте, булғанын тартып алды. Ә Ҡамса шул власть башында ултыра, ғәжәп: бай ҡыҙының шул кешегә тамсы ла нәфрәте юҡ. Ул шул бәндәгә табынып йәшәй, уны көтә, төштәрендә күрә, түшәген уның менән бүлешә. Был төпкөл Һатыйға ла ул артынан эйәреп килде, ә Мөнирә ҡотолдом тип уйлағайны.

Мөнирә серен бер Бәлхиә ҡарсыҡтан ғына йәшермәй. Бәхтейәр Һатыйына күсенһә лә, оло әхирәтенән айырыла алмай. Имсе Һатыйҙа ла – танһыҡ ҡунаҡ, урыны – түрҙә. Ул Ҡотойҙарға ҡарағанда ла йышыраҡ һыйлана был төпкөлдә.

Ҡотой үҙе туй алдынан ғына ҡайтып төштө Мәғҙәнгә. Күстәнәстәр тейәгән булған, ярай, аслыҡта үҙенең башын һаҡлаған. Ә мыжыҡ Ғаҡилә иртәрәк ҡайтты ауылға, балаларына күҙ-ҡолаҡ булған.

– Һаман шул ғәҙәтен ташламаған, – тип теҙҙе Бәлхиә ҡарсыҡ. – Һаман кеше яратмай еңгәм. Ә һин – кеселеклеһең, изгелекте онотмайһың, ҡыҙым. Килһәм, матур тормош ҡороуыңа ҡыуанып бөтә алмайым. – Имсе өй рухына, хужалар именлегенә доға ҡылып, түш һыпыра.

– Ниндәй матур, күҙ ҡыҙырлыҡ тормош? – ти Мөнирә. Хужабикә кире һуға.

– И-и ҡыҙым, шөкөр итә лә бел. Ата ҡаҙ, үҙенекен хушһынмай, күршеһенекенә муйын һуҙһа, йортҡа бәлә – һин дә шуның кеүек һүҙ һөйләп ташланың.

– Кәкүк тә ят ояға йомортҡа һала...

– Ай Алла, һүҙ йәшереп һөйләйһең, тел төбөңдә бер ҙә аңлап бөтмәйем – яман уйҙан айбан.

– Яман уй, йәшертен сер. Һинән йәшергәндең бото һынһын, апай.

– Йә, бер башлағас, әйтеп бөтөр, эсеңдә көйөк булып ятмаһын! – Зирәк ҡарсыҡ өҙмәне лә ҡуйманы.

– Апай, бер ҙә иремә өйрәнә алмайым...

– Сеү, тиң! – Имсе ян-яғына баға, сер эргәһендә шаһит юҡлыҡҡа ышанмаҡсы итә.

– Үҙем ирем менәнмен, ә күҙ алдымда... Тәнем – бында, ә йәнем... – Йәш бисә ҡыҙарынды.

– Ҡамса – бер теленгән икмәк бит ул.

– Бер ҙә теленгән түгел, апай, – беҙ уның менән өҙөшмәнек, хушлашыу ҙа булманы. Ятһам – йәнәшемдә, торһам – күҙ алдымда, туйҙым мин был тормоштан! Тәҡәтем ҡороп бөттө: осрашҡым, һөйләшкем килә.

– Ҡуй, балам, ямандан айбан! Һин – хәҙер ир бисәһе, берәүҙең хәләле. Бәхтейәр ҙә был эшкә күнмәҫ.

– Мин һарыға һабышам, был ҡырағай төбәктә япраҡтай һарғаям.

– Ай Алла! Атаҡай!

– Үҙең беҙҙе ҡауыштырҙың...

–...үҙем айырҙым! Тормош аяуһыҙ...

– Апай! – Йәш ҡатын үртәлде. – Мин төшөмдә уға һүҙ ҡушам... Был әллә нимә. Мин һаташыр сиккә еттем, ниңә генә Бәхтейәргә сығырға ризалаштым икән – мин дә, ул да бәхетһеҙ, беҙ бер-беребеҙгә ят, беҙ...

– Илама, балам! Мин һөйөнөп йөрөһәм... – Имсе ҡаушаны, инде ҡөҙрәте бөтөүен, ҡулдарының тылсымы ҡалмауын таныны, хатта оло ата ҡаҙҙы тәкмәстерер күҙе ҡеүәтенә шикләнә башланы. – Ҡыҙ баланың яҙмышы – шул, бисәләр башына төшкән аҙап: яҙғаныңа табын, шуға баш эй! Әүәл беҙҙе күрмәгән дә, белмәгән дә кешегә бирҙеләр – ыңғырашманыҡ.

...Бәлхиә ҡарсыҡ нисәнсе ҡабат үҙенең яҙмышын һөйләргә керешә.

## II

Һатыйҙа ирәүән тормош. Төпкөлдә, ят күҙҙәрҙән ситтә Бәхтейәр ирәйә: көнсөлдәр эҙәрлекләмәй, хаслылар һүҙен ишетмәй. Яңы тәртиптәрҙе яратмай, Мәғҙәнсә әйтһәк, донъяға һыймай, үҙенсә йәшәп тик ята, үҙенекен һөйләй, берәүгә лә баш эймәй. Тура яра, ниңә сәсрәп китмәйһең; алдын-артын уйламай, даншөһрәткә ҡарамай. Бәхәсләшә башлаһа, барыбер һүҙен өҫкә сығара. Ауыҙ йомоп ҡалыу юҡ. Ә тура әйткән – туғанына ярамаған.

Мөнирә иренә ҡыҫылмай, уны аҡыллыраҡ, уҡымышлыраҡ күрә. Ирҙәр эшенә ҡыҫылыу, ир һүҙен ҡыйыу – бисә өсөн ярамаған ғәмәл бит.

Һатый урамдары бәпкә үләне менән ҡапланған, ауыл үҙе ҡарағай урман менән ҡатышҡан. Кистәрен урамда кейектәр йәйрәп йөрөй, кәзә бәрәстәре менән ҡуяндар бергә уйнай. Баҡса артында ғына еләклек, мәтрүшкә сәскә ата.

Ике һөҙәк тау битләүе килеп ҡушылған тапҡырҙа ултыра Һатый, кешеләре тәбиғәт менән ҡатышып йәшәй. Эргәнән генә шишмә һарҡый. Туҡмаҡ шишмәһе Һатый быуайҙың баш осонан баш ала икән, Һатый быуай әүлиә булған, тип тә һөйләйҙәр. Изге йән кешеләргә игелек кенә ҡыла, Туҡмаҡ шишмәһенең һыуын эсеп үҫкәндәр, имеш, саф күңелле була.

Йәш ҡатын был аулаҡ илдә аҡылын юя, Бәлхиә гел тыя. Мөнирә баш тарта

аламы ҡәҙерлеһенән? Тәү наҙлаған затҡа шулай тән тартып тик тороусан: Ҡамса тип һаташа. Стенаға үрмәләр сиктә... Бесәй түгел бит. Һис онота алмай, Ҡамсаһын көҫәй тәне... Балалары Ҡамсанан түгел, тик холоҡтары, төҫ-ҡиәфәттәре нишләптер шуға тартҡан; ҙурайған һайын Ҡамсаға оҡшай баралар һымаҡ.

Ул һаман да Ҡамсаның йәре: уйында уның менән һөйөшә, түшәктә уның менән йоҡлай, тәне гел шуны көҫәп тора. Ире менән юрый, исем өсөн генә йоҡлай – ул хәс тә уйнаш бер бисә, хыялындағы Ҡамсаға һис ҡарышмай, һәр ымына ыңғай тора. Ул һаман уның йәре: тәне – уныҡы, мөхәббәте – ул, ә Бәхтейәр кейгән кейеме генә... Шулай икегә бүленеп йәшәй. Ире бар ҙа, юҡ та, ул кеше күҙенә ҡом һибеү өсөн генә.

Кешеләр тормошто күҙгә бәрелеп торғанса ғына ҡабул итә, һүҙҙе тыңлай, кейемде күрә... Биттәге һырҙы, миңде сырамыта. Кешеләр алданырға ярата.

Бәлхиә ҡарсыҡ асыулы, ауыҙың тулы ҡан булһа ла төкөрмә, тип киҫәтеп кенә тора.

Йәш бисә ун туғыҙынсы йылдағы мәхшәрҙән һуң шәриғәтте онотто, иман тигәндән яҙҙы. Һаман шул мәхшәр заман һындары ҡаршыһында емелдәшә: аҡтар, ҡыҙылдар, Ҡамса, Бәхтейәр... Сая зат үҙе лә, түгел дә. Уны ҡурсаҡ ише бүтәндәр йөрөткән, бүтәндәр ҡоторҡан... Бәлхиә апаһы ғәйепле. Ул яҙмышын борҙо. Ҡамса, Бәхтейәр... Атаһы Ғәбделнафиҡ, Ғәбелхалиҡ, усал Ғәбделмәлик ағалары... Бәхтейәр менән Ҡамса тамаҡ йырта, бер-береһенең боғаҙына үрелә... Сход, йыйылыш артынан йыйылыш...

Бәхтейәр ҙә төпкөлдәге ҡырағай тормоштан туйҙы, әллә Мәғҙәнгә, кеше араһына, ҡайтайыммы, тине лә торҙо. Йәнәһе, ҡараңғынан яҡтыға сыға, уға мәктәпкә йөрөүе лә ҡыйын. Кеше үҙ башына була шулай ғәм араһына, Мәғҙәнгә – дау, яу ояһына ашҡынамы икән? Мәғҙән – волость үҙәге бит. Бында сход артынан сход, йыйылыш, бәхәстәр...

Ҡамса, әйҙә, үҙ Мәғҙәнендә йәшәһен, волосында йөрөһөн, Бәхтейәр, әйҙә, үҙ Һатыйынан сыҡмаһын! Улар – Ҡамса менән Бәхтейәр бер ерҙә һыйыша алмай. Хатта оло Ер шары тар уларға: береһе булһа, икенсеһенә унда урын етмәйәсәк.

## III

Көҙ. Халыҡ саҡ тын алып ҡалған, ҡыр эштәренән ҡулы бушаған. Малдар ҡураға ябылған. Ҡотой ҡарт та, шәбәйеп, ауылдың ҡашҡаларын ҡунаҡҡа әйтеп алды – ул кемдән кәм: волисполком рәйесе Ҡамсаны, тағы әллә кемдәрҙе саҡырҙы, шул азаматтар араһында Бәхтейәр учитель дә бар ине.

Ауылдаштар уйнап-көлөшөп ултырҙы, бал сеүәтәләре йөрөп торҙо. Һәүетемсә башланған мәжлес ҡыҙҙы. Башта ил-йорт хәлдәрен белештеләр, яйлап һүҙ олораҡ мәсьәләргә күсте.

– Ҡалаларҙа кибет кәштәләре бушаған икән, беҙҙең шөкөр әле. Йә, ағай-эне, етешеп ултырығыҙ, – тип ҡеүәтләне хужа.

– Ҡалала әпәйгә ҡытлыҡ, хөкүмәт ҡабат әпәйгә карточка керетмәксе, тигән хәбәр бар. – Бәхтейәр учитель дә белдеклелеген күрһәтте.

Һүҙ сәйәсәткә боролғас, волисполком рәйесе түҙеп ултыра буламы: ҡыҙыу, ҡырҡыу холоҡло, һүҙен гел өҫкә сығарып өйрәнгән. Эйе, Ҡамса тотҡан ерҙән һындыра, төрлө оппортунистарҙы, интеллигент йоратын күрә алмай. Өҫтән төшкән һәр күрһәтмәне теүәл үтәй, ғөмүмән, шул күрһәтмәләр буйынса ғына йәшәй. Граждандар һуғышында Гай армияһында йөрөгән, хатта башҡорт милләтселәренә лә ҡаршы һуғышҡан. Үҙен революцияның тоғро һалдаты һанай.

– Минеңсә, нэпмандарға ҡаршы киң фронт асырға ваҡыт етте. Халыҡ тәнендәге һөлөк бит улар: байғуралар кибеттәргә оялаған, батрак халыҡтың ете ҡат тиреһен тунағандар. Өҫтәүенә, беҙҙәге нэпмандар ашлығын хөкүмәткә һатмай, баҙарға илтә.

Бәхтейәр учитель, түҙмәй, волисполком рәйесенә һорау ҡуйҙы:

– Ҡамса, нишләп халыҡ ашлығын хөкүмәткә бирмәй, баҙарға сығарырға тырышып ята?

– Тағы ла хаҡ күтәрелгәнен көтәләр, йәнәһе, бүтән хаҡ күтәрелмәйәсәк, ағай-эне! – Түрә, ҡулындағы ҡылысы менән һелтәнгәндәй, киҫә һуҡты. – Хватит, хөкүмәт ары нэпмандар йырын йырламаясаҡ. Хаҡтар үҫмәйәсәк, точка! Киреһенсә, продналог артмаһа...

– А-а! – Мәжлес гөж итте, был һүҙҙәр күбеһенең затына тейҙе, күрәһең. Һәй, уларҙың күбеһе ашлыҡ игә, улар былай ҙа дәүләт һалымын саҡ-саҡ түләп бара бит. – Тағы күпмегә арттырырға була был налугты, Ҡамса туған, былай ҙа билде биштән быуғанбыҙ...

– Ана, Бәхтейәр учитель – уҡымышлы кеше, дөрөҫ әйтә: ҡала асыға, кибет кәштәләре бушай... – Ҡамса дәртләнеп китте, әле был табынды ла йыйылыш трибунаһы күреп, доклад яһарға тотондо: – Сталин иптәш, Политбюро ҡушыуы буйынса эшселәр синыфы илдә индустриализация йәйелдерҙе. Ишеткәнһегеҙҙер Турксиб, Магнит, Днепрогэс төҙөлә, заводтар, фабриктар ҡалҡа, ә беҙ, крәҫтиәндәр, партия политикаһын ҡеүәтләргә, ауыл ҡалаға ярҙам итергә, эшсе синыфтың еңеүенә булышлыҡ итергә тейешбеҙ. Аңлағыҙ: нэпмандар саботаж яһағас, үткән йыл дәүләткә етерлек ашлыҡ һатылмаған, шуға ил сит илгә бойҙай һата алмай. Шул бойҙайға алмашҡа Рәсәй машина, трактор, станоктар ҡайтара торғайны.

– Эһе... – Табындаштар түрә һүҙен диҡҡәт менән тыңланы.

– Хәҙер Сталин иптәш... Бухарин... сит илдән машина ташығансы, капиталистарҙы байытҡансы, үҙебеҙҙә завод, фабрика төҙөргә – үҙебеҙгә етештерергә кәрәк ул «Фордзон»дарҙы, тип бара. Кем әйтмешләй, беҙгә, крәҫтиәнгә лә, билде биштән быуырға тура килә.

– Ҡотой ағай әйтте... – тиеште табындаштар.

– Так што, ағай-эне, крәҫтиән синыфы ла эшсе синыфының индустриализация өсөн көрәшенә ҡушыла!

– Ҡамса ҡорҙаш, һинеңсә шулай килеп сыға: нэпмандар ауылда ла бар, кем тырышып эшләй, һары таңды ҡара төнгә ялғай, етеш йәшәргә ашҡына – хәҙер шуларҙың кеҫәһен ҡапшарға кәрәк.

– Шулайыраҡ килеп сыға, Бәхтейәр... – Ҡамса сигенмәне, һүҙенән кире ҡайтманы. – Сөнки продналог бик бәләкәй бит...

– Нисек? – Табындағыларҙың күҙе дүрт булды.

Волисполком башлығы бер үҙе бер яҡта тороп ҡалды. Шулай ҙа береһе лә түрәгә ҡаршы әйтергә ҡыйманы.

Кинәт кенә йыйылыш төҫөн алған был табын, бәлки, шулай һәүетемсә генә осланыр ҙа ине, тик ғәрсел, һүҙ көрәштерергә яратыусы Бәхтейәр сигенмәне. Ул донъя хәлен белмәйме? Киреһенсә, уның башы нығыраҡ эшләй, күҙе үткерерәк күрә...

– Ҡамса, – тип ялғаны Бәхтейәр өҙөлөп ҡалған фекерен. – Минеңсә, ҡала әүәләүәлдән ауылды иҙеп йәшәй, күпме кеше шуға ауылды ташлап, город тип китә.

– Нейә, яңы завод, фабрикаға ла эшсе көсө кәрәк! – тине Ҡамса.

– Кәрәк. Шуға әйтәм: крәҫтиәнгә баҙарға юл асырға кәрәк.

– Ул саҡта икмәк хаҡы күтәреләсәк, эшсе синыфы ас ултырасаҡ!..

– Әммә крәҫтиәнде киҫә бөкмәйек, НЭП-та саҡ ҡына тын алып ҡалғайныҡ, тағы «военный коммунизм» политикаһы ҡайтмағайы – шуныһынан һаҡ булайыҡ.

– Һин нимә, Бәхтейәр, бында нэпман һүҙен һөйләп ултыраһың? – Ҡапыл башлыҡ гөлтләп тоҡанды, әллә әсе бал башына һуҡты – йөҙө ҡыҙарҙы, муйыны буҙарҙы.

– Ҡуй, Ҡамса, бында бер кем дә нэпман түгел. Мин дә – ябай учитель, ауыҙым асһам...

– Юҡ, һин – нэпман, шул эксплуататор элементы, шул нэпман йырын йырлайһың! Партия политикаһына, Ленин, Сталин политикаһына ҡаршы ҡотортаһың халыҡты!

– Ҡамса, Ҡамса, энем... – Ҡотой ҡарт та, хужа булараҡ, ике араға төштө, әтәсләнә башлаған ҡунаҡтарын тынысландырырға маташты.

– Бәхтейәр, һин – подкулачник, һин – Байназар бай тоҡомо!

– Ҡамса, етәр! – Бәхтейәр ҙә, ярһып, аяғүрә баҫты, Мөнирәһенең пинжәк еңенән тартыуына ла иғтибар итмәне. Ул да үҙ-үҙен белешмәҫ хәлгә еткәйне.

– Етмәй торһон!

– Бөтә ауыл белә: һинең балаларың, ана, Беләҙекүлдә ята!

– Нимә? – Волисполком башлығының ирендәре дерелдәне, күҙҙәре салт-йолт итте. – Нимә тип әйттең?

– Нимә ишеттең – шул!

Мәжлес аһ итте: Бәхтейәр учителдең нимәгә төрттөрөүен бөтәһе лә аңланы. Волисполком рәйесе лә дошманына ҡара-ҡаршы баҫты. Ҡобараһы осоп, күҙҙәрен сылт-сылт йомоп торһа ла, һуңғы һүҙен барыбер әйтте.

– Мин һинең, контра, башыңды ҡайҙа серетәм, беләһеңме?

– Ауыҙыңды үлсәп ас, волисполком иптәш,– был һүҙеңде юғарыла ишетһәләр...

–...Башыңды төрмәлә серетәм!

Табындың ҡото китте, һүҙ көрәштереүҙең дә фәтүәһе юҡ ине. Мәжлес урынынан ҡупты. Бәхтейәрҙәр менән Ҡамсалар артынан башҡалар ҡалҡты.

### IV

Йыш ҡына Мөнирәләргә Бәлхиә ҡарсыҡ килә. Ул үҙенең мөхәббәт тарихын бәйән итә.

– Ирҙән ҡалғанда миңә егерме генә йәш ине. Аҙаҡ Бурансы муллаһына бирҙеләр. Теге ҡартласты яратмайым, йәнәшенә ятып йоҡлай алмайым. Ытырғаныуым шул саҡлы булғандыр, хатта, һыуға ташланайыммы, тип бөттөм. Ташланыр ҙа инем, һыуҙары юҡ. Бурансы ҡола яланда ултыра.

– Ә Кәшкейәк һыуы? – тип белешә Мөнирә.

– Ха, уны тауыҡ кисеп сығыр, батам тип төшһәң дә, бата алмаҫһың. Мулла етмеште уҙған, мине «абыстай итәм» тигән була. Бер әйбергә күңел ятмай, тотҡаным ҡулымдан төшөп бара, менә шулай һинең кеүек, тәҙрәгә текәлеп тик ултырам; ярай, муллам эшкә екмәй, хеҙмәтсе тота. Шунан түҙмәнем, тоттом да ҡастым; муллам оло бисәһе менән күрше ауылға киткәйне – тура Мәғҙәнгә һыпырттым. Тура Ҡотой абзыйымдарға! Ғаҡилә еңгәм әрләшә: мулла быуай ҡарғар, башыбыҙға таш яуҙырыр! Муллам, ысынлап та, һуңынан артымдан килеп юллап йөрөгән, Ҡотой абзыйымдар белмәмешкә һалышҡан. Мин ул ваҡытта Әпшәндә инем инде. Әпшәндә йәйләүгә йәшерҙеләр, Мәлик шыпырт ҡына килеп йөрөй. Шунда башланды унын менән беҙҙең тарих... Мин шулай мулламды ташлап, Мәликтең йәриәһе булып киттем. Ныҡ оҡшаттым үҙен. Мәлик уҫал, үҙ һүҙен генә һүҙ итеп өйрәнгән. Дәүләтхан байҙың яратҡан кейәүе. Бай бөтә мөлкәтен аҙаҡ шуға ҡалдырған, тип һөйләнеләр. Ни ғәләмәттер, Мәлик тиҙ арала байып китә, Ғәбделнафиҡ менән Ғәбделхалиҡ байҙарға ҡайҙа уға етеү!

Мәлик, йәше барһа ла, ныҡ әле: уға эҫенеп тә өлгөрҙөм. Был урыҫ байҙарынса фрак ҡына кейә: эстән аҡ салбар, аҡ күлдәк... Һаҡалы йоҡа ҡына, эргәмә кырандаста килә. Үҙенән хушбый еҫтәре бөркөлә. Бигерәк тә шул хушбый еҫенә бирешәм, шуға башым әйләнә лә, донъямды онотам. Мәлик көслө, йәнһеҙ кәүҙәмде әллә нишләтеп бөтөрә, битһеҙ, ҡайһылай ҡына һалмай... Ул яҡҡа бигерәк ҡеүәтле булды; мин ни, ундай ҡарыулы ир күрмәгәс, аҡылды юйыр сиктәмен. Бай ашата, тәтәй күлдәктәр бүләк итә; күҙҙәрем күсәренән атылып сыға, йөрәгем мына-мына өҙөлөп төшә икән тип торам. Мәлик: «Һин миңә мәрйәләрҙе хәтерләтәһең – мин һине мәрйә күреп яратам,» – тип көлә. Мин дә мәрйә һымаҡ ҡылана белгәнемә, бай бисәләренән алдыраҡ булғаныма ғорурланам. Мин ауылдағы теге бисәләрҙе яратмайым, һине генә һөйәм, ти Мәлик.

Был мине бисәлеккә алырға йыйынды, ауырға ҡалғайным инде. Көндәр көҙгә тартты, ары йәйләүҙә ҡалып булмай. Мәликте көтәм, үҙем һаман шул бәхетемә ышанмайым; күңелем дә дөрөҫ һиҙгән: әйткән көнө лә үтеп китте. Мәлигем аҙна үткәс саҡ килде. Төҫө ҡасҡан. Дан ир, бөтә ауылды тетрәтеп тотҡан бай – хәс тә өтәләнгән тауыҡ.

– Революция, – ти. Мин бер ни ҙә аңламайым, байым үҙенә урын тапмай: улай баҫа, былай һуғыла... – Златоуста – стачка, заводтар эшләмәй, эшселәр ҡуҙғалған...

1905-семе, әллә 1906-сымы йыл.

Теге бәрелде-оролдо ла тағы ҡайтып китте. Мин һыҡтайым, байҙың миндә эше лә юҡ; хәҙер уны алмаштырып ҡуйҙыларммы ни – мине бөтөнләй онотто, уны бүтән ҡайғы биләне. Һирәк-һаяҡ килә, әле Мәсәғүт, әле өйәҙ саба... Өйәҙ ҡалаһы Златоустан оҙаҡ ҡайтмай ҡунып та ята. Үҙемсә, бының бисәләре миңә ҡаршы төшәләр, тим. Улар өйҙә, имеш, дау ҡуптара була. Бар Әпшән, беҙҙең бәйләнеште ишетеп, ҡуҙғалған, минең серем асылған! Бай, йәнәһе, мулланың бисәһен тартып алған, шәриғәт алдында оло гонаһ ҡылған, Хоҙайҙан да ҡурҡмаған. Мәлик теге мулла бисәһе менән, ир рөхсәтенән тыш, никах өҫтөнә яңы никахҡа инмәксе!

Мәлик уңарса Златоуста волость управаһы эше менән йөрөгән, өйәҙҙә боларыш – забастовка, стачка тигәне башланғас, байҙың да мәшәкәте күбәйгән... Мәлик миңә үҙ хәстәре хаҡында бик һөйләп тә бармай: бер белгәне – «бушамайым». Шунан бай эште ҡыҫҡа тотто: Мәғҙәндә Ҡотой абзыйымдар йәнәшенән өй табып бирҙе. «Хәҙер мулла артыңдан төшмәҫ, заманы бүтән», – тине. Мин – ирекһеҙ, бай ни әйтһә лә, үтәмәй сарам юҡ. Шулай бәхетемә кәртә ҡуйылды: Ҡотой абзыйымдар янында йәшәй башланым.

– Ә ауырың?

– Уны аҙағынаса һаҡлай алманым.

## V

1928 йылдың яҙында Мәғҙән волость башҡарма комитеты ашығыс рәүештә сход йыйҙы. Унда тирә-яҡ ауылдарҙан да вәкилдәр саҡырылғайны.

Большевиктар хәҙер мәсетте клуб итеп алған, мөнбәренән сәхнә яһаған. Сәхнәгә оҙон өҫтәлдәр ҡуйылған, өҫтөнә ҡыҙыл буҫтау йәйелгән; сәхнә түренә ҡыҙыл әләм дә элгәндәр. Волисполком башлыҡтары өҫтәл артында үҙ урындарын биләй.

Бәхтейәр яңағын һыпырҙы, яңы донъя ҡороусы яңы түрәләрҙең ҡыланышы уға көлкө күренә ине. Ул үҙе лә бөгөн бында кәмит ҡарарға тип килде, ә халыҡ һағайған, сөнки юғарылағылар сәбәләнә, йәмәғәткә ниндәйҙер ашығыс вә мөһим хәбәр еткерергә самалайҙар, буғай. Түрәләрҙең сырайында – бәлә.

Волисполком башлығы Ҡамса кантондан вәкил килеүен белдерҙе. Төҫө ҡасҡан, танауы тағы ла йоҡарып, ослайып киткән һымаҡ. Бәхтейәр уның һәр ишараһын тойоп, шуға бер мәғәнә һалып ултыра. Ҡотой ҡарттарҙағы теге мәжлестән һуң күҙе үткерләнде, ҡолағы һаҡ.

– Ағай-эне, волость граждандары, партия ҡалала индустриализация башлаған кеүек, ауылда коллективизация иғлан итә: бөтә крәҫтиәндәр берләшә, бергә йәшәй, бергә эшләй...

Бәхтейәр учителде генә түгел, барса халыҡты аптыратты волисполком рәйесенең сығышы. Ул оҙаҡ һөйләне, коллектив хужалыҡ – «коллективное хозяйство»ның нимә икәнен тылҡып-тылҡып аңлатты, ләкин бер һүҙе лә аңлашылманы.

Кантон вәкиле күн тужурка кейгән, күҙлеге лә бар; ул да яңы эштең айышын төшөндөрмәксе итте, мәғҙәндәргә колхоз тигәнде ҡатлап-ҡатлап аңлатты.

– Дәүләт сит илгә ашлыҡ һата алмай, хәлле крәҫтиәндәр, кулактар игенде, хөкүмәткә һатмай, баҙарға сығарырға тырыша, дәүләттең һатып алыу хаҡтары бик түбән булмаһа ла, улар, эйе, хөкүмәт менән эш итмәй, хөкүмәт политикаһына саботаж яһай. Партия шуға, промышленностағы индустриализация һымаҡ, ауылда коллективизация йәки колхозлашыу планын иғлан итте. Илдә Турксиб, Магнит төҙөлөштәре ҡолас йәйә, Днепрогэс, Мәскәү метроһы төҙөлә... Дөрөҫ, промышленность әле кәрәк-яраҡты етештереп өлгөрмәй, беҙ, крәҫтиәндәр, промтауар тип йонсойбоҙ – йәш Совет иле аяҡҡа баҫып китә алмай, НЭП политикаһы ла һөрлөктө: магазинда ит, һөт, икмәк бөттө. Иптәштәр, ҡала асыға! Ауыл ҡалаға ярҙам итергә тейеш, был ауыр хәлдән сығыу өсөн партия, Сталин иптәш беҙгә мөрәжәғәт итә: иген йәшереүсе элементтарға аяу булмаясаҡ, Советтар менән хеҙмәттәшлек итергә теләмәгәндәр шуны белеп торһон!

Халыҡ шаулашты.

Вәкил шыма һөйләй. Шулай ҙа кешеләр эстән уның менән ризалашмай.

– Партия иғлан иткән индустриализация планы өҙөлә, иптәштәр, йәш Совет республикаһы – империалистик илдәр ҡамауында. 1919 йылда ҡорал көсө менән теҙ сүктерә алмағас, хәҙер буржуйҙар беҙҙе иҡтисади яҡтан ҡыҫмаҡсы. Иген экспорты кәмене, дәүләт ситкә сығарырлыҡ ашлыҡ туплай алманы, шуға сит илдәрҙән машина-трактор, станоктар индерә алмайбыҙ. Ә үҙебеҙҙең завод, фабрикалар булһа, буржуйҙарға ялынмаясаҡбыҙ. Бөтә көстө – партия, Сталин ҡарарын бойомға ашырыуға! Ауыл, ҡалаға ярҙамға! Эшселәр синыфы менән ҡулға-ҡул тотоношоп, крәҫтиән синыфы ла индустриализацияға ҡушыла! Ауылдағы коллективизация – шул уҡ индустриализация ул. Бынан кире ауыл промышленностҡа күберәк ашлыҡ бирергә тейеш! Икенсе төрлө әйтһәк, коллективизация индустриализацияға хеҙмәт итә. Иптәштәр, мин ярлы-ябағаға мөрәжәғәт итәм: кулак, бай эйәрсәндәренең йәшергән ашлығын дәүләткә тапшырырға ярҙам итегеҙ! Кем йәшерелгәнде таба, шуның сирекге уның үҙенә ҡала!

Халыҡ гөж итте, әйтерһең, ҡыҙған табаға май бөрктөләр. Һәр кем үҙенекен һөйләне, береһенең һүҙен икенсеһе тыңламаны.

– Тауыш! Шаулашмағыҙ! – тип тыйҙы сәркәтип.

Шунда залдан Бәхтейәр учитель ҡалҡты. Халыҡ шымғандай итте.

– Йәмәғәт, идара ағзалары... – Бәхтейәр учитель һүҙен башлап китә алмай хитланды. – Хөрмәтле волость идараһы, вәкил иптәш, күреп тораһығыҙ: халыҡ ҡаршы! Халыҡ «Һеҙҙә һаманғаса йәшерелгән иген бар, шуны эҙләргә» тигәнгә ҡаршы! Әйтегеҙ, кемдә артыҡ ашлыҡ бар? Ауылда байҙар юҡ, кулактар ҙа юҡ – кем сереп байып ята? Бер нисә кеше ашлығын баҙарҙа һатҡан икән, был әле...

– Ниңә улар дәүләткә һатмай? – Сәхнәнән өндәштеләр.

– Улар продналогын тултырған...

– Ҡала асыға, индустриализация планы өҙөлә... – Ҡамса ла тороп баҫты, тәкә-рәк сәсеп, күҙҙәре менән ашарҙай булып Бәхтейәргә төбәлде. – Һин – бухаринсы, һин Сталин платформаһына ҡаршы! Беҙ ярлы-ябағаны ҡайғыртып...

– Яңы властың йәшәүенә ун йыл үтте, Ҡамса, ә тормоштоң бер ҙә яҡшырғаны юҡ әле. Бөтәгеҙ ҙә күрәһегеҙ: һуғыш та тартыш, аслыҡ...

– Һин – нэпман, партия ярлы-ябаға өсөн көрәшә...

– Халыҡ күп түҙҙе, Ҡамса...

– Көпә-көндөҙ таланы коммундар!

Урындан ҡысҡырҙылар. Аҡыллы баштар урындан ғына, төпкә боҫоп, кеше ар-тына ышыҡланып яңы властҡа ҡарғыш яуҙырҙы.

– Эйе, халыҡты таланығыҙ, ыштанһыҙ иттегеҙ! Хәҙер тағы шуны дауам итмәк-сеһегеҙ!

Халыҡ гөжләне генә, умарта күсенә таяҡ тыҡтылармы ни! Сәхнәнән тағы кемдер баҫты; халыҡты тыйҙылар, Бәхтейәрҙе һүктеләр – һүҙ алыштырыр әмәл ҡалманы. Көтмәгәндә Ҡотой ҡарт мөнбәргә күтәрелде.

– Ағай-эне, туғандар! – Халыҡ шымғандай итте, әммә сәхнәләге бәғзеләр, зи-магурға ҡарап, мыйыҡ аҫтынан көлөмһөрәне: йәнәһе, был йолҡош ни әйтер икән, аттар тибешкәндә баҡа ботон ҡыҫтыра. – Мин ситтә күп йөрөнөм, аслыҡ-та Себерҙе үттем – ғауғалашып фәтүә сыҡмай, талашып тамаҡ туймай. Юғары-нан күрһәтмә килгән икән, кантон вәкиле аңлатып бирҙе, Ҡамса туған да ғәйеп-ле түгел, ул – эш кешеһе, бында беҙҙең генә тулауҙан донъя үҙгәрмәҫ, Мәғҙәндән башҡа кантон, өйәҙ бар.

– Туғандар! – Тағы Ҡамса. – Ҡотой ағай дөрөҫ әйтә, сүбәк сәйнәп май сыҡмаҫ, беҙ бында йәшенмәк уйнамайбыҙ, бәхәсләшергә лә жыйынмайбыҙ, Бәхтейәр һымаҡ дошман элементтарҙың ҡотҡо һүҙен тыңларға ла килмәгәнбеҙ... Әйҙә, тағы кантон вәкиле Йомаҡаев иптәште тыңлайыҡ.

– Мәғҙән граждандары... – Кантон вәкиле үҙен рәсми тота, шуға һүҙҙәре лә за-кон һымаҡ яңғырай. Уның өсөн, әйтерһең, әлеге бәхәс булманы ла. – Партия илде көслө державаға әйләндерергә ынтыла. Йәш Совет республикаһы алдында, волисполком рәйесе әйтеүенсә, индустриализациялау бурысы тора. Беҙ – эш-селәр һәм крәҫтиән синыфы дуҫлығы өсөн... Халыҡ Октябрь революцияһы емештәрен көтә. Шуға, Сталин платформаһы яҡлылар уйынса, ауыл ху-жалығында ла, промышленностағы кеүек, ваҡ хужалыҡтарҙы эреләтеү мәсьәлә-һе ҡалҡа... Партия беҙҙең алға колхоздар – коллектив хужалыҡтар төҙөү буры-сын ҡуя. Һүҙҙән эшкә күсергә ваҡыт, граждандар! Партия ла, халыҡ та төрлө оп-портунистарҙың, бухаринсы, троцкист-зиновьевсыларҙың бәхәсенән ялҡты. Партияла әллә нисәмә платформа көрәше заманы үтте, беҙ Сталин иптәш тирәһенә тупланабыҙ. Әле сығыш яһаусы иптәш, Ҡамса туған, дөрөҫ әйтте, Бәхтейәр – бухаринсы! Ул – кулак элементтары идеологияһын ҡайғыртыусы! Беҙ, сталинсылар, ярлы-ябаға өсөн көрәшәбеҙ...

Халыҡ барыбер тынманы, волком ағзалары, ниһайәт, Бәхтейәрҙең дә өнөн тыҡтыҡ, тип яңылышты; тауыш баҫылмағас, кантон вәкиле лә һүҙен өҙөргә мәжбүр булды. Сходтың рәте-сираты китте, һүҙҙең бәҫе бөттө.

Дөрөҫөн әйткәндә, мәғҙәндәр кантон вәкиленең «колхоз» тигән һүҙен аң-ламаны ла, уны ҡолағына ла элмәне. Кантон вәкиле Йомаҡаевтың волостҡа сә-фәре аҡланманы, кешеләр волком рәйесенең икмәк давайлауын ғына аңғарҙы, ауылда «тағы продотрядтар заманы ҡайта икән» тигән имеш-мимештәр йөрөнө. Ығы-зығы, шау-шыу шуның касафаты ине.

Кантон вәкиле һүҙҙәренсә, был сходта Мәғҙән кешеләре властарҙың яңы тәҡдимдәренә баш күтәрҙе, Ҡамсаға, волком ағзаларына ҡаршы сыҡты.

### VI

Мөнирә бөгөн әллә ниндәй дәрт, һөйөнөс менән уянды. Ире ул торғансы уҡ мәктәбенә киткән, балалары иҙрәп йоҡлай.

Әллә ниндәй кинәнес, ашҡыныу биләй күңелен. Йәнендә ниндәйҙер елкенеү бар. Эше лә ҡутарылып ята бит әле, кер йыуырға йыйынғайны, ҡош-ҡорто көтә, сабыйҙары уянһа, ә күңелдә – шатлыҡ... Ғәҙәттә, уянғас, мәшәҡәттән өркөп ятаһың. Йәнәһе, был көн ниндәй мәшәҡәттәр әҙерләй?

Етеҙ ҡулдарға күҙ ҙә эйәрмәй – тауҙай керҙе йыуҙы ла ташланы. Бүтән көн булһа, мыштырлар, йыбаныр ине. Бөгөн ул – көслө, дәртле, бар донъяға йөҙөн асҡан. Ҡояш та юғарыраҡ күтәрелгән, йәш кешене ҡеүәтләй: «Мөнирә, йылмай, Мөнирә, һин иң сибәре!»

Бәхетле көн, шат донъя, ҡояш та йылмая, Мөнирә һылыуҡайҙың бит осонан үбергә ҡыя. Мөнирә бәхетле, Мөнирә – был донъяның йөҙөк ҡашы! Мөнирә йәш бит әле, ун алты йәшлек ҡыҙҙарыңа биргеһеҙ!.. Бит алмалары соҡорланыуы, ирендәре йәйелеүе, һөрмә тартылғандай ҡуйы ҡара ҡаштарының ҡыйғасланып-бөгөлөп китеүе! Һәр хәрәкәт, һәр ҡылыҡ килешә уға.

Һатый һауаһы бөгөн ниңә бәхет менән тулған? Күктәр шундай бейек, яҡты, шатлыҡтың иге-сиге юҡ. Мөнирә кинәнә, тик юҫыҡҡа, үҙ алдына, буштан юҡҡа йылмая! Бөгөн бөтә эше лә ҡулынан килә, еңел генә үтәлеп тора! Был яҡты донъя ла уны ҡеүәтләй, әйҙүкләй!

Йәш ҡатын шишмәнән дәртләнеп атланы. Ҡайтып инһә, ихатаһы шар асыҡ, өйҙә – ят бәндәләр...

– Бәхтейәр...

– Мөнирә, ҡыҙҙар... Балалар илай, – тип әйтә алды ире.

– Йәһәтерәк! – тип екерҙе хәрби кейемдәгеләрҙең береһе.

– Мөнирә, мине Мәсәғүткә апкитәләр, әйберҙәрҙе алырға тип кенә ҡайттым... Мине мәктәптә... Мине ҡулға алдылар, Мөнирә.

– Бәхтейәр, мин...

– Һин балаларҙы ҡара, – тип бисәһен тынысландырҙы учитель. – Оҙаҡламам, Нәбиҙәргә әйт... Мин әйтте, тиң.

– Ә һин?

– Етте! – Аҡсай-тоҡсай ҡараған теге хәрбиҙең түҙеме һынды. – Һуңлайбыҙ!

– Мин... – Мөнирә төртөлдө, ни алып, ни бирергә белмәне. Ҡыҙҙары илай, ире уларҙы йыуатып маташа, ялбыр сәстәренән һыйпай. Күҙҙәрендә – йәш.

– Сәй... – тип ҡысҡырҙы бисә. Тегеләр ҡырт киҫте: ирен өтәҫтәп-төрткөләп алып сығып киттеләр. Әллә ҡайҙан кырандасҡа егелгән ҡара айғыры ла пәйҙә булды.

Бәхтейәр шулай ҙа ике-өс һүҙ әйтеп өлгөрҙө:

– Ҡамсаның хөсөтө! Шул үс ала... Мөнирә-ә...

Бәхтейәрҙең һуңғы һүҙҙәре өҙөлөп-йолҡолоп ҡалды, уның өнөн бала-саға илауы, Мөнирәнең сеңләүе баҫты.

Алып киттеләр. Ай күрҙе – ҡояш алды.

Мөнирә түшәккә һуҙылып төштө. Яңғыҙ ҡалғыһы килде, башындағы сыуалсыҡ уйҙарын бер епкә теҙгеһе, саҡ ҡына булһа ла был мәхшәрҙән һуң тынысланғыһы килде. Ни булды, ни ҡылды ул? Бынан һуң тормош ағышы ҡайһы яҡҡа тоҫмаланыр икән? Ары нишләргә, нисек йәшәргә?

Күҙ алдында иренең ҡаҡса, ҡалҡыу һыны торҙо, ҡолаҡ төбөндә һаман Бәхтейәрҙең әрнеүле ауазы яңғыраны: «Ҡамса, һинең балаларың, ана, Беләҙекүлдә ята...»

– Бәхтейәр, ҡуй!

– Мөнирә, бел: шуның хөсөтө!

Йәш ҡатындың мейеһе зыңҡыны, йөрәге тертләп торҙо.

Зиһене бер асылды, бер томаланды: Беләҙекүл... Ҡамса... Бәхтейәр...

Ирендәре дерелдәне, күҙ ҡабаҡтары тартышты – һаман ныҡлы ғына бер ҡарарға килә алманы. Ҡасан ғына күңел күге аяҙ ине, инде бар донъяһы төпһөҙ Беләҙекүлгә батты.

Беләҙекүл, Ҡамса... Ҡамса, Бәхтейәр...

**VII**

Хәҙер, ире ҡулға алынғас, күҙе асылды, шай. Башына һеңгеҙәтә һуҡҡандай итте бит. Ул, иремде минең арҡала төрмәгә яптылар, Ҡамса мине үҙ итеп көндәшен ултыртты, тип уйланы. Ғәйеп унда! Бәхтейәр учитель башына бисәһе етте!

Мөнирә ире тотолған кантон үҙәге Мәсәғүткә барып йөрөнө.

Ялынды, ялбарҙы, илле алла, ҡырҡ мулла менән саҡ маҡсатына иреште: саҡ күҙләшергә рөхсәт алды. Бәхтейәрҙе бик ҡаты һаҡ аҫтында тоталар икән.

– Мөнирә, түҙ, был – хата, мине оҙаҡламай ебәрерҙәр.

– Ҡасан?

– Мин Советтарға ҡаршы түгел, мәктәптә балаларға ла ярлы халыҡты гел яҡлап һөйләнем, ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙе маҡтаным, – тип иҫбат итте Бәхтейәр. – Был – хөсөт, был...

– Ҡамса һинән үс аламы, Бәхтейәр? – Йәш ҡатын, ниһайәт, башында ҡайнағанын әйтеп һалды.

– Әллә. Уның ҡыҫылышы бар микән? – Бәхтейәр икеләнде. – Мин уларҙың ҡылығын тәнҡитләнем, хаталарын күрһәттем. Волисполкомда унан башҡа миңә теш ҡайраусылар етерлек ине. Үҙҙәре шыр наҙан, комиссар булып алдылар... Совет, Ленин, Сталин тип ҡайһыһы көслөрәк тамаҡ йырта – шул өҫкә үрләй. Минең учитель булыуымды, белемле булыуымды яратманылар. Теге кантон вәкиленә бай балаһы тип башырғандар...

– Хан заманындағыһын ҡаҙып сығармаһалар...

– Чека бөтә тикшергән, һинең бай ҡыҙы икәнеңде лә беләләр...

– Ыста! – Мөнирә телһеҙ.

– Мин – буржуй, дәүләт именлегенә янайым, большевистик партия политикаһына ҡаршы көрәшкән бухаринсы платформала торам икән.

– Бәхтейәр, мин бер үҙем нишләрмен? Балалар бәләкәй, тағы ла ауырым бар... – Бисә күҙ йәшенә төйөлә.

– Түҙ, тикшерерҙәр ҙә ебәрерҙәр... Оҙаҡламай суд була. Бел: минең бер ғәйебем дә юҡ.

Йәш бисә иҫерек кешеләй ирегә өҫтөрәлә. Мәсәғүт менән Мәрҙән араһы мең саҡрым һымаҡ тойола. Бара ла бара, башы тубал, йәне иңрәй. Йөрәген ҡурҡыу, үкенес хисе талай. Уйын эшме: ирен ултыртырға йыйыналар, иң хәтәре – быға ул, Мөнирә, үҙе ғәйепле буласаҡ. Ире уның арҡаһында волком башлығы менән талашты, волком рәйесе Бәхтейәрҙе уның өсөн төрмәгә оҙатмаҡсы. Ҡамса, Мөнирәне үҙ итеп, Бәхтейәргә үс тота, Бәхтейәрҙе ситкә оҙатып, йәш бисәне һөйәркәһе итмәксе. Барып сыҡмаясаҡ!

Өс көндән Мәрҙән волосы йортонда Бәхтейәр учитель өҫтөнән суд булды. Өс ҡыҙылармеец өс яҡтан Бәхтейәргә өс мылтыҡ тоҫҡап торҙо. Кем белә, был, бәлки, Мәрҙән тарихында халыҡ дошмандары өҫтөнән иң тәүге, иң хәтәр суд булғандыр.

Асыҡ судҡа ғәм халыҡты йыйҙылар, ғәйепләнеүсене бөтәһенең ҡаршыһына

баҫтырҙылар. Идарала халыҡ шығрым тулы. Теге сходтағы кеүек шаулаусы ғына юҡ, күберәген сәхнәләге судьялар һөйләй, шаһиттар берәм-һәрәм шаһитнамә бирә. Мөнирә һөйләнгән һүҙҙәрҙе бик аңлап та бөтмәне. Гел «дошман», «бухаринсы», «троцкист-зиновьевсы», «Ленин», «Сталин» тигән һүҙҙәр ҡабатланды. «Кулак», «контра» тигәндәрен йәш ҡатын элек тә ишетә торғайны.

Бәхтейәрҙең үҙен әллә ни күп һөйләтмәнеләр. Ул йонсоған, был көндәрҙә ныҡ таушалған һымаҡ тойолдо. Тауышы ла һаңғырау, күҙҙәре тоноҡ, сырайы һүрән. «Әллә туҡманылар микән?» тигән уй үтте йәш бисә башынан. Бәхтейәр әүәл улай йыуаш булмай торғайны, ә был бәндә судьяларҙың һүҙе менән килешеп торғандай: сая арыҫландай яуға ташланмай. Элек бер ҡасан да бер кемгә лә һүҙен бирмәне, ғәҙеллек хаҡына тип, үҙенекен тылҡыуын белде. Уның төплө дәлиленә күптәр ҡаршы әйтә, бәхәстә уны берәү ҙә еңә алмай. Аҡылына, теленә һоҡландылар. «Бәхти әйтһә, телеп кенә һала», «Бәхти теленә эләкмә» тип ебәрәләр ине. Ә был кеше талсыҡҡан бер бәндә, оҙон юлдан арып ҡайтҡан мосафир хәлендә.

Кешеләр ҙә был судтан арып, ҡаңғырып сыҡты. Баштарын эйгәндәр, береһебер һүҙ ҡатмай, үҙ-ара гәп тә, бәхәс тә юҡ. Һәр кем үҙенә бикләнгән.

Бәхтейәрҙе алып китеү Мөнирәгә ауыр тәьҫир итте, хәс тә ҡапыл яҡты көнө һүнде, был көн ҡояшы тотолған көнгә оҡшап ҡалды.

## Өсөнсө бүлек

Әле алған хәбәренән хайран: бөтә донъяһы түңкәрелде, үткәне теп-тере көйө ҡашына баҫты. Былай ҙа борһаланыр, тетрәнер икән йәне – ул үҙен янаһын янған, көйәһен көйгән зат тип уйлағайны. Һүнгән усаҡ, ҡуҙҙары ла ҡалмаған. Саҡ ҡына ел иҫкәйне, яҙмыш еле өргәйне.

Ниңә шул саҡлы тибрәнә, бармаҡтары дерелдәй, күҙ ҡабаҡтары тартыша? Хәс тә ун һигеҙе тула, ҡайҙалыр елкенә, кемделер көтә, ниндәйҙер һөйөнөсмө, үҙгәрешме була, тип ымһына. Бөтәһе лә үткәндәрҙә ҡалған бит инде: ҡосағы һалҡын, уҡаһы туҙған! Үпкән онотолған, ҡосҡан елгә осҡан, буяуы ҡупҡан. Тағы ни тип өмөтләнә, үҙен сәскәле Әпшән болондарында еләм тип хис итә, йәнәһе: бер йәшлектә, бер ҡартлыҡта, үткәндәр яңынан ҡабатланыр, йәшлеге кире ҡайтыр. Ул ҡабат ғашиҡ булыр; ашҡынып һөйөр, донъяһын онотор: сәс-баш туҙҙырып Беләҙекүл буйлап сабыр, ул тип әллә ниндәй морталларға төшөр. Ул, ул ғына ҡаршыһында, уның исеме телендә! Илаһи бер ҡая, буй етмәҫ маяҡ, инде изге бер затҡа әүерелгән. Йылмая, Беләҙекүл буйына ҡабат саҡыра. Улар тағы әйләнбәйлән әйләнә, беләктәре көслө, ҡараштары йомшаҡ, ул уны иҫәр генә итә... Ғәмәл тип яңылышҡан хыял, һонолоп та буй етмәҫ ҡош!

Ҡайҙарҙа йөрөп ҡалды ул мәлдәр? Ҡайҙа аҙаштырҙы, аймылыштырҙы яҙмыш? Ниңә әле һаман тибрәнә, хистәренә һаман баш була алмай – ымһынып та тәмләй алмаған емеш, һонолоп та етә алмаған бәхет иле...

Был яңылыҡтан башы әйләнгән; күтәрелеп кенә һуғылырға ярамағанын да белә – йәш елкенсәкме ул, инде хис-тойғолары таралып, күңеле ҡорғаҡһыған буш мискә төбөләй булғас, һаман ун туғыҙ йәшендә, һаман Ҡотой ҡарттарҙың тәҙрәһенән күҙен алмай. Ул – йыраҡта, ул ҡайҙарҙа. Һаман шул идараһында ултырамы, ул – һыбай, ул уның өләшенә төшкән көмөшө... лә түгел, ә һаман ымһына, бүтәндәрҙе күрмәй, гонаһ ҡына көҫәй, эйе, уға нәҡ кеше өлөшө кәрәк!

Кире бөгөнгө халәтенә ҡайта. Тәҙрә төбөндә... Эшһеҙ кеше – уйлы кеше, хискә тарыған, хәтирәләренә сорналған, ҡабат үткәндә, яңынан үткәнен дә йәшәй – уҙған ғүмер һыбай ғына елеп үтә алдынан. Бер туғандары, ике, өс, дүрт, биш туғандары... бөтәһе лә уныҡылар.

Ҡабат йәшлегенә, ун туғыҙынсы йылға ҡайта. Ошо осорғаса тормошо яҡты булды, уйһыҙ көйө елде ҡолонсаҡ болон буйлап, бер хәстәр, хәстәр белмәне; шунан һуңғы тормошо... Әгәр тормошоноң шул киҫәген ҡайсы менән киҫеп ташлап ҡына булһа. Әгәр яҙғанына күнһә, артығын көҫәмәһә...

Юҡ, ул бик ҡомһоҙ ине, сая ине, ул был тормошто артыҡ ныҡ яратты, барыһынан да йәне теләгәнде йән тыныслығынан артыҡ күрҙе. Янып-көйөп һөйҙө, әллә яҙыҡ ҡылды, әллә аяуһыҙ был тормошҡа, уның бәғерһеҙ ҡанундарына, осраҡлыҡтарына юлыҡтымы? Әллә? Һай, яҙалан, бәхет таты ла таты; һөй, һөйөл, яҙмыш ыңғайына эйәрмә, тәҡдиргә буйһонма! Саҡ ҡына булһа ла был донъяла үҙлегеңде, теләгеңде, мөхәббәтеңде раҫлап ҡал, хисеңә, бәхетеңә хоҡуғыңды даула – ел ыңғайына йөрөмә, һин – кеше... Һин мөхәббәт хаҡына, йәшәү өсөн ғазапҡа риза! Һин был тормоштан барыһын да татып китәһең: әҙәмсә йәшәйһең, һөйәһең. Йәшәйһең, йәшнәйһең, тетрәйһең.

Бәрәкәт Алла, үҙ-үҙе менән һөйләшә башланымы? Хыялыйланып барамы? Кешенең шәп булып, кеше булып дөрләп йәшәүе хаҡында уйлана, даулы яҙмышын яңынан ҡабатлай.

Кеше шулай уйҙарҙа ғына икенсе ҡабат ғүмерен йәшәй ала.

...Хәҙер ҡара тырыш диндарға әүерелде, гел эстән ниндәйҙер доғаларҙы ҡабатлап йөрөр, аҙым һайын кешеләргә, барса донъяға: ергә, күктәргә теләген әйтеп-белдерер булып китте.

– Бисмилләһи рахмә-әни ррахим. Аллаһыу-һөммә ғафәрсен, ярлыҡаусы яппарсың, саҡлағусы саттарсың – саҡлағыйсың бәләдин, телебеҙне тыйма зәкер белән сәнәдин. Дауа белән дәүләт бир, эшкә хәрәкәт бир, ашыбыҙға бәрәкәт бир, тәнебеҙгә сәләмәт бир, сырхаулауларға дауа бир, йәтим белән фәҡирләргә ярҙам бир. Бу донъядан киткән, беҙдән доға өмөт иткән, иман белән үткән әрвәхләргә изгелек бир, Хоҙайым.

Шөкөр ҡылдыҡ барлыҡҡа, төшөрмәсәнә безне тарлыҡҡа; белеп ҡалған, белмәй яңылыш ҡылған гонаһларыбызны һәммәбеҙнекен дә, бер Хоҙайым, үҙең ярлыҡа!

Яарраби, бер сиңа ғына ғибәдәт ҡылабыҙ, беҙ сиңа ғына өмөтләбөҙ. Иманыбыҙны онотторма. Иң соңғы сулышыбыҙда иң соңғы сүҙебеҙне лә-ә-ә иллә-һи илләлләһи мөхәммәтррәсуллалла дип әйтергә насип әйлә. Әмин.

## I

Хәйер, ул ирен ҡулға алғансы уҡ үҙгәргәйне инде: үҙендә әллә ниндәй алмашыныу, тормошонда киҫә боролош кисерҙе. Әлегәсә шаян, шаталаҡ ине, бер ни менән дә иҫәпләшмәне, йолаларҙы тотманы, ололар һүҙенә ҡолаҡ һалманы. Иркә үҫте, тормошто бик еңел ҡабул итте, сиктәрҙе белмәне. Уны ун туғыҙынсы йылғы мәхшәр шундай итте, бары тамаҡ, башты һаҡлау касафаты ҡалды.

Ҡамса менән башын юғалтыуы бер тәртәгә лә һыймай.

Бәхтейәр учителде оҙатҡас, волкомдың элекке рәйесе Ҡотлояр менән хәҙерге рәйесе Ҡамса ике көн эсеп ятты. Элек ауыҙына ла алмаған Ҡамса...

– Ниңә шуға ҡаныҡтың, Ҡамса? – тип нисәнсегә ҡабатлай Ҡотлояр.

– Мин ғәйепле түгел...

– Һине, әүәл Бәхтейәр бисәһе артынан йүгергән, тиҙәр...

– Юҡ, бисә өсөн кеше башын ашарға...

– Ир түгелһең!

– Бәхтейәр үҙе ғәйепле: торҙо ла Советтарға ҡаршы тәнҡит яуҙырҙы – аҡыллы баш.

– Уны «йомро баш» тиҙәр.

– Ул ғына белемле, унының ғына башы эшләй. Кем әйткән әле: белеменән бүк өйөп ҡуйған. Үҙ башына үҙе етте, партияға аяҡ салды, Сталин платформаһына ҡаршы сыҡты...

Ҡамса Ҡотой ҡарттарҙағы теге мәжлесте Ҡотлояр дуҫынан йәшерҙе.

Был – эске табыны, ә тантана түгел ине. Барыбер хәрәм төртә, ғәйеп эстән ашай шул. Ҡамса Мөнирәләргә китте. Улар яңы ғына, Бәхтейәрҙе төрмәгә ултыртҡас, Һатыйҙан Мәғҙәнгә күсеп ҡайттылар.

Хәҙер ул был өйгә бер ниндәй тартыныуһыҙ барып инә ала. Уны берәү ҙә тыймай, ул берәүҙән дә өркмәй. Көндәше – ҡайтмаҫ ерҙә, һөйгәне япа-яңғыҙы... Ә Мөнирә – иректе ҡош, көтәлер. Ҡамса – иҫәр, ни ғүмер күҙгә-башҡа күренмәйенсә, һөйөклөһө хәлен белмәйенсә йөрөй. Һарыға һабышҡан. Үкенес тойғоһо кисерә, бисәләр һымаҡ балауыҙ һыға. Тәкәр донъяһына, яңы тормош дошмандарына аяуһыҙ бул, большевик, оло волость башлығы! Биләмәңдә нисәмә ауыл, кантком һиңә ышана, сигенмә! Тимерҙәй ныҡ бул, ҡыҙылармеец! Әллә, күҙ йәше түгергә...

## II

Бәлхиә Мөнирәләрҙән сыҡманы. Йәш ҡатын һығыла: башына ябырылған хәсрәтенән аҡылы фәлән зәғифләнеп ҡуймағайы. Ире йәнәшендә саҡта бик иҫе китеп бармай ине, хәҙер уны алмаштырып ҡуйҙылармы ни...

Ауылды шаңҡытҡан өс көн уны сығырынан-сығарҙы.

Имсе хәҙер, йәш әхирәтен әүрәтәм тип, башынан бар кисергәнен теҙеп сыҡты.

– Фраклы ир Мәликте ниңә шул саҡлы ашҡынып көтәмдер? Хәс тә теге йәйләүҙә ятҡан саҡтарым кире әйләнеп ҡайтҡан: тәҙрәнән тәҙрәгә йөрөйөм, әйләнгән һайын болдорға сығам, Ҡотой абзыйымдар яғына күҙ атам.

Ул бит, килһә, Ҡотой ҡоҙаһына төшә, атын шунда туғара, бөтә байлығын шунда бушата. Мәлик бай – Ҡотой абзыйымдарға байрам. Ә еңгәмдәргә нимә: уларҙың донъяһы теүәл, бураһы тулып ҡала, юҡ, уларҙың тупһаһы ашалмай, юҡ, уларҙың ишек тотҡаһы туҙмай. Улар бай эшенә ҡыҫылмай: Әпшән йыраҡ, Мәликтең бисәләренең бында ҡулы етмәй. Мәлик йомарт, күстәнәсен, түшкәтүшкә итен тейәп килә, туғандарҙың ауыҙын шулай йомдора, мут. Кырандасын барыбер, кеше күҙен яҙҙырып, Ҡотой ҡоҙаһына ҡуя ла...

Эҫенеүем шул саҡлы, үрле-ҡырлы баҫам, ишем, тим, алдағы йоманан да ҡалмай... Килһә, тупһа ашаһы юлына күҙ нурымды түгеп сиккән балаҫымды түшәрмен, ят күҙҙәргә, көнсөлдәргә төкөрөрмөн. Ҡороған ағас түгелмен бит әле, берәүҙең йәренә лә ымһынмайым. Ҡарап тороуға буйым – зифа тал, һыным килешле, бөгөлә-һығыла, япраҡтары әле йәм-йәшел, әле ҡыҙҙарға биргеһеҙ сағым.

Әпшәндәге йәйләү күҙ алдымда. Шунда, уны көтөп, көтөк булып бөтәм бит. Ҡарурман, ҡырағай кейеккә иш булып, һәр өндө отоп... Ә ул иҫкәрмәҫтән баҫа... Сәсем туҙған, итәктәрем елперҙәй, еләм генә! Мине ел дә ҡыуып етә алмай, беләгемә, сирағыма сыбыҡ-сабыҡ бәрә – эй иҫәр! Муйынына ташланам. Иҫемде юям, тыным-өнөм тонсоға. Һөйөклөм түшендә сабыйға әүерелә м. Айҡалам да сайҡалам. Теге, илаһым, көслө... Икәү күктең етенсе ҡатынаса күтәреләбеҙ. Шул мәлдә мин – мин түгел, ә ерҙәге иң-иң бәхетле кеше, иң-иң аҫыл йәр! Мине танһыҡ итәләр, ҡәҙерле күрәләр, был донъяла мин берәүгә булһа ла кәрәкмен... Ул мин тип килгән, мин тип йән атҡан!

– Һин – урман эйәһе, – Мәлик.

– Кит, ҡурҡытма! Күл буйында йәшәйем...

– Һыу эйәһе, ату! – Көлә.

– И-и...

– Эш күп, ҡалаға сабам...

– Ҡала нисек, Мәлик?

– Ҡала ни... кеше күп. Тағы... – Байҙың төҫө үҙгәрә. – ...Ярман һуғышы башланған. Бәлхиә, был һуғыш япондыҡынан да хәтәрерәк буласаҡ. Мин, байҙарҙың да балаларын әрмегә саҡырмаҫтар микән, тип ҡурҡам. Ғәбделнафиҡ, Ғәбделхалиҡ ағайымдарҙың да әрме йәше еткән уландары бар...

– Аҡсаң күп, өйәҙҙә бәйләнештәрең етерлек.

– Әллә? – Байым илай. Байым, йән киҫәгем!

Мөнирә ҡатҡан: иларға ла, көлөргә лә белмәй.

Уҙған ғүмер – ҡалған хәтер, ултырып илаһаң да, хәҙер кире ҡайтарып булмай. Уҙғанда яҡшыһы ла, хәтәре лә булған.

Бәлхиә ҡарсыҡ ошо йәшкә еткәс, мөхәббәт хаҡында һөйләй. Уйындағыһын үҙе генә белә, йөрәгендәгеһен төпкәрәк йәшергән.

Хәтирәләре яңынан терелә, күҙ алдында – йәнә таныш йөҙҙәр... Ә уның сырайы бигерәк яҡты, уның иҫтәлеге бигерәк танһыҡ; уның хаҡында уй бөтә йәнен аҡтарып ташлай; тетрәнергә, ярһырға, ҡабат язаланырға мәжбүр итә. Ни саҡлы ғүмер уҙған, күпме һыуҙар аҡҡан?

## III

Ҡамса үҙе килде. Мөнирә лә аптыраны: Ҡамса ла, Бәхтейәр һымаҡ, бөтөрөнгән, яңаҡтары тартылған, танауы ғына ослайып ҡалған. Күҙ ҡабаҡтары шешмәкләнгән, ҡолағы ҡарпайған... «Әллә был да ҡайғыра микән»? – тип уйланы йәш ҡатын, дуҫын йәлләгәндәй ҙә итте. Ҡамса ла үкенә... Үҙен ғәйепле тоя! Хәҙер ни фәтүә? Баштан самалайҙар уны.

Йәш күңеле тағы ҡатты. Был кеше, уның дуҫы, уның тормошон емерҙе!

– Минең бер ғәйебем дә юҡ, Мөнирә.

– Юлдан алып ташланыңмы? Хәҙер йәнә тәтәй уйнайыҡ – бисәһе буш! Ә балалары хаҡында уйланыңмы?

– Эш бер миндә генә торһа...

– Тағы кемдә тора? Һин Бәхтейәрҙе эҙәрлекләнең, ул арҡыры торҙо һинең тамағыңа! Һин – оятһыҙ...

– Бәхтейәр үҙе – һуҡыр себен, күҙгә кереп бара... Сходта сығыш яһай, йыйылышта – үҙе ғәйепле, үҙ башына була...

– Бисәһен һөйгәң килде, үҙен төрмәгә тығып, хоҡуғын да, бөтә донъяһын да тартып алдың: бисәһен үҙеңдеке итәһең, балаларын ҡырып-эсеп бөтөрәһең, контр Бәхтейәрҙәр тоҡомон шулай ҡоротаһың. Һин – иблис, һин – ғазраил!

– Мөнирә, ул һиңә тиң түгел, ул – дошман...

– Ул – бай балаһы, халыҡтың ҡанын эсеүсе...

– Ул – иҙеүсе синыф вәкиле...

– Ә мин кем, мин дә дошманмы, Ғәбделнафиҡ бай ҡыҙы...

– Һин башҡа, һин бүтән... – Ҡамса үрһәләнде, ике ут араһында ҡалған сысҡандай, унда-бында һуғылды.

– Юҡ, мин дә байҙар затынан, мин дә һиңә дошман! Бар, мине лә заявить ит! Көлкөмө? Бай, имеш, бете бармы уның? Ана, балалары – ас! Һин һаман шул байҙар өрәге менән көрәшәһең.

– Мөнирә, тыңла. Ул беҙҙең платформаға ҡаршы сыҡты...

– Ниндәй платформа? Һин уға теш ҡайраның, уның бисәһе кәрәк ине – ал,

һиңә уның донъяһын туҙҙырыу кәрәк ине – ҡыуан, һиңә уның тамырын ҡоротоу кәрәк булды – кинән! – Мөнирә сәсәне.

Күптән ҡараңғы төштө, ә күҙ йәше кипмәне. Ҡамса буш ҡул менән ҡайтып китте... Бисә, ятҡас та, һикелә йәнһеҙ түмәрҙәй әйләнде-тулғанды. Йәшле сәсе сыбалып бөттө; сәсен дә һыпырмай, йәшен дә йыймай; әйҙә, аҡтығы аҡһын, әйҙә, донъяһы ҡутарылып ятһын! Уның йән тыныслығын юйҙылар, үҙен ҡом бөртөгөнә әйләндерҙеләр. Кешеләр яңғыҙын ташлап китте. Ул ирен һатты, ул – бисара. Уны берәү ҙә белмәй, күрмәй. Ул берәүгә кәрәкмәй, хатта уны язаға тарттырырға ла йыйынмайҙар. Битараф донъя, ғәмһеҙ кешеләр!

Ауаздар тынды, хәрәкәт баҫылды, балалар ҙа күптән ойоп китте.

Уға Ҡамсаһыҙ ҡыйын да, еңел дә... «Ҡамса, Бәхтейәр... Ҡамса...» – Мейеһендә һаман шул бер уй ярсығы.

Ҡамса тағы килде, ғәйепһеҙ булһам да, тип ғәфү үтенде. Мөнирә ҡабат ҡыуалап ҡайтарҙы.

Бәхтейәр киткәс, ашау яғы ла наҡыҫланды, хәҙер Мөнирә күптән ашханала эшләмәй; донъяны хәстәрләйһе бар, өс бәләкәскә күҙ-ҡолаҡ булаһы. Хәҙер ир урынына ла, бисә урынына ла йүгер! Бәхтейәрҙең төрмәгә ултырыуы һәүетемсә барған донъя ағышын боҙҙо.

**IV**

Мөнирә, был ауылда бүтән таянысы ҡалмағас, тағы Ҡотой ҡарттарға барҙы. Ҡотой, харап эшем кешеһе, балыҡ алып ҡайтҡан, шуны оҙон ялғашҡа бушатып таҙартып ултыра.

– Уңай килдең, ҡыҙым, балыҡ апҡайтырһың...

Мөнирәнең йөҙө яҡтыра, Ғаҡилә еңгәһенең алъяпҡысын быуа һала.

– Еңгәң баҡма булып ултыра, күҙенә аҡ һалды бит.

Ҡотой ҡарт менән алсаҡ Мөнирә көлөшә-көлөшә балыҡ таҙарта. Шунда Бәлхиә ҡарсыҡ та инә – туғандар бер ҡор булып китә.

Мыжыҡ Ғаҡилә әллә ысынлап күрмәй, әллә күрмәмешкә һалыша: донъяһын иренә атҡарып ҡуйған, сәй табынынан тормай. Бәлхиәне шымсы күрә, «Бәлхиә – сыхырсы» тигән һүҙҙе нәҡ ул таратты – шуға хәҙер кешеләр Бәлхиәнең дәү ҡара күҙенән ҡурҡа, урамға сыҡһа, бала-сағаһын йәшерә, мал-тыуары үҙе ҡаса.

Ғаҡилә Мөнирәне лә яратмай. И, кем йәтиме кемгә һыя? Кешеләр әүәлдән ғәрип-ғөрәбәне яратмай, йәтим-еһерҙән арыраҡ булырға тырыша. Ә Ҡотой – йомарт, йөҙөнән йылмайыу китмәй.

Мөнирә тағы йәтим ҡалды, ирһеҙ бисә – ишкәкһеҙ кәмә. Ҡотой ҡарттан башҡа кемгә баш төртһөн?

Ҡотой әле хикәйәһен һөйләй.

– Ҡаҙаҡта көтөү ҙә көттөм. Бай уҫал, йәш бисәһе сибәр. Гөләндәм исемле. Төндә тирмәмә баҫыша бит, әкә ҡышлаҡҡа икмәк-тоҙға тип төшһә, миңә көн бөтә. Гөләндәм үткер: тирмәмә килә лә керә, мин, бәләһенән баш-аяҡ тип, ҡасам. Былай күҙ ҙә ҡыҙа, йәш саҡ – дәртле саҡ бит. Тик һаҡмын, сер бирмәйем, йәш бисәгә лә бер ишара яһамайым. Байҙың мөлкәтенә ҡағылыу ҡайҙа? Гөләндәм ҡуймай.

Бай барыбер эләктерҙе. Теге эске күлдәктән, ай яҡтыһында – хәс тә фәрештә. Төн ҡараңғы, мин йондоҙҙар һанап ятам, кинәт ел тегенең күлдәге еләгеүен ҡолаҡҡа килтереп һуға: һиҫкәнеп, ҡараңғыға төбәлһәм – был! Яй ғына баҫа. Беләм бит: әкә бөгөн ҡышлаҡта, тегеләрҙең тирмәһе саҡ ҡына аҫтараҡ... Йондоҙҙар ҙа шаңҡыған, ел дә тынды, ә аҡ һын ҡаршыла ҙурайғандан-ҙурая, буй-һыны асығыраҡ беленә... Йөрәк дарҫлап тибә, инде бөттөм, тим, был юлы йәш бисәнең

иркенә ҡаршы тора алмаясаҡмын; ни булһа ла булыр. Ҡурҡам да: Гөләндәм хәҙер сихри ҡөҙрәткә эйә, ысын фәрештәгә әүрелгән...

– Әллә нимә һөйләп ултыра бисәләргә...

– Ҡыҙыҡ өсөн генә бит... Тирмәмә килеп кенә кергәйне, сибек усын ҡайнар маңлайыма терәгәйне генә – мәхшәр ҡупты. Тирмәмде баҫтылар, шул тигәнсе икебеҙҙе туҡмап, бәйләп һалдылар. Бай йәш бисәһенең уйын һиҙгән. Былар тегене ҡайҙалыр һөйрәп киттеләр, мине һыу эскеһеҙ итеп туҡмап ташланылар. Әллә ҡайҙа илтеп олаҡтырҙылар. Ас далала йыртҡыс ҡошҡа ем булһын тигәндәрҙер.

Йәнем ҡалғанмы-юҡмы, бер иҫемә киләм, бер ойойом. Баш осонда енме, бүреләрме олой. Зиһен асыла ла ябыла. Унда төнөн дә томра: ҡом да ел. Мине яңғыҙ ҡортҡа тапҡан. Көндәр буйы һейҙек эсендә ятҡырҙы, шулай терелтте.

Ҡотой башынан үткәнен теҙгәндә Мөнирә үҙенекен уйлай, үҙен теге уйнашсы бисә менән тиңләй. Ул да – гонаһлы. Ә Бәхтейәр уға тырнаҡ осо менән дә теймәне, ипле кеше ине.

Ҡотой быуаһы әллә ни саҡлы балыҡ төрҙө.

– Мин инәйең Минжиһандың ике туғаны... Туғандар шундай саҡта кәрәк.

Мөнирә башын юғары тотоп атлай. Йәшәүгә дәрте артҡандай, йөҙө асылғандай итә.

Мөнирә артынан Ҡотой өйөндә дауыл ҡубып ҡала. Ғаҡилә туҙына ғына:

– Туғандарыңды – жыйын ҡырғынды жыяһың ла ултыраһың!

– Ғаҡилә...

– Әйтмә! Үҙебеҙҙең тамаҡ ас, ә һин... Сихырсың беҙҙең елкәлә йәшәй, Мөнирәне аҫраным, хәҙер кейәүгә биреп ҡотолдоҡмо, тиһәм... Бар, бөтә урамдың ҡырғынын жый, ыштанһыҙ!

– Ғаҡилә!

– Дөрөҫлөк күҙеңә төртәме? Беҙҙең дә донъя, балалар...

– Беҙҙең нәҫел туғанды туған күрә бит, беҙ ауыр саҡта бер-беребеҙҙе ташламайбыҙ...

– Башҡорт...

– Мишәр һин! Беләҙекүлдә балыҡ бөткәнме? Бөтәбеҙгә лә етер. Мөнирә – Минжиһан апайымдың ҡыҙы. Ғәбделнафиҡ еҙнәм дә гел туғанды тартты, оноттоңмо? Туғанлыҡ – тормош йәме бит ул, туған-тыумасаң менән ҡатышып йәшәү – донъя күрке. Хатта донъяны һелкетеп тотҡан Мәлик ҡоҙа ла беҙҙе ят итмәне, типә-тиң күрҙе. Мин хәҙер Мөнирә һеңлемдән баш тарта алмайым.

– Боронғолар, етем бала аҫрағанса, етем мал ҡара – ауыҙың-мороноң май булыр, тигән... Беҙ Мөнирәне ҡараманыҡ түгел, ҡыҙ еткереп, әҙәмсә кейәүгә бирҙек. Әйҙә, хәҙер, башлы-күҙле булғас, үҙ йүнен үҙе күрһен!

– Ай, Ғаҡилә, ул тамағын беҙгә һалырға уйламай ҙа, кеше ҡайғыға тарымай торамы? Ирен ултырттылар, шундай ҙа әҙерәк ярҙам итмәһәм, исемем Ҡотой булмаһын!

– Йәтим бисә, ярлы туған... Бел: донъяла шунан да ҙурыраҡ ҡаза юҡ.

– Мөнирә менән Бәлхиә бесәндә – яланыңда, бәрәңгелә – йүгереп киләләр, утау, ураҡта тағы шулар ҡатыша... Һин игелекте тиҙ онотаһың.

## V

Ғаҡилә ғүмер баҡый байығыу хаҡында хыялланды. Ҡотойға кейәүгә сыҡҡанда сибек кенә сыраҡ ине, күҙгә ташланып бармаған ҡамышыҡ битле, таржыҡ танаулы һары сәскә. Һары сәскә баҫыу тулып ултыра, сүп үләне һанала – уға берәү ҙә күҙ һалмай, ҡояшлы көндә ул күҙгә тоноп бара. Уның гөлө, ал-күк сәскәһе үлән араһында йәшеренеп ултыра бит, ә был оҙон һабаҡлы, үлән араһынан «мине күрегеҙ» тип тәүләп һонолоп сыға – барыбер күҙгә элмәйҙәр.

Сибек сираҡ буйға үçһә үçте, өçтәүенә, йыуанайҙы, тик барыбер байый алманы. Үҙе балыҡсы ла, үҙе тимерсе лә Ҡотойға ышанғайны: имеш, Әпшәндә бай туғандары йәшәй, әсәһе яғынан бай затына ҡарай! Революция бар өмөттәрен юҡ итте, Ғаҡилә иртә ҡартайҙы, ҡәҙимге бер мыжыҡ бисәгә әүрелде. Өçтәүенә, бай тигән туғандары үҙҙәре тупһаһына килеп йығылды.

Һуңғы йылдарҙа Ғаҡилә йыш сырхай, күҙенә аҡ һалды, өçтәп, тағы йыуанайҙы. «Кеше көннө булып, баҡма ултырырға яҙмаһын!» – тип теләнде, белгән доғаларын ҡылды.

Аптырағас, кем кәңәшендер тотоп, фельдшер Факиһаға – волком башлығы Ҡамса ҡатынына барҙы. Бисәләргә фельдшер дауаһы килешкән – улар маҡтаны, Советтарға рәхмәт яуҙырҙы. Имеш, Советтар бисәләрҙең күҙен аса...

– Трахома сире, апай. Аш-һыу араһында булғанда, мал ҡарағанда ҡулығыҙҙы йыуығыҙ...

– Күҙемә аҡ һала...

– Бына шул дарыуҙы тамыҙығыҙ! – Духтыр ҡатын һәләк эре күренде башта. Аҙаҡ Ғаҡилә, йомшарып, хәбәрен дә һөйләп ташланы.

Әлегә саҡлы Ғаҡилә эсендә сер һаҡлай белде, өйҙә әрләшһә лә, сүпте урамға сығарманы. Шул ғәҙәтен ире лә яратты. Ҡашығаяҡта һауыт-һаба шылтырамай тормаç, ғаилә тигән дәүләттең сере булмай булмаç.

Факиһа Ғаҡиләнең һүҙенә аптыраманы. Хәйер, быңдайҙы ишетә йөрөй – илтифатһыҙ ғына тыңланы.

## VI

Иртән торһа, салт аяҙ, Беләҙекүл бите күҙҙе сағылдыра. Төнө буйы балаһы йонсотто, олоһо асмын тип мыжыны.

Ә донъя ҡайһылай матур, күктәр шундай серле, Беләҙекүл үҙенә саҡыра, ул сәләмләй:

– Һаумы, дуçҡай! Торҙоңмо? Донъя ваҡлыҡтарына бирешмә! Ас күҙеңде, һыпыр йөҙөңдө! Бер генә ҡат бирелә һеҙгә, кешеләр, ғүмер – ҡәҙерен белегеҙ! Мин – мәңгелек.

Мөнирә мәңгелек Беләҙекүлгә баға, шулай бар хафаларынан арынғандай итә. Бейек яр башында өйө, ҡарлуғас ояһы һымаҡ күренә, ә аçта – даръя. Беләҙекүл өркөтә лә, үҙенә лә тарта. Ялтыр йөҙө күкте тоташ йотҡан, ҡамыштары елгә бәүелә.

Мөнирә ҡурҡа. Беләҙекүл – шөкәтһеҙ йыртҡыс, үҙенә һура. Даръя – дуçы ла, дошманы ла. Уны хыялыйҙар ғына үҙ итә. Ҡайҙан килеп тарыны, бер ҡотолғайны бит инде. Һатыйҙа ятһа, һағыштары яңырмаç ине.

Беләҙекүл тулҡына. Тулҡын шәрәләтә, уларҙы көмөш алҡаларға әүрелдерә. Яғымлы бер ҡыҙсыҡ, бер ҡатлы бала, әхирәте менән һыу сәсрәтешә.

– Кил яныма!

– Һин – ҡылансыҡ, мең сүрәткә керәһең...

– Мин – шаян...

– Һин – ике йөҙлө, хафаларға һалыусы...

– Юҡ, мин шаһит ҡына... Үҙегеҙҙең ҡылығығыҙ өсөн үҙегеҙ яуап тотоғоҙ, кешеләр!

Көноҙон йөҙөн әллә нисәгә алмаштыра. Бер ҡараһаң – шаян, икенсе ҡараһаң... Буйында күпме сер. Ә бөгөн сибәр ҡатын: шөкәтһеҙ тулҡындарын көмөш гәрәбәләргә әйләндерә, йоҡа ғына күлдәк кейеп алған – ҡылансыҡ.

Һыу сәсрәтешәләр, йәш бисә баçмала ялан аяҡ, тулҡындар менән уйнай. Йәш ҡатындың башы әйләнә, артынан берәү ҡармай: кем?

– Мин!

– Ҡамса!

– Күҙгә-башҡа салынмайһың, өйөмә аяҡ баҫма, тинең, беҙгә шул яр буйы ҡала...

– Кеше күрһә, бисәң белһә...

– Иртә бит әле. Мин көн дә иртүк Беләҙекүлгә атҡа төшәм: үткәндәр һағындыра... Эх, бәхетле инек беҙ, Мөнирә! – Ир йөрәкһей. – Ә һин ул саҡтарҙы хәтерләйһеңме? Әйҙә, ҡамышлыҡ артына! – Ир, ҡатынға һүҙ әйтергә бирмәй, күтәреп тә ала.

– Ебәр!

– Һағындым...

– Ебәр!

Мөнирә ир ҡосағынан һоло тоғолай шыпырылып төшә. Ҡамса ары көсләшмәгәс, тыныслана.

– Мөнирә, әрләшмә, һиңә килешмәй.

– Һиңә генә бөтә килешә: Бәхтейәрҙе ебәрҙең, хәҙер, мә, бисәһен тала! Мин һиңә рәхмәт уҡып ултырырмын.

– Мөнирә, мин йөрәгем һыҙлағанға килдем, һәр таң киләм – беҙҙең осрашыу урынын оноттоңмо?

– Һин – әллә ысын, әллә юрый – йөҙөмдән көләһең.

– Мөнирә, Бәхтейәр үҙе ғәйепле...

– Ә минең ниндәй ғәйебем бар? Уның балаларының ниндәй ғәйебе бар? Һеҙ – коммундар, кешене сүп урынына ла күрмәйһегеҙ.

– Әгәр мине уны ҡотҡарырға теләһәм дә, ҡулымдан килмәҫ ине.

– Мин һиңә ышанмайым. – Киҫә генә боролдо ла юлында булды.

Йәмле иртәнең йәме китте, был осрашыуҙың сағыу төҫ-биҙәктәрен хәтәр хәтирәләр һөрөмө баҫты.

...Төшөндә ул тағы Ҡамсаны күрә. Имеш, улар ярашҡан, имеш, теге таңда юрый боҙолошҡан булғандар. Ҡамса – сибәр, ап-аҡ күлдәктән... Теге һаҡ ҡына ҡоса һөйөклөһөн. Икеһенә лә рәхәт. Әллә нисәмә көндәрҙән һуң ҡауышҡандар бит.

– Күңелем тыныс түгел, Ҡамса, йөрәгем ышанып етмәй: һин һаман шаяраһың...

– Мөнирә, үлеп ғашиҡмын... Һин мине хыялыйҙар итәһең...

– И-и, шулай тинең дә торҙоң... – Мөнирә, иламһырап, ише түшенә башын һалды.

– Бел, мин һинһеҙ үлән һабағылай кибермен...

– Ҡамса...

– Ҡайҙа? – Теге һөйөклөһөнөң сәсен һыпыра. – Тыныслан, шунда үләндә саҡ ҡына ултырып торайыҡ!

– Ысыҡ.

– Мин тужуркамды йәйҙем дә... Иртә әле, көтөү китергә лә арыу уҡ бар.

– Кеше һүҙенән, ят күҙҙәрҙән ҡурҡмайһыңмы, Ҡамса?

– Мин һинһеҙ түҙә алмайым, ашым аш, йоҡом йоҡо түгел.

– Ә миңә нисек тиһең?

– Үҙем ғәйепле...

– Әйҙә, ул турала һөйләшмәйек.

Ҡамса шымып ҡала. «Тел биҫтәһе» эстән үҙен әрләй, ирендәре ҡомһоҙ, йөрәге дөпөлдәй...

Нисә көндән һуң, күпме һынауҙар ахырында тәүләп ярашалар бит: йөрәктәре бер иш тибә, бармаҡтары бергә тибрәнә, тәндәре бер бөтөн булып ҡушыла. Ул һутлы ирендәр, ул наҙ ҡабат һауаларға ашыра, әүәлге бәхетле мәлдәргә алып ҡайта. Улар ҡайһылай һағынышҡан, ҡайһылай танһыҡ был һөйөш! Инде улар

ярҙа ла түгел, ҡамышлыҡ артындағы утрауҙа түгел; баштары юғалды, донъялары онотолдо – улар тағы ҡауышты, наҙҙан, бәхеттән иҫерҙе. Улар, ахырыһы, үҙ-үҙҙәренә хужа түгелдер, әлегәсә тыйылып, үҙ-үҙҙәрен алдап-аймылыштырып ҡына булашты. Ике йөҙлөләр.

Ҡабат әүәлге әмәлдәренә ҡайтты тормош, кире урынына ултырҙы донъя.

...Шунда ҡайҙандыр Бәлхиә пәйҙә. Шашынған, туҙынған.

– Барығыҙ, ҡасығыҙ, зинасылар! Хәҙер кешеләр саҡырам, был эшегеҙҙе бар ауылға фаш итәм! Барығыҙ! Ҡамса, һин кеше бисәһенә йоғонма: Мөнирә, һин кеше өлөшөнә ымһынма! – барыбер бәхетегеҙ булмаҫ, барыбер рәхәт күрмәҫһегеҙ, мин әйтте тиерһегеҙ!

Беләҙекүл хәтәр ухылдай, ауыр тулҡындарын ярға килтереп һуға ла тағы ары, төпкөлөнә китә. Бәй, имсе ҡарсыҡ күл төҫөнә ингәнме? Беләҙекүл булып, былар өҫтөнә ябырыла: тулҡындарын ташлай, зәһәрен сәсә генә ике шәрәнең өҫтөнә. Хәҙер икеһен дә йотор ҙа ҡуйыр. Беләҙекүл – аждаһа: ажғыра ғына, үҙ тәненә һыйыша алмай тулай. Зәһәрен сәсә әйләнә-тирәгә; уның шауынан, шул ҡара даръя тулауынан бар булмыш тетрәнеп тора.

**VII**

Йәш бисә иләмһерәп уяна. Һә, балаһы-бәләкәсе мышнап йоҡлай икән. Ә тышта яп-яҡты, аяҙ көн: Беләҙекүл йәшел бишеген бәүелтә генә. Йомшаҡ балаҫ – ҡаҙаяҡ үләне, күге – зәңгәр сатыр. Баш осона ҡояш аҫылған, нурға ҡойонған зәңгәр иңдәр, бар буйҙарға көмөш гәрәбә һибелгән. Йәш киленде лә шул шуҡ нурҙар уятҡан икән.

Ашыҡмайынса ғына ҡалҡына, оҙаҡ-оҙаҡ текләп ултыра Беләҙекүлгә. Күл алсаҡ, ҡашына саҡыра, ҡасан ғына шомрайып ята ине, уның да кәйефе булманы. Бөгөн Беләҙекүл – сабый бала. Кисә ул – уйнашсы бисә, бар белгәне күҙ баулау, кешене юлдан яҙҙырыу ине.

Бисә ирен уйлай, үҙен шул хыянатсы Беләҙекүлгә тиңләй. Ирҙәр бисәләренә ышана, Бәхтейәр кеүек бер ҡатлы була. Ул үҙ-үҙенә асыулы: нишләне ул? Ирен үҙ ҡулы менән төрмәгә тыҡты. Әйҙә, төшөңдәгеләй, һөйәрең менән аулаҡта ośраш. Ул тип өҙөлдөң, тәнең гел уға тартылды, уны онота алманың, түшәктә лә ирең араһына уны һалдың, ул иркәләне – иреңә түгел, ә уға бирелдең...

Башы шаңҡый. Бөгөн йоҡоһо йоҡо булманы: Раушанияһы мыжыны, Фәриҙә тыҡшая ла бер нөктәгә текәлә. Астар инде. Тәкәте ҡороно, тормошо ҡыйралып ята: оно бөттө, утыны ҡырҡылмаған. Ярай, еләккә йөрөнө, Бәлхиә әбей менән муйыл йыйҙы. Бесән ваҡыты үтте, ураҡ етә. Ашлыҡ утаны. Сабыйҙары һыу тип маҙаһына тейә. Һары үлән ҡороп үҫкән, бөтә баҫыуҙы баҫҡан, әллә ҡайҙан «мин бында» тип ултыра. Мөнирәнең ҡулы ҡалманы. Һары сәскә йолҡҡансы, Беләҙекүлгә генә ташланһа, бар ыҙаларынан бер юлы яҙһа... Мәсхәрәһе муйынынан быуа... Был көн тыуҙы, яҙығы өсөн – ҡон, яҙығы яза көҫәй; Бәхтейәр ғүмерҙә лә ғәфү итмәҫ.

## Дүртенсе киҫәк

Күҙ ҡабаҡтарын күтәрә. Саҡ ҡына булһа ла әүәлге хәтирәләренән арынғандай итә. Зиһене асыла, гүйә, шулай йоҡоһонан айырыла.

Оло ҡыҙы эштә, өйө йыйыштырыулы. Мал-тыуарын да ҡараған. Шулай үҙе генә ҡалғанда, Хоҙайға һыйына.

Уңарса Хоҙайҙың хозуры иркен икән дә... Унда бар бәндәһенә урын етә. Кешеләр тайып йығылғанда, таянысһыҙ япа-яңғыҙы ҡалғанда, сырхаулап сараһыҙ ултырғанда бында йыуаныс таба. Аллаһы Тәғәлә үҙенә ылыҡҡанды кире ҡаҡмай.

Биләмәләренең ҡапҡалары асыҡ... Әйҙә, бәндә, рәхим ит, теҙ сүк, тәүбәләргә кил! Был ер йөҙөнән тай-тулаҡтай сырҡырап, берәүгә лә баш бирмәй оҙаҡ саптың, хатта яуап көнөн, бер көн килеп Хаҡ Тәғәлә алдына баҫырыңды, бөтәһе, бөтәһе өсөн иҫәп-хисап тотороңдо оноттоң. Шәп инең, донъяларҙы айҡарҙай, хатта диңгеҙҙәрҙе кисерҙәй, ер-һыуҙарҙы биләп, тауҙарға, илдәргә батша булырҙай ҡыландың, гонаһ ҡылдың, күктәге Олуғ хаҡында иҫеңә төшөрмәнең, уңғаһулға ташландың, уңлы-һуллы һелтәндең, инде осона сыҡтың...

Кәкрәйҙең-бөкрәйҙең, тәнеңдең кәре бөткәс, рухың һынды, сараһыҙ көйө ултыраһың. Гонаһтарың күп, бәндә, ҡылғандарың хәтереңдә яңыра, намыҫыңа көс төшә. Шундай саҡта хатта хакимдарға ла күңел йыуанысы, рух таянысы кәрәк... Баҫ, әйҙә, Олуғ хозурына! Бәндәләр, баш эйегеҙ, ҡоро ҡуҡырлыҡтан, бушҡа тамаҡ йыртыуҙан фәтүә юҡ – Хоҙайға, ниһайәт, Хоҙайға йөҙ бороғоҙ! Ул батшаһын да, ярлыһын да, хәйерсеһен дә, байын да, уғрыһын да, ғәйеплеһен дә кисерер, күңеле киң. Алдарына теҙләнешеп баҫығыҙ, тәүбә итегеҙ, намаҙ уҡығыҙ, доға ҡылығыҙ!

Ә ғорурҙарға ни һан, батырҙарға, сибәрҙәргә, теҙ сүгә белмәгәндәргә, Хоҙай, ни сара? Тура тамуҡтарыңа оҙатмаҡсыһыңмы уларҙы? Улар шәп саҡтарындағыса баштарын юғары тотоп эшафотҡа үтергә тейешме? Һиңә улар бөгөлмәй, һин уларға ла ярлыҡау иғлан итергә әҙерһеңме?

Ғорурҙар, батырҙар, тәкәбберҙәр, был яҡтан урабыраҡ үтегеҙ Хоҙай хозурын – һеҙгә унда урын да, йән тыныслыҡтары ла юҡ. Һеҙ үҙегеҙ һайланығыҙ үҙ яҙмышығыҙҙы, һеҙҙең юлдарығыҙға кемдәр сәскәләр һибер, кемдәр йөҙ сөйөр? Киләһе быуындар фиҙакәрлегегеҙҙе белерме, һабаҡ алырмы, дауам итерме эшегеҙҙе?

Батырҙар, ҡыйыуҙар, һауалылар, һеҙ – өнһөҙ...

Күпте кисергән бит инде ул, күпте күргән, был тормоштан күңеле ҡайтып та бөткәндер; нисә үлеп, нисә ҡат яңынан терелде. Уның хәҙер бары үҙ хәленә нығыраҡ төшөнгәһө килә, кемдәрҙелер хаҡҡа-нахаҡҡа сығармай. Әллә кисергәндәре, хафалы уйҙары йәненә тынғы бирмәйме?

Был хәтәр хәбәр шаңғытты. Бындайға күптән күнегергә тейеш бит инде; тағы уйлап ҡараниһәң, был донъяла булмай торған ғәмәл дә түгел... Шулай ҙа йәнен аҡтарып ташланы, хәтирәләр ҡойонон ҡуптарҙы.

Тағы уйламаҫ та, иҫләмәҫ тә ине... Хәтирәләре алҡымынан алып килә, улар – үткәненә баһа, яҙмышына баҫылған мөһөр... Хәтерләүҙәрҙә ул ҡабаттан йәшәй, үҙ ғүмерен ҡабатлай.

Ул яңынан ҡабатлай, яңынан язалана – был Хоҙай ҡашына баҫып тәүбә итеү менән бер.

Бәндә, ҡабат байҡа ғүмереңеыҙанын, ҡабат язалан!

...Бәхтейәр төрмәнән 1934 йылда ҡайтты. Оҙаҡ та торманы Мәғҙәндә, ғаиләһен «йөкмәп», Орондо яғына сығып китте.

Эйе, нисәнсе тапҡыр тыуған яғын ташланы. Ахырыһы, ир бүтән иленә ҡайтып аяҡ баҫмаҫ. Ҡайтһа ла, нәҡ Мәғҙәндә төпләнеп, йән тыныслыҡтары тапмаҫ. Уны ауылдаштары бер ҡыуҙылар бит инде араларынан, судта түшенә өс яҡтан өс мылтыҡ терәп торҙолар 1928 йылда. Ахырыһы, Бәхтейәр уларға яттыр, артыҡ тамаҡтыр. Ауылдаштары араһына һыя алманы, уның тормошон, донъяға ҡарашын был быуындар ҡабул итмәне.

Ергә яңы быуындар килер, яңы замандар тыуыр – бәлки, шунда аңларҙар, тик эш уҙған булыр. Кеше ғүмере фани, ҡояштың күҙ асып йомған араһы ғына. Инде ярлыҡау ҙа һуңлаған булыр, ғәфү үтенергә лә мохтажлыҡ ҡалмаҫ. Ҡиблалар алмашыныр, елдәр бүтән яҡтан иҫер, бәлки, китаптарҙа, иҫтәлектәрҙә был

геройҙарҙы яҡлап, хатта хуплап һөйләрҙәр. Ни мәғәнә: эш уҙған, төҫө уңған, буяуы ҡупҡан... Ул байраҡтарҙың ҡәҙере булмаҫ, яңыларын халыҡ танымаҫ, ҡорбандар, һүҙҙә, телдә, ҡағыҙ битендә аҡланһа ла, терелмәҫ. Барыһына яңы быуындар хәйерле иҫтәлек, изге сауап тип доға ҡылып ҡотолор... Улар ҙа сараһыҙ булыр, тарихта ҡалғанды тергеҙеп, ҡорбандарҙы ризалатып та булмайҙыр, ул берәүҙең, хатта Хоҙайҙың да ҡулынан килмәйҙер... Ә мәлендә юғарылағы – иң Олуғ Зат ни ҡараған, ниңә ерҙә мәлендә ғәҙеллек урынлаштырмаған, мәлендә бәндәләрен хоҡуҡ һәм бурыстар, эш һәм сауап алдында тигеҙләп ҡуймаған?

## I

Ҡамса менән Ҡотлояр ҙа барып инде балыҡсы ихатаһына. Ҡотой Беләҙекүлдән ҡайтып ҡына тора ине, тотҡан балығы менән ялғаш лыҡа тулы. Беләҙекүлдең ялтыр табандары, һары табандары күҙҙең яуын ала.

– Мынау өс сазанға теймәгеҙ, ҡалғаны – һеҙҙеке...

– Миңә – шул өс сазаны ғына!.. – тип һалды Ҡамса, балыҡсының, гүйә, үксәһенә баҫа. Теге һүҙен ослап та өлгөрмәне.

Теге сазандары ла, бүтәндәрҙән айырылып, яҫы ишкәк бителәй йылтырап ята.

– Юҡ, сазандар – миңә!

– Миңә балыҡ кәрәкмәй, – тип өҙҙө Ҡотлояр.

Ай-һай, балыҡсы йөрәкһегән. Балыҡты шәп эләктереүенә ҡупайған, таң менән волость ҡашҡалары бушҡа йөрөймө? Улар башта балыҡ ҡараған була. Ҡотлояр хәҙер – Мәғҙән колхозы башлығы. Теге ваҡытта бит кантон вәкиле Йомаҡаев юҡҡа ғына халыҡты өгөтләмәне...

Мәғҙәндә Оло урам артеле менән Ҡуянсыҡ урамы берләште, Мотаһар урамы менән Азамат урамы ҡушылды. Ауылда бер нисә кеше генә колхозға инмәй ҡалды. Шуларҙың береһе – балыҡсы Ҡотой.

Волком рәйесе тынын тотто, ә колхоз башлығы тамаҡ ҡырҙы.

– Ҡотой ағай, һин әллә балыҡтың телен беләһеңме?

– Беләҙекүлде тотошлай үҙ имениyaңа әйләндергәнһең...

– Нейә, Беләҙекүл һеҙгә лә, миңә лә етәр...

– Колхозға яҙылмайһың, сходҡа...

– Туҡта! Теге тәүге сходта, Ҡотой ағай, һин үҙең Йомаҡаевты, кантон вәкилен, яҡлап һөйләп торҙоң түгелме әле...

Ҡотлояр ҙа йәнләнде.

– Эйе, Ҡамса, Ҡотой ағай теге сходта үҙе сығыш яһап, кантондан төшкән яңылыҡты яҡларға саҡырҙы ла...

– Эй-й, энекәштәр! – Ҡотой ҡарт һалам эшләпәһен систе. – Ул ваҡытта мин үҙем калхуз тигәндең нимә икәнен аңламаным бит, мин Йомаҡаевты, һеҙҙең һүҙҙе яҡланым да ул яҡлауын...

– Ҡотой ағай, яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәй, тигәндәр, ташла шул арҡырыланыуыңды – ин колхозға, бергә йәшә! – Ҡамса бүтәнсә һүҙ тапманы. Ул, ни тиһәң дә, Ҡотойҙо яҡын итә, уны Мөнирәнең яҡын ағаһы тип һанай ине әле.

– Йә, Ҡотой ағай... – Ҡотлояр ҙа уйын ыңғайлатты.

– Ҡуй, энекәштәр, бушҡа өгөтләмәгеҙ, ус ояһындай ерем бар...

– Ун дүрт десятина ер! – тип төҙәтте Ҡамса.

– Налогын уҡытып түләйем, хөкүмәт алдында бурысым юҡ, Ҡамса.

– Ә балыҡ һатаһың...

– Булғылай. Осон-осҡа ялғарға кәрәк тә. Балалар...

– Нэпманға әйләнеп бараһың, ҡара!

– Нимә, был янаумы?

– Юҡ, – тиниләр власть әһелдәре, – беҙ һине киҫәттек, ә ҡалғанын үҙең ҡара.

Ҡотой ялғаш ситендәге бүкәнгә сүкте. Инселәр бүтән артҡа ҡайырылманы.

Беләҙекүл хужаһының өс сазаны кантком түрәһенә инселәнгәйне. Беләҙекүл балығы тәмле. Әллә ҡарттың ҡулы ҡотло – тегеләр йыш ҡунаҡ Ҡотой өйөндә. Шуға ҡарт бындағы власть кешеләренән бик шыртлап та бармай, ә үҙ ыңғайына йәшәп ята бирә. Хәжәте төшһә, Йомаҡаев яҡлашыр.

Арҡаһы ныҡ булғас, ҡарт ыжламай. НЭП осоронда әҙерәк иркенләгәйне. Бүтәндәр ит һатһа, ул балыҡ һатты, малын ишәйтте – Ҡотойҙың үҫеүе кемдеңдер эсенә тейә, төн йоҡоларын ҡасыра. Ул донъя ағышын ситтәрәк тороп күҙәтә. Тапҡанын ялҡауҙар менән бүлешергә башына тай типмәгән. Ул – бәләкәй кеше.

«Нэпманға әйләнеп бараһың, тиҙәр», – тип ҡаршыланы төбәккә быҙау ҡыуалаған бисәһен.

– Атаҡ, атаҡ, ул ни тигән һүҙ?

– «Ҡотой байыға»... Мына һинең турала әйтһәң дә ярай: ғүмергә байый алманың...

– Һаң, шунан ни ғәйеп табалар? Кеше борондан байырға ынтылған. Йомабай, Мәүлитбай, Муллабай... Тағы кем бай – шул ғәйепләме?

– Миңә ни... Тегеләр бит!

– Һе, ул калхузына ҡәбереӊ яҡын булмаһын! Ат-фәлән, мал-тыуар ярай әле, тора-бара бисәләрҙе обшай итерҙәр...

– Хи, бисәләр, имеш... – Ҡотой енләнде. – Колхозға ҡоҙалайҙар, йәнде алалар...

– Үҙем өйҙә булмағанмын, күҙе сыҡҡансы әйтер инем. Бисәләр айғыры, һаман...

– Йә, бисә, һин телеңде оҙайтма!

– Беҙҙең Мөнирәне лә...

– Йә, йә...

Ғаҡилә хәҙер үҙен байбисә һымағыраҡ тота. Гәрсә әкиәттәгесә: ҡарты – балыҡсы, Беләҙекүлдән алтын балыҡ ҡаптырған. Уныһы байбисәнең һәр теләген үтәй. Шәбәйеп алған Ғаҡилә иренә екереүҙән дә тартынмай. Ныхыр* бисә эстән «күҙем күрһә, белер инем» тип сәмләнә. Бөтәһен дә бер епкә теҙер ине, бөтә бисәләрҙең тубын өйөрөп йөрөтөр ине. Бөйөрөнә таянып алһа...

Ғаҡилә хәҙер арыуыраҡ кешеләр менән ҡатышырға тырыша. Мораты – фельдшер Факиһа менән әшнәләшеү!

## II

Волосҡа тағы Йомаҡаев килеп төштө. Шундуҡ партячейка, волком ағзаларын йыйҙы.

– Иптәштәр, партия артабан былдай шалтай-балтайлыҡҡа түҙеп тора алмай. Партия эсендәге групповщина, демагогик дискуссиялар бөтөрөлөргә тейеш – һүҙ заманы үтте, эш заманы тыуҙы! Съезд ҡарарҙарының үтәлеше өҙөлөү ҡурҡынысы аҫтында: һаман да илде индустриалаштырыу темптары түбән, крәҫтиән эшсе синыф эшенә аяҡ сала, донъя пролетариаты революцияһы еңеүен тотҡарлай. Ҡала асыға, завод-фабрикаларҙа ҡабат карточка тәртибе индереү ҡурҡынысы тыуҙы, кулактар ашлығын йәшерә, кантонда колхозлашыу һүлпән...

Волком ағзалары аптырашып бер-береһенә ҡаранты, әммә берәү ҙә өндәшмәне. Волком башлығы Ҡамса ла, Мәғҙән колхозы рәйесе Ҡотлояр ҙа шымған.

---

*Ныхыр — ялҡау, үҙ аҡылы менән генә йәшәүсе.

– Иптәштәр, һеҙ Сталин иптәштең Себер партия ойошмаһында һөйләгән телмәрен, шунда ВКП(б) Үҙәк Комитеты ҡабул иткән йәшерен ҡарарын беләһегеҙ. Хәҙер өйәҙҙән беҙгә яңы директива төштө. Йәғни шул ҡарарҙы аныҡлап тормошҡа ашырыу проекты. Сталин иптәштең «социализм үҫешкән һайын синфи көрәш ҡырҡыулаша» тигән күрһәтмәһенә ярашлы, партия иҙеүсе синыф ҡалдыҡтары – кулактар, нэпмандар менән аяуһыҙ көрәш иғлан итә. Йәғни илдә иҙеүсе элементтар синыф булараҡ бөтөрөлөргә тейеш. Һәр волосҡа юғарынан план төшөрөлә: мең крәҫтиән иҫәбенән һигеҙ-туғыҙ ғаиләне раскулачивать итергә!

– Был нимә тигәнде аңлата инде, Йомаҡаев иптәш? – Волком башлығы түҙмәне.

– Ҡамса иптәш, утты-һыуҙы үткән кеше булараҡ, аңламамышҡа һалышмағыҙ! Һүҙ аяуһыҙ синфи көрәш тураһында бара. Ҡабатлайым: иҙеүсе синыф ҡалдыҡтары партия политикаһына саботаж яһай, индустриализация планын өҙөргә маташа. Үҙәк Комитетта бухаринсы платформа Сталин иптәш платформаһына ҡаршы сыҡты, нэпман-крәҫтиәндәрҙе яҡланы. Улар донъя империализмы алдында йәш Совет Рәсәй Республикаһының теҙ сүгеүен, капиталистарға ус һоноп барыуын теләй. Сит илдәр беҙгә машина-станоктарын алтынға һата. Беҙ үҙ промышленносыбыҙҙы булдырырға, оборонабыҙҙы нығытырға бурыслыбыҙ. Донъя империалистары Советтарға теш ҡайрай, ә эске дошман – ваҡ буржуазия, т.е. крәҫтиәндәр аҫтан киҫә: ашлыҡты йәшерә, аҙаҡ уны баҙарға сығара. Шул уҡ ваҡытта ҡалалар асыға, заводтар тулы ҡеүәтенә эшләмәй. Беҙ продналогты арттырырға, һыҡмыр крәҫтиәнде нығыраҡ һелкетергә тейешбеҙ! Революция тағы ҡурҡыныс аҫтында, халыҡ һаман яңы тормош күрмәй, шуға Советтарҙың абруйы күтәрелмәй. Иҙеүселәрҙе, сүп үләнеләй, төбө-тамыры менән йолҡоп ташларға кәрәк.

Волком, партячейка ағзалары һыу уртлағандай ултырҙы. Кантком вәкиле тәнәфес яһарға тәҡдим итте.

Тәнәфестән һуң анығ эшкә күстеләр: Мәғҙән волосынан раскулачиваниеға эләккән хужалыҡтар исемлеге тикшерелде.

– Бигерәк тә күп халыҡты оҙатырға тура килә түгелме? – тип шик белдерҙе волость башлығы.

– Мин дә шулай тип уйлайым. – Ҡотлояр ҙа йөҙәне.

– Һеҙ нимә, иптәштәр, үҙегеҙ партия политикаһына ҡаршымы? – Кантон вәкиле тағы урындығынан ҡупты. Оҙаҡ итеп нотоҡ һөйләргә тотондо. – Беҙ кантонда был мәсьәләне күптән тикшерҙек. Һәр волосҡа, считай, разнарядка бүленде. Мәғҙән волосынан нисә кулак һөрөләсәге лә билдәле – һеҙгә ошо директиваны үтәйһе генә ҡала. Считай, был – приказ... Ә приказды, беләһегеҙ: икегеҙ ҙә хәрби кешеләр. Был беҙҙең баштан сыҡҡан эш икән, тип тә уйламағыҙ – беҙгә өйәҙҙән шундай исемлек килгән. Шундай разнарядка! Беҙ уны волостарға бүлдек. Канткомдан мине һеҙгә – Мәғҙән волосына – яуаплы итеп тәғәйенләнеләр. Ҡамса иптәш, документты күрҙең, унда аҡҡа ҡара менән...

– Йомаҡаев иптәш, бөтәһе лә аңлашыла, минең һеҙгә бер һүҙем дә юҡ.

Ҡотлояр ҙа: «Минең дә, – тип яҡшатлана һалды. – Исемлек ҙур тиерлек».

– Тағы бер ҡарап сығайыҡ – раскулачиваниеға тәғәйенләнгәндәрҙең бер мөлкәте лә иҫәпкә алынмай ҡалмаһын. Аяуһыҙ булырға, бисә-сәсә йәшенә ебеп төшмәҫкә! Аҙаҡ был исемлек тағы комбедта, партячейкала тикшереләсәк.

– Кешене Себергә һөрөүҙе беҙ генә хәл итмәйбеҙ, әйҙә, комбедта ла ҡараһындар, – тине Ҡамса.

– Мәғҙән волосы буйынса йәмғеһе 113 кеше тура килә – был һан бүтән волостар иҫәбенә үҙгәртелмәйәсәк.

Шунда кантон вәкиле Мәғҙәндән Хажин фамилияһына туҡталды.

– Егеттәр, мин был ҡартласты беләм дә... Балыҡсы ҡарт.

– Шул! – тиеште волость тотҡалары.

– Нишләп был исемлеккә килеп кергән? Фәҡирҙең фәҡире. Мин беләм дә инде, – кантком вәкиле буталды. – Ярлы синыфтан...

– Ул Әпшәндән Әбделнафиҡ бай нәҫеленән бит...

– Әбделнафиҡ байҙың бисәһенә нәҫел! – тип төҙәтте Ҡотлояр Ҡамсаны.

– Ҡотой колхозға инмәй ҡарыша! – Ҡамса үҙенекен иҫбатларға тотондо. – Нэпман, Беләҙекүл балығын һата. Спекулянт, өйөндә лавка асҡан.

Кантон вәкиле телһеҙ ҡалды. Ҡаршыһындағылар менән, гүйә, кинәт урынын алмашты. Әле генә тегеләр волость халҡын аяп, яҡлап һөйләй ине, хәҙер ролдәр алмашынды, баштүбән әйләнеп баҫты донъя...

Вәкилдең балыҡсы өсөн йәне һыҙланы. Күптәнге әшнәһе ине Хажин Ҡотой: Мәғҙәнгә тейһә, һуғылмай үтмәй, шунан бөтә кантон түрәләренә балыҡ ташыны. Мәсәғүттә Беләҙекүл сазандарын ныҡ яраталар. Теге көндә лә балыҡсы волость башлыҡтары менән тикмәгә эре һөйләшмәне. Юғарыла таяныр, арҡа терәр кешеһе булғас...

– Ҡотой ҡартты идараға саҡыртығыҙ, үҙем һөйләшәм, – тине вәкил, ниһайәт, уйҙарынан айнып.

Ҡотой ҡарт, волость идараһынан таптырыуҙарын ишетеп, ҡойолоп төшмәне. Ҡурҡҡан бүтәндәр ҡурҡһын, минең ҡурҡыр күлдәгем туҙған, тип һананы. Асылығын да күрҙе, Себерҙе урап сыҡты, әжәл күҙенә тура ҡараны. Аңғармаған, теге сходта... Ныҡ еләтте яңы власть халыҡты, әйтерлек кенәме? Шуға мәғҙәндәр волосҡа барырға ла дер ҡалтырап тора.

Волость идараһында канткомдан танышын күргәс, эсенә йылы инде, кәйефе күтәрелде. Мәсәғүттән ҙур түрә уны идараға саҡырып ҡына һөйләшә, хөрмәт күрһәтә. Ана, теге шылғаян малайҙар – власть башына үрләп алған кисәге ҡыҙылармеецтар шәбәйҙе. Теге көн дә ағаһы менән һауалы һөйләштеләр.

– Иҫәнлекме-һаулыҡмы, ағай-эне, – тип һаҡалын һыпырҙы ҡарт.

– Ултыр, ултыр, – Туҡал ултырғысҡа төрттө Ҡамса.

Вәкил уратып-суратып маташманы.

– Ағай, егеттәр һине, колхозға инмәй ҡарыша, ти бит әле.

– Боғаҙҙан алалар: бурылыңды илт, алаҡайыңды обшайға ҡуш. Мин... Совет власы бәләкәс үҙебеҙҙең таяныс бит, ә былар...

– Нишләйҙәр?

Ҡотой, ҡарт яҡлаусыһы булғас, туғарылды:

– Өҫтән төшмәйҙәр, хәс тә элекке жандармдар. Шул бурылға, бер һыйырға ҡарап торабыҙ.

– Налогың түләнгәнме?

– Көс-хәл түләп барам, тағы арттырҙылар, быйыл да, ашлыҡ уңһа, уҡытып налог һаласаҡтар...

– Ашлыҡ уңамы?

– Шөкөр, Хоҙай Тәғәлә бирһә, – ҡарт үҙенекен һөйләне, вәкилдең башы ҡайнаны.

– Шулай ҙа, ағай, колхозға кер. Керәһең килмәһә лә...

– Ниңә? Миңә унда нимә ҡалған? Үҙ атым, үҙ донъям...

– Ҡотой ағай, әгәр ҡарышһаң, шәхси милексе булараҡ, Себер китәһең. Кулак йырын йырлаусыларға аяу булмаясаҡ!

– Атаҡ-атаҡ, мин ниндәй кулак? Ата-бабам ер ҡорто...

– Һүҙ бөттө.

– Энекәштәр! – Ҡарт әллә ялуарҙы, әллә киҫәтте. – Мин ул обшайығыҙға үлһәм дә ҡушылмаясаҡмын! Бөтә тартып алығыҙ! Беҙ мында ғүмер һөрәбеҙ, әллә ҡайҙан киләләр ҙә йәшәргә өйрәтәләр!

Ҡарт бейек күтәрмәнән төшкәнсе хәбәрен теҙҙе. Уны әллә тыңланылар, әллә юҡ.

Элекке волость старшинаһы – бөгөнгө волость башҡармаһы йорто һаман ауыл уртаһында түш киреп, ҡуҡырайып ултырыуын белде. Уның ҡартластың һүҙенә иҫе лә китмәне, шай. Ә волость тотҡаларының өнө-тыны сыҡһасы – эстән бикләнгән кешеләй ултырҙылар. Улар был шөкәтһеҙ волость йорто менән бергә ҡатышҡайны. Улар – волость, ә ауыл – үҙенә бер башҡа дәүләт. Бер үк ерҙә, Мәғҙәндә, әйтерһең, ике дәүләт: волость һәм халыҡ.

## III

Ҡамса Мөнирәне уйлауҙан туҡтамай. Үҙен тыйып та ҡарай. Үҙ ғаиләһе бар, ә Мөнирәнең бөтә балалары ла Бәхтейәрҙән.

Ҡайнар ҡаҙан эсендә ҡайнаған һымаҡ. Кантондан төрлө мәшәҡәт өйөп кенә торалар, яңынан-яңы кампания уйлап сығаралар. Күҙ менән ҡаш араһында Ҡамса. Ул – коммунист, ғаилә башлығы. Теге ваҡытта ни эшләп бөттөләр, ауылда ла ғәйбәт бер ҡыҙып, бер һүнеп ҡуя. Күңеле күл ярына тартып тик тора, Беләҙекүл зиһенен биләй. Иртүк шунда атҡа бара. Йөрәгенә инеп ултырҙы, бар булмышын тултырҙы. Ҡотола алмай шул сихырҙан. Ул – эшмәкәр кеше, дәрәжәле зат! Үҙ-үҙен киҫәтә. Күңеле лә, аяғы ла шул яҡҡа тарта. Ары түҙер әмәле ҡалмағас, ни ҡылһын? Уның башын бутанылар, йөрәген ҡуҙғаттылар. Ҡәҙерлеһен йөрәге менән ҡуша һурып алырға ғына мөмкин. Факиһа – бурысы, ә Мөнирә – хыялы. Ә әҙәм һәр ваҡыт, ысыны менән хушһынмайынса, буш хыялына ашҡына. Хәс тә күбәләк һантый: һаман утҡа йомола, ҡанаттарымды, шул йоп-йоҡа селтәрҙе өттөрөп ҡуйырмын, тип уйламай.

– Мөнирә...

– Юҡ!

Өҫтәлдә бәрәңге ҡабығы, ҡатыҡ сеүәтәһе.

– Шул ғынамы? – Бала иларға тотона.

– Оноғоҙ бөттөмө? – тип белеште Ҡамса.

– Өс ай инде...

Тағы төш күрә. Ҡыҙыҡ, төшөндә бисәһен түгел, гел уны күрә. Икәүләп йөрөйҙәр, икәүләп һөйөшәләр. Төшөндә – гел һөйөш уйындары.

– Һин ауырлыһың... һиңә яҡшы ашарға кәрәк.

– Юҡ!

– Һин – сибәр...

– Шулай тинең дә торҙоң...

Ҡамса ҡомһоҙлана. Әллә болон сәскәләре еҫенән, әллә һөйөклөһөнөң наҙынан аҡылын юя.

– Ҡамса, етәр! Беҙ ҡайҙа?

– Беҙ – һеҙҙең өйҙә, Ҡотой ҡарттарҙың лапаҫ башында...

– Ҡотой быуайымдарҙа? Ҡотой быуайым волость идараһына ғына тип киткәйне...

Мөнирә ҡарышһа ла, тәне иреп, ир иркенә бирелә, унының һәр теләген үтәп тора; ә Ҡамса көслө, уны ҡайһылай ғына һалмай, нисек кенә әүәләмәй. «Аһ», – тип ыңғыраша бисә, наҙҙан сараһыҙ булып ята, аңы, зиһене бутала; ләззәт, ләззәт кенә булмышын биләй.

Бер аҙҙан Ҡамса Мөнирә балаларының ас ултырыуын шәйләй.

– Ҡотлоярға барам, ашлыҡ яҙҙырып алам...

– Кеше көлөр, ҡуй, йә үҙеңде төрмәгә ултыртырҙар. – Мөнирә лә көлә. – Йә, Бәхтейәр артынан китәһеңме?

– Тормошоң еңеләйә, тиһәләр...

– Кеше көлдөрмә. Ҡотой быуайыма рәхмәт, ул ярҙамлаша. Ул бирешмәһә, мин дә астан үлмәм.

Ни кәрәк уға был тәпәшәк өйҙә? Ниңә үҙенә ҡайтып китмәй? Ни көтә?

– Мин тәүге осрашыуҙы онота алмайым. Ҡоластарыңды ян-яҡҡа ташлағанһың. Күҙеңде асҡас, мине күреп, аптыраманың да, бары «Килдеңме?» тинең.

– Рәхмәт, ас үлемдән ҡотҡарҙың.

– Ә хәҙер? Хәҙер ҙә ас һин, Мөнирә, балаларың...

– Кем ғәйепле?

– Мин һиңә ярҙам итермен...

– Кәрәкмәй, аяҡ-ҡулым һау, Ҡотой быуайым бар... – Сер бирмәгән була.

– Йөрәгем өшөй: һеҙ шундай фәҡир йәшәйһегеҙ...

– Кем ғәйепле?

– Бәхтейәр ауылда саҡта күҙем тондо: ҡаршымда – дошман, ул – билгеле... Бәхтейәр учитель киткәс, дошманым юҡ, ә йәнем баҫылмай. Мин, дошманымды юҡ итеп, үҙемде бәхетһеҙерәк иттем. Мин үҙемде кәкре ҡайынға терәттем. Мин – ғәйепле, тик ни эшләргә?

– Мине икенсе бисәлеккә ал, мин – риза... – Мөнирә йәш аралаш көлә. – Ана, Нух ҡарт...

– Ул – мулла...

Бисәнең дә йәше аҡты, ихтыярына буйһонманы.

– Һин дә мин тип өҙөләһең, беләм, үҙ-үҙеңде тыяһың, теләгеңде сикләйһең – ниңә? Беҙ был донъяла бер ҡат йәшәйбеҙ.

– Икебеҙ ике ярҙа, Ҡамса. Беҙҙең арала – даръя, тупһалар...

– Саҡ менән Суҡ һымаҡ зарыҡмайыҡ! Һин дә, мин дә... беҙ – бер иштәр!

– Юҡ!

## IV

Имсе шыма, Мөнирә лә һулышын тигеҙләй.

– Апай, Мәлик абзыйым ниңә һине йәрәшмәне? Ул да, Ҡамса кеүек, бисә өҫтөнә бисә алырға ҡурҡтымы?

– Хәленән килмәне. – Имсе тәрән көрһөндө. – Бай тигәс тә, унын да көндәштәре күп. Бурансыла теге муллам. Мәғҙән волосы старшинаһы Минитаһир бай ҙа Әпшәндәге бай ағайҙарыңа үсле. Уныһы, Мәлик бай старшиналыҡҡа ынтыла, тип шыртлай. Ә әпшәндәр, ысынлап та, бер нисә рәт һайлауҙарҙа Мәликте старшиналыҡҡа күрһәтте бит... Шуға Мәлигем туғарылып китә алманы, Мәғҙәндең мәзине, мәҙрәсә мөдәрисе лә уға ҡаршы аяҡланды. Улар бит – динселәр, бер һүҙҙән, бер төптән булырға тырыша. Ун һигеҙенсе йылда, Советтар сыҡҡас, берләштеләр. Унда хәтәр булды, уй... – Имсе, һөйләһәң – һүҙ, төртәһәң – күҙ, тип ҡул һелтәй. – Мәлик иҫәр, гел старшина булам, барыбер

волоста мин баш булам, тип һаташты. Йәнәһе, Мәғҙән старшинаһы Минтаһирҙы ҡолата, хажиҙарға иш була. Атаҡай, мораҙыма ла ирешер инем, Советтар ҡамасауланы, тип ыуаланыр ине. Һөйөш араһында саҡ ҡына тын алһаҡ, шул турала һүҙ ҡуҙғата. Ә нисек һөйә ине, ҡайһылай ҡеүәтле ир ине ул!

– Һөйлә, апай, һөйлә.

– Хәҙер һөйләһәң дә була, – тип килешә имсе. – Беҙ бисәләр ҙә... шунан хәҙер минең ни бүтән бер йыуанысым да ҡалманы. Шул зат минең бөтә тормошомдо тултырҙы, бөтә зиһенемде биләне. Мин уны ғына һөйҙөм, ул ғына берҙән-бер йәрем булды. Мәлик килһә тип, әллә ниндәй аштар әҙерләйем, төҙәнәм-яһанам. Хәҙер көлкө. Бының бар теләктәрен, талаптарын беләм: бисараҡай, урыҫ кеүек, асыны-борослоно ярата – уны ҡайҙан етте, шунан табам. Был көлә йә үҙе урыҫтарҙан килтерә. Килерен тойһам, мунсаға барам йә Беләҙекүлдә ҡойонам; тәнемә кершән яғам, үҙебеҙҙең белгән зәйтүн майын һөртәм; инде уның бүләге – хушбыйын да һөртөп ебәрһәм, хан ҡыҙынан кәм түгелмен, үҙемде шулай хис итәм. Башым юғары, рухым ныҡ, Мәлигем, тим, инде аяҡ осонда ятасаҡ.

Ысын да... Уф, Алла, ул һөйөштө хәтерләүе генә лә... аҡыл юйырлыҡ. Мин әллә сабыйға әүереләм, әллә нишләйем – Мәлик ҡыландыра инде. Ул донъя күргән, уҡымышлы, ҡалала ла йәшәгән. Мин аңымды юғалтам, тәнем ҡоттай* еңеләйә, үҙ-үҙемде белешмәйем. Мәлигем нәҫел үгеҙе ише ҡалын елкә. Мине, һыйыҡ тал сыбығын, тырнаҡ осо менән күтәрә. Ел генә һыҙғыра, мин күҙҙәремде йомам, бер ни иҫләмәйем, хәс тә төш менән өн араһында буталам. Шуға хәҙер, бәхет тигәнең өндә булмайҙыр, тип уйлайым. Күҙҙе асһаң, ул бәхеткә күҙ тейә, күҙҙе йомһаң, ул ҡыйыулана.

– Старшина булһам... Мөхәммәт хажиҙың ашлығын баржалар менән Өфө, Ҡазан яғына оҙатыуын тыясаҡмын, ер биләүгә ҡайһы бер лицензияларын кире ҡайтарасаҡмын. Банктағы мөлкәтенә генә тейеп булмаҫ...

– Әллә ни һөйләйһең: лизенция, банкы...

– Ярай, һин ҡыҫылма!

– Старшина булмағанһың, екерәһең... Аҙаҡ...

– Шаҡай! – Бай күҙен таҫрайта. – Киреһенсә, старшина булыуымды телә, Хоҙайҙан һора...

– Ә мин?..

– Старшина булып һайланыу менән үҙеңде бишенсе бисәлеккә яусылайым.

Ун һигеҙенсе йылда бөтәһе лә – муллалар ҙа, Мәликтәр, Минтаһирҙар ҙа берләште... Мәлик «старшина булам» тигәнен онотто, хатта Минтаһирҙар менән дуҫлашып китте. Мәлик аҙаҡ, ун туғыҙынсы йылда, аҡтарға ҡушылды. Ул тәртип яҡлы ине.

– Ары һөйләмәһәң дә була, апай. – Мөнирәнең күҙен йәш ала.

## V

Беләҙекүл – Ҡотойҙың биләмәләре. Бында ул хужа. Иртән ауҙарын ҡарай, Мәғҙән әле йоҡлай, донъя аҡ томан ҡоршауында. Яй ғына бәүелә кәмә, тулҡындар иренеп кенә ҡаға ярға.

Теге ваҡыт баш осонда хәтәр ҡойон уйнап алғайны. Волость идараһындағы һөйләшеү сығырынан-сығарҙы.

Беләҙекүл белмәй бәндә хәлен: битараф сайҡала, өнһөҙ генә уфылдай. Уйын эсенә йәшерә, иңенә ни саҡлы хәсрәт һеңдергәнһең һин, дарья! Тибрәнәһең,

*Ҡоттай — ҡауырһындай.*

яҡты күҙҙә битеңде көмөшләндереп ятҡан булаһың. Серҙәрең күп, үткәнең хәтәр, тағы ни әҙерләйһең бәндәләреңә? Бер ҡараһаң, илгәҙәк бала төҫләһөң, икенсе юлы – туйған-утыҡҡан бисә-киленкәй...

Ҡарт баш вата. Әшнәһе ҡушҡанса бөгөндән яҙылыр ине шул колхозына – йыйған донъяһы йәл. Көтәүләй, был коммундар һарыуын ҡайната. Ауыҙың тулы ҡан булһа ла, түҙәһең.

Ҡарт балыҡ ашамаһа ла риза. Беләҙекүл балығы еҫенән туйып бөткән, бары тамаҡ ялы ғына... Ярты байлығын Йомаҡайға оҙатып ятыр ине...

Бөгөн уға Йомаҡаев һуғылырға тейеш. Урыҫтан былай балыҡ тип үлә. Әллә үҙе ашай, әллә кемделер һыйлай. Кантонда ла тәмле тамаҡтар күптер. Беләҙекүл балығы йәл түгел, Беләҙекүл – төпһөҙ хазина.

Ҡайтһа – ҡунаҡ: шул әшнәһе, Хоҙайҙың күктән бирәм тигәне – ерҙән, ҡасабоҫа, эҙ йәшерә килгән. Әйткән һүҙе – атҡан уҡ.

– Вәғәҙә – иман. – Кантон вәкиле тыҡшая.

– Көтәүләп арыным... – Ҡарт ҡыуанысын йәшермәне, дуҫ был көндә хәсрәтен таратыр, йылы ҡанаты аҫтына алыр.

– Һөйләшәһе һүҙ бар... – Вәкил ҡәҙимге бәндәгә әүерелә.

– Ултырҙаш булырбыҙ, тиһәм. Өлгөргән балым бар...

– Яҡты йөҙөңә рәхмәт, эш бешһә, ултырҙаш та булырбыҙ, балың да ҡасмаҫ... – Вәкил өҙә-йолҡа аңлатты йомошон, ә ҡартың йөҙө ҡарая барҙы. «Мин саҡырырмын да ул саҡырыуын», – тине, аптырағас. Үҙе шундуҡ, баш баҫып, Мөнирә һеңлеһе артынан китте.

Бәхтейәрҙең сибәр бисәһен Йомаҡаев Мәсәғүт төрмәһендә күргәйне. Шунда ҡаны ҡайнаны, нәфсеһе уянды. Ире өсөн әллә ниҙәргә лә риза һымаҡ ине ул бисә.

Аҙаҡ бер нисә тапҡыр судта күрҙе, һис онота алманы. Мәғҙәнгә шуға йышланы. Кантон йомошо менән йөрөһә, бөтә ҡылғаны күҙ алдында...

Тәҙрәнән тәҙрәгә йөрөнө. Ана, күрше ихатала ҡарт менән теге күренде!

Тышта ҡарт һеңлеһен өгөтләне:

– Кантондан вәкил, тим...

– Бәхтейәрҙән берәй хәбәр бар микән?

– Һөйләшәһе һүҙ бар, тей.

– Оят та! Еңгәм өйҙәме?

– Өйҙә.

Йомаҡаев артынан ишекте элгәс, Мөнирә тертләне.

– Ҡурҡма, туташ!

– Бәхтейәр һуңғы хатын Себерҙән яҙғайны...

– Мөнирә, туҡта, мин, теләһәң...

– Бәхтейәрҙән берәй хәбәр бармы?

– Мөнирә, мин һине яратам, ризалашһаң...

– Нимә?

– Бәхтейәрҙе төрмәнән ҡайтара алам...

– Юҡ!

Ир, уфтанып, уртын сәйнәне, бисә уның ҡосағынан ысҡынып, ишеккә йомолдо.

Өйҙөң ҡото, был табындың йәме китте, вәкил тәғәм-ризыҡҡа йоғонманы.

– Ҡотой ҡарт, һинең фамилияң раскулачивание буйынса исемлек башында тора, һайла!

Ҡарттың шиге дөрөҫләнде: ул инде ҡаты ҡармаҡҡа ҡапты, ысҡынам тип ауыҙыңды йыртмаһаң...

– Энем. – Ниһайәт, теле яҙылды. – Тыңла, бүтән нәмә һора: ат, һыйыр... – Саҡ ҡына «Ана, Беләҙекүлде тотошлай бирәм» тип ысҡындырманы. – Йән атып ҡарыша бит!

– Күрәм, шуға уның хаҡы – һинең башың! Мин шаяртмайым.

Ҡарт ҡаңғырҙы. Был янау ине. Ул, теләһә-теләмәһә лә, үҙ яҙмышын һайлай хәҙер. «Теге комиссияла документтарың әҙер: мин һиңә пүнәтәй генә була алам, һайла!»

– Һинең бурыс – уны ризалатыу. Һин хәҙер үҙең өсөн тырышаһың. Мин, абруйыма зыян итеп, һинең өсөн тырышырмын. Кантком башлығынан үтенермен, тағы балығыңды ташырмын. Бар, һөйләш!

Ҡарт тағы күтәрелә. Бер калушын алды, бер усын яҙҙы, тамшанып ҡараны язалаусыһына.

Тышта күҙ бәйләнеп бара. Ваҡыт ҡыҫа, хөкөм әжәле яҡыная. Мейе һеңкей, сикә ҡыҫа, бары аяҡтар ғына алға өҫтөрәлә.

– Һиңә нимә ҡалған? Бисәләргә алашар булдыңмы? – тип ҡаршылай Мөнирә һеңлеһе.

– Һин, һеңлем, аңламаның...

– Аңланым, ул кеше минән көлөргә йөрөй... Һин еңгәм менән...

– Һеңлем... – Ҡарт икеләнде.

– Ул, Бәхтейәрҙе төрмәнән ҡайтарам, ти. Ышанмайым.

– Бәхтейәр... Бында Бәхтейәр генә түгел, минең дә баш китә... – Ҡарт урынында тапанды, бында ник килгән көнөнә төштө... – Бәхтейәргә лә, миңә лә уның еле тейә. Ул минең башымды ла көҫәй: колхозға кермәгәндәрҙең исемлеге әҙер, ти бит.

– Ҡотой быуай...

– Мына нимә тип йөрөй Йомаҡаев. – Ҡарт әлһерәне, ятып ҡалғансы атып ҡалайым, типме, тағы ләпелдәне: – Баш ҡайғыһы бит, һеңлем, мине таш диуарға ҡыҫтылар – раскулачиваниеға әҙерләйҙәр. Себерен дә күрҙем, ҡаҙаҡ далаһын ҡыҙырҙым, зимагур булдым. Тағы Мәғҙән тип ҡайтҡан булдым, Беләҙекүлем тартты. – Ҡарт тотлоҡто. – Хәҙер, һеңлекәш, үҙең ҡара. Көсләй алмайым, һин үҙеңә үҙең хужа.

– Мине тауар һымаҡ һатырға әҙерһең. – Ҡатын асырғанды. – Минең ирем бар, балаларым... Ә һин колхозға кер! – Бисә йәшенә төйөлдө. Бигерәк һөмһөҙ, хөштөмһөҙ тойолдо үҙенә был ир. Әллә нишләп ытырғанды, тәне һис тартманы. – Мин бер аңра һарыҡмы? Ҡорбан салырға? Риза түгелмен!

– Ярай, һеңлем, булдыра алмаһаң, алмайһың инде, мин әле аптырағандан ғына... Бирәйбә, бүтән тупһаңа баҫмам! – Ҡарт үҙен-үҙе битәрләне: ҡарт ишәк, «ҡартайған да тартайған» тигәндәре шул була инде.

Ҡарт балыҡсы, Беләҙекүл хужаһы, аяғын саҡ һөйрәп барҙы.

## VI

Аҡһаҡ күп йөрөй, һаңғырау күп ишетә, һуҡыр күп күрә. Ғәҡилә лә иренең һәр аҙымын күҙәтеп, тын алышын тойоп ултырҙы. Вәкил һарыуын ҡайнатһа ла, тынын сығарманы. Ул ни эшләй ала? Яҙмыш уны ҡарты менән бер епкә бәйләне, хәҙер нисек тә вәкилде ризалатырға... Ғәҡилә, ҡарты урынына, балдыҙына үҙе йүгерерҙәй. Ҡотҡарһа Мөнирә генә ҡотҡара.

Ғәҡиләнең тәне ҡатты, уйҙары сыуалды. Тағы, бисә башына, эште боҙоп ҡуйһа...

– Мөнирә өйҙәме?

– Йоҡла! – Ҡарты ҡырт киҫте.

Ғәҡилә шымды. Бүтән ваҡытта булһамы, әрләшеп бөтөрҙәр, бисә әллә нисә һүҙгә етер ине, был юлы ирендәрен ҡымтыны, әйтер һүҙ таба алманы.

Йәме китте был өйҙөң, тәҡәте ҡороно бәндәләрҙең, һүҙҙең бәҫе, аштың тәме юғалды. Һауала ниндәйҙер күсөргәнешлек һиҙелде, ваҡыт туҡтап, хәрәкәт баҫылып торҙо.

Ғәҡилә төнө буйы серем итмәне, әйләнде-тулғанды, мыштым ғына ятырға тырышһа ла, ни ерелер ҡысытты, быуыны һыҙланы. Иртә торҙо, арлы-бирле иткәнсе, яҡтырҙы. Мөнирәгә үҙе йыйынып бөткәйне...

– Ҡайҙа быуайым? – Еңгәһенә һүҙ ҡатырға ла ирек бирмәне. Ғәҡилә бөйөрөнә таянған.

– Ҡайҙа теге? – тип белеште Мөнирә, ҡартты уятып.

– Ҡайтып китте, – булды яуап.

– Мин – әҙер! – тине бисә, түш киреп. – Ул ҡайҙа?

– Ҡуй, һеңлем, – тип ҡул һелтәне тамам бәлтерәгән ҡарт, ул әллә йоҡоһонан да айнып етмәгән.

– Мәсәғүткә барам! – Ҡатын елтерәтә баҫып атланы, ҡарт шаңғып ҡалды.

Мөнирә төндө үтә сыҡты. Иртән аяғөҫтө ине, ҡарары – әҙер. Күҙенә аҡ-ҡара күренмәне, тас-тос баҫты, Беләҙекүл ярынан Бараҡтауға ыңғайланы. Быуаһы ат менән ҡыуып еткәндә Ҡаранайҙы үткәйне.

– Әйҙә, ултыр.

– Әйтмә! – тип ҡарт киҫте бисә.

Шулай кантон идараһына еттеләр. Юлдар терелгәйне, идара ҡашы ла мыжғып тора.

Эскә үттеләр. Ҡотой кантком вәкиле Йомаҡаев кабинетын белә. Канткомда – кеше, улай-былай үтәләр, бөтәһе лә ашыға, берәүҙең дә быларҙа эше юҡ. Теге ишекте тарттылар, бикле.

– Ә, Йомаҡаев... – тинеләр күрше бүлмәлә. – Таңдан өйәҙгә сыҡты...

Ҡарт та уртын сәйнәй, бисәне лә әрнеү өтә: инде үҙен кәрәкмәгән тауарға һанай. Кисә генә баҙары юғары ине, бөгөн – үтмәҫ тауар, бото – бер тин! Бисә үҙ-үҙенә үсле, үҙ-үҙен күрә алмай: тәнен ҡарғай, йәнен талай, тәненән ытырғана.

Бисә хәҙер үҙенең нисек йәшәрен дә уйлай алмай. Көллөһө ергә һуҙылып ятасаҡ, балалары... Бисә үкенә. Кисә шул бер төн хаҡына, ғорурлығын ауыҙлыҡлай алмай, быуайының башын ашаны! Ҡамса дөрөҫ сурытҡан: бисәләр – кәбәк баш, эш үткәс, баштары эшләй. Теге вәкил хәҙер һонолоп буй етмәҫ ерҙә. Ыҫым һиңә, иҫәр бисә! Ҡартлас кисә ялбарҙы, табаныңды үпте, аяҡ аҫтыңа ер булып түшәлде.

Ун ете саҡрым ара. Ҡайһы бер ҙә бик ҡыҫҡа тойола. Осона етеп булмай ҙа ҡуя икенсе ваҡытта, һуҙыла, күҙҙәр тона; ҡола далаларҙы, осһоҙ-ҡырыйһыҙ сүлдәрҙе үткәндәй итәһең, йәнең ҡарая.

Ҡарт менән ҡатын өсөн дә бөгөн был араның осо-ҡырыйы һаман сыҡманы. Ниндәй баҙарға барҙылар улар, ник бик иртә уранылар? Күңелдәре булдымы, юлдары уңдымы? Хужа атын үҙ иркенә ҡуйған буғай: ашығаһы ла түгел, көткән кешеһе лә, өлгөрмәҫ мәшәҡәте лә юҡ; алда – ыҙа, артта – үкенес. Алда – бушлыҡ, артта – ғәрәсәт. Ни тип йөрөнөләр иҫәрҙәр, ни таптылар, нимәгә ымһындылар бисаралар? Үтмәгән тауарҙы әллә Беләҙекүлгә генә бушатып китергәме?

## VII

Кисә Ҡотой ҡартты волость комиссияһына саҡырттылар.

Ураҡҡа төшөргә әҙерләнеп бөткәйне: мынаятын йүнәтте, Бәлхиә туғаны менән Мөнирә һеңлеһенә әйтте – ҡулалмаш эшләйәсәктәр. Ҡарсығы менән һүҙ берегешеп тә бөткәйнеләр: бик ҡыҫҡас, колхозына ла инерҙәр. Быйыл уҡ һабандарын, сәскестәрен, хатта аттарын уртаҡ итергә ризалар. Ҡотой йөҙәне, башына һеңкетә һуҡтылармы; аптырап, Ҡотлоярға барҙы:

– Боғаҙҙан алма, энем, теге комиссия миңә әллә ниндәй ҡарар сығарҙы, ҡотҡар, онотмам! Фәҡирмен: Советҡа минең берәй этлегем тейҙеме?

Һонтор буйлы, ялтас башлы Ҡотлояр елкәһен ҡашыны.

– Ҡотой ағай, минең һиңә бер ҡаршылығым да юҡ.

– Энем, мин риза, ҡарсыҡ менән һөйләштек.

– Беләм, ағай, беләм. Ҡарар кәрәк – волком һине ауылда ҡалдырһын! Аҙаҡ колхоз йыйылышында...

– Хәҙер миңә ништәргә?

– Ҡотой ағай, мин бер ни ҙә ҡыла алмайым. Комиссия ҡарары бар. Шуны үҙгәртергә кәрәк. – Уның да ҡобараһы осҡан.

– Хәҙер мин Ҡамсаға керәм! – Ҡотой шәбәйҙе.

Керҙе.

– Ҡамса, мин риза...

– Нимәгә? – Теге аңламаны.

– Ҡарсыҡ менән һөйләштек...

– Һуң! – Ҡамса өҙә һуҡты, ҡайҙалыр ашыға ла ине.

– Нисек?

– Шулай. Алдан уйлайҙар уны. Мин хәҙер ни эшләй алам: партячейка ҡарары бар, комбед ҡарары бар...

– Һеҙ миңә ҡаныҡтығыҙ!

– Йомаҡаев күпме иҫкәртте. Хәҙер уны өйәҙгә күсергәндәр...

– Минең атыма, балығыма ҡаныҡтығыҙ! Барығыҙ, алығыҙ, Беләҙекүл хәҙер һеҙҙеке. Кеше байлығы менән мандымаҫ волкомығыҙ! Колхозығыҙ ҙа, Советығыҙ ҙа күпкә бармаҫ!

Ҡарт идара тупһаһынан төшкәндә лә үҙ-үҙен белешмәне. Хәс тә тоҡ эсенә таш тултырғандар! Беләҙекүл яғына табан өҫтөрәлде. Ерҙәнме, күктәнме барҙы.

...Мөнирә быуайының хәлен Бәлхиәнән ишетте.

– Уларҙы ауылдан ҡыуалар, тиһеңме?

Мөнирә ултыра төштө. Саҡ башына барып етте: тегенең янауы раҫҡа сыҡты! Ул ғәйепле, ул юл ҡуйҙы. Эх, һеҙ, бисәләр, – мәкинә баштар! Мәлендә, сәғәтендә майлап-яйлап ебәрһәгеҙ... нимәһе ҡала инде? Боронғолар ҙа әйткән: үпкән – онотолған, ҡосҡан – елгә осҡан! Еҫе һеңгән, буяуы ҡупҡан! Шунан берәй ере кителеп төшөр инеме, берәй эҙе уйылып ҡалыр инеме?

Мөнирә өҙөк-йолаҡ ҡына ишетте имсе һүҙен, күҙе ташты, гүйә, муйынына Беләҙекүл йыланы урала.

– Ҡулыма эш бармай...

Үҙ-үҙен белешмәҫ хәлдә барып етте волость идараһына. Ундай саҡта юлы «уңып» тора, бар кәртәләр ҙә емерелә, хәс тә Хыҙыр-Ильяс бәндәһенә юл күрһәтә.

– Ҡамса, нишләп һин быуайымды ауылдан ҡыуаһың? – Сәсәй, йыш-йыш һулай. – Ул миңә – ике туған ғына...

– Мин ҡыуаммы? Ана, комиссия!..

– Комиссия, имеш... Мә, мә, ал мине! – Күҙе аҡшайған. – Мин һиңә үҙем килдем! Мин риза...

– Шаулама!

– Хәҙер «шаулама»мы? Хәҙер үҙем килдем, мин риза... Ишегем дә гел асыҡ булыр...

– Мөнирә, туҡта!

– Сәсем менән ер һеперермен... тик Ҡотой быуайымды ебәрмә! Үтенәм!

– Мөнирә! Бында – кешеләр...

– Бөтә ауыл ишетһен. Хәҙер бөтәһенә лә әйтәм... Ҡам-м-са!

Бисә иҫһеҙ көйө ауа.

...Өйҙә лә, төшөндә лә Ҡамса менән һаташты.

– Ҡамса, үҙем килдем...

– Мөнирә...

– Һинең олтораҡың булырмын, көн дә Беләҙекүл ярына сығырмын, тик... Ант итәм!

Волисполком башлығы башына йәбеште.

**VIII**

Аҙаҡ бөтә ваҡиғалар ҙа төштә булған һымаҡ ҡына тойоласаҡ. Салт аяҙ көн, һауала әллә ниндәй арбағыс өндәр. Баш әйләнә, йөрәк ҡыҫа. Өйҙө милиционерҙар ураткан, Ҡотой ике атҡа сәскес-һуҡҡыстарын, тырма-һабанын тейәне, бисәләр илаша; өсөнсө атҡа үҙҙәре ултырасаҡ. Бәлхиә ҡарсыҡ та шунда: үҙе әйбер тейәшә, үҙенең йәше ҡойола.

– Оҙаҡҡа түгел, жәйгә генә... – Ғаҡилә ҡарсыҡ балаларын йыуатҡан була. – Жәй үткәс тә, Мәғҙәнгә ҡайтырбыҙ, Алла бойорһа.

Ҡарсыҡ бәләкәсәйеп ҡалған. Ҡотой үҙе өндәшмәй, бер кемгә лә һүҙ ҡатмай. Бөгөн ул ныҡ, бер хисе лә ҡалмаған. Әүен артына сыға, тағы арбаһын ҡараштыра. Юл оҙон, арҡан, бауҙар ныҡмы, йәнәһе.

Хикмәтле ҡарт. Ауыл менән шулай еңел генә хушлашырға уйлай микән? Оҙатырға килеүселәргә лә һүҙ ҡатманы. Улар ҙа өнһөҙ, серҙе барыбер сисмәҫтәр. Ул сер артында – уларҙың да именлеге тора. Бары сараһыҙҙың көнөнән ҡулбаштарын йыйыралар: йәнәһе, бында бары тәҡдир ғәйепле. Ул кемдең башына төшә. Кәрт уйыны һымаҡ. Волость буйынса шунса кешене Себер һөрөргә! Исемлекте нисек тә тултырырға, планды үтәргә!

Ҡотой был турала белмәй. Башы ҡатты, ул инде бер нәмә хаҡында ла уйламаҫҡа тырыша. Ауылдаштар ярлыҡамаҫ, әгәр Ҡотой бөгөн китмәһә, иртәгә уның урынына бүтәнде оҙатасаҡтар. Шулай булғас, Ҡотой бөгөн бүтән берәү Мәғҙәндә ҡалһын тип китә. Әгәр ул китмәһә, барыбер бүтәнен табырҙар ине. Хуш, ауылым, минән сәләмдәр көт! Хуш, Беләҙекүл!

– Ҡотой быуай!

– Илама, ҡыҙым... – Ҡарт һеңлеһен ҡосаҡлай. – Онотмағыҙ беҙҙе!

Ҡарттың ауылдаштарынамы, туғандарынамы һүҙе шул булды. Илау-һыҡтау күтәрелде. Йөк әҙер, юлсылар – арбала. Хужалар бөтә мынаятты тейәп тә бөтөрмәне. Тырым-тырағай донъяһы... Һыйырҙар мөңрәй.

Йорт моңайған. Тыуып үҫкән ил ҡала. Беләҙекүлдең дә һөмһөрө ҡойолған, йөҙө йәмрәйгән... Хуш, илгәҙәк балаҡай! Хуш, Мәғҙән иле, хәтерҙән сыҡмаҫһығыҙ инде! Ауылдаштар, хаҡ-нахаҡығыҙҙы Хоҙай үҙ бизмәненә һалыр әле. Хуш, Беләҙекүл, оҙон юлда балаларыңа именлек телә! Онотма! Амин.

## Бишенсе киҫәк

Тәҙрә төбөнән китмәй. Хәҙер бөтөн тормошоноң йәме шунда: тәҙрә уны ысын тормош менән бәйләй. Тышта – йонсоу, өйҙә – йылы. Бала-саға уҙа, йәш килен һыуға бара, йәтим көсөк сабып үтә – хәрәкәт тынмай, тормош туҡталмай.

Тағы ҡыҙҙарын, уларҙың яҙмышын уйлай, гел Хоҙайға һыйына. Быныһы – ҡартайыу билгеһелер, йәш сағында шаян, шуҡ ине, һис диндар булманы, бары ололар ыңғайына, әсәһе хаҡына атҡарҙы йоланы. Ҡанға һеңгән икән: доға ҡыла, сүрәләрҙе хәтеренә төшөрә, был донъяның, бәндәләрҙең ғәмәленең инде Хоҙай иркендә булыуына инана бара. Был беләк көсө китеүенәндер, тәндең кәре ҡайтыуынандыр... Кеше көсһөҙләнһә, сиргә бирешә, көслөгә табына, тәҡдиргә буйһына башлай, ихтыяры һына, яҙмыш иркенә бирелә. Инде тәҡдиренә күнә, донъя яйына яйлана, яҙмыш ыңғайына һуҡтыра.

Элек йәш, көслө ине, шаян-шаталаҡ булды, йор күңелле ине, бошона белмәне, алдын-артын уйламаны. Ана, мөхәббәте тарихы ла шул холҡона бәйле. Хәҙер шул хаҡта уйлай, шунан айырыла алмай. Һағышлана, һөйөнә. Хәтирәләрендә йәшәй. Үткәнен энә күҙәүенән үткәреп маташа, шай – кәрәкмәй, барыһына разый, үткәндәргә салауат.

Мөхәббәт тарихы үткәнен яҡтырта, йөрәген йышыраҡ тибергә мәжбүр итә, һирәк-һаяҡ йөҙөндә йылмайыу хасил итә.

...Тышта – ят донъя, икенсе кешеләр. Уларҙы таный ҙа, юҡ та, хәтирәләре хәтәр. Уларҙы әкиәт һымаҡ ҡабул итә, шай, хәҙер. Һатыйҙа, Әпшәндә ғүмеренең бер киҫәге ҡалған, балалары шунда тыуған.

...Тәҙрә төбөндә сабыр, оноткан дыуамал саҡтарын. Күҙ алдынан һындар, йөҙҙәр үтә. Кеше был ғүмерендә кемдәр менән генә ҡатышмай-айырылышмай. Осрашыуҙар-айырылышыуҙар ҡабатланып ҡына тора. Инде күнектем, өйрәндем тигәс, тағы... Йәнгә яҡын күпме заттар ҡайтмаҫ ерҙә ҡалған.

Хәҙер нәҫел инәһенә әүерелде: барыһын да янына йыя, туған-тыумасаһы ишле. Нәҫелдең инә ҡорто, барыһын ҡабул итә. Бер туған, ике, өс, дүрт, биш – бөтәһен дә һыйындыра, береһен ситкә типмәй. Борон затташтары шулай иткән, ул да шул юлды ҡыуа.

Беләҙекүл – хәтирәләренең ояһы. Серҙәре шунда батҡан, шунда мөхәббәте күмелгән. Эңерҙә күл бите ҡарая. Төҫө боҙола, йыйырсыҡтары беленә. Сырайы һытыла, гүйә, башы эйелә Беләҙекүл ҡарсыҡтың. Көмрөһө сыға, кәкре таяғына таянып ала. Кешеләргә күтәрелеп ҡарамай, ауыҙ эсенән генә мығырҙап бара. Үҙүҙенә йомола, төпкөлдәренә сума. Ләм, үлән еҫе аңҡып китә, һаҫыҡ еҫе тирәйүнгә тарала.

Был йылдарҙа күп нәмә үҙгәрҙе, ерҙә яңы быуындар алмашынды бит.

...Ниңәлер күңеленә Бәхтейәрҙе ҡаршы алыу ҙа оҙатып ҡалыу ғына уйыласаҡ. Ире күҙгә күренгәндәй итәсәк тә юҡҡа сығасаҡ, күҙгә эленәсәк тә тағы ҡайҙалыр олағасаҡ.

Ҡара һаҡалың ҡайҙа ла артыңдан эйәреп йөрөй. Бер ҡараһаң, мәҙәк кеүек, бер ҡараһаң... Тағы шул уҡ ғәйепләүҙәр, шул бер үк дәғүәләр:

– Һин – ҡарт бухаринсы! – Тәфтишсе һөйөнгән кеүек күренде уға. Сабый бала, тәтәй табып ҡыуана. – Бухарин-троцкистар платформаһында торғанһың, 1928 йылда хөкөм ителгәнһең... Йәшлегең лагерҙарҙа үткән.

– Мин ул ваҡытта учитель инем, начальник иптәш... – Бәхтейәр һалам осона йәбеште. – Минең ни ғәйебем бар? Алты йыл ултырҙым, хөкөмдө күтәрҙем, хәҙер...

– Ә утыҙ етенсе йылда?

– Унда, начальник иптәш, детдомда ревизия булды, кассала аҡса етмәй сыҡты... Мине, директорҙы, ғәйепләнеләр!

– Бында уголовный ғына түгел, сәйәси статья буйынса ла ғәйепләүҙәр бар, учитель... Троцкист-бухаринсылар платформаһында торғанһығыҙ, Совет власына ҡаршы ҡоротҡослоҡ эше менән шөғөлләнгәнһегеҙ – совет ойошмаһына етәксе постарға үрләп, уны эстән ҡаҡшатырға маташҡанһығыҙ, Сталин платформаһына ҡаршы эш йәйелдергәнһегеҙ. Гел ҡоротҡослоҡ, гел аҫтыртын эш итеү!

– Начальник иптәш, мин, тейешле булһа, язаһын алғанмын, ике ҡат хөкөм иттеләр, һуғышта трудармияла хеҙмәт иттем – илем алдында намыҫым таҙа, йөҙөм яҡты. Мин ошо һөйәлләнеп бөткән ҡулдарым менән төҙөнөм ул илде, еңеү өсөн көсөмдө йәлләмәнем...

– Ә ниңә тағы, трудармиянан ҡайтыу менән, ҡоротҡослоҡ эшенә тотондоғоҙ? Колхозсыларға бөтә уңышты таратып бирәһегеҙ? Оппортунист!

– Ниндәй ҡоротҡослоҡ? Был – халыҡ өсөн, колхозсылар өсөн тырышып ятыу ғына...

– Закон буйынса ла, унда ла дәүләт планын тултырғас, бөтә уңыштың 15 процентын ғына авансҡа таратырға мөмкин. Ә һеҙ 30 процент таратаһығыҙ, ишу планығыҙ ҙа тулмаған.

– План бына-бына тулырға тора ине. 1944 йылда ашлыҡ уңды, ҡамылда ла күп ине әле ул, шуға, идара ағзалары менән кәңәшләштек тә, ас халыҡтың күңелен күтәрәйек, саҡ ҡына уның да тамағын ҡайғыртайыҡ, тинек.

– Кем рөхсәт итте?

– Идара... мин рөхсәт иттем!

– Һеҙ яуап та бирерһегеҙ! Дәүләт байлығын әләф-тәләф...

– Был дәүләт байлығы түгел, ә колхоз байлығы... Колхозсыларҙың да тамағы бар...

– Ә дәүләт, уның хаҡы, өлөшө ҡайҙа? Фронтовиктарҙың өлөшө?

– Фронтовиктар... Улар ҡышын һарыҡ туны кейҙе, ҡалас икмәк ашаны, ә тылда халыҡ астан ҡырылды, ас-яланғас булды.

– Һеҙ – ҡоротҡос, дәүләттең ысын дошманы! Хәҙер ҙә... Партия илде емереклектәрҙән күтәреү өсөн көрәшә, һуғыш яраларын уңалтыу өсөн фронт йәйелдерә, ә һеҙ, колхоз башлығы, колхоз байлығын уңлы-һуллы таратаһығыҙ. Сталин иптәш, һеҙгә ышанып, үтә яуаплы участканы тапшырған, һеҙ йәнә ҡоротҡослоҡ юлына баҫаһығыҙ. Совет власын һаман күрә алмайһығыҙ, колхозсыларға – ваҡ буржуазияла шәхси милекселек тойғоһон үҫтерешәһегеҙ! Бухарин да беҙҙе крәҫтиәнде иркәләтергә, уның күңелен күрергә өйрәтте – һеҙ ҙә шуның юлын ҡыуаһығыҙ! Егерме һигеҙенселә нэпмандарҙы яҡланығыҙ, Сталин юлына ҡаршы сыҡтығыҙ, һаман да шуны ҡыуаһығыҙ. Мин һеҙҙе үтәнән-үтә күреп торам, ҡарт бухаринсы, ҡарт төлкө! Беҙҙе был юлы төп башына ултырта алмаҫһығыҙ! Ике ҡат әҙеңә төшөп, төрмәгә тыҡтыҡ – ике ҡатында ла ҡотолдоң, был юлы, өсөнсөһөндә, барып сыҡмаҫ! Марш! Конвой?!

## I

Кешеләр Ҡамсаны, яндырай бер зат, волость эше, революция өсөн тәнен-йәнен бирергә әҙер уҙаман, тип уйлай. Быныһы – өҫ кейеме, түрәнең мундиры ғына... Мундирҙы кейгәс, бәндә бөтөнләй икенсе төҫкә инә, үҙлегенән айырыла, гүйә, икенсе кешегә әүерелә. Мундир һәм тән. Мундир һәм кеше үҙе. Мундирлы түрә, власть кешеһе! Ул, әлбиттә, бүтәндәрҙән, ауылдаштарынан айырылып тора. Тора-бара ул бөтөнләй икенсе әҙәм була, ә Ҡамса күләгәлә ҡала. Дәрәжә уны йөрөтә, бүтән сүрәткә индерә. Үҙе талап иткән һүҙҙәрҙе һөйләтә, үҙенсә ҡыландыра... Ә ысын Ҡамса теләгәнен һөйләй, тейеш һанағанын ҡыла алмай.

Бәхтейәрҙе төрмәгә оҙатҡансы ысын Ҡамса менән мундирлы Ҡамса нисек тә ярашты әле, һүҙҙәрен дә инанып һөйләне, йәнен ҡыҙғанманы. Иң мөһиме,

икеләнеү белмәне, эшем хаҡ, халыҡ бәхете, Мәғҙәндең яҡты киләсәге өсөн көрәшәм, волоста власть алмашынды, яңы тормош ҡорабыҙ, тип тамаҡ ярҙы. Шуға мулла-монтағайҙарға, нэпмандарға аяуһыҙ булды. Бәхтейәрҙе лә ысын дошман һананы.

Әлегәсә донъяһы ыңғай, бер яйға ағылды. Мөнирә барыбер уны яҡын итте. Бәхтейәр төрмәгә оҙатылғас, бигерәк тә Ҡотойҙо теге комиссия ауылдан һөргәс, донъя баштүбән әйләнде.

Бәхтейәр киткәс, һөйөклөһөн алмаштырып ҡуйҙылармы ни: йөҙөн асманы, Ҡамсаға бер йылмайып баҡманы. Быуайын оҙатҡас, тамам унан төңөлдө. Ҡамса нисә ҡат барҙы, Беләҙекүл буйын һағаланы...

Ҡамса хәҙер үҙе лә икенсе кеше бит. Хәҙер ҡат-ҡат самалай, үҙ ҡылығын да, Бәхтейәр, Ҡотой ҡарт һүҙҙәрен дә бизмәнгә һала. Дөрөҫө, Бәхтейәрҙе ул канткомм тәҡдимдәренә ҡаршы ҡотортманы, теге сходта теленән тартып һөйләтмәне, уны ҡулынан тотоп трибунаға өҫтөрәмәне. Ҡамса бары үҙ фекерен яҡланы, кантком идеяһын үткәрҙе. Ҡотойҙо ла, еңенән тотоп, колхоз менән бетең бер булмаһын тип, тыйып ҡуйманы. Ҡотой ҙа, Бәхтейәр ҙә үҙҙәре шуны көҫәне...

Ҡамса икеләнде. Мөнирәнең тәртибе унын йән тынысльғын алды. Бәхтейәрҙе оҙатҡас, икеләнә башланы. Выждан ғазабы йәнендә эт эсәге үләне ише сырмай, ҡорт ише ашай. Ул – ғәйепле: дошманы Бәхтейәрҙән ҡотолоу менәнме ни, һөйөклөһөн бәхетһеҙ итте... Бәхтейәр артынан – Ҡотой ҡарт... Колхозлашыу тигәне лә башына бер тимер таяҡ ҡына булды.

Ҡамса, ярай, хәҙер үҙен эстән ашай, волисполкомдан ҡайта ла эсә, ҡайта ла өйөндә бикләнеп ята. Япа-яңғыҙы, ә бисәһе уны нисек тыйырға, нисек өшкөрөргә белмәй. Ҡамса хафаһын хәмер менән йыуа, күңелен шулай баҫа. Ул да – тотҡон! Теге ваҡытта ла, Ҡотой, Ҡотой артынан Мөнирә кабинетына ингәс, нишләне? Күҙ ҡабаҡтары шеше ҡайтмағайны. Комбед ҡарар сығарған, партячейканың да һығымтаһы бар, ә Ҡамса ни ҡыла ала? Әгәр ул ҡаршы төшһә, волость комиссияһы ҡарарын үҙ белдеге менән юҡҡа сығарһа, кантком ни тиер, уны ла яуапҡа тарттырмаҫмы? Бизмән тәрилкәһенең береһенә Ҡотойҙоң, икенсеһенә үҙенең башы һалынғанын белә, ҡайһыһының ҡәҙерлерәк икәнен, үҙенең ҡайһы юлды һайларға тейешлеген генә әйтә алмай. Партия, революция талап итә, кантонда ла күп һорап тормаҫтар.

Заманында ҡаты ҡуллы булды, кантком шуны талап итте, шулай өйрәтте. Кемдең арбаһына ултыраһың – шуның йырын йырла.

Ҡамса икеле-микеле утрауҙа йәшәй, башында мең төрлө һорау ҡайнай: ҡайһы юлды һайларға?

– Туҡтат инде шул эсеүеңде! – тип инәлә Факиһа. – Һин – ир кеше, үҙ-үҙеңде ҡулға ал, революция һалдаты! Беҙ яңы тормош ҡорабыҙ, тәүге бураҙналарҙы ярабыҙ...

– Етәр, Факиһа!

– Тәүге юл ярыусыларға гел ҡыйын булған: ҡаршылыҡтар, кәртәләр. Ана, Маркс иптәш тә, коммунистарға берәү ҙә таҡыр юлдар түшәп ҡуймаған, тип өйрәтә. Тупһалар, дүрткел, йомро таштар түшәлгән үргә илткән һуҡмаҡта... Синфи көрәш... Сталин иптәш ни тип өйрәтә? Социализм юлынан алға барған һайын синфи көрәш көсәйә. Бирешмә, Ҡамса!

– Туйҙырҙы ул синфи көрәш: көрәш, көрәш! – Ҡамса йоҙроғон төйнәй. – Лутсы араҡы тап!

– Ҡамса, иртәгә – эшкә, волость халҡы күҙеңә ҡарап тора...

– Баш тартам председателлектән!

– Ҡамса!

– Өгөтләмә, хәл иттем!

Волисполком башлығының эсеп ятыуын ишетеп, Мәғҙән колхозы рәйесе лә килде.

– Бына минең хәлдәр шулайыраҡ, ҡушаға. Ни әйтерһең? – Ҡамса үҙен Ҡотлояр алдында ғәйепле тоя.

Ҡотлояр өндәшмәй, тәмәке төрә.

– Әйт бер һүҙ! Ғәйепleme мин?

Теге битараф.

– Әйт, беҙ дөрөҫ йәшәйбеҙме?

– Аһ. Уныһы өсөн ниңә баш ватаһың? Юғарылағылар уйлаһын.

– Ә һин? Волком ағзаһы. Ана, бисәләр әйтә...

– Уныһы шулай, Ҡамса, тик беҙ генә илдәге хәлде үҙгәртә алмайбыҙ.

– Үҙгәртә алмаһаҡ та, беҙ ҙә яуаплы... Ана, нисәһен Себер һөрҙөк! Ни бысағымамы ул коллективизацияһы?

– Һин тәрәнгә төшәһең.

– Мин дә революция һалдаты, Совет власы өсөн ҡан ҡойҙом, тик колхоз тигәнең...

– Колхозһыҙ булмай, Ҡамса! – Колхоз рәйесе был тәңгәлдә икеләнмәне. – Беҙ – крәҫтиән, ә крәҫтиән әүәлгесә яңғыҙ-яран йәшәй, иген игә алмай.

– Ә ниңә кешене иленән ҡыуырға! Бына Ҡотой ҡарттың һиңә ни зыяны тейҙе? Һин – колхоз башлығы, шул һорауға яуап бир: кешене төбө-тамыры менән еренән ҡуптарырға, ниңә? Ә, бер дәлилең дә юҡмы? Ниңә бушҡа кеше яҙмышы менән уйнайбыҙ?

– Ҡотой ағайға мин ҡаршы түгел, әммә... Уҙған йыл ашлығы ҡотороп уңды, малы ишәйҙе... Беләҙекүлде үҙ биләмәһе итеп алды, ҡусҡар.

–Ҡулынан килә, кәсепкә оҫта, балыҡ тота белә...

– Ә тирәһендәге халыҡ ас...

– Байғош, жыйын әтрәгәләм...

– Мин ялҡауҙарҙы яҡламайым, Ҡамса...

– Ана, эт ялҡауы Тәзей менән алға китерһең, колхозың бөтәйер!

– Ҡамса, беҙҙең колхоз саҡ аяҡҡа баҫып килә: шул нэпмандарҙан ҡотолһаҡ, бөтәһе лә колхозға инһә... Ҡотой – Беләҙекүлдә баш, ә Петр улы Михаил – Дневаловка тирмәнендә. Колхозда кем эшләр?

– Ай, Ҡотлояр, Ҡотлояр, һин шул колхозың менән суҡындың, һүҙ ул турала түгел бит. Мин колхозға ҡаршы түгел, ә беҙҙең методтарға ҡаршы: ниңә колхозды һөймәгәнде иленән һөрөргә?

– Ҡотой – арҡыры тишек, бүтәндәргә – үрнәк. Ул кешене илке-һалҡы эшләргә, үҙ шәхси хужалығын ғына ҡайғыртырға отҡота!

Ролдәр алмашынды: хәҙер Ҡамса урынында – Ҡотлояр, Ҡотлояр урынында – Ҡамса.

– Ҡара, ул киткәс, бөтә Күл яҡ урам колхозға инде. Бер Ҡотой быуаны быуып торған.

– Ҡотлояр ҡушаға, мин ғөмүмән әйтәм: беҙ дөрөҫ юлдамы?

## II

Ҡотой ҡарттарҙы оҙатҡас, Бәлхиә Мөнирәләрҙә ҡунды. Ике бисараның күҙ йәше кипмәне.

– Апай, хәҙер мин нишләрмен? Кешеләр аяуһыҙ, кешеләр бер-береһенә хаслы, ҡоҙғон һымаҡ тона... Шулай донъя төҙәтәләрме, бер быуайым булды күрә алмағандары... Ҡотой быуайым һөрөлгәс, колхоз худҡа китер, Ҡамсалар бәхетле йәшәр... Донъя уларға тар ине, хәҙер иркенәйер... Ер етмәй ине, ер киңәйер, Беләҙекүлде лә эстәренә бәйләһендәр!

– Тамаҡтарына арҡыры торһон! – Икәүләп балауыҙ һығалар.

Бәлхиә тағы үҙ тарихын бәйәнләй.

– Ҡотой абзыйым менән беҙ – игеҙәктәр!

– Китсе!

– Ысын! Ҡотой абзыйым минән бер сәғәт кенә алда тыуған... Уның менән ата бер, инә башҡа туғандарбыҙ... – тип һөйләй имсе. – Әтейемдең ике ҡатыны була, шулар икеһе бер көндә бәпесләй. Әтейемде, ике өй араһында йүгерекләгән, тип һөйләйҙәр... Әтейҙән, эйе, иртә ҡалдыҡ, инәйемдәр беҙҙе айырым-айырым үҫтерҙе. Боронғолар, игеҙәктәрҙе айырырға ярамай, тигән, улар ҡайҙа ла бергә. Ә беҙ...

Мөнирә күңелендә зил-зәлә. Теге көндә Ҡамса кабинетына бәреп инде, бөтәһенә лә әҙер ине. Волость идараһынан төңөлөп сыҡты: хәҙер ул Ҡамсаға ла кәрәкмәй, имеш. Күңелен бушлыҡ биләне, битарафлыҡ. Был илдә һөйөү, ярашыу, иман тигәндең әҫәре лә ҡалмаған, кеше ғәмһеҙ, тормош зил-зәлә. Иртән яңы мәшәҡәттәр тыуасаҡ, яңы мәхшәрҙәр ҡубасаҡ. Ул мәхшәр ҡупты бит инде, тормош үҙ күсәренән ысҡынды, ел иркенә зырлап әйләнә донъяһы.

Балаларын ашатҡан булды, Бәлхиә апаһына барырға кәрәклекте аңлай ине, һаман кисекте. Тағы шул Ҡамсаны уйлаған була...

Айлы төн ап-аяҙ, йүләрҙәр. Мөнирә – бисара, был тормошта бүтән ирҙе ир күрмәне, был әллә хөрәфәтме? Был – әллә нәмә?

Эшләгәндә лә уйында – шул... Гел уға килеп төртөлә, бар юлдары уға илтә. Был – әллә нәмә?

Үҙен шул кешегә нәфрәт менән солғай, уға ҡәһәр яуҙыра. Ул уның тормошон боҙҙо, бәхетен емерҙе...

Мөнирә үҙ-үҙен уның хаҡында уйлауҙан тыя.

Ҡотлояр тағы килде.

– Хаталандыҡ, тиһеңме?

– Хаталар хаттин ашты: илдә власть урынлаштырҙыҡ, күпме кеше ҡырҙыҡ, бер Мәғҙәндә генә... Артыҡ бөгөп ташламаныҡмы, тим.

– Ил буйынса әйтәһеңме?

– Рәсәй буйынса ла әйтәм. Ул яңы властан илгә афәт, кешегә илаш-талаш...

– Тәрәнгә төшәһең... Уның өсөн партия, хөкүмәт бар...

– Ҡотлояр, Бәхтейәр дөрөҫ тылҡыған: революцияның әле бер емеше лә өлгөрөп еткәне юҡ, халыҡ уның файҙаһын күрмәй, большевиктар...

– Ҡамса, – Ҡотлояр ян-яғына ҡаранды. – Шәпмен тигәс тә, ауыҙыңды үлсәп ас!

– Һин мине һатмаҫһың, тағы – һатһаң да...

– Ҡамса, ВЧК-ны беләһең. Хоҙай, һаҡланғанды һаҡлармын, тигән...

– «Эйелгән башты ҡылыс сапмай» ҙа тигәндәр...

– Был заманда, Ҡамса, беҙгә башты ла һаҡларға кәрәк. ВЧК һинең менән мине генә түгел, Үҙәк Комитет секретарҙары Каменев менән Зиновьев иптәштәрҙе аяманы. Уның еле аҫҡа төшә. Кантком комиссарҙары нишләп бөттө? Әле лә бер-береһенә эт менән бесәй кеүектәр.

– Шулай. – Ҡамса килеште. – Тик мин арыным, уйындан сығам.

– Нисек? – Ҡотлоярҙың ҡобараһы осто.

– Мин волисполкомдан сығырға булдым!

– Һин... эскән баштан...

– Эсһәм дә, иҫемдәмен.

– Туҡта, Ҡамса! Был ҡотһоҙ заман да үтер, тормош яңынан үҙ ярына ҡайтыр, беҙгә йәшәргә... – «Беҙгә балаларҙы ҡарарға» тип әйтә яҙҙы колхоз рәйесе.

– Ә миңә... – Ҡамса сараһыҙ ҡул иҙәне.

### III

Ҡамсаны вазифаһынан төшөрҙөләр. Ни хәл итәһең, идара системаһы үҙ ыңғайына тормағандарҙан тиҙ ҡотола. Кем уның менән түгел – уға ҡаршы тип һанала башлай.

Ҡамсаны ла тиҙ оноттолар, бер-ике аҙнанан канткомда иҫкә алыусы ла булманы. Ә өйҙә шул хаҡта ғына һүҙ ҡуйыра, шул ғына зиһенде биләй.

Ҡамса өй тирәләй йөрөй. Эшкә бармай, бөтөнләй айырылды волость хәстәренән, үҙ-үҙенә бикләнде. Көн оҙоно һыу буйында; тау башына менеп китә – бөтә буш ваҡытын яңғыҙы, эш тапмаған бәндәләй үткәрә. Кешеләрҙе күрмәй, уларға ҡатышмай, хәҙер бөтә донъянан, мәшәҡәтенән биҙҙе. Уның өсөн инде бер ни ҙә юҡ кеүек, әүәл ул, әйтерһең дә, бөтә волосты тетрәтеп тотмаған. Иҫһеҙ бала хәлендә: тауға сыҡһа, күбәләк баҫтыра, бөжәктәр менән уйнай, уларға усы менән кәртәләп биләмә яһай ҙа, шул тотҡондан сығармай, оҙаҡ хитлай. Яр башында ултырһа, һыуға таш тәмей. Көнө буйы Беләҙекүлгә текләп, хәрәкәтһеҙ ултыра. Хатта ашауын да, өйөн дә онота. Факиһа йыш ҡына уны шул һыу буйынан табып алып ҡайта.

– Ҡамса, тыңла... – «Араҡы бөткәйне, бал эсәһең» тип битәрләргә теләй ҡатын, тағы тыйыла. Хәҙер ире, эсһә лә, уның һәр һүҙен тыңлап торған төҫлө. Ҡаршылашмай, әрләшмәй, йоҙроҡ төймәй, сабыйҙай килешә лә ҡуя.

– Факиһа, мин уны төшөмдә күрҙем. Һин дә шунда инең, ситтәрәк торһаң. Беләҙекүл буйында бейенек. Ул алһыу күлдәген кейеп алған, ел туҙҙырып өйөрөлә...

– Ҡамса, һинең палатала ап-аҡ марляға уралып ятҡаныңды хәтерләнем. Һин шундай йәш, сибәр. Йөрәгем жыу итте: шул, шул! Беҙ ул ваҡытта икебеҙ ҙә йәш, матур инек. Бәхетле инек!

– Мин һаман да бәхетле: гел күл тирәләй йөрөйбөҙ, етәкләшеп алғанбыҙ; Биҙәртауға менәбеҙ. Сәскәләр өҙәбеҙ, инде беҙ уның менән һис айырылышмаясаҡбыҙ.

«Кем ул?» – тип һорарға уҡтала зарлы ҡатын, һиҙенһә лә, тағы тыйыла.

– Волость эшенән айырылғаны бирле үҙемде ирекле тоям. Хәҙер уның менән дә тартынмайынса күрешә алам, рәхмәт һиңә, Факиһа, һин тыймайһың, юлыбыҙға арҡыры төшмәйһең... Хәҙер мин – донъяла иң бәхетле кеше!

– Ҡамса, һин иҫәрләнеп бараһыңмы әллә? Туҙға яҙмағанды һөйләйһең.

– Мин һиңә бары уның тураһында ғына һөйләйем. – Гонаһ өҫтөндә тотолған сабыйҙай, Ҡамса күҙен сылт-сылт йома.

Факиһа иренән был юлы ла кемде һөйләүен белешмәне. Ҡамса әллә сырхаймы?

– Эшкә урынлаш! – тип ҡараны.

– Ҡайҙа? Мин уларҙан көскә ҡотолдом да...

– Сирләйһеңме?

– Мин – һап-һау. Мин хәҙер донъялағы иң бәхетле кеше, Факиһа. Ни теләйем, шуны эшләйем, Беләҙекүлдә балыҡ тотам... Ҡотой Беләҙекүлде миңә ҡалдырҙы! Мин уның биләмәһен баҫып алдым!

Ҡамса, ысынлап та, күлдән ҡайтмай. Шунда Мөнирәнең өйөн күҙәтә. Көтәме уны, әллә көтмәй ҙәме – эт белә.

Факиһа тамам ҡаңғырҙы. Бөтә донъяһы үҙгәрҙе хәҙер, ирен алмаштырып ҡуйҙылармы ни: бер ерҙә лә эшләмәй, көнөн эт һуғарып уҙғара. Әллә сирләйме, тегегә бала аҡылы кергәнме? Кешеләрҙән айырылды, ауылдан биҙҙе, үҙ ыңғайына яңғыҙы йөрөй. Ҡарт бабай... Йәй көнө быйма кейә, күл буйында ҡамыш

шекәләренең йөнөн туҙҙырып уйнай, йә ыштан балағын һыулап, яр ситендә быстырҙап йөрөй. Балыҡ тотҡан була, ҡамыш менән һыу битен туҡмай, күлгә таш тәмей.

«Ул – ауырыу!» Факиһа инде быныһына икеләнмәй, башында хәтәр уй тыуып ҡуя: әллә Ҡамсаны ҡалаға алып барып, ҙур врачтарға күрһәтеп ҡарарғамы? Тағы күҙ алдына теге ваҡиға баҫа.

Ҡамса госпиталдән терелеп сыҡҡас, хушлашырға килде. Факиһа икенсе ҡаттан ҡаланы күҙәтә. Эшенән саҡ бушаған. Салт аяҙ көн, яҙ башы. Һауа шат ауаздарға тулған. Шунда госпиталь алдында ике һыбайлы туҡтаны. Хәрби кейемдәләр. Ҡояш нурҙарында шпорҙары, итек йөҙҙәре ялтырай.

– Ҡамса... – тип әйткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды ҡыҙый: ҡаршыһында кем ҡатҡан?

– Көтмәгәйнеңме?

– Ҡайҙан? – Факиһа баҙаны ла төштө.

– Беҙҙе икенсе фронтҡа күсерәләр...

Фельдшер ҡыҙ тағы һүҙ тапманы. Теле көрмәлде, тәне тарҡалып бара.

– Мин һиңә яҙырмын, – тине егет. – Һин мине теге донъянан кире ҡайтарҙың. Әгәр һин булмаһаң...

Факиһа дүрт күҙ менән хаттар көттө. Ул замандар ҡайҙа тороп ҡалды икән?

...Эштән арманһыҙ булып, арып-талсығып ҡайтһа, ире әле был, әле теге хәбәрен әҙерләп тора. Хәс тә сабый әсәһен түҙемһеҙләнеп көткән – хәбәрҙәре күп йыйылып киткән.

– Күл буйында – серәкәй, иртүк баҡалар баҡылдай ине, ҡояш күтәрелгәс, баҫылдылар. Ул бөгөн дә сыҡманы.

– Нисек?

– Эйе, иртүк барҙым, баҫманы күҙәттем – һыу алырға ла төшмәне... Факиһа, мин уны нисә йыл күргәнем юҡ...

– Ҡамса, уны күрһәң, ни була?

– Нейә, күңелле була!

Икенсе бер ваҡыт Ҡамса үҙе башлап хәбәр һала:

– Факиһа, хәҙер ул мине күрә алмайҙыр инде.

– Ниңә?

– Ирен төрмәгә оҙаттым, Ҡотой быуаһын Себер һөрҙөм... Факиһа, һин уны беҙгә саҡыр. Мин унан ғәфү үтенәм...

– Үҙең бар!

– Юҡ, ул мине тыңламаясаҡ. Өйөнә лә керетмәҫ...

Факиһа йөҙәп торҙо. Ауыҙы асыҡ килеш ҡалды.

## IV

Үҙен-үҙе әрләй, эттән алып эткә һалып һүгә. Нишләп йөрөй ул? Көндәшенә йөҙ һыуын түгә, ялбара, уның алдында теҙ сүгә. Ошо көнгә төштөмө хәҙер башы?

Үҙен-үҙе битәрләй, туҡтамай. Ире хаҡына, уның һаулығын уйлап әллә ниҙәрҙе ҡорбан итә... Улар ут-һыуҙы бергә кистеләр, инде бөттөм тигәндә ирен аяҡҡа баҫтырҙы.

Күҙе аларған, йәне теткеләнеп бөткән. Ул ҡушты, үтенде, юҡ сара. Хәҙер, ошо көнгә төшкәс, бисара нишләй ала: ауыҙлығын сәйнәргә, һуңғы түҙем янсығын усына йомарларға мәжбүр. Бара. Батҡаҡҡа бата-сума. Күл яҡ урам, саҡ ҡына ямғыр яуһа ла, йырып сыҡҡыһыҙ... Ҡайһылай белеп исем таҡҡандар: Күл яҡ урам.

Улар оҙаҡ текләшә. Күҙ ҡарашы ни аңлата, ни хаҡында һөйләй? Күпме ҡасышмаһындар, күҙ баулап ни саҡлы йәшенмәк уйнамаһындар – осраштылар.

Мөнирә түҙемле көттө. Батыр ине ул бөгөн, көндәше алдында намыҫы ла таҙа. Теге ниндәй дәғүәләр белдерһә лә...

– Мөнирә, һин мине аңларһың микән?

– Аңлармын! – Хас тораташ бисә икеләнмәне. Хәҙер ул һүҙҙәре берегәсәген тойҙо.

– Мөнирә, беҙгә бар!

– Нисек? – Көндәш быныһын көтмәгәйне.

– Мин һине саҡырам...

– Факиһа... – Көндәше өндәшмәгәс, хужабикә тағы көлгән булды, шулай әңгәмәне үҙ яйына ауҙармаҡсы итте; саҡ ҡына «ирең юҡ, әйҙә, минең иргә икенсе бисәлеккә бар, тимәксеһеңме» тип ысҡындырманы.

– Мөнирә...

– Бер-берегеҙҙе беләһегеҙ, шәриғәт ҡанундарынса, ишкә ҡуш йәшәйек тә алып китәйек, тимәксеһегеҙме? Ә мин унан күптән һыуындым, туйҙым. Кәрәкмәй ул миңә! Хәҙер ул – минең хас дошманым!

– Мөнирә, ул һине саҡыра...

– Саҡыра, тиһең инде... – Хужабикә башын эшләтте. Ҡунаҡ тынған: хәлен аңлатып бирә алмай. Бары ваҡыт ҡына ниҙер хәл итә, был буталсыҡ һорауҙарға асыҡлыҡ индерә бит.

– Ярар, – тине ахыр, көрһөнөп.

– Мин көтәм, – тине ҡунаҡ, еңел һулап.

«Үҙе саҡыра... Факиһаһы ла саҡыра...» – тип уйланы, башында шул тигәнсе мең төрлө уй йүгерҙе, һаман ныҡлы ғына ҡарарға килмәне, ә ҡунағы тапана. Йә үтмәй, йә китмәй тигәндәй.

Шулай ҙа һүҙе – ҡошсоғо ситлегенән осоп сығып киткәйне, күңеле нығып өлгөрмәһә лә, вәғәҙә бирелгәйне.

– Ярар, – тип ҡабатланы хужабикә, был хәтәр аңлашыуға нөктә ҡуйып. Ҡатын, ҡунағы күҙҙән юғалғас та, ҡаңғырып, бер нөктәгә төбәлеп оҙаҡ ултырҙы әле, һаман нәгеҙ генә бер ҡарарға килә алманы. Уйҙары сыуалсыҡ, ул әле был саҡырыуҙы аңларлыҡ хәлдә түгел ине. Ниндәй саҡырыу? Сихырмы, әллә иблистең үҙе эшкәртеүеме?

## V

Мөнирә ингәндә Ҡамса һикелә аяҡ салып ултыра ине – сабый балалай ҡыуанып, һикереп төштө.

– Ә килдеңме? Үт, үт. Көтә-көтә көтөк булдым. Факиһа, сыҡ әле был яҡҡа: Мөнирә килгән!

Ике көндәш тағы йөҙгә-йөҙ төбәлә, Ҡамса, малай-шалай һымаҡ, ике арала йүгерекләй.

– Әйт, һин ҡәнәғәтме? Мин һүҙемдә торҙом.

Ир башын таҡырайтып ҡырған, шуға хәҙер олпатлығын юйған төҫлө тойолдо Мөнирәгә, ишеткәндәренән йөҙәне. Ә Ҡамса һаман туҙға яҙмаған хәбәрен теҙә, теленә ни килә, шуны сурыта.

– Мөнирә, эштән киткәс, йөрьәт иттем, инде комиссар тип тыйыусы юҡ: шәриғәт буйынса йәшәйәсәкмен, Факиһа ла ризалығын бирҙе.

– Мөнирә, ултыр әҙерәк, – Факиһа ла уға сытырман йәбеште. – Һине күргәс, күңелләнеп китте бит, әләйһә, көнө буйы яңғыҙы, ҡашын емереп, танауын төшөрөп ултыра. Эшкә китһәм нишләр, тип ҡурҡам, өйҙө бикләһәң дә бәлә.

– Дөрөҫ. – Ҡамса ла килешә.

– Бер ниндәй ҙә ата-инабат килтерә алмайым, һине таптыра... – Факиһа йөҙәй.

– Волостан ҡотолғас рәхәт, береһе лә сабыуҙан алмай. Мөнирә, һин ашыҡма! Бынан кире бергә, өсәүләп йәшәрбеҙ!

– Ҡамса, һин үҙ аҡылыңдамы ул? – Мөнирә асырғана.

– Ҡуй, ҡуй, талашма! – тип тыя ир.

– Мин риза түгел!

– Ҡуй, ҡуй! – Ир ыңғайына һыпыра, нисек тә Мөнирәне яраштырырға була. – Ҡарышма!

– Ҡамса, минең үҙ донъям бар бит, балаларым...

– Уларҙы ла бында килтер, беҙҙең балалар юҡ, өй – иркен!

– Ярар... – тип һикегә сүгә Мөнирә.

Сәй эстеләр. Табында ла һүҙ алыштырманы ир:

– Вәт, тамаҡ та ялғап алдыҡ. Миңә барыбер: гел шулай татыу торһағыҙ, донъям түңәрәк.

Ир бер торҙо, бер ултырҙы, ахыр «мин хәҙер» тип тышҡа атлыҡты.

– Эй, Алла... – Ике бисә үҙ-ара гәпкә генә тотонғайны, был тағы ялт итеп килеп инде, уртаға төштө.

– Рә-хә-әт донъя... Әлдә волосты ташлағам, ҡасан шулай үҙем өсөн йәшәр инем...

Ике бисә ир һөйләгән арала ҡараштары менән генә аңлашты. Ҡунаҡ нисек тә яйын, сәбәбен тапты, Ҡамса ай-вайына ҡуйманы.

Факиһа тағы килде, тағы саҡырҙы.

– Һине таптыра, мине «өйҙән ҡыуҙың» тип өҙмәй ҙә ҡуймай. Ҡаңғырҙым мин уның менән. Арыным.

Хәҙер көндәштәр үҙҙәре белгән телдә аңлашты. Уртаҡ хыял ҡорҙолар.

– Әле халыҡ белмәй, әҙәм мәсхәрәһе. Волостағылар ҙа, Ҡамса эсеп ята, тип уйлай... Түҙемем ҡалманы, эшем эш, ашым аш түгел. Башым тубал, амбулаторияға көскә барам.

– Алмашлап ҡарайыҡ, – тип килеште ахыр Мөнирә.

Бисәләр ошо көндән башлап ирҙе сиратлап тәрбиәләй башланы.

**VI**

Хәҙер, ысынлап та, Ҡамсаның ике бисәһе бар. Улар алмаш-тилмәш янында ултыра, хәбәрен тыңлай.

Мөнирә ике өй араһында өлгөрмәй. Шул саҡта Бәлхиә апаһына ялына:

– Апай, бар Ҡамса ҡашына!

– Ай, Алла!

– Апай, тыңла: ул – сирләй, ул...

– Аңлайым да ул... Мына дарыу үләндәре лә әҙерләштергәйнем... Хәйер, ул сирҙән дауа бар микән? – Имсе икеләнгәндәй итә. – Борондан белгәндәр, ул сирҙе, ҡыҙым, дауалай алмағандар.

– Ә һинең ҡөҙрәтең етә ул, апай!

Мөнирә хәҙер уны әүлиә урынына күрә. Апаһы – бағыусы, сир-зәхмәткә дауаһын табыр, йәнәһе, ул белмәгән сер, ул алдына сыҡмаған сир юҡ. Хәҙер, бәлә үҙ алдына килгәс, бисә күҙҙәрен мөлдөрәтә, мөғжизә көтә. Хәҙер Факиһа көндәше менән маҡсаты бер, уй-теләге иш. Бер төптән торалар, бер һүҙле булалар, тик кеше белмәй, ауылдаштар аңғармай. Волоста ла Ҡамсаны

оноттолар. Хәҙер, колхоз эше гөрләгәс, кеше ыңғайына йөрөйһөң, күмәк артынан эйәрәһең, үҙеңә үҙең хужа түгелһең. Кемдең арбаһына ултырғанһың...

### VII

Ысыҡ төшкән. Иртәнге ҡояш нурҙары үҙҙәре тымылйып балҡый. Хәс тә шаян күҙҙәр ғашиҡтарҙы үлән һабаҡтарына ышыҡланып күҙәтә. Тегеләр – хыялыйҙар, бер кемде лә абайларлыҡ хәлдә түгелдәр бит: етәкләшеп алғандар, төбәк буйлап еләләр. Ҡамса таңдан атын юшарға килгән, ә Мөнирә һыуға сыҡҡан...

Беләҙекүл шаян тулҡындарын тибрәтә. Ул да шат, ғашиҡтарға ҡушылып шаяра, оса-ҡуна. Тегеләр иҫһеҙ: әйтерһең дә, был төбәктә, Беләҙекүл буйында, икәүҙән-икәү ҡалһалар; ҡамышлыҡ артына ышыҡланғас ни, донъяларын оноҡҡандар.

– Уй, мин ҡурҡам...

– Ҡурҡма! – Егет киң күкрәкле, күҙҙәре йылтырай.

– Бәхтейәр уянһа, күрһә...

– Бәхтейәр – йоҡо сүлмәге!

Улар тағы әйлән-бәйлән төшә: ағастар, Биҙәртау – баштүбән; Беләҙекүл муйынға урала. Мөнирә бышлыҡҡан, йыш-йыш һулай, Ҡамса бәхетле йылмая. Барса ошо төбәк йылмая, ҡоштар сәбәкәй итә, Беләҙекүл тирбәлә, һандуғастар моңона тулҡындар, ҡамыштар бейергә тотона.

Ҡамса – сарсау арғымаҡ, һөйөнөстән башы әйләнә. Барса ошо күктәр, төбәк иңе әйләнә. Шатлығынан иҫергән, бәхетенән тонсоға, Беләҙекүлгә батып бара.

– Ҡамса, ҡайтайыҡ!

– Мө-ни-рә!

– Ауыл уяна... Бәхтейәр...

– Шөрләмә шунан! Мин уның телен дә, ҡулын ла ҡыҫҡартам... Әйт кенә! Рөхсәт бир! Һин ҡушһаң, мин Себер һөрәм, аяҡ аҫтында бүтән буталмаҫ!

– Ҡамса, мин һине яратам да ул...

– Һин ризамы?

– Уфф!

– Үкенмә, беҙ уны юлыбыҙҙан алып ташланыҡ.

– Ҡәҙерлем, ҡайтайыҡ!

– Танһыҡтарым ҡанманы, нишләп һин минеке генә түгел?

Ҡамышлыҡтан сығып өлгөрмәйҙәр – Бәхтейәр!

– Ай, уйнаштар! Һиҙҙем мин... – Күҙҙәре аларған. – Әйтәм дә, ана, һеҙҙең балағыҙ Беләҙекүл төбөндә ята!

– Аһ!

...Мөнирә шыбыр тиргә батып уяна. Тәҙрәлә ҡояш йылмая, өй эсенә нурҙар тулған. Көн яп-яҡты, донъя шундай матур, иркен. Хәҙер түшәктән торорға ла йүгерә, бейей башларға! Күңелдәр күтәрелә быңдай иртәләрҙә, баш күк түбәһенә тейгәндәй итә, әйтерһең, тормошоң да теүәл, бөтәһе лә уң килеп тора, донъя түңәрәк, бер хәстәрең дә ҡалмаған!

Мөнирә мөңрәп маташа.

Матур төш, бәхетле төш, тик аҙағы ғына йәмһеҙ. Кем уйлаған?

Мөнирә һыу алырға була ашыҡты. Баҫмала аяғын сайҙы. Һыу йылы, табанын ҡытыҡлай. Аҙаҡ ҡына уны күреп ҡалды. Яр башында ҡунаҡлаған. Таш йыйып уйнай, берәүҙе лә күрмәй, берәүгә лә иғтибар итмәй.

Һаҡ ҡына баҫып барҙы, ә теге уйыны менән мәшғүл: ваҡ таштарҙы өйә лә тағы тағатып ебәрә. Йомро ҡом таштар, йәшмә таштар усында талир тәңкә

һымаҡ ялтырай, был сабый шуға күҙе ҡамашып ултыра – донъяһын онотҡан. Донъялағы бәхәстәр ҙә, ҡыйралыштар, вулкандар ҙа сүп кенә, ул үҙ шөғөлө менән ғәмле.

– Ҡамса, – тип йомшаҡ ҡына өндәште.

– Ә, килдеңме? Әйҙә уйнарға! – Теге ҡарт нәкәҫтең иҫе лә китмәне.

– Нишләйһең?

– Уйнарға сыҡтым... Хәҙер шул таштарҙы жыям да күккә тәмейем!

– Ә Факиһа өйҙәме? Нишләп ул һине таңдан сығарып ебәрҙе?

– Ул ауырый.

– Ауырый? Ҡамса, әйҙә, улайһа ҡайтайыҡ!

– Мин уйнарға сыҡтым да... Гел шунда, яр башына, киләм. Бында – рәхәт, күл буйы матур. Һин – гел баҫыуҙа, ҡырҙан иртәрәк ҡайтһаң, мине осратыр инең.

– Һинең минең менән осрашаһың киләме?

– Бергә уйнар инек... Һинең балаларың бар шул – шуларҙан бушамайһың.

– Ә Факиһа?

– Ул ауырып ята, мин уны ташлап сығып киттем...

– Әйҙә, ҡайтайыҡ, Ҡамса!

Мөнирә һөйрәй-өҫтөрәй тиерлек барҙы. Кеше күрер, күрше-күлән әллә нимә уйлар, тип өркмәне.

– Факиһа?

– Әү...

– Был – мин. Сирләйһеңме?

– Киҙеү.

– Ҡарағат ҡағы иҙеп сәй эс. Ҡурай еләге...

– Улары ҡайҙа?

– Мин хәҙер... – Мөнирә өтәләнде. – Бәлхиә апайыма барам.

Мөнирә йүгерҙе, Ҡамса – артынан. Әсәһе сабыуына йәбешеп алған. Мөнирә ҡабалана. Берәйһе ситтән күҙәтһә, сырамытыр ине. Күл яҡ урамына икәү ыңғайлай: алдан – әсә, арттан – бала. Бисә күҙенә бер ни салынмай: көндәше ут эсендә, көндәшен ҡотҡарырға!..

– Апай, киҙеү...

– Нимә? Кемгә ут ҡапҡан? – Бағымсы ян-яғына ҡарана.

– Факиһа сирләй!

– Ә, шулай тиң, әтү ҡотто алдың... – Имсе лә йүгерекләне, соландан үләндәрен индерә һалды. Факиһаларға йүгерҙеләр: Ҡамса – арттан, бисәләр – алдан...

– Һеңлем, мынау төнәтмәне эсеп ебәр! – Имсегә дан: фельдшерҙы дауалай. – Жәй шул киҙеү йөрөй торған.

Ах-ух орҙолар, бөтә иғтибар Факиһаға күсте, Ҡамса онотолдо.

Тауыҡ салып, аш һалдылар. Өй эсе мәшәҡәтен икәү үҙ иңенә алды. Ҡамса ла шунда усаҡҡа сыбыҡ-сабыҡ ташышты.

Мөнирә ике өй араһында сапты: һәр ерҙә күҙ-колаҡ булырға, бер эште лә күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа!

– Бәлхиә апай, рәхмәт, – тине Факиһа өсөнсө көн.

Сихырсы һыныҡ тешен йылтыратты. Ҡап-ҡара күҙҙәре, кәкре танауы уны йәмһеҙләй, убыр әбей итеп күрһәтә шул. Фельдшер уның үҙе ҡулына ҡалғас, йыйырсыҡтар менән йырмасланған сырай ҙа яғымлы һымаҡ тойолдо.

– Рәхмәт. Бынау ир ҙә үҙәгемә үтте, аяҡтан йығылдым.

Бисәләр килеште. Яҙмыш хәҙер уларҙы бер епкә бәйләгәс, бер иш бәләгә тарыҡҡас...

«Факиһа аяғына баҫыр ул, бына Ҡамса!»... – тип эстән уфтанды Мөнирә.

Бәлхиә ҡарсыҡ йыуатты:

– Бөтөрөнмә, хәләлең түгел, ана, бисәһе терелһә ҡарар.

– Бары йәл, апай, бала аҡылы кереп бөткән...

– Ундайҙар ауылда элек тә булды. – Имсе хәтерен аҡтарҙы. – Беҙҙең ауылда Әбәт тигән шаҡайҙы беләм. Тыныс, бер кемгә лә зыяны теймәй, үҙ ыңғайына йөрөнө.

– Ҡамса бит, апай, шаҡай түгел – ҙур кеше, волость башлығы... Ер һелкетеп йөрөнө, бөтә кеше, бар ил ауыҙына ҡарап торҙо...

– Хоҙайҙың ҡушҡанын уҙып, уның иркенән ашатлап булмай. – Имсе белгән сүрәһен ҡабатланы: – Ағиҙебилла шайтан разим лә ил-ла ла алаһ ҡеүәте!

Мөнирәне ҡурҡыу нығыраҡ солғаны: ни эшләргә, Ҡамсаны нисек ҡотҡарырға?

## VIII

Факиһа терелгәс, Ҡамсаны тағы икәүләп ҡарай башланылар. Мөнирә һәр аҙымын, Ҡамсаның һәр ҡылығын Бәлхиә апаһына еткереп торҙо.

Ҡайһы саҡта Ҡамсаның зиһене асылған төҫлө, ҡәҙимгесә һөйләшә. Мөнирә ҡыуана: дуҫы, әүәлге Ҡамсаһы – ҡаршыһында! Иҫән-һау, бүтәндәр менән иш... Хәҙер ҡараусыһы ҡайтып китһә лә була.

Ҡамса ғүмер баҡый ике бисә хаҡында хыялланды, хәҙер ул, ысынлап та, ике бисәле: Факиһа – олоһо, Мөнирә – кесеһе!

Икәүҙән-икәү ҡалһалар, һәүетемсә һөйләшәләр. Был юлы һүҙҙәре лә беректе. Ҡамса – әүәлге бәндә, етди хәбәрҙәр сурыта:

– Мөнирә, мин йыш ҡына балабыҙҙы уйлайым...

– Китсе!

– Ысын! Мин уны белдем, белмәнем дә кеүек. Эйе, ул миңә хәҙер бар ҙа, юҡ та һымаҡ. Һин уны ысындан да Беләҙекүлгә ташланыңмы?

– Һорама! – Мөнирә ҡырт киҫте.

– Теге ваҡытта «һинән ауырлымын» тигәйнең бит... Мин үҙем дә күрҙем: йөклө инең, аҙаҡ беҙ оҙаҡ күрешмәнек...

– Ҡамса!

– Беләҙекүлгәме? Бәхтейәр дөрөҫ әйтәме?

– Ҡамса, мин ҡайтып китәм!

– Мөнирә, минең был серҙе белергә хаҡым юҡмы?

– Юҡ!

– Беҙ бер-беребеҙҙе яраттыҡ, бер-беребеҙ өсөн үлеп барҙыҡ... Ниңә, беҙҙең арала... – Ҡамса мөлдөрәп ҡараны. – Бәлхиә ҡарсыҡ беләләр, ул – киндек әбейе, унан һорарға...

– Һорап ҡара! – Иргә яҫҡынып ҡараны: ҡарсыға, хәҙер дошманы күҙен соҡоп ала. – Етте, үртәмә йәнемде! Ул саҡта кисергәндәрем дә етер. Терелдеңме?

– Мин сырхаумы ни?

– Әләйһә, ниңә эшкә сыҡмайһың?

– Мөнирә, мин волкомдан айырылдым, унда – насар!

– Әйҙә, бүтән нәмә тураһында һөйләшәйек. – Мөнирә йомшара. – Бөгөн ашаныңмы?

– Мин туҡ, мин көн дә Беләҙекүл, Бәхтейәр әйткәне хаҡында уйлайым. Бер нәмәне белгем килә: Бәхтейәр уйнап әйттеме, әллә? Бәхтейәр ҡаршыма баҫа ла һорау яуҙыра, иш-шу көлә: «Һинең балаларың...»

– Етте!

– Мин ғәйепleme? Башымды ҡырҡып ташлай...

– Уф, Алла!
– Бына һиңә «Алла»! Мин дә ялҡтым.
– Нимәнән?
– Шул уйҙан!
– Уйлама!
– Булмай.

IX

– Беләһеңме, донъяла иң ауыры – уй уйлау, бер уйҙан айбана алмау! Ул уй һыҡыр себен ише күҙгә кереп бара, баш осонда өйөрөлә, ҡолаҡ артында шыбырҙай, һине өйрәтеп өйрәтә. Теңкәгә тейеп тейә.

– Туҡта! – Мөнирә, тағы кисегеп, ишен түшенә ҡыҫа. Тегеһе сабый балалай һырығып бара, һарылып бара. Тик элеккесә сисендерергә, бисә күреп һөйөргә ашҡынмай.

«Эҫенеүе һүнде микән, ирлек ғәйрәте ҡайттымы?» – тип көйөндө хәсрәтле ҡатын. Ҡамсаның нәҫел айғырылай ҡыжраған сағына ҡарағанда әлеге хәле үтә аянyслы. Ҡамса мәймүн йәтим бала, туҡмалған ҡансай* көнөндә.

Бисәнең тәне ут, бына-бына дөрләп тоҡаныр, ә һаҡаллы сабый – битараф, гүйә, һулыған гөл... Тәненә һылаша, өшәнеп ҡалтырана, ә осҡоно юҡ, ҡарыуы ҡалмаған. «Шуға Фаҡиһаһы ла хәҙер минән көнләмәйҙер», – тип үртәлде ҡатын.

Хәтәр асышынан аҙарынды, үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәне.

...Ҡамса иһә, Мөнирә менән айырылышҡас та, теге бәхәсен дауам итте. Араға бер Мөнирә, бер Бәхтейәр үҙе килеп керә.

– Бәхтейәр, Беләҙекүлдә ятҡан балалар, тип ҡайҙан алып әйтәһең?

– Власть ҡулыңда булғас, барыһы ла хәлемдән килә, миңә ни ҡылһам да ярай, тип һананың... Иҫәп-самаларын оноттоң, хаҡ-нахағын бутаның...

– Мин шул саҡлы гонаһҡа баттыммы ни? Бөтәһе лә ил, халыҡ хаҡына ине... Яңы тормош ҡорҙоҡ, ниһайәт, ярлы халыҡ власты үҙ ҡулына алды...

– Власть бер ҡасан да халыҡ ҡулында булмаған, был – алдаҡ. Элек тә, һеҙҙең ваҡытта ла власть айырым өйөр ҡулына эләкте, ә халыҡ ситтән генә күҙәтеп торҙо. Байҙар заманындағыса, властан бик әҙ төркөм файҙаланды, улар дилбегәне, нисек яйлы, шул яҡҡа ҡайырҙы.

– Нишләп? Ә эшселәр, крәҫтиәндәр ҡайҙа ине? Совет власы уларҙың власы ине лә...

– Совет власы ла, бүтән власть кеүек, бер төркөм – номенклатура ҡулына эләкте. Улар шул яңы аппарат тирәһендә ойҡашты...

– Һинеңсә, байҙар власы шәп инеме? Һиндә шулар ҡаны аға шул...

– Ҡамса, мин уларын да маҡтай алмайым... Улар ҙа бәләкәй генә төркөм булды, үҙ аппаратын булдырҙы, халыҡтың елкәһендә ултырҙы, коммунистар ҙа, ғәҙеллек урынлаштырабыҙ Ер йөҙөндә, тип тамаҡ ярған заттар ҙа ғәҙел генә ҡоролош ойоштора алманы, тарих тәгәрмәсе кире әйләнеп, ҡабат үҙ ыңғайына ҡайтты...

– Бәхтейәр, беҙҙе лә, байҙар власын ҡабатланы, тимәксеһеңме?

– Шулай. Заманалар үҙгәрә, ҡоролош аты алмашына, синыфтар исемен үҙгәртә, ә барыбер иҙеүсе һәм иҙелгәндәр синыфы ғына асылында үҙгәрешһеҙ ҡала. Власть гел аппарат тирәһендә өйөрөлөүсе йылғыр әҙәмдәр ҡулына эләгә, ул елҡыуарҙар үҙҙәре һуңынан иҙеүсегә, халыҡты ирекһеҙләүсе синыфҡа әүерелә.

---

*Ҡансай эт — инә эт.

– Беҙ ҙә иҙеүселәрҙе ҡолатып, уларҙы алмаштырҙыҡ булып сығамы?
– Ә халыҡ һаман үҙ урынында ҡалды.
– Күпме завод-фабрика, яңы ҡалалар төҙөлдө, колхоздар ойошто...
– Халыҡ иҫәбенә, эшсе көсө, производство ҡоралдарын яңыртыу хаҡына! Ерҙә цивилизация бит, тормош алға бара, кешелек үҫешә...
– Бәхтейәр учитель, һин бик башлы әҙәм...
– Шуны тәүҙүк белмәнегеҙме ни? Шуға мине әрәм иттегеҙме?
– Шулай уҡтыр тип уйламағайныҡ.
– Хәҙер миңә, әсиргә, көнөң төштөмө?
– Һине оҙатҡас, йән тыныслығынан яҙҙым; һин минең мөхәббәтемде урланың – барыһынан ҡолаҡ ҡаҡтым... Мөнирә...
– Уға теймә!
– Ярай, был – буш бәхәс.
– Килешәм.
– Бер-беребеҙҙе аңлай башланыҡ, шай, Бәхтейәр...
– Сигенә етеп килгәндә... Ярай, бигәйбә.
Хәҙер Ҡамса үҙе менән генә гәпләшә. Был төп шөғөлөнә әйләнде. Уға берәү ҙә ҡамасауламай, бер кем дә кәрәкмәй.
– Ҡамса туған, мин яңылыштым, ахырыһы, күп хаталар ебәрҙем был тормошта. Ҡара, Мөнирә... Уны яраттым. Ни йәне менән ул... Нисек ҡулы барҙы... Мин – бисара...
«Сабый урынына таштар уйнат хәҙер – шул көнгә төштөң!» тигән өн ишетелә. Кем уны күҙәтә? Ишеме, әллә игеҙәгеме?
– Хәтәр. Мин, ахырыһы, дөрөҫ йәшәмәнем... Яңы тормош төҙөнөк, ил өсөн, халыҡ өсөн, тинек... Беҙгә ҙур власть бирелгәйне. Хәҙер дошман булып сығабыҙмы? Аслыҡта ас бисәләрҙән көлгәнмен икән – Беләҙекүл шаһит, шунда сабыйҙарым тулып ята... Мин Беләҙекүл тип йән аттым, уны сибәркәй күреп яраттым, шунда мөхәббәтебеҙ сәскә атҡайны...
Ир өҙлөгә. Хыял иле моңһоу ҡаршылай. Ҡартайған, йөҙө ҡарайған. Ныҡ сүккән, күҙҙәре төпкә батҡан. Төҫө ҡасҡан, кәре ҡайтҡан... Ул да танымай.
Ҡайҙа тороп ҡалды уларҙың шаян, шуҡ сағы? Күҙгә күренгәндәй генә итте лә офоҡҡа һеңде.
– Ҡамса, күп гонаһ ҡылдың...
– Кисер, Беләҙекүл! Һин тип өҙөлдөм...
– Мин – шаһит...
– Мин ғашиҡ бер зат ҡына инем...
– Мин – өнһөҙ, буйымда күпме сер... Һинекен дә йәшерҙем, юҡ ине сарам... Мин дә ғәйепле.
– Беләҙекүл, Бәхтейәр хаҡлымы инде? Ә мин бәндәләргә яуызлыҡ ҡына сәскәнмен булып сыға... Халыҡ, Бәхтейәргә эйәрһә, отор инеме?
– Ҡамса, быныһына минең дә башым етмәй. – Беләҙекүл уфылдай. Кеше менән бәхәсләшеүҙән ялҡа, алыҫ ятыуҙарына китә.
Ҡасандыр Мөнирә менән Ҡамса ла шулай иткәйне, ауылдан, кешеләрҙән ҡасырға, тормоштан айырылырға маташҡайны. Бәхет татынылармы?

## X

Сибәр ҡулдарын ян-яҡҡа ташлай. Эҫергән. Донъяһы онотолған, теге наҙ, ләззәт һаман дауам итә: уны ише иркәләй, әллә ниҙәр генә ҡыландырып бөтмәй. Гүйә, иҫәркәй шаян ҡоралайҙай уйнаҡлай: ҡаянан ҡаяға һикерә; һаман

айнымай. Ҡосаҡтарын йәйгән, муйынын, түшен асынған, башын ян-яҡҡа тәгәрәтә.

Әллә ул сәскәле туғайҙа иҙрәйме, әллә Беләҙекүл тулҡындары өҫтөндә бәүеләме... Күҙҙәре йомола, башы әйләнә, әллә ниндәй иркә ағым бар тәненә тарала. Ул, ахырыһы, ожмах иленә юлыҡҡан, наҙҙарға ҡойонған...

Имсе, хеҙмәтсеһеләй, артынан күҙәтә.

– Балам, берәй ерең ауыртамы әллә?

– Юҡ.

– Көноҙоно тормай ятаһың да... Шуға әйтәм... Ауырың да бар...

– Бәлхиә апай, мин бәхетле... Мин уны яратам. Һин беҙҙе ҡауыштырҙың...

– Юҡ, ҡыҙым, мин бары һине ас үлемдән ҡотҡарҙым.

– Ә Ҡамса шундай матур, мине ярата...

Мөнирә «һин беҙҙең арала йөрөнөң, беҙҙең осрашыу сәғәтен билдәләнең» тип әйтергә теләй, тағы тыйыла. Ҡарсыҡ уларҙы ҡушты, сит-ят күҙҙәрҙән араланы, ниңә йәшереп торорға? Шулай ҙа имсе хәҙер ауыҙын йома, күҙҙәрен йәшерә.

Йәштәр осраша торҙо. Волисполком рәйесе эңерҙә шыпырт ҡына килә лә керә... ә Бәлхиә ҡапҡаны элә һала, тоғро эттәй һаҡка баҫа. Волость башлығы өйҙә булғансы – ул ихатала, икәүҙе ҡарауыллай. Ҡарсыҡ күрә: ҡыҙы шат, шаян, бер ни ҙә уйламай.

– Балам...

– Ни булған? Ә, апай, ул ҙурайғандан-ҙурая, нишләргә икән? Әллә ҡайҙан күбә башланы...

– Ҡамса...

– Ул мине йәрәшә... Мин риза!

– Иҫәр, коммундар ике бисә алмай, тәртиптәре ҡушмай...

– И-и... – Ҡыҙ үкенә. – Табам...

– Иҫәр!

...Бүтән көндәрҙә күңелле йөрөй. Ише менән ҡауышҡас, эше уң килеп торғас... Ул, гүйә, бәхет күге көмбәҙҙәрендә!

– Ҡамса... Мин никахһыҙ килеш...

– Көймә!

– Беҙҙең балабыҙ буласаҡ! – Ҡыҙ тәүләп яҫҡынып ҡарай.

Бөгөн имсе етди.

– Көнө етте, ары һуҙырға ярамай!

– Көн боҙолоп тора, ел сыҡты... – Мөнирә шөбһәләнә.

– Иң уңай мәл.

Имсе убыр әбейҙәй күренә. Хәҙер ҡыпһыуырҙай бармаҡтары менән ҡармар. Филтә яҡтыһынан стена битенә төшкән шәүләләр бейешә.

Оҙаҡламай уттар һүнә, тауыштар өҙөлә.

Бисара, эсенә йыйылған тынын этеп сығарғас, күҙҙәрен аса.

– Хәҙер йоҡла!

Ел көсәйгән, эре-эре тамсылар һибәләй. Ямғыр башланып ҡына тора, ахырыһы: болоттар яҙылып китә алмай интегә, күкрәү ҙә һаңғырау, йәшен ҡамсыһы осо ла сыйылып ҡына ҡала. Ел биткә һуға, тамсылар етеҙерәк тупылдай, имсе тынмай.

Уҫал ел яр ситендәге ҡарт өйәңкеләрҙе иңкәйтә, тулҡындарҙы ярҙан былай табан ҡыуа. Баш осонда япраҡтар гөжләй, бар донъя, барса күк йөҙө шау менән тулған. Әллә ел эйәһеме туҙынған, әллә күл эйәһеме уянған? Тәбиғәт тә аҫырана алмай ҡаңғыра, етешеп тә, йөгөнән ҡотола алмай. Тулҡындар ҡубарған,

Беләҙекүл мыжыҡ ҡарсыҡтай һуҡрана. Ул төпһөҙ, күп серҙәрҙе буйына һеңдерә. Ул һатмаҫ, өнөн сығармаҫ!

Тәбиғәт үртәлде, Беләҙекүл үрле-ҡырлы һикерҙе. Иҫәүән бейә, ауыҙын шаҡарғас... Кешеләр үҙҙәре белә, үҙҙәре баш был донъяла, үҙҙәре тәртәне ҡайһылай яйлы – шулай бора. Кешеләр яуаплы! Ә уларға хөкөмсө юҡмы ни?

Бынығын белмәй Беләҙекүл, бәндәләр эшенә ҡыҫылмай... Беләҙекүл шаһит та булмаясаҡ, эйе, яуап тотмаясаҡ!

...Мөнирә кистән тағы уйланып ятҡайны. Теге ғәмәл хәтәр төш, ҡурҡыныс мәл булып ҡына уйылған йәненә.

Иртән ауылға ғәжәп хәбәр таралды: Ҡамса күлгә батҡан. «Беләҙекүлгәме?» тип үҙен-үҙе белешмәй ҡысҡырҙы шашҡан ҡатын. Теленә килгән тәү һүҙе шул булды.

Баш осона, шәүләләй, имсе баҫҡан; уртын ҡымтыған; тыны сыҡмаһа ла, күҙҙәре һата, сырайы һата...

– Ҡамса! Ҡам-м-са! – Сәсе-башы туҙған ҡатын, аҡ-ҡара айырмай, тышҡа ташлана...

## Эпилог

Хәтирәләренән ялҡа. Тағы шуларҙың осона етеп бара, буғай: йәшлеге менән хушлаша. Бөтәһе лә үткәндәрҙә ҡала. Был – уның тарихы... Уҙған ғүмерҙән бары хәтирә ҡала. Тағы: кеше үлгәс, бергә хәтер ҙә үлмәйме?

Йыш ҡына Беләҙекүл буйына бара, оҙаҡ та тормай, тиҙ үк әйләнә. Ашҡынып бара, арманһыҙ булып борола, бүтән күрмәҫтәй, бармаҫтай була. Хәтирәләре алҡымынан ала, Беләҙекүлдең йөҙөнә ҡарай алмаҫтай була. Йөрәге тулай, йәне алҡымына тығыла.

Беләҙекүл әүәлге лә, түгел дә; бары өнһөҙ ялтырай: йә шаяра, йә төҫөн боҙа. Ул оҙаҡ ваҡыт уны күрмәй, уның менән белешмәй йәшәй. Беләҙекүлдә иң ғәзиз заттары, иң хәтәр иҫтәлектәре күмелгән һымаҡ. Беләҙекүл уға – ҡәбер ҙә, хаж ҡылыр мәҙинә-мәккә ташы ла.

Кис ятһа ла, иртән торһа ла – ҡаршыһында. Терелә, тере йән эйәһенә әүерелә. Ҡайһы бер ҙә уның менән типә-тиң бәхәсләшә башлай: «Һин дөрөҫ йәшәнеңме? Ике ут араһында булдың, ике араһын бутаның – хаҡ ҡылдыңмы?» Төрлө һорауҙар яуҙыра Беләҙекүл. Ҡайһы саҡта ҡатын үҙ-үҙе менән һөйләшергә булып китә, үҙен бөтәһе өсөн ғәйеплегә сығара. Ире алдында ҡылған гонаһын таный, ғүмер баҡый шул аҙап менән йәшәй ул. Үҙ-үҙенә төбәй яуаптарын, ҡапылғара ише-игеҙәге менән бәхәсләшергә тотона:

– Улар үҙҙәре мине араларына алды!

– Һин ғәйепле: башта – Ҡамсаны, аҙаҡ учитель Бәхтейәрҙе һаттың...

– Ирҙәрҙең ғәҙәте бер! Бәхтейәр ҙә мине икенсе бисәлеккә йәрәште бит...

– Ә ул дөрөҫ әйткән...

– Беҙҙең хаҡта түгел ине уның һүҙе!

– Бәлки, ул Ҡамса менән арағыҙҙы белгәндер?

– Юҡ!

– Бары әйтмәгәндер...

– Юҡ!

– Әҙәп һаҡлағандыр...

Ҡатын иҫһеҙ. Тағы ике ҡайын араһында аҙашты: ике ире хаҡында уйы... Ике юл сатында ҡалды башы, ике ут араһында – йәне.

1949 йылда, Бәхтейәрҙе төрмәнән сығарғас, улар Орондонан кире Һатыйға

күсенеп ҡайтты. Сит-ят ерҙә лә елләтте, туйҙырҙы был сиған тормошо. Осонosҡа ялғанылар. Балалар үҙ алдарына үҫте тиерлек.

Бәхтейәр бөтөнләй икенсе кешегә әйләнеп ҡайтты. Һатыйҙа ла оҙаҡ йәшәмәне, бәрелеп-һуғылып йөрөнө лә ҡабат ситкә олаҡты. Бөтөнләй ят ине ул иленә, тамам биҙгән ер-һыуынан, үҙгәргән – әүәлге учитель Бәхтейәр түгел инде ул. Әллә ситтә йөрөп сиғанға әйләнгән, әллә төрмәлә ултырып бер зимагурға-жиганға әүрелгән?

Йәшәй-йәшәй бәндә аймылыша, үҙ иле лә уға ятҡа әйләнә. Үҙ илендә – ят бауыр, бындағылар уға сит итеп ҡарай. Бәндәнең үҙенең дә инде бында бер нәмәгә күңеле ятмай... Бүтән әйләнеп ҡайтмаҫ, күрмәҫ инде ул илен, Мәғҙәнен һағынмаҫ. Заманында ауылдаштары, «кәзә билеты» тотторол, ситкә оҙатҡайны.

Мөнирә ғүмере баҡый тиерлек яңғыҙ йәшәне. Йәшлеге онотолдо, зәңгәрһыу томандар артында тороп ҡалды. Күп ғәйептәр күтәрҙе, бихисап гонаһтарға тарыны башы. Шуға хәҙер тәсбих тартып, Хоҙайға ылығып, ҡалған көндәрен һанай. Алла бәндәһе, ҡасандан бирле, ә? Ул саҡ ул зәһәр алабарман Ғәбделнафиҡ байҙың иркә ҡыҙы түгел инеме? Сиктәрҙе аша атлап сыҡты, гонаһтарға батты. Хәҙер Хоҙай ҡашына баҫты, тәүбәләргә килде лә ни?! Һуң түгелме? Үкенәме ул, юҡмы?

Сыуалсыҡ уйҙарын бер епкә генә теҙә алмай. Тормош үҙе лә сыуалсыҡ, буталсыҡ ғәмәл бит, бер айышына төшөнөп булмай. Ул да уны аңлап бөтмәне. Йәшәне-йәшәне – йәшәп туйманы, барыбер танһығы ҡанманы, барыбер әүәлге һорауҙарына нәгеҙ генә яуаптарын тапманы.

Бына яҙмыш еле яңы хәбәрен килтергән: Дыуанда ире Бәхтейәр вафат. Иларғамы, көләргәме? Үкенергәме, йәлләргәме? Ҡайғырырға тейешме ул хәләл ире хаҡына?

Бына уларҙың тарихы тамам. Бәхтейәр менән Ҡамсаның өҙөшөүенә лә нөктә ҡуйҙы ваҡыт. Ә бәхәс өҙөлмәне, һорауҙар шул көйө ҡалды: Бәхтейәр үҙе Мөнирә менән Ҡамса бәйләнешен белдеме икән? Әҙәп һаҡлап, өндәшмәй генә йөрөнөмө? Бер тапҡыр ҙа йөҙөнә бәрмәне. Орондола ла уны «кешегә һәйбәт» ти торғайнылар... Бәхтейәр һиҙҙеме икән? Ҡотойҙарҙағы теге табында, йәне көйөп, «һеҙҙең балағыҙ ҙа – Беләҙекүлдә» тип ысҡындырҙымы?

Ә Ҡамса... Ҡарағайҙай буй-һынлы, ҡылыс танаулы ҡуңыр егет... – күңеленә шулай һеңгән. Ул берәү!.. Бүтәне булманы ла, яҙмыш уға шул һәҙиәһен генә инселәгән икән... Шул исемде ҡабатлай тешһеҙ ауыҙы, кипкән ирендәре. Шул исем менән, шул иҫтәлек менән йәшәне. Уларҙың мөхәббәте тарихы тамам.

Гел өйҙә, тәҙрә тупһаһы ҡашында ултырып та ялҡа. Тышта йылы, яҙ. Ергә тағы яңы яҙ килә, ҡоштар сутылдаша, талдар көсөкләгән – япраҡтар ярылырға етешкән. Тағы яҙ айы. Ерҙә инде нисәнсе ҡабат яңы миҙгел тыуа, тәбиғәт йәнә яңыра, ер терелә, бөрөләр күҙҙәрен аса. Ерҙә йәшәү яңынан башлана; ташҡын ҡабат һыубаҫар төбәккә йәйелгән. Бәй, Беләҙекүлде лә күмеп киткән түгелме? Беләҙекүл ер йөҙөнән юғалған, әкәмәт!

Бисара ҡарсыҡ быға һөйөнөргә лә, көйөнөргә лә белмәне. Беләҙекүл уның һөйөнөсө, әллә көйөнөсө инеме икән – ул быныһын үҙе лә асыҡ ҡына итеп әйтә алмаҫ ине хәҙер.

### *Хәтирәләр*

*Азаматтай ирҙәр ауған саҡта*
*Өнһөҙ илай ғорур имәндәр.*
*Был донъянан иртә китә һаман*
*Ерҙе йәмләр өсөн килгәндәр.*

*Хаҡлыҡ өсөн әйтер һүҙҙәрен дә*
*Тормош ваҡлыҡтары яндыра.*
*Ир уртаһы етеп нығына алмай,*
*Аҫыл ирҙәр беҙҙе ҡалдыра.*

*Ағасын да егет ултыртҡандыр,*
*Улы геүләп уйнап йөрөйҙәр.*
*Әйтер һүҙе үҙе менән китте,*
*Күңелкәйҙәр шуға әрнейҙер.*

*Башланмаған өй нигеҙе ҡалды,*
*Сәскә ғүмерҙәре өҙөлдө.*
*Атып балҡыр аҫәрҙәре генә*
*Хәтирәләр булып терелде.*

### *Ҡояштай яҡты телем*

*Башҡорт теле уйҙарымды*
*Күктәргә алып менә.*
*Туған телем хыялымда*
*Ғазап сылбырын өҙә.*

*Телкәйемдең бөйөклөгөн*
*Күңелем менән тоям.*
*Шәрбәтле, йырлы өндәрҙән*
*Һөйләм-кәрәҙҙәр ҡоям.*

*Халҡым кеүек  ҡырыҫ та ул*
*Хаҡлыҡ эҙләп әйткәндә.*
*Яҙғы елдәй йомшаҡ та ул*
*Һөйөп, наҙлап үпкәндә.*

*Әсәйемдәй берәү генә*
*Башҡортостаным, илем.*
*Башҡорт халҡын йәшәтеүсе*
*Ҡояштай яҡты телем.*

## Һөйөү йәме

*Шишмәләргә килһәм,*
*Сылтыр-сылтыр,*
*Саф хистәрем – шарлап ағыуы.*
*Урмандарға керһәм,*
*Шыбыр-шыбыр,*
*Йөрәк моңо – япраҡ ҡағыуы.*
*Йылы нурын биргән*
*Ҡояш кеүек,*
*Күңелем наҙлы, ҡайнар һөйөүем.*
*Яндарыңа түгел,*
*Уйҙарыңа,*
*Бәлки, төштәреңә инеүем.*
*Осрашыуҙар ҡыҫҡа,*
*Йондоҙҙарҙай,*
*Атыла ла ялтлап юғала.*
*Ысын һөйөү утын*
*Бер тойғандар*
*Йәшәү йәмен һаҡлай донъяла.*

## Күңелем йыры

*Уйҙарым ауырлығынан*
*Башымды аҫҡа эйеп,*
*Таңдарҙа килдем шишмәгә,*
*Күҙҙәремә йәш төйөп.*

*Ҡоштар йыры зыңлап китте,*
*Күңелемде илертеп.*
*Инешемә эйелгәйнем,*
*Ул йылмайҙы үҙ итеп.*

*Терелә һүнгән күңелем,*
*Наҙлы елдәр иҫһә лә,*
*Тәбиғәт гүзәллегенән*
*Кескәй осҡон күсһә лә.*

**Рәсимә ҒАЙСИНА.**
**Мәләүез районы, Томансы ауылы.**

## Төштәремә кер һин

*Ике йөрәк ике ерҙә тибә,*
*Бер-беребеҙ өсөн беҙ – башҡа.*
*Төн йоҡомда, кереп төштәремә,*
*Һалдың мине, һалдың һағышҡа.*

*Яҙмыш беҙҙе ҡабат осраштырһа,*
*Килмәһәң дә янға, юҡ үпкәм.*
*Бик яратһаң, төштәремә кер һин,*
*Иркәләрмен шунда мин, иркәм.*

*Сәстәреңдән наҙлап һиңә баҡһам,*
*Ҡараштарың, зинһар, йәшермә.*
*Тормошомда балҡыр бер нур булдың,*
*Йыуанысым булдың төшөмдә.*

*Яҙмышыбыҙ тағы осраштырһа,*
*Яратам, тип миңә һин әйтмә.*
*Керпектәрең елпеп бер ҡараһаң,*
*Минең өсөн бары шул етә.*
*Мин йүләрҙе, зинһар, тилертмә...*

## Хыялдарым менән

*Тыуған йортом төштәремә керҙе:*
*Бала сағым үтте – һиҙмәнем.*
*Йәшлегемдә ҡалды мөхәббәтем,*
*Төштәремдә уны эҙләнем.*

*Юҡһындыра ауылым, киске урам,*
*Йәштәр менән парлап үткәндәр.*
*Аҡлан уртаһында аҡ ҡайыным –*
*Йәшел толомдарын һүткәндәр.*

*Үҙем ситтә, күңелем һеҙҙең менән,*
*Онотorға мөмкин түгел һис.*
*Йөрәктәрҙә мәңгелеккә яна*
*Йәшлек дәүерҙәге дәртле хис.*

**Фәнил ХӨСНӨТДИНОВ.**
**Дәүләкән районы, Көрмәнкәй ауылы.**

# МОСТАЙ КӘРИМ ҺАБАҠТАРЫ

Мостай Кәрим «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесында «Бер-береңә итәғәтле, ярҙамсыл булыу, икмәктең, кейемдең ҡәҙерен белеү тигән нәмәләрҙе бөтөнләйе менән юғалтып барабыҙ түгелме?» тигән һорау менән әленән-әле уҡыусыһына мөрәжәғәт итә һымаҡ. Әҙиптең әҫәрен ҡабаланмай, һәр һөйләмде күңел, йөрәк аша үткәреп уҡыһаң, быны ң һис-шикһеҙ шулай икәненә ышанаһың. Мәҫәлән:

– Ҡылған эшең – кешегә, килгән сауабы – үҙеңә!;

– Сабыр иткән – моратына еткән (балыҡ тотҡанда);

– Арыш икмәгенән айырмаһын Хоҙай (малайҙар һөйләшә);

– Һин, оңҡот, бала-саға ҡотортоп, шыңшыма! – тип ҡырт киҫте Шәһиҙулла;

– Беҙ әҙәп һаҡлап ишек төбөндә генә торабыҙ;

– Кешенең ғүмерлек кисерештәренә ҡыҫылырға әле минең хаҡым юҡ;

– Мин, әрһеҙләнеп, Алланы артыҡ йыш борсорға тырышмайым… ул минең иң һуңғы сарам;

– Әжәл дарыуы өсөн беҙ аҡса алмайбыҙ… Хоҙайға шөкөр… Ашаған кешегә шифаһы тейһен;

– Фотограф байтаҡ йонсотто… Кешенең эше шул булғас, беҙ һуҡранманыҡ, күндек;

– Үҙем теләгән ерҙә әҙәпле генә ултыра бирәм, сабырлыҡ күрһәтәм;

– Бер ҡышҡа ҡуян тиреһе лә сыҙаған, тиҙәр (келәт иҙәненә йоҡларға һалғас);

– Киҫәкте ул һаҡ ҡына уртаға һындырып, яртыһын миңә һондо;

– Аш – ашҡа, урыны – башҡа (оло инәй Әсғәтте ҡыҫтай);

– Тик өҙөлгән өмөт менән ҡалған хәтер генә төҙәлмәй (өҙөлгән үгеҙ ҡойроғонан һуң);

– Күстәнәстең яртыһын бүлеп, Әсғәт миңә һуҙҙы;

– Бер кеҫәһен һылыуым менән ҡустыма бүлеп бирҙем, икенсеһенә теймәнем;

– Бераүгә бераү кәрәк, ҡыйыҡҡа терәү кәрәк (ике етемдең бер-беренә терәк булыуы);

– Байрам ашы – ҡара ҡаршы;

– Күрше хаҡы бар (өмәгә саҡырыу);

– Дуҫтан дошман яһарға китте (алған бурысты һорап барыу);

– Беҙҙә тәмле нәмәне бер юлы ғына ҡомһоҙланып ашай торған ғәҙәт юҡ. Беҙ уны рәхәтләнеп һурып ҡына йөрөйбөҙ.

Бына шулай. Уйлап ҡараһаң, иҫ киткесле һабаҡтар бирә яҙыусы үҙ уҡыусыһына.

Кешенең иң матур иҫтәлектәре, иң изге хыялдары, иң беренсе шатлыҡ-ҡыуаныстары уның бала сағы йәки үҫмер осоро менән бәйләнгән була. Былар бөтәһе лә, әлбиттә, ғаилә эсендә бергә үрелеп бара. Бауға бәйләнгәндәй. Йомағол әйтмешләй, «Бау булмаһа, бөтә донъя таралып төшөр ине».

Әҙәм балаһын өмөт йөрөтә. «Бер уңмаһаҡ, бер уңырбыҙ, малайҙар, әйҙәгеҙ… минең ҡоҙаға барабыҙ»,– ти Вәлетдин. Башҡорт халҡы килгән

кешене ғүмер-ғүмергә бороп сығармаған. Әле лә кем кемгә ниндәй ҡоҙа икәнен аңлашмаһалар ҙа, үҙҙәренең бер ус оно, бер һалып эсерлек сәйҙәре булмаһа ла, күңелдәре киң. Малайҙар ҙа «әҙәп һаҡлап ишек төбөндә генә тора». Хужа уларҙы ҙурлап: «Хуш килдегеҙ, түрҙән уҙығыҙ, ҡоҙалар. Бик ваҡытлы йөрөйһөгөҙ, ай, афарин»,– тип ололап ҡаршы ала. Юҡты бар итеп һыйлай. «Яҡшы һүҙ үҙе күстәнәс ул, әсәй»,– тип йыуата улы.

Донъя булғас, төрлөһө бар шул. Берәү эсеп ғаиләһенә көн күрһәтмәй, икенсеһенең ҡылығы үҙенә башҡа, ә өсөнсөһө иһә ғәрип ҡыҙ балаһына ҡул күтәрергә баҙнат итә, дүртенсеһе саманан тыш ҡаты ҡуллы атай… «Юғары ос Зыятдин… ҡарт шундай әҙәм – гармун тауышы ишетһә, енләнә лә китә… Әғзәм улы үҙенең тальянкаһынситән буйындағы кесерткән араһына йәшереп тота икән». Шуны атаһы табып алғас, «…бөтә халыҡ алдында туҡмарға керешкән… ахырҙа тегене мепеп тапаған».

Бына шулай. «Берәүҙе моңдо күҫәк менән дөмбәҫләй, икенсеһе байрамды ҡамсы менән яра. Ҡулдары ҡороғоро!» Ә кеше йәнлеләрҙе күптәр үҙ итә.

«Ярлыҡау»ҙағы Ласточкин, мәҫәлән, шундайҙар рәтенән. Ҡырҡмаһа ҡырҡ төрлө эше ярылып ятһа ла, ул бошонмай. «Хәлдән килеү-килмәүҙе уйлап мәшәҡәтләнеү уның ғәҙәтендә юҡ. Кем нимә ҡушһа, шуны үтәргә, кем нимә тапшырһа, шуны башҡарырға тырыша. Ул берәүҙең сәсен ала, икенсеһенең итегенә үксә һуға, өсөнсөһөнөң ярылған күрәк һабын йүнәтә. Бәрелә-һуғыла, абына-һөрөнә, ләкин тырышлығы бик йыш тырышлыҡ көйө генә лә тороп ҡала. Эш барып сыҡмауға ул өҙгөләнмәй ҙә, үкенмәй ҙә, үҙенә яңы мәшәҡәт таба, яңы ығы-зығыға сума. Ләкин быларҙың береһе лә үҙ мәнфәғәте өсөн түгел. Кемгәлер яҡшылыҡ эшләргә, игелек күрһәтергә тырыша». Бары тик «Леонид йөртерен, тыуған төйәген телгә алырға яратмай», сөнки ул, ата-әсәһе үлгәс, етемлектең бөтә нужаһын күреп үҫә. Әле килеп ашарҙарына бер тәғәм ризыҡ ҡалмағанда, дүртенсе көндө «хәләл юл менән» тип «ҡуйынына бер кирбес икмәк тығып ҡайта». Ысынлап та, ул уны инәлеп-ялбарып алған була. Ул икмәкте «өс ғәҙел өлөшкә бүлеп бөткәндә» бер кеше килеп инә. Ласточкин өс киҫәк икмәктең береһен Киселгә килтереп һона. Юлсыны икмәк менән сәй эсереп һыйлағас, ул үҙе менән таныштыра. Ул ас хәлендә лә булған ризығын башҡаларға бүлеп бирә. Бөтә нәмә кешенең күңел киңлегендә шул. Теләктә булһа, аҙҙы ла мул итеп була, күрәһең. Бер-береңә ярҙамсыллыҡ, ихтирамлылыҡ, иғтибарлылыҡ әҙәм балаһына йәшәү дәрте, көс, ҡеүәт бирә.

Мостай Кәримдең «Ярлыҡау» повесын уҡығанда: «Ә мин нисек йәшәйем был донъяла? Ниндәй яҡшылыҡ ҡылғаным бар? Рәнйетмәнемме үҙем менән йәнәш барған кешемде? Берәй ҡасан кемгә лә булһа ярҙам ҡулы һуҙҙыммы икән?» кеүек һорауҙар тыуа.

«Ауыл адвокаттары» повесында ла әһәмиәтле юлдар күп. Хәлфетдин күршеһе Ҡорбанғәлегә үлгәнсә рәхмәт уҡый. Ҡунаҡ-төшөмдә түренән төшөрмәй. Балаларын йыйып, васыят әйтә: «Ҡорбанғәле күршебеҙ, балалар, һеҙҙең әсәйегеҙ, һеҙҙең өләсәйегеҙ менән минең өсөн пәйғәмбәр булды. Б-и-и-к күп йылдар әүәл мине енәйәт менән хурлыҡтан, әсәйегеҙҙе, йәғни өләсәйегеҙҙе, хатта имгәнеүҙән, хатта әжәлдән ҡурсалап ҡалды ул. Арҡырыға-буйға сатнаған тормошобоҙҙо һылап-һыйпап, рәткә индереп китте… Иҫән ваҡытында уға минән һуң да хөрмәт күрһәтегеҙ… Донъя ҡуйғас, барсағыҙ ҙа ҡәберенә тупраҡ һалығыҙ… Тупраҡ ташлағас та ҡабалан-ҡарһалан таралышып бөтмәгеҙ. Баш осонда баҫып уйланығыҙ: «Был кем ине, ерҙә ниндәй изгелеге ҡалды уның?..»

«Һалмаҡ хәрәкәтле, тыныс тәбиғәтле, һәр һүҙҙе үлсәп, ипләп» әйтеүсән

силсәүит Кәшфулла һәр ваҡыт айыҡ аҡыл менән эш итә. Ил-йорт эшендә аҡылы йәки тәжрибәһе етмәгән мәлдәрендә сабырлығы, ҡатылығы йәки уҫаллығы етмәгән саҡтарында ғәзеллеге ярҙамға килә. Халыҡ менән кәңәшләшеп эшләй. «Ауыл хәстәре үҙ хәстәренә, хөкүмәт хеҙмәте үҙ хеҙмәтенә әйләнде. Ошо ҙур кәүҙәле, ауыр ҡарашлы һалмаҡ кешенең тәбиғәтенә дәрт менән сәм дә ят түгел ине. Йыш ҡына иң сетерекле эште лә, үсләшеп түгел, эстән сәмләнеп башҡарҙы».

Колхозлашыу осоро башланғас, Кәшфуллаға Булаҡтан ошондай әмер бирәләр: «Синфи көрәштең көсәйгәндән-көсәйә барыуын раҫлау өсөн тиҙ арала биш байғура табып, шуларҙы кулак яһарға; был эштә йыбаныу – аяҡ салыу тип иҫәпләнәсәк… Биш! Берәүгә лә кәм түгел! Райондың абруйын уйла. Көрәш аяу белмәй!» Ләкин Кәшфулла ерле юҡтан ғына берәүҙе лә кулак итеп оҙатыуҙы хупламай.

Бигерәк тә һауыт-һаба шылтыраған өйҙәргә ул, яйын табып, алдан хәбәр иттерер булды: «Еңгә (йәки килен) фәлән ваҡытҡараҡ самауырын көйрәтә торһон, инеп сыҡмаҡсымын». Кәшфулла был аҡылды китаптарҙан уҡып үҙләштермәне, күңеле менән һиҙенеп өлгәште уға». Ә бөгөнгөһө көндә беҙ, түрәләрҙең ишек тупһаларын атлап үтә алмай, ярҙам һорап күпме йөрөйбөҙ!?.

Ул бер ваҡытта ла байлыҡ артынан ҡыумай. Хатта йәш сағында эш эҙләп сығып киткәндә лә «алтынға мансылған манара түгел, баҡыр ялатҡан сәйнүк булып та ҡайтманы». Уның бар мөлкәте «киндер портфель, йондоҙло фуражка» була. Ул ғүмере буйы хөкүмәт эше менән саба. Уны һуңғы юлға оҙатҡанда Алдар Нурислам былай ти: «Ауылыбыҙ өҫтөнә төшкән яфаларға, ауылдаштарыбыҙ башына төшкән ғәҙелһеҙлектәргә, бәлә-ҡазаларға ҡаршы һин илле йыл буйы – һул аяғыңдың тарамышын өҙҙөргәнсе фин һуғышында йөрөгән бер ҡышыңды ла мин ошонда индерәм – эйе, илле йыл буйы, Совет власының изге мөһөрөн тотоп, таш ҡаялай торҙоң. Ҡайғы күргәндә беҙҙең менән бергә ултырып иланың. Ҡыуаныс килгәндә ҡыуанышырға форсат таптың. Йыуаш булманың, әммә ғәҙел булдың, тура булдың, әммә рәхимһеҙ булманың. Күңелең ихлас, хөкөмөң хаҡ, бармаҡтарың төҙ булды».

«Иҫән ваҡытыңда ҡәҙереңде белеп бөтөрмәнек. Үҙебеҙҙең тиҫкәрелегебеҙ, аңһыҙлығыбыҙ, йүнһеҙлегебеҙ менән илле йыл эсендә һине байтаҡ рәнйеттек. Бының өсөн үкенәбеҙ хәҙер. Ә һин рәнйемәнең, рәнйеһәң дә, һиҙҙермәнең. Кенә ҡыуманың. Бының өсөн дә рәхмәт һиңә!» Шулай… кеше иҫән саҡта ҡәҙерен белеп бөтмәйбеҙ шул. Аҙаҡ ҡына терһәкте тешләрҙәй булабыҙ…

Нурисламдың атаһы Ҡуян Шәйми ҡартты ла аҡтар бүтән ылаусылар менән бергә, күк айғырын ектереп, Эстәрле яғына алып китәләр. Юлда Шәйми сыуаш ҡарты менән таң алдынан ҡасырға һүҙ ҡуйышалар. «Атһыҙ кешене шәйләп тә тормаҫтар әле, тинеләр. Кем һуң инде үҙ атын үҙе ташлап ҡасһын?.. «Баш һау булһа, мал табылыр, тибеҙ беҙ башҡорттар»,– тип тәүәккәлләй ул. Ләкин Шәйми ҡайыш дилбегәһенән башҡа нәмәгә теймәй. «Сит ерҙәрҙә яңғыҙы тороп ҡалған ғәзиз атын талап, бөлдөрөп китергә ихтыяры ризалашманы, намыҫы ҡаршы төштө… Хужа атының башынан һөйөп хушлашманы ла (бығаса кис һайын уның башын һыйпап айырылыша ине). Баҙнат итмәне. Выжданына көс килде… Аты алдындағы хыянатын рухы һиҙҙе, зиһене төшөндө. Яҙыҡһыҙ хайуанға ҡағылыуҙы яҙыҡҡа иҫәпләне». Шулай итеп, баш һаҡлайым тип, атын ташлап китергә мәжбүр була. Атына ҡарата ҡылған хыянатын ул бик ауыр кисерә, сөнки ат беҙҙең башҡорттоң таянысы, тоғро дуҫы ғына түгел, ә ҡанаты ла булған.

Әҙәм балалары был донъяла күңелдәрен нисек кенә йыуатмай икән?

Йор, тапҡыр һүҙлелек Нурисламдарҙың тоҡомона хас сифат ул. Көндәлек тормошта, эштә, әңгәмәлә тапҡыр һүҙ, төртмәле тел, төрлө мәрәкәләр, көләмәстәр әле лә яңғырап тора. Ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йәш быуын һуңғы осор үҙ туған телен бөтөнләй онотоп бөтөп бара. Быны шулай икәнен беҙ повеста ла асыҡ күрәбеҙ. Мәҫәлән:

| Олаталары | Атаһы Шәйми | Нурислам | Штурвал улы | Ейәндәре |
|---|---|---|---|---|
| *«Юллыҡҡа илдән йыйылған иғәнә аҡсаһын ҡулына тоттороп, батшаға күстәнәскә тәғәйенләнгән бер тәпән балды яурынына йөкмәтеп, ҡиәфәте килбәтле, һүҙгә йор, уйға зирәк тип Сырлыбай атлы илгәҙәк ирҙе – әлеге Нурисламдың олатаһын, яңы сыҡҡан «сүгәнкә»гә ултыртып, тәхет ҡалаһына оҙаттылар».* | *«Ҡыйралыш барғанда, яу эсенә ярып инде лә аҡтарҙың бер атын тибеп үлтерҙе, икенсеһен имгәтеп йыкты, йәнә үрә ырғып, эйәр өҫтөндәге әфисәрҙе, ҡабырғаһынан умырып тешләп, ерга һелкеп һалды», – тип хыял донъяһына сумып, ҡатынына һөйләй.* | *«… ҡайтҡан кисте үк ул бригада йортона килеп бәйнә-бәйнә һөйләп бирҙе: «Үҙ ҡулымда уҙҙы,– тине. – Һин дә мин һөйләшеп ултырғанда, ҡапыл иҫе ауышып, иңкәйеп китте лә бына ошо беләгемә башын һалды. «Бәхил бул, тоғро һалдатым»,– тип бер генә кәлимә һүҙ әйтеп өлгөрҙө».* | *«Уның күҙ алдында, ҡара балсыҡҡа буталып күгәргән ас башаҡтар түгел, һап-һары ҡамыл төбөндә йымылдашҡан оҙон ҡылсыҡлы, туҡ бөртөклө һимеҙ башаҡтар һибелде. Шундай эреләр үҫҙәре, өсөһөн ыуһаң, бер ус тула ла ҡуя… Нурислам улы Штурвал тасуирларға оҫта ине».* | *«Ҡайһы берҙәре туған телдә «картатай» тигәндән башҡа һүҙ ҙә белмәй…»* |

Әҙип беҙҙең алға биш быуын вәкилен килтереп баҫтыра. Күреүебеҙсә, Нурисламдың ейәндәренең һәм ейәнсәрҙәренең тел-йола белмәүҙәре, әлбиттә, күңелде ҡыра. «Иман, намыҫ туған тел менән һеңә кешегә…» – ти яҙыусы.

Әҫәрҙә ҡорҙаштарҙың һөйләше лә халыҡ теле менән яҙылған. Улар шул халыҡ вәкилдәре булараҡ, телдең бөтә нескәлектәрен дә үҙҙәренә туплаған:

– Телеңә тел тейҙерерлек түгел инде. Шул телең ҡотҡарҙы бит, әй (һабантуйҙағы хәлде Ҡорбанғәле һөйләй);

– Олатайҙар йолаһынан уҙырға ярамай. Туй ғүмергә бер була. Форсат барҙа фарсит итергә кәрәк, һағынып һөйләргә ҡалыр (Ҡорбанғәле һөйләй);

– Беҙҙең силсәүит Кәшфулла Булаҡтан әйләнеп ҡайтманы. Ристауанай булманымы икән, тип ҡурҡып килдек. Илдә сыуалыш киткән икән, тип ишеттек (Нурислам Урмановҡа һөйләй);

– Әллә сырхап китте инде. Һау-сәләмәт әҙәм ҡояш сыҡҡансы йоҡлап ятмаç… (ғүмер буйы таң һарыһы менән тороп өйрәнгәс, аптырауға ҡалалар);

– Һин бында: «Ярлыларға таяныс, зарлыларға аяныс, яҡшыларға шәфҡәт ул, яуыздарға дәһшәт ул», – тип ҡобайыр йырлап бирҙең (Урманов Нурисламды әйтә);

– Ни хаҡы бар, понимаешь?!.. Абруйың, афтаритың ҡайҙа һинең? Ниңә серәкәй тешләгәнгә лә разбуй ҡысҡыраһың?.. Ниндәй ғали йәнәптәре барин булған был? (Нурислам һөйләй);

– …теге бүçерҙе әйтәм, ҡойроғон ҡыçты бит;

– Бына ошолай алма кеүек ҡатыныңдан ҡолаҡ ҡаҡһаң, ни эшләрһең, Хәлфетдин ағай? (Ҡорбанғәле һөйләй);

– Дөйәһе лә, бесәйе лә – Хоҙай малы. Эш затта түгел, абзый, заруратта (Нурислам Хәбетдин менән һөйләшә);

– Шулай буш ҡул менән китәбеҙме ни инде?.. Бынауындай өмөтлө һөйләшкәндән һуң… Утһыҙ төтөнгә сәсәп, ымһынып ҡына ҡалабыҙмы ни инде?.. (Нурислам Урманов менән һөйләшә);

– Бына һиңә аҡҡош балаһы килтерҙем. (Кәшфулла ҡатынына баланы бирә);

– Ҡулыма тейҙе лә йәнемә инде, Ҡорбанғәле. Йәнемде ярып бирә алмайым. Ярай, хәйерлегә булһын инде (Кәшфулла һөйләй).

Уларҙың бөтә тормошо халыҡ менән бергә ҡайнай. Шуға күрә лә бөтә ҡылған ҡылыҡтары, тормоштағы урындары, кейгән кейемдәре, ашаған ризыҡтары, йәшәү рәүештәре бөтәһе лә халыҡ рухы менән һуғарылған. Мәçәлән:

– … яр башына ултырып, берәр телем икмәк, икешәр йомортҡа менән тамаҡ ялғанылар. Ҡорбанғәленең эшләпәһе менән һоçоп һыу эстеләр…;

– Нурислам хәлдә барынса бөхтә генә кейенеп алды: һабантуйҙарҙа ғына донъя күрә торған ҡара буçтау салбар, күн ботинка һандыҡтан сыҡты. Кәшфулланыҡына оҡшаған киң тәрәсле зәңгәр фуражка сөйҙән төштө, алмаш күлдәк кенә табылманы… Ҡорбанғәле шул сабаталы, кейеҙ эшләпәле көйө аҡ буйлы ҡыҙыл ыштанында китеп барҙы.

– Юлға аҙыҡты үҙҙәре йүнәтте. Тоҡҡа ике түңәрәк икмәк тыҡтылар… Баллыбанаттың, сәй-шәкәрлек булыр тип, һатыр өсөн өс-дүрт көн йыйған ике тиçтәнән ашыу йомортҡаһын ҡаҙанда бешереп алдылар, сепрәк киçәгенә тоҙ төрҙөләр (Кәшфулланы эҙләп Булаҡҡа китәләр);

– Беҙҙе ултыртһаң, эш ҡала. Аҙна-ун көндән ураҡҡа төшәбеҙ. Мин үҙем урғыста эшләйәсәкмен, был иптәш – лобогрейкала. Минең малайҙар ат әйҙәй. Быйыл игендәр мул күренә, әрәмшәрәм итмәй йыйып алырға кәрәк» (Нурислам Урмановҡа һөйләй);

– Беҙҙең быдауҡа төбөндә бер ун ҡаҙаҡ арыш оно барын бар ҙа… Көмөшбикә уны ҡиәмәт көнөнә һаҡлай. Либатрҙан арыш килгәс, ҡайтарырға ышандырһаң, биреп тә торор (Ҡорбанғәле ас балаларға ышандырған он тураһында һөйләй);

– Беҙ ни, әфисәр әфәнде, сәғәт булмағас, былай ғына, сәғәтһеҙ генә маташабыҙ (Нурислам аҡтар менән һөйләшә);

– Кәрлә Нурисламды аяғынан башына саҡлы ҡарап сыҡты. Бөтә мөлкәте уның – мороно тишелгән сабата, төбө ямалған ҡыҙыл киндер ыштан, арҡаһы тоҙланып ағарған ҡара киндер күлдәк, ситтәре тишелеп бөткән күк кейеҙ эшләпә ине;

– Күмелгән һөт менән икмәк төйөнсөгөн эҙләп ыҙан буйлап китте. Аҙыҡтары ер башында уҡ ҡалған икән. Әрем төптәрен тапап, байтаҡ барҙы. Ергә тубыкланып, тәүҙә һөттө соҡоп сығарҙы… Теше менән шешә тығынын алып, бер-ике уртлауы булды, бөтә тәненә еңеллек, хозурлыҡ таралды. Шешәне түңкәреп, ҡапыл һемереп бөтөрмәне, рәхәтлекте һуҙып, тына-тына эсте. Икмәккә ҡағылманы ла (Нурислам пар ере тырмата);

– …таҙа ашъяулыҡ йәйелгән өҫтәл өҫтөнә икмәк телеп, һуған турап, тоҙ килтереп ҡуйған (Ҡорбанғәле, хәмер уртлағас, әсе һуғанды тоҙға манып ҡабырға ярата);

– Дүрт тәҙрәле бүлмәлә оҙон тәпәш эскәмйәләрҙә туғыҙ менән ун өс араһындағы егермеләп малай ултыра, һәр береһенең итәгендә шымартылған оҙонсараҡ таҡта киҫәге. Дәрес ваҡытында ул шәхси өҫтәл хеҙмәтен үтәй, дәрес бөткәс, уға ултырып рәхәтләнеп тау шыуырға була.

Тау шыуған ваҡыттар бик тиҙ үтеп тә китәләр. Танауына еҫ керә башлаған «Нурислам киске уйындарҙан таң алдынан ғына ҡайта. (Донъя ығы-зығылы тип кенә йәш-елкенсәк уйындан туҡтамай.)» Уға «Сиңерткә» урамында йәшәгән Баллыбанат оҡшай. Дуҫлыҡ ептәре мөхәббәткә алып килә. Улар өйләнешәләр. Атаһынан башҡа сығып, үҙ донъяларын ҡороп ебәрәләр. «Йәштәр тиҙ аяҡҡа баҫтылар. Баллыбанат та егәрле, йортлоҡло булып сыҡты. Алты йыл эсендә өйҙән ҡураға ике малай, бер ҡыҙ имгәкләп сыҡты». Хужа үҙе лә эшкә талымһыҙ булды. Йәштән «Алдар, атаһына иш булып, ылау сапты, ҡалаға китеп атлы кәсептә йөрөнө». Ләкин эштең дә бит үҙ яйы, көйө бар. Быуындар ултырып, нығынып бөтмәҫ алда ауыр күтәреү бер ҙә яҡшыға түгел. Ни эшләйһең инде, ярлы крәҫтиән тормошо әҙәм балаһын аямай шул. «Малай саҡта атаһы менән ылау йөрөгәндә көсө етер-етмәҫ көйө ауыр тоҡтар күтәреп, бүҫер сиренә һабышып ҡалғайны». Ә инде малай саҡтағы таҙын, ярай әле, «бында һөргөндә йәшәгән поляк докторы, тегенең сәсен эҫкәк менән берәм-берәм йолҡоп, таҙына һаҫыҡ май» һөртөп бөтөрә. Нурисламдың башы шулай рәткә керә. Хатта, һирәгерәк булһа ла, яңы сәс тә сыға.

Мостай Кәрим әҫәрҙәрендә һәр кем уйланыр, фәһем алыр тәрбиәүи урындар бик күп. Бында яҙыусы айырым бер шәхесте генә лә түгел, ғөмүмән башҡорт халҡының тормошон, көнкүрешен сағылдыра. Мәҫәлән:

– Бала-сағалары күренмәне, ҡунаҡ тирәһендә сыуалманылар, күрәһең, – инсафлыға өйрәткәндәр;

– Димдә боҙ ҡуҙғалған көндө ерләнек Ғариф ағайҙы. Урыны ожмахта булыр, тиҙәр ҡарттар;

– … кешенән түгел, атынан оялды. Әммә килгән халыҡ өсөн аҙбар ҡапҡаһын яптыртманы;

– Бер әйтә башлағас, әйтәйем, бирнәбеҙ ҙә наҡыҫыраҡ…;

– Ҡунаҡ алдында әйтеүгә ғәйепләмә… Был хәлгә төшөргәне өсөн халыҡ та уға рәхмәт әйтмәҫ;

– Ҡолоштарҙың яман нәмәгә хәтер һай уларҙың;

– Ҡолоштар әүәл-әүәлдән яҙыу менән эш итергә әүәҫ түгел. Әҙәм өҫтөнән ҡайҙалыр, кемгәлер ошаҡ яҙыуҙы белмәйҙәр тиерлек;

– Иртәнге сәйҙән һуң… падишаһыбыҙ ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына былай тине…;

– Ҡырҡ йыллап Ҡолоштан яҙма ялыу сыҡманы;

– Нурислам менән никахтары олораҡ булған өсөн, ул Баллыбанатты «еңгә» тип йөрөтә;

– Эңер төшөп, аяҡ аҫты һил булғас, Ҡорбанғәле ете малайға көндөҙ вәғәҙә иткән көлсәлек ондо төрлө урамдағы ете өйгә бер-бер артлы таратып сыҡты. Һәр өйҙә балалар йоҡлар-йоҡламаҫ көтөп ултыра ине;

– Көмөшбикәне …саф көмөшкә сығарҙылар;

– Тол ҡалған ҡатындар ирҙәрен ҡәбергә тиклем оҙата бармайҙар, сабырлыҡ күрһәтәләр;

– Ҡолош халҡы саҡырыулы туйға, саҡырыуһыҙ баҙарға ихлас йөрөй;

– Һәйбәт кеше ине был. Ауыр тупрағы еңел булһын;

– Кешеләр, йола үтәп сират үткәреү өсөн генә түгел, ҡайғы бүлешеп, берберeһен һүҙһеҙ йыуатыу өсөн килгән бында;

– Һин тере ваҡытта беҙ ҙә һәйбәтерәк

күренергә, хурлыҡҡа ҡалмаҫҡа, насарлыҡҡа бирешмәҫкә, боҙоҡлоҡҡа төшмәҫкә тырыштыҡ;

– Ҡолошта һинән башҡа урлашыр кеше юҡ;

– Был хаҡта шул яуыз Моратшанан башҡа хәтерләүсе лә юҡтыр;

– Әҙәп һаҡланылар… Инсафлы кешеләрҙә сама була шул;

– Уның бер ғәҙәте бар: һабаҡ белмәгән өсөн хәтерһеҙ миңрәүҙәргә асыуланмай ҙа, ә зиһенлерәк ялҡауҙарҙың, осоноусан отҡорҙарҙың, башлы әрпештәрҙең, сәбәбе сыҡҡанда, тетмәһен тетә;

– Рәнйетеп яҙыҡ алыуҙан ҡурҡты;

– Мин һуҡырайҙым бит, хәҙрәт, мине илдән ҡыуҙырма инде… – Һине рәнйетмәҫтәр…;

– Әшәке таҡмаҡтар телдән тиҙ төштө;

– Бисмилланды өйөндә ҡатыныңа йышыраҡ ҡабатла. Бүтәндәргә нәфсең кәмер;

– Ирҙән уҙып, мин ни әйтәйем… – тине Сәғиҙә тыныс тауыш менән;

– Ялғанға хәйер алыу харам. Һыйхөрмәтегеҙ өсөн рәхмәт!

– Хәйерҙе лә ул, күберәк һонһалар, артыҡ тапҡанын ҡайтарып бирә. Хоҙай разый булмаҫ…;

– Мин уларҙы ҡыуып сығарам, ә ул миңә ихлас теләк теләй…

Яҡшылыҡтың серен Мостай Кәрим ейәне Тимербулатҡа ла әйтеп ҡалдыра:

*Юл биргән кешегә рәхмәт әйт. Юҡһа, был бик ғорур йәки иҫәр икән, тип уйларҙар. Ике ҡуллап бир, бер ҡул менән ал. Һинең бөтәһе лә етеш буласаҡ һәм күңелең байрам итәсәк.

*Мәскәү күҙ йәштәренә ышанмай, тиҙәр. Ә һин кеше күҙ йәштәренә ышан, сөнки һин Мәскәү түгел.

*Минең теләк: Тимербулатты һунар ҡошо итеп түгел – быны өсөн беҙҙең мөмкинлектәр юҡ – ә йырсы ҡош итеп үҫтерергә кәрәк. О, ундай ҡоштарға нисек ауыр буласаҡ!

*Кешеләрҙе аҡыллы һәм ихлас һүҙҙәр менән генә ҡыуандырма, яҡшы ҡылыҡтар менән дә шатландырырға тырыш. Һин бәләкәй саҡта беҙ һинең алда тапҡыр йәки көлкөлө һүҙҙәрендән аптырауҙы күрһәтмәнек, ә һинең ҡылыҡтарыңды баһаланыҡ һәм һинең алда шатландыҡ. Яҡшы эш-хәрәкәт менән оҙатылмаған иң яҡшы һүҙ ҙә күңелле уйын-көлкө, мәҙәк кенә ул.

*Юл осонда дуҫтарыңды юғалтмаҫҡа тырыш, башланғанда төрлөһө булыуы ихтимал.

*Бер ваҡытта ла икенсе рейсҡа өмөтләнмә, үҙеңдеке менән ос.

*Һине хәтерләһендәр тиһәң, үҙең башҡаларҙы онотма. Онотһалар, башҡаларға кенә тотма, улар быны насар холоҡтан йәки хәтерҙәренең насар булыуынан эшләмәй, тимәк, һин үҙеңдең эшең, һүҙең, тәртибең менән уларҙың иҫтәренә төшөрөп тормағанһың.

Тимәк, был донъяла йәшәү мәғәнәһе, йәшәү маҡсаты – ул яҡшылыҡ ҡалдырыу. Кеше ғүмере йылдар иҫәбе менән түгел, ер йөҙөндә, кешеләр күңелендә ҡалдырған игелеге, яҡшы эштәре менән үлсәнә икән.

Шулай итеп, кеше ғүмере буйы камиллыҡҡа ынтыла. Әхлаҡи яҡтан камиллыҡҡа, физик яҡтан сәләмәтлеккә, рухи байлыҡҡа ынтылыу фәҡәт үҙтәрбиә нигеҙендә генә бара. Кеше иң элек үҙен аңлап, үҙмаҡсат билдәләп, шул маҡсатын тормошҡа ашырырға ынтылырға һәм быны өсөн мөһим булған бөтә сифаттарҙы үҙләштерергә, ихлас башҡарырға тейеш. Донъяны, үҙеңде, туғандарыңды, кешеләрҙе, эшеңде ихлас яратыу һинең йәшәйешеңә ыңғай йоғонто яһар.

**Лилиә БАСИРОВА,**
**Благовещен ҡалаһының**
**5-се урта мәктәбе**
**уҡытыусыһы.**

## КҮКТӘРГӘ ЯҘЫЛҒАН ЕР ЯҘМЫШЫ

*(Әсхәл Әхмәт-Хужаға 70 йәш)*

Ғибрәтле лә, көнләшерлек тә, әйләнеп ҡараған һайын өҙөлөп һағынырлыҡ та бер заман ине ул – илленсе йылдар!.. Ил-Ватан донъяның иң яуыз дошманын дөмөктөрөп, яраларынан арынып килә. Оло яуҙан иҫән-аман ҡайтып, түккән ҡара тирҙең тәүге һөҙөмтәләрен күрә башлаған, бисә-сәсәгә нисәмә йылдан һуң күкрәгенә терәп икмәк телеүҙәренә шатланып йылмайыусы ир-ат, дүрт йыл буйы яу ҡамытын тылда тартҡандар менән йәнәш егелеп, һуғыш «ҡолаҡтарынан тартып ир иткән», тиҙҙән әҙәбиәт мисәүенә инәсәк Атнабай, Марат, Рафаэль, Рәмиҙәр быуыны. Өҫ кейемдәре наҡыҫ булһа ла, ниһайәт, тамаҡтары туя башлаған малай-шалай, бөгөнгөләрҙе хайран ҡалдырырлыҡ демографик шартлау: һәр йорт һайын тип әйтерлек 4-5, хатта унан да күберәк бала-саға... Һәм ошо уҡ ваҡытта әҙәбиәт, сәнғәт өлкәһендә башланып, һуңынан бөтә тормошҡа үтеп керә башлаған – имшенеү дәүере (оттепель), самалы, үлсәп-үлсәп кенә бирелһә лә, оло өмөттәр уятҡан иреклек һыҙаттары... Уға бәйле уй-хыялдар, ашҡыныуҙар...

Әсхәл Әхмәтҡужиндың «Һыбай сыҡтым» исемле тәүге китабы (1968) ошо оҙаҡҡа бармаған рухи талпыныу-өмөттәрҙе эсенә алған шиғырҙарҙан туҡылған ине.

*Күңелдәрем күккә күтәрелә,*
*Йәйғор буйлап, гүйә, еләмен,*
*Әйтерһең, мин – дуҫтар менән түгел –*
*Уйҙар менән ярышып киләмен.*

«Эйәренә тарих төйнәп елгән» («Бәйге» шиғыры), «тормошта урын даулап», «ваҡыт менән көсөн һынашырға» («Һыбай сыҡтым» шиғыры) сапҡан лирик герой, ысынлап та, замандың талпыныш-ынтылыштарына ауаздаш ине. Шуның менән ул уҡыусы һәм тәнҡитселәр күңелен яулап, арбап, тиҙ арала яңырып килеүсе әҙәбиәттең алғы сафына, тиҫтерҙәренең рухи теләктәше булып килеп баҫты. Ошо дөйөм күтәрелеш тулҡыны Әсхәл Әхмәтҡужинды шағир – тиҫтерҙәре менән бергә үҙ быуынының хис-тойғоларын шиғри юлдарға һалған заман шаһиты итте. Бер үк ваҡытта был юлдарҙа имшенеүҙең ауыҙлыҡланған, «волюнтаризм һәм субъективизм» хөкөмөнә дусар ителеп, өмөттәрҙең хыялға ғына әйләнеүе лә һиҙелгәйне.

Шулай ҙа тарих биреп өлгөргән форсат-мөмкинлекте нисек булһа ла дауам итергә тырышыу инерцияһы шағирҙың икенсе китабында ла сағылыш тапты.

«Бәйге» исемле был китап, ысынлап та, йәш шағир яҙмышында онотолмаҫлыҡ урын биләй.

Хәтеремдә: Яҙыусылар союзы поэзия секцияһының һәм «Ағиҙел» журналы редакцияһының берлектәге ултырышында тикшергән саҡта авторҙың тиҫтерҙәре тарафынан да, оло ҡәләмдәштәре тарафынан да ҡулъяҙма рәүешендәге «Бәйге» йыйынтығы художество һәм эстетик кимәл йәһәтенән өр-яңы бер үҫеш-күтәрелеш тип нарыҡланды, 60-сы йылдар аҙағында нәшриәттә Муса Ғәли, Кәтибә Кинйәбулатова, Ғилемдар Рамазанов, Әнғәм Атнабаев, Рәми Ғарипов, Марат Кәримов, Рафаэль Сафин, Ғабдулла Байбурин, Муса Сиражетдиновтарҙың донъя күргән ыҡсым ғына форматлы бәләкәс томиктары серияһында баҫтырып сығарыуға тәҡдим ителде... Ләкин, хәйерсегә ел ҡаршы тигәндәй, нәҡ шул осорҙа ҡыҙыу ҡанлы Әсхәл, өлкәнерәк йәштәге бер әҙиптең мыҫҡыллауына түҙә алмай, саялыҡ күрһәтеп, ғәйепле тип табылды ла, юғары власть органдарының туранан-тура ҡушыуы буйынса, ҡаты тәнҡиткә юлыҡты, дөрөҫөрәге, шағирҙың үҙе лә, уның бар ижады ла утҡа тотолдо. (Әсхәл ғаиләһе менән Өфөнән күсеп китергә мәжбүр булды.) Һөҙөмтәлә «Бәйге» йыйынтығы 4-5 йылға һуңлап нәшер ителде. Хатта баяғы ултырышта маҡтау һүҙҙәре яуҙырған бәғзе ағайҙар, ҡырҡа рәүештә 180 градусҡа боролоп, уңайы тыуған һайын «Бәйге» китабын тетеүгә һалышып китте. Шулай итеп, «Бәйге» биттәренә төшкән күләгә һаман да, традиция буйынса, һөйрәлеп килеүен дауам итә әле.

Унан һуң, ул дәүерҙең йәнә бер касафатын ситләп үтеп булмай. Көн дә тип әйтерлек трибуна-сәхнәләрҙән сығыштарҙы дыу килеп алҡышлап тороуҙары, партия-совет етәкселәренең хуплап яурындан һөйөп алыуҙары – былар, бөгөн күпме генә көлкө тойолмаһын, үтә лә ылыҡтырғыс, мауыҡтырғыс халәт ине заманы өсөн. Мөһабәт буй-һыны, көр тауышы теләһә кемде әсир итерлек, төҫ-ҡиәфәте менән мәшһүр йырсы Мөслим Магомаевты хәтерләтеп торған кешене күҙ алдына килтерегеҙ әле! Был – олпат әҙиптәрҙең фатихаһын алған Әсхәл Әхмәт-Хужа ине! Етмәһә, уның «Бәйге» китабында Ленин исеме әллә нисә мәртәбә ҡабатланып ҡына ҡалмай, шағирҙың улының теле «атай», «әсәй», ә аңы «Ленин» тигән һүҙҙәр менән асыла икән дәһә. Ниһайәт, ул дәүер өсөн үтә лә актуаль һуғыш темаһы һәм шиғриәтте икенсел фактҡа әйләндерә торған хәл – әҙәбиәт-сәнғәттә инде һүрәтләнгән күренештәрҙе ҡабатлап сығыу («Хиросима таштары», «Мәңгелек ут» һ.б.). Хатта тыуған Башҡортостан, Әбйәлил яҡтары ла китапҡа шулай кәрәк булған өсөн керетелгән «сувенир» тема булараҡ та ҡабул ителгәндәй тойола.

Ошондай шарттарҙа, табыш булыр образдарҙан йөҙ сөйөрөп, ул дәүерҙә үтә лә йәтеш шағир-трибун, шағир-публицист булып китеү ҡулай булыр төҫлө ине. Һәр хәлдә, актуаль темаға арналған әҫәрҙәр араһында шағирҙың ижади йөҙөн асырҙайҙары йомолоп ҡалыуы ихтимал ине. Ҡайһы юҫыҡта эшләргә? Тәржемә ителгән Литва шағиры Эдуардас Межелайтис әҫәрҙәре аша Көнбайыштың ирекле шиғырҙарына мөрәжәғәт итергәме, йә иһә Шота Руставели, Ҡайсын Кулиев, Рәсүл Ғамзатов, Урта Азия шиғриәте аша Көнсығыш әҙәбиәте традицияларына барып һыйынырғамы?

Шуныһы асыҡ: «Бәйге» китабы авторҙы өс юл сатына баҫтырҙы. Етмәһә, бая әйткәнемсә, донъя хәлдәре уны үҙе күптән түгел уҡып, йәшәп киткән Стәрлетамаҡ ҡалаһына күсеп барырға мәжбүр итә.

Әле йәнә бер юл төҫмөрләнеп кенә килә. Ул да булһа – халыҡ ижадының ҡобайыр традицияһына, уның бер нисә алымына ғына нигеҙләнгән поэтикаһынан тәрәнгә, төпкә үтеп инеү хәжәтенең артҡандан-арта барыуы. Быны ла ҡабаланмай-һуңламай эшләргә кәрәклеге.

Әммә «Бәйге» китабында ла, «Һыбай сыҡтым»дағыса, ашҡыныу-талпыныу, эҙләнеү- ынтылыштар, артабан үҫтерелер уй-фекерҙәр, сыуаҡ көндәр килеү менән асылып китер гөлдө хәтерләткән тасуирҙар шаҡтай ине. «Ямғыр», «Ярһыу», «Ғаләм ауырлығын тойғанға», «Ир кеше», «Ашҡаҙар буйы иҫтәлеге», «Һинһеҙ саҡта» әҫәрҙәре нәҡ шундайҙарҙан. Ә ун юллыҡ ҡына «Ҡанун» үҙе үк донъялыҡтың иҙеп-сисеп булмаҫлыҡ сиктәрен аңлауҙан тыуған доға-антҡа бәрәбәр ине:

*Көл – уҡмашып,*
*Күмер ҡоршалып –*
*Ҡабат ҡайын булмаҫ:*
*был – ҡанун.*
*Ә гөл эсһә ,*
*Тамсы – боҫланып –*
*Ҡабат яуын булмаҫ:*
*был – ҡанун...*
*Ел сөйөртөр көлдө – туҙҙырып,*
*Ер серетер гөлдө – туңдырып...*
*Тик ҡанун бар:*
*Гөлдән һәм көлдән*
*Яңы шытым сығыр тиҙ көндән!*

Бәхеткә күрә, Әсхәл был ауыр хәлдә һығылып төшмәне. Бөгөлһә лә, һынманы. Әҙәбиәткә хеҙмәт итеүҙе тормош көтөү менән бер итеп, йәнә Өфөгә әйләнеп ҡайтты ул һәм шиғриәтенең яңынан-яңы үҙенсәлектәрен асты. Иң мөһиме, саҡ ҡына абстракт рәүеш алған тыуған ил, торған ер төшөнсәләренең тәғәйен шиғри берлеге табылып, шағирҙың тыуған төйәге Әбйәлил образында бер бөтөн булып һынланды. Был да бит – оло рухи-фәлсәфәүи ҡаҙаныш. Тыуған илдең тыуған ерҙән башланыуын әҙәби асыш дәрәжәһенә күтәреү, уларҙың үҙ-ара бәйләнешен аңлау-һүрәтләү шағирға күк менән ерҙе бер бөтөн итеп ҡабул итеү мөмкинлеген асып ҡына ҡалманы, уны ижади, рухи тарлыҡта бикләнеп йәшәү ҡурҡынысынан ҡотҡарҙы.

Әбйәлил, уны уратып алған тауҙар, Ҡыҙыл йылғаһы, Себер яҡтарына уҡ барып тоташҡан далалар, был ерҙәрҙә донъя көткән затлы шәхестәр Әсхәл Әхмәт-Хужа ижадына урғылып килеп кереп, ил яҙмышын үҙ булмышы менән бәйләгән төбәк икәнен асыу – был йылдарҙа шағир тапҡан рухи таяныстың иң мөһимдәрелер.

Әүәлге шиғырҙарҙа ла ул тойғо юҡ ине, тип әйтеү дөрөҫ булмаҫ. Бына икеләтә матур образды эсенә алған, бары тик шәхси тәжрибәгә генә таяныу һөҙөмтәһендә яҙылыуы мөмкин булған образ: «Урамдарҙа апрель сабып йөрөй, ялан аяҡ малай шикелле». «Урамдарҙа апрель сабып йөрөй» тигәне ҡыштың зыҡы һалҡындарынан ялҡып бөткән кешенең яҙҙы яңырыу-йәшәреү итеп ҡабул итеүенә матур ишара булһа, «апрель – ялан аяҡ малай» метафораһы автор үҙе кисергән тойғонан ғына тыуа. Ни тиһәң дә, бөгөн апрелдә түгел, июль селләһендә лә ни ҡалала, ни далала ялан аяҡ йөрөгән баланы күрә алмаҫһың. Тимәк, 1964 йылда барлыҡҡа килгән «апрель – ялан аяҡ малай» образы, Һаҙый Таҡташтың «Моҡамай» поэмаһындағы балалар кеүек, ҡабатланмаҫ тарихи символ булараҡ күҙаллана.

Әсхәл Әхмәт-Хужа ижадында йылдар, йәшәйеш менән бергә үҙгәреүсе лирик

герой образынан ҡала, «роль лирикаһы» тип аталған шәхесте осратыуы ҡыйын. Шуға ла авторҙың «мине» менән уның геройы араһында арауыҡ юҡ дәрәжәһендә. Берҙән-бер осраҡ тип геройҙың ауыл кешеһе – игенсе ҡараштарын үҙ итеүен атарға мөмкин. Әммә был һыҙат та лирик геройҙың шәхси сифаттарына әүерелеп бирелә. Күк йөҙөнөң романтикаһына ерсел буяуҙар өҫтәгәндә лә, йондоҙҙарҙың балҡышына яңы төҫтәр үргәндә лә фәҡәт тырышлыҡтың, түҙемлектең баҫҡысына баҫыу мотлаҡ; болоттоң өрпәк кенә һабын күбегенә оҡшаш икәнен иҫләп тороу шағирҙың илһам ҡошон һәр саҡ уяу һаҡлай.

Бына мөхитте ер кешеһе күҙлегенән баһалау-күҙаллауҙың матур бер өлгөһө буларлыҡ ҡыҫҡаҡ ҡына әҫәр. «Тыуған ҡырҙарымда» тип аталған был шиғырҙа бойҙайҙарҙың быуын быуыр сағында, ер-ҡырҙың дымға сарсап, йыллыҡ түл йыйған ваҡытында ҡараштарын күктән алмаған игенсене күргәндәй булаһың.

*Әллә шуъа,*
*Мәлен белгән кеүек,*
*Болот ҡайта елен тирттереп,*
*Көтөү-көтөү ҡайта –*
*Ер туйъансы*
*Һуыҙ һөтөн тора һиптереп.*

Күктәге ямғыр болото менән һыйыр елене араһында ниндәй уртаҡлыҡ бар һуң? Бар икән шул, һәм быға автор көтөү төшөнсәһе образы аша, тулышҡан имсәк һиптергән һөт һәм ҡойоп яуған ямғыр араһындағы уртаҡлыҡты һүрәтләү аша ирешә. Ә һөҙөмтәлә күңел хушлығы, муллыҡ, тыныслыҡ бәреп торған күренеш барлыҡҡа килә.

«Кесе Ватандың» асман менән бер юҫыҡта, уртаҡ һулыш-яҙмышына төшөнөү дуҫты – дошмандан, ваҡытлыса мауығыуҙы – ысын мөхәббәттән, боғаҙ йыртып һөрәнләүҙе ысын ижадтан айырып ҡарарға, донъяны айыҡ күҙ менән күрергә ярҙам итә. Романтик «толпар юлында осрар йомран оялары» булыу ихтималлығын күҙаллау («Толпарым» шиғыры), Әсхәл ижадына әүәл бик осрап бармаған йылан, ишәк, ер йыртыусы сусҡа образдарының килеп инеп, даими урын алыуы ла тәрән мәғәнәгә эйә. Улар – тормоштоң ҡатмарлы, күп ҡырлы булыуына ишара булып ҡына ҡалмайынса, лирик герой кисерер һәм кисергән һынауҙарҙың билдәһе лә ине.

Хатта шағир шаҡтай йыш ҡулланған алым – шиғри һүҙҙе ҡабатлау(рефрен) иҫәбенә уның мәғәнәһен тәрәнәйтеү аша ла донъялыҡтың әсе хәҡиҡәтен асыҡларға ынтылыу көсәйә. «Сама бел, Сама бел. Аҙға ла риза бул», – тип киҫәтә ул һәм ҡомһоҙлоҡ өҫтөнлөк иткән донъяның мәғәнәһеҙлеген «байман», «хайуан», «вайран», «сайран» һүҙ теҙмәһе аша, боронғо тәзкирә жанрына мөрәжәғәт итеп һүрәтләй. Заманында Аҡмулла яҙғанса, әҙип «аңҡаулыҡтың юлдашына әүерелгән ялҡаулыҡты ғына» ҡамсылап ҡалмай, «бар хандар ҙа хаин булмаһа ла, бәғзе бер хан барыбер хаин була» тип өҫтәп ҡуя.

«Әбйәлилде данлау – илде данлау» икәненә иманы камил шағир рухи киңлектәр даулай:

*Илде һөйөү өсөн мотлаҡмы ни*
*Йәбешеп ятыу айырым ырыуъа?!*
*Көйҙө, моңдо, телде бүлгеләүҙәр*
*Тарытмаҫмы милләт ҡороуъа?! –*

ти ул әсенеп.

Әсхәл Әхмәт-Хужаның, ололарға адресланған төп ижад йүнәлешенән тыш, сабый балаларға арналған әҫәрҙәре – үҙҙәре бер донъя, үҙҙәре айырым тикшереү талап иткән өлкә.

Әгәр ҙә мәгәр бөгөнгө постмодернистарҙың берәйһе балаларға тәғәйенләп шиғыр яҙыр булһа, сит ил фильмдарындағыса, әллә ниндәй убыр-шайтан, кеше яфалаусы покемондар, үрмәксе йә себен-күгәүенгә әүерелә торған заттарҙы килтереп ҡыҫтырып бөтөр ине. Әсхәл Әхмәт-Хужа бында ла әҙәп һаҡсыһы, мәҙәниәт таратыусы вазифаһын онотмай. Сабый менән сабый күңелен аңлап, уның тәбиғәтенә яҡын һүҙҙәр менән эш итә.

Бөгөнгө заман балаһының күҙаллауын, аң-донъяһын иҫәптә тотоп эш иткән хәлдә, тәнәйҙәрҙең күңелендә изге кешелек орлоҡтары сәсеп-үҫтерергә тырыша ул. Һәм маҡсатына ирешә, сөнки бында ла  һүҙ ҡәҙерен белгән шағир ижад итә. Миңә ҡалһа, оло шиғриәт менән балалар әҙәбиәтен бер иткән һыҙат шунда ла инде.

Һәр һүҙҙә әҙәми заттың яҙмышы-булмышы, бөгөнгөһө, киләсәге, ҡыуанысы һәм хәсрәте сағылыш таба. Сабыйға ошо оло хәҡиҡәтте сабый телендә һүрәтләп бирә белеүҙе маһирлыҡ-оҫталыҡ тимәй, нисек атап булыр икән! Ошондай нескә зауыҡ менән ижад ителгән «Ямғыр тамсыһы. Веселый дождик» тигән ике телле (билингвистик) китабынан бер генә хәрефкә арналған әҫәрҙе уҡып ҡарайыҡ:

«Халҡыбыҙ – хазина! Хайранмын халҡыма! Хөрмәтем, хәстәрем, хыялым, хистәрем – халҡыбыҙ хаҡына, халҡыбыҙ хаҡына!»

Күренеүенсә, был шиғыр «Х» хәрефенә арналған.

Ә «Т» хәрефенә арналғаны 146 һүҙҙән ғибәрәт, ләкин төп һүҙҙәр ҙә, ярҙамсы һүҙҙәр ҙә – һәммәһе лә һис бер тайпылышһыҙ фәҡәт «Т» хәрефенә башлана. Ә шиғыр үҙе шундай еңел үлсәмле – ритм уйнап-бейеп кенә тора: балалар «һә» тигәнсе ятлап алырлыҡ. Ә йәйғор хаҡында йыр гөлләмәһе балаға бер юлы башҡорт һәм рус телен уҡыу-үҙләштереү мөмкинлеге аса. Бер нисә йөҙ мең тираж менән нәшер ителеп, мәктәптәргә таратылған бындай йыйынтыҡ бына тигән методик ҡулланма булып сыҡҡан.

«Азамат менән ҡуян балаһы» циклында шағир-педагог тағы ла арыраҡ киткән. Бында ул башҡорт фольклоры өлгөһөндә ижад иткән шиғри әкиәттәрҙең руссаға үҙ тәржемәләрен йәнәшәлә сәсмә итеп биргән. Был алым уҡыусы һәм бигерәк тә уҡытыусы алдында яңынан-яңы мөмкинлектәр аса. Һүҙҙең шиғри яңғырашын йәнәш бирелгән текстарҙа һаҡлап ҡалырға тырышып (Оҙонаяҡ – длинноног һ.б.), хатта диалект һүҙҙәрҙе индереүҙән дә ҡурҡмайынса (Озерный бапак – хозяин озера һ.б.), шағир уҡыусыға ҡурай, башҡорт балы тураһында ҡиссалар тәҡдим итә, халыҡ тарихынан башҡа риүәйәттәр килтерә.

Шатлыҡ менән хәсрәттең, һөйөнөс менән көйөнөстөң берлегенән торған донъяның бәрәкәтле Әбйәлил тупрағында ла, Башҡортостанда ла, барса тарафта ла уртаҡ икәнен тәрән аңлап ижад иткән Әсхәлде һәм уның уҡыусыларын һәр юҫыҡта яңы асыштар көтә әле.

**Рәйеф ӘМИРОВ,**
**филология фәндәре докторы,**
**Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге БДПУ профессоры.**

# КАЛУГАЛА ЙӘШӘЙ ҠӘЛӘМДӘШ



Башҡортостандың Ауырғазы районы Талбазы ауылында тыуып үҫкән Салауат Ғәзим улы Әсфәтуллин ун дүрт йыл инде Калуга ҡалаһында йәшәй. «Атайым — башҡорт, әсәйем — татар, шуға ике телдә лә яҡшы аралашам, ә яҙма телем — урыҫса, — тип барлай ҡәләмдәшебеҙ үҙ биографияһын. — Техника, сәйәсәт, сәнәғәт буйынса өс вуз тамамланым, байтаҡ йылдар Бөтә Союз трестарында, дәүләт ойошмаларында эшләнем. Тәүге мәҡәләм ҡырҡ йыл элек Өфө нефть институтының күп тиражлы гәзитендә баҫылды...»

Шунан бирле яҡташыбыҙҙың ҡулынан ҡәләме төшкәне юҡ. Йыйып ҡына әйткәндә, бөгөн С. Ғ. Әсфәтуллин — ундан ашыу фәнни-экономик, тарихи-документаль, фәлсәфи-публицистик брошюралар һәм китаптар авторы, РФ Журналистар союзының профессиональ оҫталыҡ өсөн премияһы (2002 й.) лауреаты. Исемдәре үк авторҙың киң ижади ҡоласын күҙаллата: «Инфляция һәм дәүләт», «Илдең иҡтисади хәүефһеҙлеге», «Библия һәм Ҡөрьән»... Шулар араһынан «Северные амуры в Отечественной войне 1812 года» бәйәнен, «Братство по оружию. 1812 год» тигән очерктар тупланмаһын айырыуса билдәләү фарыз, сөнки был китаптар үҙебеҙҙә баҫылды һәм хәҙер, Ватан һуғышының 200 йыллығы уңайынан, ҙур һорау менән файҙаланыла. Рус һәм башҡорт казактарының ҡаһарманлығын, ғәскәри дуҫлығын данлаусы был китап йөҙләгән тарихи документ, гравюра һәм литография, картиналар, репродукциялар, алыштар картаһы, походтар схемалары менән биҙәлгән. Иң мөһиме, уларҙың байтағы республикабыҙҙа беренсе тапҡыр донъя күрҙе.

...Нәфис әҙәбиәт майҙанына Салауат Әсфәтуллин нәҡ Калугала атланы, тиергә мөмкин. Бында ул өлкәлә сыҡҡан альманахтарҙан Мәскәү матбуғатына тәүәккәл юл ярҙы һәм ун дүрт йыл дауамында ғына ла йөҙгә яҡын гәзит һәм журналдарҙың даими авторына, хатта РФ Дәүләт Думаһының «Российская Федерация сегодня» журналының Калуга өлкәһе буйынса үҙ хәбәрсеһенә әүерелде, өлкәнең «Литератор» исемле ижади берекмәһенә,

шулай уҡ «Калуга литературная» альманахына нигеҙ таштарын һалышты.

Рус телендә сыҡҡан «Как молоды мы были...», «Литературные портреты» (I һәм II) баҫмалары менән Салауат үҙен һәләтле прозаик итеп танытҡайны заманында, бөгөн иһә шул оҫталығын баҙыҡлата бара. Телгә алынған I һәм II йыйынтыҡтарҙы уҡығас, Мостай Кәримдең авторға хат аша ифрат ихлас баһалама ебәргәне лә мәғлүм: «Ыҡсым китаптарыңдан шуны тойҙом: дөйөм алғанда һеҙ — һәләтле кеше, күңел күҙе менән күреүсе зат. Һеҙ һәм Һеҙгә оҡшаш кешеләрҙең бөтән замандаштарға бигүк аңлашылып бөтмәүе лә ихтимал. Әммә бындай кешеләр күңел төптәрендә донъяның сиселмәгән серҙәрен, әҙәм балаһының асылмаған уйхыялдарын һаҡлай. Улар был серҙәрҙе үҙҙәренә еребеҙ бушап ҡалмаһын, кеше рухиәте һайыҡмаһын өсөн туплай. Ул сер иһә кешелектең йәшәйештән барыһын да яулар өсөн алып барған аяуһыҙ көрәшенән йыйыла».

Эйе, юбилярҙы үҙебеҙгә ҡарағанда Калуга, Мәскәү тарафтарында нығыраҡ таныйҙар. Быға ғәжәпләнерлек тә түгел. Уның тылсымлы ҡәләме тарафынан күләме менән ыҡсым, буяуҙары, фекере менән тос һәм баҙыҡ егерменән ашыу Рәсәй әҙибенең һәм рәссамының ижади портреты яҙылған. Улар араһында — Станислав Куняев, Владимир Потоцкий, Людмила Филатоваише күренекле прозаиктар һәм шағирҙар, Валентин Алексанов, Татьяна Вавржина ише рәссамдар, Виктор Вдовенков һымаҡ арҙаҡлы журналистар. Шуныһы, портреттарында автор үҙе һайлаған шәхестәрҙе күккә күтәреп маҡтамай ҙа, мәгәр уларҙың эске һәм тышҡы булмышын философ-психолог призмаһынан ҡапыл-ҡара шәйләнмәгән ситуациялар аша аныҡ һәм нескә тасуирлай.

Әле Салауаттың илһамы мулҡып торған мәл! Мәҫәлән, ошо арала «Русская история» журналы башҡорттарҙың Мәскәү батшалығына ирекле ҡушылыуы хаҡында дәлилле мәҡәләһен баҫмаға әҙерләгән. Һуңғараҡ «Подвиг» журналының «Кентавр» ҡушымтаһы «1812 —1814: Казактар» тигән киноэпопеяһын сығармаҡсы. Сценарий өҫтөндә авторҙың алһыҙ-ялһыҙ өс йыл эшләүе мәғлүм.

Йәйҙәрен модалы эшләпә, ҡара «күбәләк»ле күлдәк, аҡ костюм кейергә ярата Салауат. Ҡыҫҡаһы, эстән дә, таштан да һөйкөмлө яҡташыбыҙға алтмышынсы ғүмер артылышында иң матур теләктәр күндерәйек.

**Сабир ШӘРИПОВ.**

## ЗАМАНЫНЫҢ ШАНЛЫ ЙЫРСЫҺЫ

*(Шамун Фидаиҙың тыуыуына 110 йыл)*



Шамун Фидаи (Ҡасим Мөхәммәтйән улы Шакирйәнов) 1902 йылдың 15 июнендә Ырымбур ҡалаһында һөнәрсе ғаиләһендә тыуған. Бер-ике йыл иҫке дини мәҙрәсәлә уҡығас, ул 1916 йылда, атаһынан ҡасып тигәндәй, Өфөгә килә һәм «Ғәлиә» мәҙрәсәһенә инә. Бындағы «Милли көй, сәхнә һәм әҙәбиәт» түңәрәгенә йөрөй, шиғырҙар яҙа башлай.

Октябрь инҡилабын Шамун Фидаи Өфөлә ҡаршылай. Ул революцияға тиклем үк урындағы коммунистар менән бәйләнешкә инә, большевистик «Алға» гәзитендә улар рухындағы шиғырҙарын, нәҫерҙәрен баҫтыра. 1919 йылда Өфө һәм Бәләбәй ҡалаларында 5-се армияның сәйәси бүлегенең органы «Ҡыҙыл яу» гәзите редакцияһында эшләй, бер нисә тапҡыр фронттың алғы һыҙығында була.

1920 йылда Шамун Фидаи Өфөгә ҡайта, «Йәш коммунист» һәм «Йәш көс» тигән комсомол гәзиттәренең мөхәррире була. Комсомолдың Өфө губерна комитетында яуаплы эштәр башҡара.

Шамун Фидаи ошо уҡ йылда комсомолдың III Бөтә Рәсәй съезына делегат итеп һайлана. Ләкин съезға китер алдынан, июнь айында, ул кулактар тарафынан йырткыстарса үлтерелә.

Шағирҙың әҙәби мираҫы ҙур түгел. Ул башлыса «Алға», «Ҡыҙыл яу», «Йәш коммунист», «Ҡыҙыл юл» һәм башҡа гәзиттәрҙә баҫылған шиғырҙарҙан, нәҫерҙәрҙән, публицистик мәҡәләләрҙән ғибәрәт. Был әҫәрҙәр Башҡортостанда инҡилап һәм Граждандар һуғышы йылдарының ялҡынлы һулышын, ҡаһармандарса пафосын тойҙороуы менән, заманының шанлы һәм фажиғәле ваҡиғаларын тасуирлауы менән ҡиммәт.

**Әхмәт МӘХМҮТОВ.**

# БАҪАЛҠЫЛЫҠ, ЕГӘРЛЕЛЕК МЕНӘН

*(Раил Байбулатовтың тыуыуына 75 йыл)*



Күренекле прозаик, Сергей Чекмарев исемендәге премия лауреаты Раил Фәтхелислам улы Байбулатов Көйөргәҙе районы Яманғол ауылында 1937 йылдың 2 июнендә тыуған. Мораҡ педагогия училищеһын, Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлай. Оҙаҡ йылдар Башҡортостан китап нәшриәтендә, Башҡортостан Яҙыусылар союзы аппаратында эшләне.

Әҙәбиәткә ул, бик күптәребеҙ кеүек үк, журналистика аша килде. Студент сағынан уҡ район, республика матбуғаты менән даими бәйләнеш булдырғайны. Ҡыҫҡа ғына хәбәрҙәр ебәрер ине. Аҡрынлап һүрәтләмәләр, очерктар яҙыуға күсте, хикәйәләргә тотондо. Нәшриәттә эш башлағас, тәржемәләргә ваҡыт бүлгеләне. Урыҫ (А. Фадеевтың «Ҡыйралыш» романы, мәҫәлән) һәм донъя әҙәбиәтенән байтаҡ әҫәрҙәрҙе башҡорт теленә ауҙарҙы.

«Әсәйемдең алсаҡ йөҙө» исемле тәүге китабы 1972 йылда нәшер ителә. «Иң ауыр фән» (1983), «Оҙайлы имтихандар» (1988), «Оятыңдан үлмәй тор» (1993) йыйынтыҡтарындағы повесть-хикәйәләрендә, «Кисеүҙә гармун тауышы» (1990) романында үҫмерҙәрҙең рухи яҡтан нығыныуы, шәхес булараҡ быуынға ултырыуы һүрәтләнә. Дөйөмләштереп әйткәндә, ундағы геройҙар өсөн намыҫ алдындағы һынауҙан да хәтәрерәк, ауырыраҡ имтихан юҡ. «Дала таңдары» (1991) романы ябай халыҡтың Бөйөк Ватан һуғышы һәм унан һуңғы осорҙағы фиҙакәр хеҙмәтен сағылдыра.

Раил Байбулатов драматургия өлкәһендә лә уңышлы эшләне. Уның «Йәрем минең — Алиһәм» (1993), «Фатихамды бирмәй китмәм» (1995) драмалары, «Хөкөм көнө» трагикомедияһы бөгөн дә көнүҙәк иҫәпләнгән проблемаларҙы сағылдыра.

Тормошта ла, ижадта ла баҫалҡылыҡ, тыйнаҡлылыҡ, егәрлелек менән айырылып торҙо ҡәләмдәшебеҙ.

**Таһир ҒӘБИТОВ.**

# ТЕЛ БАЙЛЫҒЫ – КҮҢЕЛ БАЙЛЫҒЫ

Һуңғы ваҡытта тел ғилемендә этнолингвистика һәм лингвокультурологияға иғтибар артты. Лингвокультурологик концепция менән М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультеты деканы Л. Х. Сәмситова шөғөлләнә. Лингвокультурологик концепцияға ярашлы, һүҙ тел берәмеге генә түгел, ә мәҙәниәт концепты булараҡ та ҡарала, улар аша тел шәхесе менталитеты формалаша. Лингвокультурологик йүнәлештәге уҡытыуҙың йөкмәткеһен һайлағанда туған телдең халыҡ педагогикаһында, көндәлек тормошта, мәҙәниәттә, әҙәбиәттә сағылыш тапҡан милли үҙенсәлеге алға ҡуйыла.

Шундай әҙәп-әхлаҡ мәсьәләләрен күтәргән, уҡыусыларҙың йәш үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып яҙылған әҫәрҙәрҙең береһен — Раил Байбулатовтың «Күңел күҙҙәре» хикәйәһен уҡыусылар йылы ҡабул итә. Был юҡҡа түгел, сөнки хикәйәлә мәктәп тормошо һүрәтләнә. Тарих дәрестәрен яу ҡырында күҙе һуҡырайып ҡайтҡан Уғатар ағайҙың нисек үткәреүен үҙе лә уҡытыусы булып эшләгән Раил Байбулатов оҫта педагог-психолог булараҡ һүрәтләй. Хикәйәнең төп проблемаһы — балаларҙың нимә яҡшы, нимә насар икәнлеген уҡыу ваҡытында үҙҙәре төшөнөүе, холоҡтарының формалашыуы.

Әҙип һуңғы ваҡытта тормоштоң үҙәгендә торған етди мәсьәләне күтәрә. Был мәсьәлә бөгөн, бөтә халыҡ күңел байлығына ҡарағанда матди байлыҡҡа өҫтөнлөк биргән заманда, айырыуса актуаль. Хикәйәнең атамаһынан уҡ күренеүенсә, төп урында «күңел» һүҙе тора. Әҫәрҙе уҡыр алдынан «Нимә ул күңел?» тигән һорауға атаәсәләре башҡорт, татар булған етенсе класс уҡыусылары «весело» тип яуап бирҙе. Уҡып бөткәс, әһә, күңел «весело» ғына түгел икән, тигән һығымтаға килделәр. Хикәйә өҫтөндә эшләгән ваҡытта, «Күңел — кешенең эске рухи донъяһы, хис-тойғоһо, уй-фекере» тигән һығымтаға киләбеҙ. Туған телебеҙҙәге «ихлас күңелдән», «күңел аҙығы», «нескә күңел», «күңел төшөнкөлөгө», «тынғыһыҙ күңел», «күңел байлығы» кеүек нығынған һүҙбәйләнештәрҙе дәфтәргә яҙып ҡуябыҙ. Күңел һүҙенең йән, йөрәк, рух, дәрт, хис һымаҡ һүҙҙәр менән синонимдарын табабыҙ.

Үҫеп килеүсе быуындың эске күңел донъяһын байытыуҙа, күңел байлығын үҫтереүҙә Раил Байбулатовтың әҙәп-әхлаҡ темаһына яҙған әҫәрҙәренең әһәмиәте ҙур. Яҙыусы көндәлек тормоштоң ябай ғына хәлдәрендә балаларҙың эш-ҡылыҡтарын һүрәтләп, ситтән ҡарап тороусы уҡыусыларға нимә яҡшы, нимә насар икәнлеген аңлата.

Беҙ йәшәгән көндәрҙән шаңдауы алыҫлаша барған Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары ла бармаҡ менән генә һанарлыҡ, уларының да күбеһе халыҡ араһына сығырлыҡ хәлдә түгел. Ветеран уҡытыусы Уғатар ағайҙың, һуҡырмын, ғәрипмен тип өйҙә генә ятмай, әүҙемлек күрһәтеп, киләсәк быуынға белем биреүе аша балаларҙың күңелендә һуғышҡа ҡарата нәфрәт тойғолары тәрбиәләнә. Дәрестә уҡытыусының күҙҙәре күрмәүенән файҙаланып, шуҡлыҡтар эшләүгә әүәҫ Хәмзә Яҡупов исемле малайға ҡарата уҡыусылар насар ҡылыҡһырлама бирмәй. Хәмзә дәрестә, уҡытыусының күрмәүенән файҙаланып, асыҡ торған китапты уҡып яуап биреүенең насар икәнлеген ваҡытында аңлап, уҡытыусыһынан ғәфү үтенә, журналға үҙ ҡулы менән үҙенә «бер»ле билдәһе ҡуя. Яугир уҡытыусының күҙҙәре күрмәһә лә, күңел күҙҙәре аша уның малайҙы ваҡытында урынына ултырта алыуы арҡаһында, Хәмзә малай шуҡлыҡтарын туҡтата, хатаһын аңлай.

Автор мөмкинлектәре сикләнгәндәргә ҡарата ла миһырбанлы булырға, уларға күңел күҙҙәре аша бағырға ярҙам итә. Юҡҡа ғынамы халыҡ мәҡәле «Күңел күҙе күрмәһә, маңлай күҙе күрмәй» тимәй.

Балаларҙы битараф ҡалдырмаҫтай ваҡиғаларҙы һүрәтләгән әҫәр, һәр ҡылығы менән үҙенә йәлеп итерҙәй аҡыллы һәм изге күңелле, көслө ихтыярлы һәм теремек Уғатар ағай образы оло тәрбиәүи әһәмиәткә эйә.

Туған телде өйрәнгәндә, уҡыусылар телдең, грамматик байлығынан бигерәк, образлылығын, матурлығын күреү аша үҙҙәренең рухи донъяһын байыта. Был уларға тормошта үҙ урындарын табырға ярҙам итәсәк.

**Бүләк ИСМӘҒИЛЕВА,**
**Салауат ҡалаһының 14-се мәктәбе уҡытыусыһы.**

ИМЕН БАЛА САҠ ҺӘМ ҒАИЛӘ ҠИММӘТТӘРЕН НЫҒЫТЫУ ЙЫЛЫ 2012 ГОД БЛАГОПОЛУЧНОГО ДЕТСТВА И УКРЕПЛЕНИЯ СЕМЕЙНЫХ ЦЕННОСТЕЙ

# Бала күңеле — аҡ ҡағыҙ

Ни сәсһәң – шуны урырһың, ти халыҡ. Мәҡәлдең тура мәғәнәһенән бигерәк, кинәйә менән әйтелгәне йышыраҡ ҡулланыла. «Ниндәй бала тәрбиәләһәң, киләсәгең дә шундай булыр» тигән мәғәнә һалына уға. Бала – ата-әсәһе өсөн йыуаныс, терәк кенә түгел, тоҡомдо дауам итеүсе, илде тотоп тороусы, нығытыусы, кәрәк икән – ҡурсалаусы ла. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ғаиләгә мөнәсәбәт йәһәтенән тотороҡлолоҡ быуаттар буйы һаҡланып, билдәле традициялары булған Көнсығыш йәмғиәттәренән айырмалы, беҙҙә үҫеп килеүсе быуынға ҡарата урынһыҙ тәжрибәләр үткәрелеп, ата-бабаларҙан ҡалған, һәр яҡлап сәләмәт рухлы быуын тәрбиәләргә булышлыҡ иткән ғөрөф-ғәҙәттәр юҡҡа сыҡҡан. Ул төрки халыҡтарға ғөмүмән хас булмаған балалар баҡсаһы, балалар йорто кеүек социаль институттар тормошонда, белем биреү системаһында, ғөмүмән, йәшәү рәүешендә күпләп күҙәтелә. Ә ҡанға һеңгән ныҡлы традициялары булмаған халыҡтың тотороҡло ғүмер итергә һәләте самалы. Был фекер түбәндәге факттарҙа айырыуса асыҡ сағылыш таба.

*Башҡортостандағы ғаиләләрҙең яртыһы – бер-ике кешелек. Ике балалы ғаиләләрҙең һәр икенсеһе мохтажлыҡ кисерә. Республикала 13 меңләп ғәрип бала теркәлгән. 19 мең социаль етемдең 90 проценты – ата-әсәле. Рәсәйҙә үҫмерҙәрҙең һәр бишенсеһе күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән. Үҫмер малайҙарҙың – 40, ҡыҙҙарҙың 30 проценты спиртлы эсемлектәр менән мауыға. Һәр 100 мең үҫмерҙең өсөһө үҙ ғүмеренә ҡул һала. СПИД менән ауырыусыларҙың күпселеге – 30-ҙан да йәш. 2011 йылда һирәк осраған ауырыуҙар исемлеге 87-нән 230-ға еткән. Үҫмерҙәрҙе 12 йәштән енәйәт яуаплылығына тарттырыу тураһында закон әҙерләнә.*

Был юлдарҙан һуң хуш күңеллелек тойғоһо кисереү мөмкин түгел. Кемдәрҙәлер, бәлки, автор буяуҙарҙы ҡуйыртып ебәргән, тигән фекер ҙә уяныр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, юҡ, киреһенсә, мин фажиғәгә тиң факттарҙың бер нисәһен генә атаным. Ғәмәлдә улар күберәк, тик шуныһы бәхәсһеҙ: улар кемдеңдер усал ниәте менән йәки буш урында барлыҡҡа килмәгән, барыһы ла йәмғиәттең хәлторошона, ундағы йәшәү рәүешенә, кәйефтәргә һ.б. бәйле. Килтерелгән факттар, әлбиттә, өлкәндәрҙе уйланырға мәжбүр итер, юҡһа уларҙы телгә алыу ҙа кәрәкмәҫ ине. 2012 йыл Башҡортостанда Имен бала саҡ һәм ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу йылы тип аталған өсөн генә лә түгел. Балалыҡ имен булмаған йәмғиәттең иртәгәһе томанлы.

Ғәфү ителгеһеҙ, киләсәктә бик ныҡ үкендерерлек хаталарҙы йәмғиәтебеҙ самаһыҙ күп ебәрә. Күрәһең, балаларҙың ысынлап та киләсәгебеҙ икәнлеген ҡолаҡ осона ла элмәйбеҙ. Балалыҡты яҡлау йәһәтенән күрелгән сараларҙан әсәлек капиталын, етемдәрҙе уллыҡҡа йәки ҡыҙлыҡҡа, патронат тәрбиәгә алыу кеүек ғәмәлдәрҙең индерелеүен ыңғай күренеш тип атамағанда, үҫеп килеүсе быуын тирәләй тотош проблемалар төйөнө барлыҡҡа килгән. Әлбиттә, кисә йәки

былтыр ғына түгел, ә күпкә элегерәк. Уларҙың иң мөһимдәрен атап үтәйек: тәне һәм рухы һау-сәләмәт балалар йылдан-йыл кәмей, ғәрип балалар, киреһенсә, күбәйә; ата-әсәле социаль етемдәр сафы арта; енәйәтселек был төркөмгә әүҙемерәк үтеп инә; үҫмерҙәрҙең үҙ ғүмеренә ҡул һалыуы ғәҙәти күренешкә әүерелә бара.

***

Ауырыуҙан сирле тыуа. Ни өсөн? Һорауға яуап табып, йоғонтоло сараларҙы хәстәрләмәгәндә, йәмғиәттең упҡынға килеп терәлеү ихтималлығы көслө. Быйыл февраль аҙаҡтарында Өфөлә «Потерь нет» тип аталған яман шеш ауырыуына дусар ителгән балаларҙы халыҡ-ара яҡлау көнө уҙғарылды. Уйлап ҡараһаң, үҫеп килеүсе быуын һәм быуат афәте араһында ниндәй бәйләнеш булыуы мөмкин? Балалар бит яңы тормош башлап тора! Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был көн 2001 йылдың сентябрендә үк имен Европаның Люксембург ҡалаһында иғлан ителгән, имеш. Балаларҙа яман шеш ауырыуы ҡайҙан барлыҡҡа килә: көндән-көн хәүефлерәк була барған экологиянанмы, башлыса ярым фабрикаттарҙан, тимәк, төрлө, шул иҫәптән зарарлы ҡушылмаларҙан торған туҡланыуҙанмы, ата-әсәләрҙең наркотиктар ҡулланыуы кеүек яман ғәҙәттәрҙәнме? Өфө ҡалаһы Дим районының 110-сы балалар баҡсаһына йөрөгән ике бала ғәрип тип табылған. Балаларҙың бер өлөшөндә теге йәки был аҙыҡ-түлеккә аллергия күҙәтелә, сөнки балалар баҡсаһы директоры Людмила Никитанованың һүҙҙәренә ҡарағанда, әсәләре ауырлы саҡта зарарлы ашамлыҡ йәки эсемлек ҡулланған. Ә бит бындай хәл бөгөн дә дауам итә, мәҫәлән, магазиндарҙа, айырыуса супермаркеттарҙа боҙолған, хатта һаулыҡ өсөн зарарлы аҙыҡ-түлек һәм эсемлектәрҙең һатыуға сығарылыуы тураһында хәбәрҙәрҙе телевидениенан йыш ишетергә мөмкин. Быйыл мартта БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы күрһәтмәһе буйынса 44 меңгә яҡын 14 йәшлек үҫмерҙең сәләмәтлеген тикшереү ваҡытында 5 меңләбенең, йәғни 11,7 процентының ғына һау-сәләмәт булыуы асыҡлана. Ошо хәбәрҙе баҫып сығарған «Комсомольская правда» гәзите, һәр унынсы үҫмер – хроник ауырыу, 1 проценты – ғәрип, тип яҙа. Иң ныҡ таралған ауырыуҙар ашҡаҙан-эсәк юлында, иkenсе урында – һөйәк-мускул системаһы (умыртҡа һөйәге кәкрәйеү күберәк ҡыҙ балаларға хас) һәм күреү органдары. Һуңғыһы, әлбиттә, компьютер йоғонтоһо, ти баҫма.

Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының Балалар фонды (ЮНИСЕФ) мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Рәсәйҙә 50 меңдән ашыу балаға СПИД ҡағылыуы хәтәр хәл түгелме ни?! Тағы бер быуат афәтенең таралыуы буйынса Рәсәй Европала иң ҙур масштаблы кризис кисереп, был сиргә тарығандар көн һайын 100 кешегә арта. Дөйөм алғанда, халыҡтың 1 проценты ВИЧ инфекцияһы йөрөтә икән, тимәк, үҙенсәлекле инкубатор бар, һәм ул үҙ эшен атҡара. Был йән эйәләренең 80 проценты – 15 – 30 йәштә. Документта әйтелеүенсә, һәр яңы осраҡтың 43 проценты бала табыу йәшендәге ҡатын-ҡыҙҙарға тура килә. Ә улар ысынлап та сирле бала тыуҙырыуҙы гонаһҡа һанамай.

Тыумыштан ғәрип, хирургик операцияға мохтаж балалар тураһында телевидениенан көн һайын ишетергә мөмкин. Белдереү, әлбиттә, сабыйға сит илдә, ғәҙәттә, Германияла йәки Израилдә операция яһатыуға аҡса йыйыу өсөн бирелә. Март баштарында, мәҫәлән, «Аргументы и факты» аҙналығы Йошкар-Ола ҡалаһында йәшәүсе Арсений тураһында күләмле мәҡәлә баҫтырҙы. Арҡа мейеһе зарарланған, аяҡтары ҡатып ҡалған сабый йәшәү менән үлем араһында көрәшеп, ике йәш ярымға еткән. Арсенийҙың температураһы 38 – 39 градустан төшмәй, шуға күрә уға дарыу эсерәләр. «Көн дә ҡаҙалған инъекцияны малай һиҙмәй ҙә», – ти автор. Сабыйға Германияла операция яһарға мөмкин, ләкин уның өсөн 50 мең евро йыйып тапшырырға кәрәк. Ни өсөн сит илдә, ниңә Рәсәйҙең үҙендә,

Икенсе Донъя һуғышында фашизмды ҡолатҡан дәүләттә, уға хәл етмәй? Ғәжәп бит.

Хәсрәтле мәғлүмәт бының менән генә бөтмәй, сөнки тыуаһы көн өрәңыларын өҫтәп тора. 2012 йыл башына илдә рәсми теркәлгән һирәк ауырыуҙар 87 булһа, хәҙер 230-ға еткән. Нимә ул «һирәк осрай торған ауырыу»? Әлбиттә, заман медицинаһына билдәһеҙе! Ундай ауырыуҙарҙы дауалау – ә уларҙың ғүмерлеккә булыуы ла ихтимал – өсөн ҡиммәтле дарыуҙар кәрәк, ти белгестәр. Ни өсөн ҡиммәтле? Сөнки һирәк осрай һәм дарыу етештереүселәргә лә үҙ сығымдарын нисектер ҡапларға кәрәк. Рәсми булмаған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, бындай сирҙәргә дусар ителгәндәр илдә 1 миллион самаһы. Дауалауға бирешмәгән был ауырыуҙарҙың хәлен ниндәйҙер дәрәжәлә еңеләйтеү өсөн быйыл федераль ҡаҙнанан уларға 12 миллиард һум бүлеү ҡаралған. Һирәк ауырыуҙарҙың тәбиғәте, белгестәр фекеренсә, башлыса хромосомаларҙың боҙолоуына бәйле. Ә хромосомалар нилектән боҙола? Бынығы ысынлап та милли фажиғәгә торошло, сөнки бындай күренеш өсөн организмдың көслө, мәҫәлән, экологик йоғонтоға дусар ителеүе шарт.

Йоғошло ауырыуҙарҙың тиҙ таралыуын белгестәр балалар һәм үҫмерҙәрҙең үҙаңы емерелә барыуы менән аңлата. Мәҫәлән, сифилис кеүек енси юлдар аша таралған сир үҫмерҙәр араһында өлкәндәргә ҡарағанда ла йышыраҡ осрай. Икенсе Донъя һуғышынан һуң башҡорт ауылдарында ла күпләп таралған эскелек үҫеп килеүсе быуын өсөн афәткә әйләнде. 2000 йылдан һуң, мәҫәлән, иҫәптә торған 14 йәшкә тиклемге алкоголиктарҙың 1,6 тапҡырға артыуына башҡаса аңлатма табыуы ҡыйын. Артабан да ошолай дауам итһә, сирлеләрҙе дауаларға һау кешеләрҙең ҡалмауы ла ихтимал.

Бала хоҡуҡтары буйынса БР вәкиле мәғлүмәттәре буйынса, республикала 13 меңләп ғәрип бала иҫәпләнеп, ҡайһы берҙәре йылдар буйы түшәктә хәрәкәтһеҙ ятыуға дусар ителгән, сөнки ғәриплек дауалауға бирешмәй. Был – ысынлап та үҙ балаһына ғүмерлек яза биргән ата-әсәләр һәләкәте! Балаларҙа мейе ишемияһы, үҙәк нервы системаһы зарарланыу, бауыр ауырыуы, астигматизм, олигофрения кеүек ауырыуҙар тарала, ти рәсми статистика. Бындай патологияның ата-әсәләрҙән генә бирелеү ихтималлығын буласаҡ ата-әсәләрҙең күпселеге, наҙанлығы арҡаһында, уйына ла килтермәй. Бала хоҡуҡтары буйынса БР вәкиле Марина Скоробогатованың фекеренсә, этика һәм ғаилә тормошо психологияһын мәктәп программаһына индергәндә, бәлки, ниндәйҙер ыңғай үҙгәрештәргә иҫәп тотоп булыр ине.

БМО белгестәре фекеренсә, Рәсәйҙә балаларҙың һаулығын нығытыуға тотонолған ҡаҙна сығымдары үҙен аҡламай. Беҙҙең үҫеп килеүсе быуынды улар социаль яҡтан ҡыйырһытылған төркөмгә индереп ҡарай. Совет власы тарафынан күп көс түгеп еңелгән туберкулез, мәҫәлән, бөгөн һәр 100 мең баланың 19-ын яфалай. Балаларҙың һәр дүртенсеһенең генә күкрәк һөтө менән алты айға еткәнсе туҡланыуы ла ошоға булышлыҡ итмәйме икән? Сөнки ундай сабыйҙарҙың иммунитеты көсһөҙ була.

Тыумыштан ауырыу балалар һуңғы һигеҙ йылда ике тапҡырға тиерлек күбәйгән. Ундайҙарҙың күплеге ата-әсәләрҙең яман ғәҙәттәре эҙемтәһе икәнлеген әйткәйнек инде. Был йәһәттән, ысынлап та, ҡолағыңды үрә торғоҙорлоҡ мәғлүмәттәр бар. Украинаның УНИАН Интернет баҫмаһы, Рәсәй Фәндәр академияһының Социаль-иҡтисади тикшеренеүҙәр институты мәғлүмәттәренә һылтанып яҙған аналитик мәҡәләнән күренеүенсә, беҙҙең илдә 6 миллион – психик ауырыу, 5 миллион – наркоман, 6 миллион – СПИД йөрөтөүсе, 37 – 42 миллион алкоголик бар. Һәр яҡлап рекорд! Үрҙә аталған ЮНИСЕФ мәғлүмәттәренә ярашлы, үҫмер малайҙарҙың –

40, ҡыҙҙарҙың 30 проценты спиртлы эсемлектәр ауыҙ итеүҙән баш тартмай, һәр унынсыһы иһә наркотик тәмләп ҡараған. Үҫмерҙәр араһында тәмәке тартыу буйынса Рәсәй – донъяла дүртенсе. Һуңғы йылдарҙа Өфөлә бындай ғәҙәте булмаған балалар, моғайын, ҡалмай баралыр. Тәмәкесе «гүзәл зат»тар кеүек. Был зарарлы күренеш киңерәк таралмаһын өсөн, балаларға һәм үҫмерҙәргә сәләмәт тормошта йәшәргә өйрәтергә кәрәк, ти фонд белгестәре. Ләкин Рәсәйҙең һаулыҡ һаҡлау системаһы, улар фекеренсә, йәштәр алдындағы яңы проблемаларға ҡаршы торорға һәләтһеҙ. Марина Скоробогатова, ғаилә ҡиммәттәре тураһында телевидение аша һөйләргә кәрәк, тиһә, беҙҙең зәңгәр экрандар (әлбиттә, федераль каналдар) эскесе һәм тәмәкесе супермендарҙы күрһәтә икән, ниндәй ыңғай һөҙөмтәгә өмөтләнергә мөмкин?

Бала күңеле – аҡ ҡағыҙ. Унда өлкәндәрҙең йәшәү рәүеше яҙыла барып, бала күңеленә һеңә, нығытыла. Балаларҙың күпселеге шуға күрә ата-әсәһенең ҡылыҡтарын, тормошҡа ҡарашын, йәшәү рәүешен ҡабатлай. Дөрөҫ, иҫкәрмәләр ҙә булғылай, әммә бик һирәк. Әгәр «Рәсәйҙә балалар тәмәке тарта, спиртлы эсемлектәр ҡуллана, һимеҙлектән яфалана» икән, был ата-әсәһенән күскән ғәҙәт түгел, тип кем иҫбатлай ала? «Социологтарҙың мәғлүмәттәренә ҡарағанда, ил халҡының яртыһы самаһы сәләмәт тормош тип ваҡытында һәм туйғансы йоҡлауҙы, яҡшы туҡланыуҙы иҫәпләй». Был ике мәғлүмәт быйыл 15 мартта Мәскәү ҡалаһында үткәрелгән «түңәрәк өҫтәл»дә телгә алынды. Һаулыҡты тормош өҫтөнлөктәренән дүртенсе урынға ҡуйыусылар хатта юғары уҡыу йорттары студенттары араһында ла осрай.

2011 йылдың 25 октябрендә Башҡорт дәүләт педагогия университетында үткән наркомания мәсьәләләренә арналған Бөтә Рәсәй ғилми-ғәмәли конференцияһы материалдарынан күренеүенсә, үҫмерҙәр үлеменең 5-6 проценты наркотиктар менән ағыуланыуға бәйле. РФ Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, һуңғы ун йылда наркомания сире ҡағылған балалар 10 тапҡырға күбәйгән. Наркотиктарҙың үлемесле йоғонтоһо шундай: героиндан мәңгелеккә арына алғандар, мәҫәлән, 10 проценттан да артмай, ҡалғандар яҡты донъя менән мәңгелеккә хушлаша. Хушлаша, ләкин эстафетаны иҫәндәргә ҡалдыра: атап үтелгән министрлыҡтың Наркология ғилми-тикшеренеү институты мәғлүмәттәренә ярашлы, ауыр наркотиктар менән мауыҡҡан үҫмерҙәрҙең 15 проценты ВИЧ инфекцияһы эләктергән.

* * *

Үҫеп килеүсе быуынды сирҙәр генә түгел, фәҡирлек тә һағалай. Аслы-туҡлы тормош, алама кейем-һалым... Ике бала тәрбиәләгән ғаиләләрҙең яртыһы самаһы матди ҡыйынлыҡтар кисерә. «Росстат» мәғлүмәттәренә ярашлы, былтыр илдә фәҡирлек сигенән дә түбән хәлдә ғүмер сигеүселәр 20,2 миллионға еткән, йәғни бер йылда 1,2 миллионға артҡан. Улар өсөн иң ҙур хәүеф – мохтажлыҡ. «Левада-центр» социологик үҙәге хәбәр итеүенсә, граждандарҙың 38 процентын иҡтисади кризис ҡурҡытһа, 40 процентын – эшһеҙлек. Хаҡтар күтәрелеүҙән, ғаиләләрҙең мохтажлыҡҡа батыуынан хәүефләнеүселәр иһә – 58 процент. Ә бит фәҡир ғаиләләр балаларына сифатлы белем бирергә, һаулығын нығытырға һәләтһеҙ. Ундай балалар хеҙмәт баҙарында конкурент була алмай, маргиналлашыуға тиҙ бирелә, иң хәүефлеһе – уларҙың балаларын да шундай уҡ яҙмыш көтә.

«Әсәлек капиталы, балалар пособиелары фәҡир балалар проблемаһын хәл итә алманы, – ти Социаль сәйәсәт бойондороҡһоҙ институты директоры Лилия Овчарова. – Балалар пособиеһы йәшәү минимумының ни бары 6 – 7 процентын тәшкил итә. Бындай килем менән ярлылыҡ мәсьәләһен хәл итеү мөмкин түгел».

«Фәҡирлек дәүләткә ҡимməткә төшә, сөнки балалар шундай шарттарҙа тәрбиәләнгән йәмғиәт маргиналлаша. Дәүләткә тыуымды арттырыу түгел, ә тормош сифатын яҡшыртыу хаҡында уйланырға кәрәк» – был Мегаполистарҙың үҫеше гуманитар институты директоры Татьяна Малеваның фекере.

Ошо йәһәттән Владимир Путиндың РФ Президентын һайлау кампанияһы барышында социаль мәсьәләләр буйынса мәҡәләһенә (ә ул бөтә телевидение каналдары аша тапшырылып, ваҡытлы матбуғат та уға иғтибарҙы байтаҡ бүлде) иғтибар итке килә. «Бала тыуыуҙың фәҡирлеккә килтереүе менән бөтөнләй килешеп булмай, – тип яҙа президентлыҡҡа кандидат. – Был милли мәсьәләне өсдүрт йылда хәл итергә кәрәк». Автор фекеренсә, быны өсөнсө һәм артабан балалары тыуған ғаиләләргә ай һайын 7000 һум пособие түләү тәртибен индереү юлы менән хәл итергә мөмкин. Фекер бәхәсле, сөнки әсәлек капиталы ғына ил ҡаҙнаһын йөҙҙәрсә миллиард һумға (быйыл, мәҫәлән, 162,7 миллиард һум һалынған) бүҫкәртә. Бала табыуҙы тулыһынса ҡаҙна елкәһенә һалған йәмғиәт киләсәк быуын баһаһын тауар дәрәжәһенә төшөрмәйме икән? Сөнки цивилизация тарихында ата-әсәләрҙең балаларын бер ҡасан да дәүләттән аҡса алыу өсөн тапҡаны булмаған. Ғөмүмән, был мәсьәлә өҫтөндә етди уйланыусылар юҡлығы һиҙелә.

Владимир Путин фекеренсә, әсәләр өсөн һығылмалы эш графигы, эшкә урынлашыуҙа ярҙам, балалар баҡсаһында урын биреү иҫәбенә проблеманы хәл итергә мөмкин. Ул шулай уҡ торлаҡ ипотекаһын ундай ғаиләләр өсөн 3 – 4 процент менән сикләргә тәҡдим итә. Премьер-министр мәсьәләне үтә ябайлаштыра кеүек. Шулай булмаһа, был турала ни өсөн элегерәк уйланмағандар ҙа хәл ҡылмағандар? 2008 йылғы донъя кризисына тиклем Рәсәй ҡаҙнаһы аҡсаға мохтажлыҡ кисермәй ине бит.

Белгестәр фекеренсә, аҡыл һәм социаль йәһәттән бала яҡшы үҫһен өсөн иҡтисади тотороҡлолоҡ стандарты ыңғай, йәғни ғаиләнең килеме йәшәү минимумынан ике тапҡыр юғары булыуы шарт. Мәҫәлән, ике оло кеше һәм бер балалы ғаилә өсөн ул айына 60 мең һумдан булһа, ике балалылар өсөн – 80 мең һум. Бындай шартҡа һәләтле ғаиләләр илдә ысынлап та аҙ шул.

***

Милләттең һаулығына рух юғарылығы, рухи сәләмәтлек тә көслө йоғонто яһай. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, йәмғиәтебеҙҙең хәле был йәһәттән дә маҡтанырлыҡ түгел. «Рәсәйҙә үҫмерҙәрҙең һәр бишенсеһе күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән, – тиелә БМО-ның Балалар фонды докладында. – Көнбайыш илдәрҙә ул дүрт тапҡыр түбәнерәк». Әйткәндәй, илебеҙ үҫмерҙәр араһында үҙ-үҙенә ҡул һалыу буйынса Европала беренсе урын биләй. Сабыйҙар үлеме – 3,5, ә балалар үлеме беҙҙә ике тапҡыр йышыраҡ күҙәтелә. Балалар һәм үҫмерҙәр араһында психик тотороҡһоҙлоҡ, үлем осраҡтары йышая. Һуңғыларының 75 проценты бәхетһеҙлеккә бәйле үҙ-үҙен имгәтеү һәм ағыулауҙан ғибәрәт. «Интерфакс» агентлығы мәғлүмәттәре буйынса, һәр 100 мең кешегә иҫәпләгәндә, йыл һайын 30 – 31 үҫмер ҡыҙ йәки малай яҡты донъя менән үҙ теләге менән (әлбиттә, ирекһеҙҙән) хушлаша.

Ғәҙәттә, үҫмерҙәр суицидҡа Интернет селтәре аша килә, тип яҙа «Утро.ру» Интернет баҫмаһы. Үҙ-үҙен үлтереүселәр клубына башлыса ғаиләлә татыулыҡ етмәгәндәр мөрәжәғәт итә. «Әсәйем өсөн барыбер» – һәр икенсе үҫмер шундай фекерҙә. Февралдә «Московский комсомолец» гәзите ошо тема буйынса журналист тикшеренеүе үткәрҙе. «Һауала ниндәйҙер алама тойғо йөрөй, – тип яҙа баҫма. – ...Сайтты ябырға бер кем дә йыйынмай... Клубҡа яҡындарынан кемделер юғалтҡан кешеләр мөрәжәғәт итә». «Аҡса юҡ, ғаиләлә гел талаш», – тип яҙа Диана. «Хәҙерге цивилизацияға нәфрәт кисерәм, – тигән Андрей. – Мин, үлеүҙән

бигерәк, был бысраҡ донъянан үс алырға теләйем». «Бер йылдан күберәк күңел төшөнкөлөгө кисерәм», – тип ҡушыла Алена. Хәбәрсе 6 меңдән күберәк ошондай яҙма күргән, тик барыһы менән дә танышып сыға алмаған.

Башҡортостанда хәлдәр нисегерәк икән? Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, республика ваҡытлы матбуғатында ундай хәбәрҙәр аҙ түгел. Быйыл март баштарында «Башҡортостан» гәзитендә, мәҫәлән, «Ҡылдан нескә муйындар ҙа – элмәктә» тигән аналитик мәҡәлә сыҡты. «Хәйбулла районында 17 йәшлек үҫмер аҫылынған, Балтаста – 16 йәшлек үҫмер, Белоретта – 16 йәшлек ҡыҙ (атаһының үлемен ауыр кисергән), Учалыла – 15 йәшлек ҡыҙ, Нефтекамала – 14 йәшлек ҡыҙ, Иглинда – 14 йәшлек малай, Ишембайҙа 15 йәшлек ҡыҙ…– тип теҙеп китә баҫма. – Сәбәптәре лә билдәле: яҡындарының үлеме, яуапһыҙ мөхәббәт». Үҫмерҙәр психиатры-наркологы Рәмилә Әбелғужинаның ошо мәҡәлә аҙағында урын алған фекеренә ҡарағанда, «үкенесле аҙымды нигеҙҙә үтә һиҙгер, хисле, алдашыу, намыҫһыҙлыҡ күренештәре менән килешә алмағандар яһай. Бер тапҡыр хәтәр юлды һайлағандар уны яңынан ҡабатларға тырыша».

Мәҡәләлә тормошобоҙҙоң ҡатмарлылығы, үҫеп килеүсе быуын менән ата-әсәләр араһындағы аңлашылмаусанлыҡтың бер ҡасан да булмағанса киҫкенләшеүе сағыла. Беҙ уның ҡайһы бер урындарына туҡталып китәйек, сөнки хәбәрсенең ҡайһы бер һығымталары бәхәсле кеүек. «Ни өсөндөр ата-әсәнең, уҡытыусылар, тәрбиәселәрҙең ҡайғы-хәсрәткә сумыуы, үлемдә үҙен ғәйепле һанап, йылдар буйы ғазапланыуы үҫмерҙәрҙә йәлләү тойғоһо уятмай һәм уйландырмай», – тигән һығымта яһай автор. Үҫмерҙәрҙә ундай юғары граждандлыҡ тойғоһо тыуырға иртә икәнлеге, күрәһең, уйлап еткерелмәгән. Был – бер. Икенсенән, ғаиләләге теге йәки был йәшәү рәүешен балалар түгел, ололар урынлаштыра бит. Ә бына үҫмерлектән йәшлеккә күсер алдынан була торған эгоислыҡ тойғоһо ҡайһы берәүҙәрҙә самаларҙы ашып китә.

Хәбәрсенең «проблема менән ғаиләнең үҙендә көрәшергә кәрәк» тигән фекере урынлы кеүек, ләкин, төптән уйлап ҡарағанда, проблеманы үҙе тыуҙырған ғаилә быға һәләтлеме икән? «Етеш тормошта йәшәгән, яҡшы тәрбиә алғандарҙың муйындарына бау һалыуы – уйландырырлыҡ мәсьәлә». Көсөргәнешлек ғүмер менән хушлашыуға барып етә икән, тимәк, етешлек кенә аҙ. Һуңғы осорҙа балалар психологтары үҫеп килеүсе быуын менән өлкәндәр араһында мөнәсәбәттең үтә киҫкенләшеүен билдәләй. Был социалистик принциптар нигеҙендә тәрбиә алған ата-әсәләр менән ҡырағай капитализм шарттарында үҫкән йәш быуындың тормошҡа ҡарашы араһындағы ҡапма-ҡаршылыҡ түгелме икән?

«Интернетта «Үҙ-үҙен үлтереүселәр клубы» ысынлап та ниндәй сәбәптәр арҡаһында барлыҡҡа килгән? Ул бөгөнгө ҡырағай капитализм эҙемтәһеме, әллә Көнбайыш йоғонтоһомо?» – тип дауам итә автор. Был йәһәттән Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай Рәйесенең беренсе урынбаҫары, Балалар хоҡуҡтары буйынса БР-ҙың элекке вәкиле Лилиә Ғүмәрованың «бер социаль ҡоролоштан икенсеһенә күсеүҙә әхлаҡи нормаларҙың боҙолоуы эҙемтәһе был» тигән фекере, моғайын, ысынбарлыҡҡа тура киләлер. Сөнки был мәлдәрҙә ҡасандыр йылытҡан, рухи ҡаһарманлыҡҡа әйҙәгән идеалдар үҙгәреш кисерә, хатта юҡҡа сыға. «Үҫешкән социализм»дан ҡырағай капитализмға күсеү тап шундай сәбәп булыуы бик ихтимал. Был – бер. Икенсенән, Рәсәйҙә кеше ғүмере элек-электән бик түбән баһаланған. Быға миҫал итеп батша-императорҙар алып барған бихисап һуғыштарҙы һанап сығыу ҙа етәлер. Ҡайһы бер күршеләре менән империя бер нисә тапҡыр алышҡан. Донъяның бер генә дәүләте лә ул тиклем хәрби кампаниялар ойоштормаған.

«Ҡайҙа беҙҙең тикшереү органдары?» тип риторик һорау ҙа ҡуя автор. Үкенескә ҡаршы, хоҡуҡ һаҡлау системаһының хәҙерге шарттарҙа компетентлы

эшләргә һәләтһеҙлеге – күптән раҫланған факт. Тик быны унда эшләгән кешеләрҙең сифатына ғына бәйләп ҡотолорға ашыҡмайыҡ, сөнки был – иң элек йәмғиәттең хәл-торошо, сифаты. Тимәк, ул үҙе компетентлы кадрҙар әҙерләргә һәләтһеҙ. «Исламда үҙ-үҙенә ҡул һалған әҙәм яза ала, тамуҡҡа ебәрелә,– ти «Асия» мәсете имамы Нурмөхәмәт Нуриев, ошо мәҡәләгә ниндәйҙер дәрәжәлә аңлатма биреп. – Үҫемерҙәр араһында күҙәтелгән афәт – Аллаһы Тәғәлә тарафынан ебәрелгән яза».

Ә хәҙер проблемаға фән күҙлегенән ҡараш ташлап ҡарайыҡ. «Кешелә суицидаль үҙенсәлек 5-6 йәштә формалаша, – ти Сербский исемендәге институттың психик сәләмәтлек бүлеге мөдире Борис Полонский «Утро. ру» Интернет сайтында. – Бала саҡта ололар һәм ата-әсәләрҙең баҫымына эләккән балалар шулай була. Уның нәҫелдән килеүе лә ихтимал». «Психиатрҙа тикшеренеү үтеүҙе беҙҙә хурлыҡҡа һанайҙар, – ти артабан белгес. – Бәләкәй балаларҙың патологияһын бер кем дә асыҡламай, дауаламай. Ата-әсәләрҙең күпселеге, педагогия буйынса наҙанлығына ҡарамаҫтан, үҙен оҫта педагог итеп тота». Белгес фекеренсә, психология фәнен II кластан IX класҡа тиклем өйрәтергә кәрәк».

Был ҡыҫҡа ғына хәбәрҙә йәмәғәтселек фәһемле бик күп мәғлүмәт йәшеренгән. Тейешле диарәләр, мәҫәлән, ата-әсәләр, мәғариф һәм опека органдары өсөн бик файҙалы ҡулланма булыр ине.

***

90-сы йылдарҙа Рәсәйҙә өлгөр сәйәси даирәләрҙең ижтимағи ҡоролошто баштүбән әйләндереүе, ғәмәлдә ҡырағай капитализм урынлашыу балалар һәм үҫмерҙәрҙең социаль статусына ҡот осҡос йоғонто яһаны. Үрҙә телгә алынған УНИАН баҫмаһы мәғлүмәттәренә ярашлы, илдә ҡараусыһыҙ ҡалған балалар 704 меңгә етеп, Бөйөк Ватан һуғышынан һуңғы (570 мең) дәрәжәне лә үтеп китте. 500 меңдән ашыу бала рәсми рәүештә ғәрип тип табылған, 136 меңе, абсолют күпселегенең ата-әсәһе була тороп та, дәүләт ҡарамағында тәрбиә ала. Башҡортостанда 29 балалар йорто эшләй, һәм уларҙан йыл һайын 300, патронат ғаиләләрҙән 2000 самаһы үҫмер үҙ аллы донъяға ышаныcһыҙ аҙымдар менән аяҡ баҫа, тип яҙҙы быйыл февраль аҙаҡтарында «Башҡортостан» гәзите. Татыу булмаған ғаиләләрҙән сыҡҡан балаларҙы реабилитациялау программалары ла эшләй. Ғөмүмән, дәүләт органдарын үҫеп килеүсе быуынға иғтибар бирмәүҙә ғәйепләргә нигеҙ юҡ кеүек. Бөгөн ҡыҙ һәм ир балаларға үҙ аллы тормошҡа аяҡ баҫырға балалар йорто, опека һәм попечителлек органдары, белем биреү учреждениелары, «Ғаилә үҙәге», халыҡты эш менән тәьмин итеү хеҙмәте ярҙам күрһәтә. Хикмәт, әлбиттә, уларҙың күплегендә түгел, ә ни рәүешле эшләүендә. Был йәһәттән төрлө фекерҙәр булыуы ихтимал, әммә береһенә ҡолаҡ һалып үтәйек. «Интернатта келәм, емеш-еләк, компьютер булған өсөн генә бала яҡшы тәрбиә ала, тип хаталанырға ярамай, – ти «Бала өсөн ғаилә» ассоциацияһы ағзаһы Людмила Петрановская. – Ундай балалар түбәнгә тәгәрәй». Ысынлап та, балалар йортондағы тормош ундағыларҙың күңеленә хуш килһә, ҡасыусылар ҙа булмаҫ ине. Ата-әсәне, уларҙың ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, бер ни ҙә алмаштыра алмай. Мәҫәлән, Ишембай ҡалаһында бер үҫмерҙең ата йортонан айырылыуҙы кисерә алмай аҫылынып үлеүе тап ошо турала һөйләй. «Баланың үҙ аллы йәшәргә һәләтлеме-түгелме икәнлеген асыҡларға кәрәк, –тигән фекерҙә Лилиә Ғүмәрова. – Бала күңеле шул тиклем йоҡа материя, һәм беҙ уны иҫәпкә алырға бурыслыбыҙ».

Марина Скоробогатова иһә балалар йортонан сыҡҡандарҙың холҡона иғтибар иткән. «Тәүҙә уларға «мин бер кемдеке лә түгел» тигән ҡараш хас булһа, артабан «мин бөтәһенә лә ҡаршы» тип фекер йөрөтөүсәндәр, – ти Бала хоҡуҡтары буйынса БР вәкиле. – Бәлки, был холоҡ уларҙың ата-әсәлеләргә оҡшамағанлығынан һәм шуның өсөн кәмһенеү тойғоһо кисереүҙән киләлер».

«Үҙаллылыҡ тәрбиәләй алмауыбыҙ – оло бәлә, уның эҙемтәләре йылдарға һуҙыла, – ти Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге 1-се балалар йорто социаль педагогы Илүзә Сафина «Башҡортостан» гәзите үткәргән «түңәрәк өҫтәл»дә. – Етемдәрҙе кеше елкәһендә йәшәү психологияһынан арындырыу, мәсьәләләрҙе үҙ аллы хәл итеү юлдарын эҙләргә мәжбүр итеү еңел түгел». «Хәҙер балаларға иҙән йыуырға ла, тәҙрә һөртөргә лә рөхсәт ителмәй, ысынлап та аҡһөйәктәр тәрбиәләйбеҙ» – Был Рәсәй Балалар фондының Башҡортостан бүлексәһе рәйесе Нина Федянинаның фекере. Благовещен ҡалаһындағы балалар йорто директоры Тәлғәт Хисаметдинов менән әңгәмәлә лә шундайыраҡ фекер ишетелде. «Етемдәр туҡланған ризыҡ ғаиләле балаларҙың күбеһенә эләкмәй, – тине ул. – Балалар эшкә өйрәнмәй үҫә, сөнки уларҙы эшләтеү өсөн яҙма рәүштә ризалыҡ алыу мотлаҡ. Һөҙөмтәлә үҫеп килеүсе быуында кемдәргәлер һалышып йәшәү тойғоһо нығына». Ысынлап та, матди етешлек, үкенескә ҡаршы, икенсе тойғо – ҡәҙер белмәү кәйефен көсәйтә.

«Дәүләттең етем хоҡуҡтарын яҡлау буйынса тырышлығы менән хәҙерге иҡтисади ысынбарлыҡ араһында упҡын – кире ҡаҡҡыһыҙ хәҡиҡәт», – тигән һығымта яһай «түңәрәк өҫтәл»де алып барыусылар. Бында ҡайһы бер төшөнсәләр дөрөҫ ҡабул ителмәгән, атап әйткәндә, мәсьәләне ябайлаштырыуға юл ҡуйылған. Сөнки проблема дәүләт органдарының һәм йәмғиәттең етешһеҙлеге арҡаһында барлыҡҡа килгән. Иҡтисад закондарын дәүләт әһелдәре үҙе яҙыуын инҡар итеп булмай.

Ләкин, нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, үҫеп килеүсе быуындың социаль хәлен хәүеф аҫтына ҡуйыуы етмәгән, дәүләт органдары мохтажлыҡ арҡаһында енәйәт юлына баҫҡан үҫмерҙәргә ҡарата закондың ҡатырағын ҡулланыуҙы хәстәрләй. Дәүләт Думаһында енәйәт яуаплылығына 12 йәштән тарттырыу тураһында закон әҙерләнә. «Үлтереү, көсләү, урлашыу, кеше урлау кеүек енәйәттәр шул тиклем көсәйҙе, – тиҙәр РФ Эске эштәр министрлығында, – бәлиғ булмағандар инспекциялары улар менән эшләп өлгөрмәй. 12-13 йәшлек башкиҫәрҙәр ҡотора, беҙҙән асыҡтан-асыҡ көлә». Ысынлап та енәйәтселек йәшәрә, тип хәбәр итә «Утро.ру» сайты. Алты йәшлек кеше үлтереүселәр бар, әммә закондың йомшаҡлығы арҡаһында йыл һайын 100 мең үҫмер язаһыҙ ҡала. Бала хоҡуҡтары буйынса РФ вәкиле Павел Астаховтың үҙ аңлатмаһы бар: үҫмерҙәр араһында енәйәтселектең артыу сәбәптәрен тикшерергә кәрәк. Әлбиттә, был күренештең ололар яғынан мөнәсәбәткә яуап булараҡ барлыҡҡа килеүен дә онотorға ярамай. 2009 йылда, мәҫәлән, Башҡортостанда балаларға ҡарата 2072 енәйәт ҡылына, 2008 йылда 1865 кеше ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм ителә, 2009 йылда – 1831. Был һандар ҡәһәрле яҙмышҡа дусар ителгән меңдәрсә кеше тураһында һөйләй.

12 йәшлек балаларҙы енәйәт яуаплылығына тарттырыу – Рәсәй өсөн өр-яңы тәжрибә түгел, тип дауам итә сайт. 1935 йылда Совет власы бәлиғ булмағандар араһында енәйәтселекте бөтөрөү буйынса көрәш иғлан итеп, тап шундай юлды һайлаған. Ләкин күпме бала енәйәт яуаплылығына тарттырылыуы тураһында мәғлүмәт юҡ, бәлки, ундай ғәмәл ҡулланылмағандыр. Үҫмерҙәргә ҡарата закондың ҡатырағын хәстәрләгән даирәләр енәйәтселектең көсәйеүенә һылтаныуға ҡарамаҫтан, статистика был фекерҙе раҫламай. Башҡортостан буйынса РФ Эске эштәр министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 2007 йылда енәйәт яуаплылығына 4,2 мең үҫмер йәлеп ителһә, 2011 йылда – 1,5 мең. Ун йыл элек һәр унынсы енәйәт үҫмерҙәр тарафынан ҡылынһа, хәҙер уларҙың өлөшө 4 проценттан артмай.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, спиртлы эсемлектәр менән мауыҡҡан балалар һәм үҫмерҙәр күберәк теркәлеп, иҫерек үҫмерҙәр ҡылған енәйәт былтыр 14 процентҡа артҡан. Наркология кабинеттарында иҫәптә 4 меңләп үҫмер тора, һәм ундайҙар

йылдан-йыл күбәйә. Икенсе тапҡыр енәйәт ҡылған үҫмерҙәр ҙә арта, сөнки йыш ҡына йәше етмәү сәбәпле язанан ҡотолоп ҡалалар. Был йәһәттән ниндәйҙер механизм булдырырға кәрәк, ти белгестәр.

Бәлиғ булмағандар психологияһына бөгөн иҫ китмәле прогресс сағылышы булған Интернет емергес йоғонто яһай. Интернет селтәре аша танышып, ғаиләһен ауыр хәлгә ҡалдырған үҫмерҙәр ҙә юҡ түгел. Был төркөмгә ҡараған енәйәттәрҙең 70 проценты имен булмаған ғаиләләрҙән сығыуы ла етди анализға лайыҡ. Ләкин енәйәт өсөн ололар менән бер тиң яуап биреүҙе хәстәрләп, закон сығарыусылар үҫмерҙәрҙең хоҡуҡи аңы үҫеп етмәүен иҫәпкә алмауын етди етешһеҙлек тип иҫәпләргә тулы нигеҙ бар. Енәйәтселектең тәбиғәтен асыҡларға ынтылып, АҠШ-тың Флорида штаты һәм Хьюстон дәүләт университеттары ғалимдары 4000 кеше ҡатнашлығында тәжрибә үткәргән һәм, енәйәткә ынтылыш гендар менән бәйле, йәғни нәҫелдән килә, тигән һығымта яһаған. Ләкин анализ ниндәй гендар яуаплы икәнен асыҡлай алмаған. Киләсәктә был проблеманы хәл итеү юлдарының табылыуы ихтимал.

Рәсми даирәләрҙең балалар һәм ғаилә статусын нығытыуға иғтибары һуңғы йылдарҙа илдә тыуымдың кәмеүе, тимәк, уға бәйле социаль проблемаларҙың ҡырҡыулашыуында һәм киләсәктә эшсе ҡулдар етешмәү ихтималлығында күренә. Һуңғы 20 йылда илдә балалар 7,5 миллионға кәмеп, хәҙер 26 миллион самаһына ҡалған. 2010 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренән күренеүенсә, эшкә яраҡлы йәшкә етмәгәндәр 1989 йылда 24,5 кеше теркәлһә, 2010 йылда 16,1 генә. Ә инде эшкә яраҡлы йәште үткән өлкәндәр иһә 18,5-тән 22,2-гә еткән. Был инде халыҡ ҡартая тигән һүҙ.

Демографик тотороҡһоҙлоҡ ғаилә статусының абруйы ҡаҡшауында ла күренә. Нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, ҡайһы берәүҙәр өсөн ғаиләле булыу көс етмәҫ мәшәҡәткә әүерелә. Ошо хаҡта быйыл «Коммерсантъ» гәзите бер йәш кеше менән интервью ла сығарҙы. Айына 18 мең һумға эшләгән егет асыҡтан-асыҡ, мин өйләнә алмайым, сөнки ғаиләне ҡарарға хәлем етмәй, тип белдерә. Бер ҡасан да өйләнмәгән ирҙәр 2002 йылда һәр 1000 кешегә 251 булһа, 2010 йылда 260-ҡа еткән. Рәсми никахҡа әһәмиәт бирмәүселәр ҙә күбәйә. Хәҙерге йәштәр араһында өйҙәшлек (сожительство) киң таралған күренешкә әйләнде. 2002 йылда һәр 1000 кешегә никахлылар 654 булһа, 2010 йылда иһә 641-гә ҡалған.

Республикала бер-ике кешелек ғаиләләр бөтә ғаиләләрҙең яртыһына етеүе лә – бала статусының төшөүенә дәлил. Мәҫәлән, 2002 йылда бер кешеле ғаиләләр 270,7 мең теркәлһә, 2010 йылда 328,6 меңгә еткән; ике кешелеләр – 368,6 һәм 406,4 мең. Ә бына дүрт кеше йәшәгән ғаиләләр, киреһенсә, кәмегән: 296,9 мең һәм 256,3 мең. Ҡалаларҙа ваҡ ғаиләләрҙең ауылдарҙан ике тапҡырға күберәклеген унда халыҡтың күпселеге йәшәүе менән аңлатырға кәрәк, сөнки хәҙер ауылдарҙа төп халыҡ булып пенсия йәшендәгеләр ҡала килә. Быйыл март аҙаҡтарында ваҡытлы матбуғат республикала ауыл халҡының бер йылда 12 мең кешегә кәмеүе тураһында хәбәр итте.

Әсә һәм бала изге төшөнсәгә әүерелергә тейеш – был фекер менән бәхәскә инерлек кеше, моғайын, табылмаҫ. Ләкин тормошта беҙ был мөнәсәбәттең киреһен күҙәтәбеҙ, сөнки һүҙ менән ғәмәл араһында айырма йәмғиәтебеҙҙә һәр саҡ булды. Бала тыуҙырыусылар (әсәлек капиталы өсөн тырышҡандарҙы иҫәпләмәгәндә) ысынлап та кәмей. «Росстат» мәғлүмәттәре буйынса, 2002 йылда һәр 1000 ҡатынға 1513 бала тура килһә, 2010 йылда – 1469, йәғни 3 процентҡа кәмерәк. Шул уҡ ваҡытта демографик тотороҡһоҙлоҡто фәҡирлек менән аңлатыу ҙа ысынбарлыҡҡа тап килеп бөтмәй. Йәмғиәт социаль тетрәнеүҙәр кисергән 1989 – 2002 йылдарҙа, халыҡ иҫәбе йыл һайын 0,09 процентҡа кәмеһә, В. Путин хакимлыҡ иткән «туҡ» йылдарҙа ул 0,2 процентҡа еткән.

Илдең күпселек төбәктәрендә үлем тыуымдан юғары, һәм уның сәбәбен ғалимдар таба алмай. «Росстат» күҙаллауы буйынса, 2031 йылда Рәсәйҙә ни бары

127 миллион кеше йәшәйәсәк. Әммә В. Путиндың үҙ фаразы бар: үрҙә телгә алған мәҡәләһендә ул, ғаилә пособиелары, алкоголизмға ҡаршы көрәш, спортты үҫтереү һ.б. саралар нигеҙендә халыҡ иҫәбен 20 йылда 154 миллионға еткереп була, тигән фекер үткәрә. Минеңсә, ике фараз да бәхәсле, сөнки улар тәбиғәт факторҙарын, мәҫәлән, стихиялы бәлә-ҡазаларҙы иҫәпкә алмай. Бөгөн был факторҙарҙың йоғонтоһо бик көслө.

Рәсәйҙә йыл һайын 1,7 миллион бала тыуа. Балалар баҡсаларына сират ете тапҡыр артып, 2 миллион бала уға мохтажлыҡ кисерә. 29 февралдә РФ Президенты Дмитрий Медведев хосуси балалар баҡсаларына дәүләт финанс ярҙамы тураһында указ сығарҙы, был урын етмәү проблемаһын ниндәйҙер кимәлдә хәл итергә мөмкинлек бирәсәк, әлбиттә. Ләкин указдың эшләп китеүе, йәғни хосуси мәнфәғәттең был даирәлә урынлашыуы биналарға ҡуртым хаҡтарына бәйле бит.

Социаль етемлеккә юл ҡуймау саралары күреү ҙә – күптән өлгөрөп еткән мәсьәлә. Мәҫәлән, республикалағы 19 меңдән ашыу етемдең 90 проценты – ата-әсәле. «Беҙ интернат, приют кеүек учреждениелар селтәрен киңәйтәбеҙ, йәғни эҙемтәләрҙе йомшартыу буйынса эшләйбеҙ, – ти Лилиә Ғүмәрова. – Ә бит бала үҙ ғаиләһендә генә бәхетле». Бөгөн был проблеманы дәүләт патронат ғаиләләр аша хәл итергә ынтыла. Мәҫәлән, 2006 йылдан, йәғни патронат тәрбиәгә балалар биреү тураһында закон сыҡҡандан һуң, Өфөлә генә 3000 меңдән ашыу баланы ҡарауға алғандар. Уллыҡҡа йәки ҡыҙлыҡҡа бала алыусылар ҙа байтаҡ, сөнки бала тыуҙырырға һәләтһеҙ ҡатын-ҡыҙҙар менән бергә бала яһарға ярамһыҙ ир-егеттәр ҙә юҡ түгел. Ундайҙар өсөн хәҙер баланы суррогат әсә аша табыу мөмкинлеге лә бар. Рәсми мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Башҡортостанда ике йылда ун ғаилә ошо юл менән ата-әсә булып киткән. Әле 20 пар ошо рәүешле бала табырға сират тора. Рәсми булмаған мәғлүмәт иһә тағы ла күберәктер, сөнки беҙҙә граждандар үҙ ихтыяжын йәшерен хәл итергә күнеккән. «Суррогат әсәгә хаҡты яҡтар үҙҙәре килешеп билдәләй, – ти «Майл.ру агентлығы». – Ләкин биологик ата-әсә балаға хоҡуҡты тыуҙырған ҡатын ризалығы менән генә ала. Әгәр ҙә тыуҙырыусы баш тарта икән, мәхкәмә лә ярҙам итә алмай. Суррогат бала алыуға хоҡуҡ никахта тормаған парҙарға ла бирелгән, тик быының өсөн бала табырға йыйынған ҡатын-ҡыҙҙың һау-сәләмәт булыуы шарт».

Демографик тотороҡһоҙлоҡто хәл итеүҙең тағы ла бер юлы – ваҡытынан элгәре тыуған 500 грамм баланың ғүмерен һаҡлау өсөн барлыҡ сараларҙы ла хәстәрләү. РФ Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министры бойороғон ғәмәлгә ашырыу өсөн кәрәкле аппаратура ла бар. Ысул ҡиммәтле, ул ҡаҙнаға 1 миллион һумға төшә. Йәмғиәт өсөн мөһим булған мәсьәлә – бала һаулығын һаҡлауҙы был алым етерлек дәрәжәлә аҡлаймы? Әммә шуныһы билдәле: баланың ғәрип булмаясағына бер кем дә гарантия бирә алмай.

Павел Астахов фекеренсә, балаларҙы яҡлау милли хәүефһеҙлек проблемаһына әүерелергә тейеш. Тик кемдән яҡларға? Ҡыҙғаныска ҡаршы, ата-әсәләрҙән. Был йәһәттән дәүләттең бер яҡлы сәйәсәт алып барыуын хуплап булмай. Илдә эскеселек, наркомания көсәйеп, тотороҡһоҙ ғаиләләрҙә балалар күбәйеү проблемаһы һаман да уларҙы ата-әсәләренән айырып, интернаттарға урынлаштырыу, патронат ғаиләләргә (ә улар баланы бушҡа ҡарамай) биреү юлы менән хәл ителә. Мәҫәлән, 2009 – 2013 йылдарҙа ғаиләне алмаштырыусы программаһына 150 миллион һум, йәғни элекке йылдарға ҡарағанда 40 процентҡа күберәк аҡса бүленгән. Был алымдың отошлолоғо шик уята, сөнки ул сәбәп урынына эҙемтә менән көрәшеүҙе аңлата. Бәлки, бындай әҙәмдәрҙең балаһын тәрбиәләүҙә ҡатнашыуы,– мәҫәлән, мәжбүри эштәргә йәлеп итеү юлы менән – хаҡында уйланырға һәм сараһын күрергә кәрәктер.

***

Үҫеп килеүсе быуынды урамда түгел, ә тәрбиә алған урындарында күреү өсөн миңә Дим районының 110-сы балалар баҡсаһына, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге 1-се республика балалар йортона, 20-се башҡорт гимназияһына барырға тура килде. Тәүгеһендә шул асыҡланды: балалар төрлө кимәлдәге баҡсаларға йөрөй икән. Мәҫәлән, 110-сы баҡсаға нигеҙҙә ата-әсәләр символик хаҡ түләгән аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙән сыҡҡан 125 бала килә. 60-сы йылдарҙа төҙөлгән бинала йоҡо бүлмәһе ҡаралмаған, төркөмдәр ҙә бик ҙур: һәр береһендә 30-ҙан ашыу бала көнө буйы сыр-сыу килә. Ә бына ошо уҡ биҫтәләге Мусоргский һәм Левитан урамдарында урынлашҡан автономиялы баҡсаларға хәлле ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән балалар йөрөй. Бындағы шарттар, әлбиттә, тел тейҙерерлек түгел, һуңғыһында хатта йөҙөү бассейны ла бар. Был баҡсалар, күренеүенсә, балаларға үҙҙәренең ниндәй социаль ҡатламға ҡарағанын күреп, үҙ елкәһендә татып белергә булышлыҡ итә.

Блюхер урамындағы балалар йортонда бер нисә йыл элек 120 бала тәрбиәләнһә, хәҙер 71-гә ҡалған. 35 бала Өфөлә һәм яҡын-тирәләге район ауылдарында патронат тәрбиәгә бирелгән. Улар араһында тик бишеһе генә үкһеҙ етем, ә ҡалғандары – ата-әсәле, ләкин дәүләт уларҙы был хоҡуҡтан мәхрүм иткән етемдәр. Балаларҙы патронат тәрбиәгә теләһә нисек биреп ебәрмәйҙәр, талаптары етерлек: буласаҡ тәрбиәселәрҙең кешелек сифаттары, килеменән тыш, ауылда мәктәп, дауахана булыуы ла шарт. Балалар йорто директоры Фәнисә Бәҙретдинова патронат ғаиләгә ҡуйылған талапты ҡыҫҡаса ошолай белдерҙе: «Етем бала алаһың икән, Хоҙай алдында яуаплыһың!»

Бында тәрбиә алғандар юғары уҡыу йорттарында уҡыуын дауам итә, икеһе хатта Мәскәүҙә юғары иҡтисад мәктәбенә инеп киткән. Ләкин етемлектең иң хәсрәтлеһе – иң яҡын кешеләренә «атай» һәм «әсәй» тип өндәшә алмауҙа икәнлеген мин ошонда ғына аңланым. Бер ҡыҙ баланың: «Үҫкәс кем булыр инең?» – тигән һорауға «әсәй» тип яуаплауы тетрәтте. Үҙен донъяға килтергән кешеһенә ошо һүҙҙе әйтә алмағаны өсөн әсә булғыһы килә икән ҡыҙыҡайҙың.

20-се гимназияның 9-сы класс уҡыусылары менән осрашыу ыңғай тәьҫир ҡалдырҙы. «Кемдәрҙе кумир итеп беләһегеҙ?» – тигән һорауға «Салауат Юлаев, Зәки Вәлиди, Шәйехзада Бабич, Аҡмулла» тигән яуаптар ишетеү, бында милләт балалары белем ала икән, тигән ҡәнәғәтлек тойғоһо ҡалдырҙы. Тимәк, башҡорт халҡының күренекле шәхестәренә алмаш үҫә. Гимназия директорының уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса урынбаҫары Мөнәүәрә Мәксүтова менән әңгәмәнән хәҙерге балаларҙың тормошҡа үҙ ҡарашы булыуы, үҙ аллы фекер йөрөтөү һәләте менән айырылыуы асыҡланды. Хатта мәктәпте тамамлағас кем буласаҡтарын да билдәләй алалар. Һуңғы йылдарҙа юғары техник белем алыусылар күбәйгән, Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалалары вуздарында уҡып йөрөгәндәр ҙә арта.

Уҡыусылар менән ата һәм ул, әсә һәм ҡыҙ проблемаһы хаҡында ла фекер алыштыҡ. Өлкәндәрҙең үҙ ихтыярын тағырға тырышыуы үҙҙәрендә ҡаршылыҡ тойғоһо уятыуын туғыҙынсылар йәшереп торманы, хатта был турала бәхәскә инергә лә әҙерҙәр ине. Уларҙың ҡарашында хаҡлыҡ юҡ түгел, әлбиттә, ләкин ғаиләлә уртаҡ фекергә килеү өсөн ата-әсәнең педагогик һәләте лә кәрәк. Үкенескә ҡаршы, был йәһәттән күптәр тейешле юғарылыҡта түгел. Әлбиттә, ҡасандыр баш ҡалала берҙән-бер башҡорт мәктәбенән башланған гимназияның яҡшы традициялары ла бар. Ошонда белем алған күптәр балаларын, ейәндәрен дә ошонда уҡырға килтерә икән, быға ҡыуанырға ғына кәрәк.

2012 Имен бала саҡ һәм ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу йылы тип иғлан

ителеүгә ҡарамаҫтан, унан беҙгә әллә ни өмөт итеү, моғайын, урынһыҙҙыр. Сөнки балаларҙың булмышы хәл иткес дәрәжәлә уларға өлкәндәрҙең мөнәсәбәтенә бәйле. Йәмғиәттә һуңғы йылдарҙа барлыҡҡа килеп, ниндәйҙер кимәлдә тотороҡланған бөгөнгө хәл уның яҡын арала ғына ныҡлы үҙгәреш кисерәсәгенә ышандырмай. Миҫалға бала хоҡуҡтары буйынса вәкил вазифаһын алайыҡ. Һис шикһеҙ, уны демократия кәүҙәләнеше тип атарға тел әйләнмәй. Илдә үҫеп килеүсе быуындың хәл-торошо һуңғы дәрәжәлә киҫкенләшеүе тураһында һөйләй ул. Физика закондары буйынса теләһә ниндәй хәрәкәт ҡаршылыҡҡа дусар ителгән кеүек, ата-әсәләрҙең алама ҡылыҡтары ла балалар мөхитендә тап шул килеш, хатта айырым осраҡтарҙа ҡанһыҙыраҡ дәрәжәлә ҡабатлана. Март урталарында, мәҫәлән, үҙәк телевидение каналдары Төмән ҡалаһының 44-се мәктәбендә 15 йәшлек ҡыҙ етәкселегендәге төркөмдөң бәләкәйерәк уҡыусылар өҫтөнән хөкөм йөрөтөүе хаҡында хәбәр итте. Ай аҙаҡтарында I каналдың «Пусть говорят» ток-шоуында ошо хаҡта тапшырыу ҙа булды. Теге ҡыҙ, мәктәп тураһында төрлө фекерҙәр яңғыраны, тик героиня менән мәктәп директоры студияла күренмәне. Хикмәт был фактта ғына түгел, уларҙың ил буйынса теләһә ҡайһы мәктәптә ҡабатланыу ихтималлығында.

Балаларҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса тәҡдимдәр байтаҡ. Киң информация саралары аша сығыш яһауға килгәндә, имен булмаған ғаиләләр өсөн уның файҙаһы юҡ кимәлендә, сөнки улар гәзит тә, журнал да уҡымай. Ә бына Граждандар һәм Торлаҡ кодекстарына балалар мәнфәғәтен яҡлаған төҙәтмә-өҫтәмәләр индереү буйынса ике фекерҙең булыуы мөмкин түгел. Йыш ҡына, ярлы ғаиләләргә ярҙам итергә кәрәк, тигән фекер ишетергә тура килә. Һүҙ, әлбиттә, матди ярҙам хаҡында, ләкин уны даими ойоштороп булыуы ғына шик уята.

Фекерҙе тамамлап, шуны әйтке килә: әсәлек капиталының да, балалар пособиеларының да тыуым проблемаһын етерлек кимәлдә хәл итәсәгенә ышаныу етди түгел.  Демографик тотороҡһоҙлоҡто бөтөрөү, ғаиләнең абруйын күтәреүҙең алымдары, минеңсә, – Рәсәйҙең сәйәси даирәләре иғтибар итмәгән, бәлки, күрергә теләмәгән юҫыҡта. Ул хеҙмәт кешеһенә лайыҡлы түләүгә ҡайтып ҡала, сөнки эшләп йөрөп тә мохтажлыҡта көн күреү донъя илдәрендә, иң элек Европала, осрамай. Әгәр ҙә ғаилә башлығы яҡшы эш хаҡы ала икән, ул бала тәрбиәләү кеүек абруйлы бурыстан ситләшмәйәсәк. Беҙгә, моғайын, Европаға түгел, ә Көнсығыш илдәре тәжрибәһенә күҙ һалырға кәрәктер, сөнки демографик кризис Европаның үҙендә бара, ә Ер шары цивилизацияһының бишеге булған Көнсығышта ундай проблема тормай.

Бала күңеле, ысынлап та, аҡ ҡағыҙ. Улар иген икмәй, металл иретмәй, йорттар һалмай, Йыһанға осмай… Ләкин һәр береһе, башлыса ата-әсәләренең өлгөһөнә эйәреп, киләсәктә барыбер һөнәр һайлай. Уларҙың хәл-торошо, сәләмәтлеге, ғаилә ҡиммәттәренә мөнәсәбәте һ.б. бала саҡта үҙләштергән ҡағиҙәләргә эйәреүҙән, ҡабатлауҙан тора. «Ояһында ни күрһә, осҡанында ла шуны күрә» тигән мәҡәл тап ошо ерлектә барлыҡҡа килгән. Ҡыҫҡаһы, үҫеп килеүсе быуындың сифаты улар алмаштырасаҡ ҡәүемдәрҙең ниндәй орлоҡ-нигеҙ һалып ҡалдырыуына бәйле.

Йәмғиәткә ошо ғәмәлде аңлап эш итеү етмәйерәк шикелле.

**Мәхмүт ХУЖИН.**

## НУРЛЫ ИЖАД



Кескәй сағынан уҡ Вәкил тыуған ауылы Әмин урамында бер ваҡытта ла тауыш-тынһыҙ, ҡәҙимгесә йөрөмәгән. Ауылдаштары иҫләүенсә, йә көй сығарып һыҙғырып, йә йырлап уҙған. Әйтерһең дә, уға урам — сәхнә, өйҙәр — тамашасы. Был нимә? Әллә үсешеп етмәгән төпкө аңдың үҙе тураһында тауыш биреүе шул булдымы икән? Ни әйтһәң дә, ни юраһаң да, әҙәм яҙмышы — ҡылыҡ, фиғел, ғәҙәт сағылышы. Бар ауаз да, хәрәкәт тә бөтөнләйгә юғалмай, ә донъяға ҡөҙрәт биреп тороусы йыһанға яҙыла — бигерәк тә балаларҙыҡы, тип раҫлар ине боронғолар...

Мәктәп йылдары ла үҙенсәлекле: Әминдән Темәс ауылына йәйәү, ә ҡышын саңғыла йөрөп, ун класты тамамлай. Мәктәп данын күтәрерлек спортсы ла була ул. Өҫтәүенә, туғыҙынсы-унынсы кластарға еткәс, клуб мөдире итеп ҡуялар үҙен ауылдаштары. Шиғыр, йыр, бейеү тип йән атһа ла, киләсәктә төбәгебеҙҙең йөҙөк ҡашы булған Сибай филармонияһының директоры, Башҡортостаныбыҙҙың атҡаҙанған һәм халыҡ артисы дәрәжәһенә тиклем үсерен үҙе лә белмәгәндер, уйламағандыр. Хәйер, кем булһа ла — үҙ урынын нурлаған яуаплы шәхес булыр ине ҡайҙа ла. Быға минең иманым камил. Кисәге тыумыштан «ауыл артисы» — бөгөнгө театр сәнғәте ветераны: «Тамашасы йөҙөндә ҡәнәғәтләнеү күрһәм, шул етә — дәртләнеберәк эшләйем», — ти әле лә. Был һүҙҙәргә күпме уй-фекер, ғазап аша һөйөнөс, көйөнөс-ҡыуаныстар, тәжрибә, фәлсәфә һалынғандыр — әйтеүе ҡыйын беҙҙең һымаҡ ябай тамашасыға. Ә бөтә нәмәгә сәхнә, театр сәнғәте бейеклегенән ҡараған ижад кешеһе өсөн, әлбиттә, был тәбиғи.

Иң мөһиме, үҙенә үтә лә талапсан. Шуға күрә һуңғы ете йыл эсендә



*Ж.Б. Мольерҙың «Дон Жуан» спектаклендә В. Йосопов Сганарель ролен башҡарҙы.*

йөҙләп кешенән торған Сибай филармонияһы коллективының эшен ҡырҡа ыңғай яҡҡа үҙгәртте. Шуныһы һөйөндөрә: филармония етәксеһе республикала танылған, билдәле ижадсылар менән тығыҙ бәйләнештә эшләй. Мәҫәлән, «Йөрәктәрҙә ҡалдың йыр булып» программаһының сценарий авторы — драматург Наил Ғәйетбай, музыкаһын Нур Дауытов яҙған, рәссамы — Наил Байбурин. Программаның биҙәлеше заманса зауыҡлы, мәғәнәһе көслө. Республика сәхнәләрендә аншлаг менән барҙы ул. Ш.Бабич ролендә — Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Баязит Байназаров. Башҡа образдарҙы танылған артистар Ғаяз Ғәйетбаев, Сөмбөл Моратова, Рөстәм Хәсәновтар башҡара. Донъяға үҙенән яҡтылыҡ ҡалдырған Ш.Бабич тураһындағы мюзикл заманса яңғырап, халыҡ һөйөүен яуланы. Хоҙайҙың мең рәхмәте менән был мюзикл ике президент грантына лайыҡ булды.

«Миләүшә Ҡаһармакованың «Аҡмулланың аҡ көндәрен юллап» тип исемләнгән театрлаштырылған тамашаһы ла иҫ китмәле ныҡышмалыҡ, оло хеҙмәт талап итте, — тип иҫкә ала Сибай бейеү ансамбле етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Фәнил Әсәҙуллин. — Бына шул мәлдә Вәкил Барый улы килеп: «Тамашаның төп өлөшө ошолайыраҡ, финалын үҙең уйла», — тип китһә лә, бар яҡшылыҡты, матурлыҡты эсенә алған дәрт-энергияны тамашасыларға өләшерлек ижад емеше барлыҡҡа килә лә ҡуя инде». Аҡмулланың быуаттарға һуҙылған образын дүрт йырсы ижад итте. Ринат Ғайсин бала сағын һынландырһа, артабан тамашаның үҙәк тотҡаһын, урта йәштәрҙәге сәсән образын Ғаяз Ғәйетбаев дауам итә. Ғәҙел мәғрифәтсенең образын тамашасының күңел ҡылдарын сиртерлек итеп финалға еткереүсе — Баязит Байназаров. Дөйөмләштереп әйткәндә, Аҡмулла образының дүрт осорға бүленеп, йыр-моң аша бирелеүе — үҙе бер сәнғәти ҡаһарманлыҡ. Республика һәм күрше өлкәләр сәхнәләрендә, Мейәстә һәм М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты саҡырыуы буйынса бер нисә тапҡыр — йәмғеһе һикһәнләп

тапҡыр ҡуйылды. Филармонияның художество етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы Нәсимә Ғиззәтуллина: «Беҙҙең директор Вәкил Барый улы ғәжәп кеше: уйламай һөйләмәй, йор телле. Етәксенең эсендә һәр саҡ «шаян малай» йәки «шаян егет» ултыра. Шул сифаттары уны беҙгә яҡынайта, ышандыра, дәртләндерә: ябай ҙа, шул уҡ ваҡытта талапсан да. Иң отошлоһо — үҙенә талымһыҙ булыуы һөҙөмтәһендә береһенән-береһе үтемлерәк, тамашасы зауығына тап килерлек, бөтә ҡала халҡын йәлеп итерлек саралар ойоштора алыуыбыҙға сикһеҙ шатбыҙ», — тине. Эйе, уның фекеренә ҡушылам, үҙем шаһитмын. Сибайҙа уҙған «Ирәндек мондары», ҡала һәм республика көндәре, Бөйөк Еңеү байрамына арналған ҙур-ҙур сараларҙы халыҡ бөгөн дә оло кинәнес менән телгә ала.

Һуңғы йылдарҙа милләтебеҙҙең тарихи нигеҙҙәренә йыш мөрәжәғәт итә Сибай филармонияһы. Миләүшә Ҡаһарманованың «Наполеон, Ҡаһым түрә һәм башҡалар йәки өс башҡорттоң мажараһы» тип исемләнгән театрлаштырылған тамашаһы нигеҙендә шәхес фекере тураһындағы факттар ята. Шул да мәғлүм булһын: «Беҙ «Любизники-любизар» йырын йырлайбыҙ ҙа күңелде тынысландырабыҙ. Ә бит һуңғы осорҙа 1812 йылғы Ватан һуғышынан һуңғы ваҡиғаларға, хатта Ҡаһым түрәнең биографияһына ла төрлө-төрлө ҡараш бар. Эйе, был — тарихсылар, ғөмүмән ғалимдар эше, уларҙың икмәген бүлешмәйек. Ә бына филармония коллективы көслө ихтыярлы, оло һуғыш тәжрибәһе туплаған милләтебеҙҙең батыр һәм абруйлы улы Ҡаһым түрәнең үлмәҫ образын йыр-моң аша төбәк халҡына еткерҙе».

Үрҙә һанап үткән барлыҡ концерт программалары ла халыҡ күңелендә үҙ урынын, үҙ тәғәйенләнешен тапты. Шуға күрә лә дипломдар, маҡтау ҡағыҙҙары, иҫтәлекле бүләктәр, аҡсалата премиялар, — ҡыҫҡаһы, дәүләт тарафынан баһаланыуҙарын бәхет тип ҡабул итте артистар.


*М. Буранғоловтың «Башҡорт туйы» спектакленән күренеш.*

Филармония директоры тураһында яҙырға йыйынғас, уның менән үҙе тураһында һөйләшеп ултырырға ла тура килде. Ләкин нимә хаҡында һүҙ сыҡмаһын — уның иғтибары үҙенә түгел, ә коллективына йүнәлтелә: тегенең балаһына баҡса урыны

кәрәк, торлаҡ мәсьәләһе ауыр, байтаҡтарҙың хеҙмәт хаҡы бик бәләкәй һ.б., һ.б. Театр — бик киң төшөнсә, әлбиттә, үҙ елкәһендә татып ҡарағандарға. Барыһы ла мөһим. Профессиональ актер, режиссер булыуҙан тыш, хужалыҡ эштәрендә талаптар шаҡтай ҙур. Хис-тойғо аша образдар тыуҙырыу эше генә түгел. Көндәлек ҡара эш — донъяуи көнитмеш: ҡыйыҡ ябырға сөй кәрәк, иҙәнгә паркеттар, линолеум, ишек, тәҙрә рамдары һәм башҡалар. Йүгереп йөрөп эҙләйһең — кесәң буш булмаһа...



*Ф. Буләковтың «Һөйәһеңме-һөймәйһеңме?» спектакленән күренеш. В. Йосопов — Абдулла ролендә.*

Хужаның кем икәнен күргең килһә, өйөнә бар. Унан сыҡ та эшендәге хужалығын ҡара — бөтәһе лә аңлашылыр, ти күпте күргән оло быуын кешеләре. Мин шулай эшләнем дә. Һәр яҡта тәртип. Ярты быуаттан ашыу капиталь ремонт күрмәгән филармония бинаһы ялт итеп тора. Өр-яңы тәҙрәләр, ишектәр ҡуйылған, паркеттар, кафелдәр түшәлгән, тиҫтә-тиҫтә йылдар иҫкелекте хәтерләтеп торған кабинеттар заманса яңы, яҡты. Донъя хәрәкәт итеү закондарына ҡоролған. Кем хеҙмәткә һыйынып йәшәй — ул бер ваҡытта ла отолмай. Вәкил Барый улының эшһөйәрлегенә, моғайын, өс тиҫтәгә яҡын йылдар дауамында Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Башҡорт драма театрында халыҡ иғтибарын йәлеп итерлек образдар ижад итеүе булышлыҡ иткәндер. Мин Сибайҙа тыуып үҫкәс, һәр артистың уйнаған ролдәре иҫемдә. Йәш актер, сәнғәт институтын тамамлап килгәс тә, төрлө амплуала ижад итә башланы. Һауалы, текәрәк ҡиәфәтле егет тип уйлайҙар ине баштараҡ уның тураһында ҡала йәштәре. Үҙенсәлекле роль тыуҙырыу, эҙләнеүҙәр, ижад ғазабы менән дөрләп яныу, үҙ йөҙөн күрһәтеү өсөн рухланып, ҡанатланып эшләгән йылдарында шулай күренгәндер. Был — тәбиғи. Шулай булмаһа, театрҙа ни бары биш йыл эшләү осоронда уға «Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы» исемен бирмәҫтәр ине бит. Бындай уңышлы яҙмыш Сибай театры тарихында тәү тапҡыр. Ҡыуанырлыҡ та, ғорурланырлыҡ та.

Бөгөн дә хәтеремдә: Т.Миңнуллиндың әҫәре буйынса режиссер Ф.Фәләүетдинов ҡуйған «Диләфрүзгә дүрт кейәү» спектаклендә кейәүҙәр ролендә Вәкил Йосопов, Риф Сәйфулин, Әнүәр Ғәтиәтуллин, Хисмәт Дәүләтов сығыш яһаны. Вәкил Йосопов коллегалары араһында иң

йәше булһа ла, беренсе кейәүҙе — Ғалимды сибайҙарҙы «аһ» иттерерлек итеп уйнаны. Сибай драма театрының ижад тормошона был спектакль тулы мәғәнәһендә яңы һулыш өрҙө. Ана шундай аншлаг менән барған спектаклдәрҙе һанап китеүҙе маҡсат итеп алманым. Тик шуныһы мәғлүм төбәк тамашасыһына: трагедиямы, драмамы, комедиямы йәки бөтөнләй икенсе жанрҙамы— ролдәренән хас та Йосоповса тормош ысынбарлығы һирпелә. Р.Янбулатованың «Байрамбикә» трагедияһында — Дэвид, А.Вампиловтың «Төбәктә булған мәҙәктәр» комедияһында — Аккучкин, Ф.Шиллерҙың «Мәкер һәм мөхәббәт» драмаһында — Вурм, Ф.Бүләковтың «Һөйәһеңме-һөймәйһеңме?» трагикомедияһында — Абдулла, «Ҡәһәрле мөхәббәт» драмаһында — Марс, Булат, Ғ.Ибраһимовтың «Башмағым» комедияһында — Кәрим бай, Ж.Б.Мольерҙың «Дон Жуан» комедияһында — Сганарель һ.б. Былар бөтәһе лә — сәхнә хеҙмәтенә бирелгән дүрт тиҫтә йыл сынығыу, нығыныу, танылыу, бәхетле ижад осоро. Хатта, хәтерләүемсә, ҡайһы бер спектаклдәрҙә бер юлы ике образды ижад итте. Әйтәйек, Т.Миңнуллиндың «Үҙебеҙ һайлаған яҙмыш»ында — Туҡтаров һәм Айҙаров. Вәкил Барый улының ролдәрендә халыҡсанлыҡ һыҙаттары, тыуған яғы Баймаҡ ир-егеттәренең булмышы, холоҡфиғелдәре сарпылып ҡала.

Тағы бер спектакль — Н.Ғәйетбайҙың «Аҡмулланың аҡ төндәре» әҫәре буйынса ҡуйылған тамаша күңелемдә уйылып ҡалған. Уны көслө состав әҙерләне: режиссеры — Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Сәлихйән Әфләтунов, рәссамдары — С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Георгий Калитов, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Наил Байбурин, композиторы — Ш.Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты Юлай Үҙәнбаев. Бөйөк Аристотель үҙенең әҫәрен сәхнәгә сығарыр өсөн артистар араһында һәр ваҡыт әйтеш ойошторған. Бында ла шул алым ҡулланылған кеүек: Башҡортостандың халыҡ артисы Риф Сәйфуллин — Иҫәнгилде, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Хисмәт Дәүләтов менән Вәкил Йосопов бер бөтөн образ — йәғни Х. Дәүләтов — 64 йәшлек Аҡмулла, ә Вәкил Йосопов — 30 йәштәге герой. Әйтерһең дә, драматург 30 йәшлек Аҡмулланы Вәкил Барый улы өсөн махсус яҙған. Актерҙың тауыш тембры, һүҙҙәрҙең эске һәм тышҡы мәғәнәһенә баҫым яһауы, үҙенең сәхнәлә тотошо — шәриғәт, мәғрифәт, хәҡиҡәт юлында йөрөүсенең тап үҙе. Ҡыҫҡаһы, Хисмәт Дәүләтов менән Вәкил Йосопов уй-фекерҙәрен бер образға һыйҙырып, тамашасыларҙы донъяуи хәҡиҡәткә саҡырҙы, уйландырҙы.

Оҙаҡ ваҡыт халыҡ күңелендә һаҡланырлыҡ классик ролдәр хатта бөйөктәргә лә һәр саҡ тәтемәй. Бына Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең күренекле режиссеры Р.Исрафилов Сибай театрында Мольерҙың «Дон Жуан» комедияһын ҡуйҙы. Унда Олег Ханов — Дон Жуан, Вәкил

Йосопов — Сганарель. Был турала билдәле яҙыусы Аҫылғужа Баһумановтың «Дон Жуан» башҡорт сәхнәһендә» тип исемләнгән йөкмәткеле мәҡәләһендә ошондай юлдар бар: «Дон Жуан менән Сганарелдә бөтөндөң ике яртыһын күреп, режиссер һәм артистар ҙа ота. Бигерәк тә Сганарелде башҡарған Вәкил Йосопов һиҙҙертте. Ни тиһәң дә, Вәкил дә, Олег та бер-береһенә тиң уйнаны. Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай театры артисы Өфөнән килгән, дәрәжәле вазифалары, исем-аты юғарыраҡ булған артистың абруй-даны алдында баҙап ҡалманы, үҙен кесерәйтеп тотманы, өҫтөнөрәк торорға ла тырышманы. Шәп!» Яҙыусының шәхси фекере Сибай тамашасылары фекере менән тап килә.

Спектаклдән спектаклгә үҫә, камиллаша барған талант эйәһенә нимәлер етмәй, ижад даирәһе тарая, ҡыҫынҡы була башлай. Был, әлбиттә, — үҫеш юлына көйләнгәндәрҙең барыһында ла була торған хәл. Бәхетенә күрә, шул осорҙа БР Мәҙәниәт министрлығынан Вәкил Йосоповты Мәскәүгә режиссерҙар әҙерләй торған юғары уҡыу йортона ебәрәләр. Әле генә уҡып ҡайтҡан сәхнә оҫтаһын Татарстандың Әлмәт театры етәкселеге үҙенә саҡырып ала. Көтөлмәгән тәҡдим режиссерға ҡанаттар ҡуя. Бында ул Н.Ғәйетбайҙың «Һөйәркәнде шкафҡа йәшер», Ф.Бүләковтың «Һөйәһеңме-һөймәйһеңме?» әҫәрҙәрен сәхнәгә ҡуя. Яңы ерҙә бөтөнләй башҡаса мөмкинселектәр асыла. Ижад емештәре шундай һут бирә — хатта Әлмәт театры артистарының бер нисәүһенең «Татарстандың атҡаҙанған артисы» исеме алыуында ла Йосопов ҡуйған спектаклдең өлөшө бар. Шулай уҡ Мирхәйҙәр Фәйзи исемендәге Ырымбур дәүләт драма театрында ла быға тиклем ҡулланылмаған, тапалмаған штрихтар уйлап сығарып, пьесаның йөкмәткеһен үҙгәртмәйенсә лә театр сәнғәтендә балҡышлы спектаклдәр әҙерләп булғанын иҫбат итте. Был турала Ырымбурҙа донъя күреп килгән «Каруанһарай» гәзитендә, башҡа матбуғатта яҙылды. Бер аҙ ижад һыуһынын ҡандырғандан һуң, Сибайға килеп төпләнде Йосоповтар ғаиләһе.

Бер һөйләшеп ултырғанда Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы Әлфирә Фәйзрахман ҡыҙынан: «Ике тәкә башы бер ҡаҙанға һыймай, тигән һүҙгә ҡарашығыҙ нисек? Ике актерға ғаиләлә ауыр түгелме?» — тип һораным. Ул: «Ҡыйын да, рәхәт тә. Яҡшылығы-рәхәтлеге шул — бер-береңә терәк, рухташ, йәндәш булып, кәңәшләшеп эшләйһең. Беҙҙең өсөн театр менән ағыуланыу, унан ләззәт табыу — йәшәү рәүешебеҙ, булмышыбыҙ», — тип яуапланы.

Икеһе лә егәрле, эштән ҡурҡмайҙар. Тормошта әҙәмсә йәшәү өсөн уңайлыҡтар тыуҙырыу ҙа атай кеше елкәһендә. Әйткәндәй, ул шәп педагог та. Ашыҡҡан етмәҫ, бойорған етер, тиһәләр ҙә, шәкерттәренең барыһын да сослоҡҡа, етеҙлеккә, тәүәккәллеккә көйләгән. Мәҫәлән, уҡыусылары Иҙел Аралбаев — «Ирәндек моңдары», «Урал моңдары»,

«Башҡорт моңо» еңеүсеһе. Динар Ғөбәйҙуллин йыр буйынса алдынғылар рәтендә. Петербургта йәшәүсе уҡыусыһы Айнур Асҡаров «Еңмеш» фильмын төшөрөп, Рәсәй һәм сит илдәр буйынса уҙғарылған конкурстарҙың береһендә махсус приздар менән бүләкләнде.

Абруйлы йәшкә еткән, тау-тау эштәрҙе башҡарған сәнғәт әһеленең даны халыҡҡа таралһын, уңыш уңышҡа ялғанһын тип, берәү ҙә уға бәхет керәмен түшәп ҡуймағандыр. Тик маңлайына сиртмәк, арҡаһына туҡмаҡ, ҡулға һуҡмаҡ алмайынса эштең тешен һындыра алмағандыр. Тормоштоң мең төрлө хикмәттәрен, аҡ-ҡара яҡтарын аңлатҡандарҙыр тирә-яғында йөрөүселәр. Көлмәҫкә, янмаҫҡа, иламаҫҡа, көймәҫкә кеше таш йөрәк түгел дә. Ижад үрҙәре , ай-һай, бормалы, тайғаҡ. Ана шул юлдарҙы быуып торған кәртәләрҙе йырып, соҡорсаҡырҙарҙы ыңғай атлап сыҡҡан бәндәһен Хоҙай Тәғәлә бер ваҡытта ла өлөшһөҙ ҡалдырмай. Вәкил Йосопов та матур һәм татыу ғаилә ҡорған. Бынамын тигән Айҙар исемле ул үҫтерәләр. Егет Өфө сәнғәт академияһын тамамлаған, Сибай филармонияһының музыкаль яҡтан биҙәүсеһе. Өлкән ҡыҙҙары Айгөл Йосопова Мәскәүҙә йәшәй, «Мосфильм» киноконцернында кастинг буйынса директор. Ейәне Айнур Исламов Илья Тилькиндың киносценарийы буйынса «Ҡорал» тип аталған нәфис фильмда төп ролдәрҙең береһен — Әхмәт ролен башҡара. Ә элегерәк Айнур балалар өсөн «Цветок багульника», «Блаженный» фильмдарында уйнаған.

Тормош ҡануны шулай: йәшәйешең, көнкүрешең, хеҙмәт- шөғөлөң балаларыңа фәһем һәм өлгө бирерлек булһа — улар һинең сағылышың, һине ҡабатлай. Тимәк, был йүнәлештә лә ғүмер бушҡа уҙмаған. Юбилярҙың абруйлы 60 йәше бейеклегенән тиҫтә-тиҫтә йылдар артҡа сигенеп, теге ауыл урамын сәхнә, өйҙәрҙе тамашасы иткән «тыумыштан артист» малайҙың ошо көндәргә килеп етер өсөн сарыф ителгән энергияһы халыҡ мөхәббәте булып үҙенә әйләнеп ҡайтты. Ул — республика башҡорт театр сәнғәтенең ҡабатланмаҫ олуғ шәхесе, ветераны, хатта театр сәнғәтенең бөгөнгө йөҙөн, кимәлен тотоп тороусыларҙың береһе. Артабан да ҙур ваҡиға булырҙай, бер-береһен ҡабатламаған яңынан-яңы программа проекттары, образдар тыуҙырырға яҙһын ижадсыға.

**Таңһылыу ҒӘЙНУЛЛИНА.**

## Дәүләт мәнфәғәте

Үҙен кешегә иҫәпләгән һәр кем заман һалҡынында өшөп-туңмай, аҫҡа интекмәй, «дәүләт мәнфәғәте» тип асылған һуғыштарҙа ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуймай, имен тормош кисереүгә хоҡуҡлы. «Дәүләт мәнфәғәте», «интернациональ бурыс» тип үҙ граждандарын төрлө һуғыштарға ебәреүҙең дөйөм кешелек алдында оло енәйәт икәнен белә тороп, идара итеүселәр «донъяла тәртип һаҡлау» лозунгыһы артында сәйәси буталсыҡлыҡҡа юл аса. Уларға, дәүләт мәнфәғәтен һаҡларға кәрәк икән, уны үҙ дәүләтегеҙ эсендә һаҡлағыҙ, тип әйтке килә.

Һәр кеше йәшәү дәүерендә, бәлки, әхирәттә лә, үҙе һәм яҡындары тураһында тик яҡшы һүҙҙәр ишетеүгә мохтаж. Донъяла күп осраҡта кеше һәм шәхес мәнфәғәттәре дәүләт мәнфәғәттәре менән тап килмәй, сөнки кеше һәр замандың диктаторҙары, дәүләт мәнфәғәтен яҡлаусы фанатиктар, дәүләт ҡаҙанынан һимеҙ ҡалъя һоғоноусы, кеше яҙмыштарын урман киҫкәндә осҡан юныҫҡылай күреп киҙәнеүсе балталылар аҫтында һығыла, бөгөлә. Ҡыйырһытыуҙарға түҙеп йәшәрлек хәлдәре ҡалмағанда ғына, ата-бабаларыбыҙ ихтилалға күтәрелгән, үҙ мәнфәғәттәрен дәүләт мәнфәғәте тип күрһәтергә теләгән баҫҡынсыларға ҡаршы тиҫтә йылдар буйына ҡаршылыҡ күрһәткән. Улар шулай башҡорт тарихының һәр битен күп осраҡта йылғалай ҡан менән яҙған, үҙенең Салауат Юлаев, Кинйә Арыҫланов, Ҡаһым түрә, Шәйехзада Бабич, Муса Мортазин кеүек батырҙарын, алдынғы ҡарашлы аҡыл эйәләрен аҙмы юғалтҡан?!

Дәүләт мәнфәғәтен һаҡлаған күп һуғыштарҙа ғүмерҙәрен һалған милләттәштәребеҙҙең яҡты рухтары иҫәндәрҙең күңел түрендә йәшәргә хаҡлы. Хоҙай биргән ғүмерҙәрен аямаған батырҙарҙың яҡты образдары тыуған йәки үлгән ерендә генә түгел, уларҙың аяҡтары баҫҡан һәр ҙур ҡалала монумент итеп кәүҙәләндерелһен ине. Баш ҡалабыҙ Өфөлә ауырлыҡ менән булһа ла яңынан-яңы һәйкәлдәр ҡуйылыуы – шатлыҡлы хәл. Стәрлетамаҡ ҡалаһында иһә, үткән быуат тарихында Ленин исемендәге 2-се лицей-интернатында уҡып, Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған шағирҙарға, Салауат Юлаев менән Шәһит Хоҙайбирҙингә, Еңеү паркында маршал Георгий Жуковҡа һәм Бөйөк Ватан һуғышында Советтар Союзы Геройы исеме бирелгән тиҫтәләгән ҡала кешеләренә ҡуйылған бюстарҙан башҡа, тарихи шәхестәрҙең исемдәре мәңгеләштерелмәне. (Аҡ армияға хеҙмәт иткән чехословактар тарафынан һәләк ителгән большевиктарға һәм В. И. Ленинға ҡуйылған һәйкәлдәрҙе иҫәпләргәме-юҡмы, белмәйем).

Яңыраҡ тарихҡа күҙ һалғанда, һис кәрәге булмаған һуғыштарҙа һәләк булған интернационалистарға ла һәйкәл ҡуйылды. Бәлки, ул да кәрәктер. Уйымса, үткән быуат тарихы уҡмашып ятҡан ҙур ҡалала яҙылып үтелгән, монумент тип атарға яраҡһыҙ һәйкәлдәр генә аҙ. Туҡталып, ҡарап үтмәһәң, күҙгә лә

салынмаҫтай, ябайлығы менән ҙур ҡалаға түгел, район үҙәктәренә генә ярарлыҡ «Мәңгелек ут» һәйкәлен алайыҡ. Уны күргәс, «Ниңә икән шул хәтле ябайлыҡҡа, арзанлыҡҡа ынтылыу аңдарыбыҙҙы томалаған?» тигән үкендергес тойғо ҡала. Унда күптән реконструкция үткәреп, башҡортса яҙыуҙар һәм һуғыш йылдарында тыл хеҙмәткәрҙәренең ҡаһарманлыҡтарын кәүҙәләндергән композиция ҡуйырға кәрәктер. Ә беҙҙә һәйкәлдең тирә-яғындағы асфальтты яңыртыуҙан уҙмайҙар. Ул һалынған ваҡытта ҡалабыҙҙың ҙур химия заводтары Мәскәү өсөн генә табышлы булып эшләмәй ине бит... Көрсөк заманында яҙмаларҙың әһәмиәте лә булмаҫ, ләкин монументтар иҫәндәр өсөн кәрәк, уларҙы һәр кем һоҡланырлыҡ итеп төҙөү зарур.

Ханты-Манси автономиялы округының Түбәнге Варта ҡалаһында булырға тура килгәйне. Ҡырҡ йыл элек кала урынында ҡала үҙендә йәшәгән халыҡ һаны буйынса беҙҙең Стәрлетамаҡты ҡыуып еткән. Унда йәшәүселәрҙең яртыһы булмаһа ла, өстән бер өлөшө – беҙҙең Башҡортостандан. Яңы райондарҙа төҙөлгән йорттарҙың архитектураһына, матурлығына ҡарап һоҡланмау мөмкин түгел. Тарихы ҙур булмаһа ла, ул ҡалала һәйкәлдәр ҙә бар.

Фән эйәләре, күрәҙәселәр раҫлағанса, быйыл ахрызаман булмаһа, яңы быуаттарға киләсәк быуындың рухи донъяһын байытыуҙы дәүләт мәнфәғәте итеп алырға, быны өсөн ғорурлыҡ тойғоһо уятырҙай монументтар кәрәк. Мәктәптәрҙә урыҫ дәүләтенең матурлап яҙылған тарихын һәм дин дәрестәрен генә уҡытыу етер инде. Тубыл менән Оло Иҙел (Волга элек шулай аталған – **Б.К.**) йылғалары араһындағы киңлектәрҙә, Көньяҡ Урал тауҙары итәктәрендә йәшәгән боронғо башҡорттарҙың, юрматы ырыуы ерҙәрендә нигеҙләнгән ҡалабыҙ тарихын да оноторға хаҡыбыҙ юҡ. Меңәр йылдар ошо биләмәлә «Урал батыр» эпосын ижад иткән халыҡтың үҙ тарихын нигеҙле өйрәнергә, уның менән ғорурланырға хоҡуғы бар.

Милләт ғорурлығы булған «Урал батыр» эпосына һәйкәл Стәрлетамаҡта һалынырға тейеш. Башҡортостан хөкүмәте Өфөнө генә ҡайғыртмайынса, беҙҙең ҡалаға ла ярҙам ҡулы һуҙырға бурыслы. Һәйкәл өсөн урындарҙы Октябрь проспектында ла, Хоҙайбирҙин урамында ла табып була. Сөнки «Урал батыр»ҙы Ғәбит Арғынбаев һәм Хәмит сәсәндәрҙән Баймаҡ районының ике ауылында 1910 йылда яҙып алған күренекле фольклорсы, драматург Мөхәмәтша Буранғолов 1938 йылға тиклем тиҫтә йылдан артыҡ беҙҙең ҡалала уҡытыусылар техникумында башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытҡан, «халыҡ дошманы» тип ике тапҡыр ҡулға алынған. Ҡала төрмәһендә ултырып сыҡҡан, шул йылдарҙа байтаҡ драмаларын яҙған, уларҙың күбеһе үҙе иҫән ваҡытта ла ҡала сәхнәһендә ҡуйылған. Ул һәйкәлде күҙ алдына килтереүемсә, күкрәктәрен киреп баҫып торған ғорур һынлы ике сәсән уртаһында буласаҡ башҡорт халыҡ сәсәне, ул ваҡытта 22 йәшлек егет, эпосты яҙып ултыра... Ул «Урал батыр» эпосына ғына түгел, башҡорт халҡының намыҫы булған күп сәсәндәргә лә һәйкәл итеп күҙ алдына килтерелә. Кеше хоҡуҡтары, «аҙ һанлы» тип аталған милләттәр мәнфәғәте Рәсәй дәүләтенең генә мәнфәғәттәрен ҡайғыртыусы әҙәмдәрҙең аяҡтары аҫтында тапалмаһын ине.

**Кәрим БУЛАТ.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

## Яугир әҙип һәр саҡ юлда

Совет осоронда Илеш районында Башҡортостан Яҙыусылар союзы менән «Ағиҙел» журналы редакцияһы тарафынан әҙәби лекторий ойошторолғайны. Ул бер нисә йыл дауам итте. Төп маҡсат – халыҡҡа рухи аҙыҡ биреү, әҙәби зауыҡ тәрбиәләү. Дәрестәр юғары кимәлдә үтте. Башта, әйтәйек, етәксе Суфиян Поварисов ун минут самаһы әҙәбиәттәге яңылыҡтар тураһында һөйләй. Бер ғалим 30 минут әҙәбиәт, сәнғәт, мәҙәниәт хаҡында сығыш яһай. Унан һуң жанрҙар буйынса (драматургия, поэзия, проза) фекер алышыуҙар китә. Беренсе дәрестә, мәҫәлән, Суфиян Поварисов лекторийҙың маҡсатын аңлатты. Академик Ғайса Хөсәйенов ошо төбәктәге халыҡтарҙың тарихи ерлеген, бик боронғо замандарҙа ниндәй ҡәүем-ҡәбиләләр менән аралашып йәшәүен асыҡланы. Күренекле шағирҙар Муса Ғәли, Әнғәм Атнабаев, Рафаэль Сафин һ.б. ярыша-ярыша яңы шиғырҙарын уҡып, залдағыларҙың йөрәген поэтик моңға байытты, был моң һуңынан башҡорт шиғриәте тураһында һөйләшеүгә ныҡлы нигеҙ булды. Халыҡтың эстетик зауығы һаман үҫә, фекер йөрөтөү офоҡтары киңәйә бара. Әҙиптәребеҙ генә түгел, халыҡ та матур-матур сығыштар яһай, төрлө эстәлекле, мәғәнәле, уйландыра торған һорауҙар бирелә. Хушлашыу дәресендә әҙиптәр: «Илеш халҡына күпме рухи байлыҡ биргәнбеҙҙер, уныһы һеҙгә генә мәғлүм, ә һеҙҙән алған рухи байлыҡты күңел күгенә күп көндәрҙек», – тигән һүҙҙәрҙе әйтте.

Филология фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Суфиян Поварисовтың күңеленә халыҡ менән осрашып йәшәү заңы ныҡ һеңгән, күрәһең. 88 йәштә булыуына ҡарамаҫтан, уның дәртле күңеле, дарманлы йөрәге һаман кешеләр араһына ашҡына. Дөрөҫөрәге – уны саҡыралар. Тимәк, әҫәрҙәре яратып уҡыла.

Һуңғы йылдарҙа сәмләнеп, ике трилогия-эпопея яҙҙы уҙаман. Шуның беренсеһе («Пәйғәмбәр таңы», «Күктең етенсе ҡатында», «Ожмахҡа бер аҙым» романдары) ун йыл эсендә өс тапҡыр баҫылды. Тәрәнерәк фекер йөрөтһәң, шуны аңлайһың: был бәхет уға халыҡтан килә. Төрлө урындарға саҡырылыуы шуның бер шәфәғәтелер. Үткән йылда Илешкә генә лә өс мәртәбә саҡырғайнылар. Благовещен, Дүртөйлө, Ҡырмыҫҡалы райондарында булды. Быйыл Кушнаренко, Ауырғазы райондарына, Стәрлетамаҡ ҡалаһына барҙы. Ат аунаған ерҙә төк ҡала, тигәндәй, һәр осрашыуҙа яҡты иҫтәлек, аң-аҡыл рухы, хис-тойғо йылылығы ҡалдырып китә фронтовик. Хәҙерге әҙиптәребеҙгә лә шулай булырға яҙһын.

**С. НӘҒИМОВ.**

---

## Башымдан үткәндәр

Мин Ғафури районының Яңғыҙҡайын ауылында 1918 йылда ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуғанмын. Ул ауыр йылдарҙың аслы-туҡлы тормошо беҙгә лә ҡағыла: атайым Сәхиулла Граждандар һуғышынан ҡайтып донъя ҡуйғас, бер апайым менән һеңлем аслыҡтан үлә. Мин әсәйем менән генә ҡалғас, ғаиләһе аслыҡтан ҡырылған бер ағай беҙҙе ҡарарға алды. Үҙ ауылыбыҙҙа ете йыллыҡ мәктәп, артабан 1937 йылда Стәрлетамаҡта педагогия техникумын тамамлағандан һуң, мине Мәғариф министрлығы йүнәлтмәһе буйынса, Мәсетле районына уҡытырға ебәрҙеләр. Тәүге йылда Ишәле башланғыс мәктәбендә – уҡытыусы, икенсе йылында мәктәп мөдире булып эшләгәндән һуң, район мәғариф бүлегенә

инспектор итеп алдылар. Унда ла бер йыл ғына эшләп өлгөрҙөм, 1940 йылдың көҙөндә мине хәрби хеҙмәткә саҡырҙылар. Бөйөк Ватан һуғышы башланғанға тиклем Белоруссияла Брест ҡәлғәһе районында хеҙмәт иттем һәм хәрби хәрәкәттәр башланған тәүге көндә үк контузияландым. Баштан-аяҡ ҡоралланған, Европала күп илдәрҙе баҫып алып, тәжрибә туплаған дошманға ҡаршы тороу ауыр ине. Минск - Смоленск йүнәлешендә беҙ ҡамауға эләктек. Фашистарҙың Белоподляцк, Демблин ҡәлғәһе, Варшава ҡалаһы янындағы Седльце лагерҙарында михнәт сигеп, март айында бер нисә ҡатлы тимер сымдарҙы ҡырҡып ҡасҡас Висла, Буг йылғаларын кисеп, Барановичи районында партизандар отрядына барып ҡушылғансы 40 тәүлек урманда ағас ҡайыры, үлән тамырҙары менән туҡланып, Польша һәм Белоруссияның әҙәм үткеһеҙ һаҙлы Беловежье урмандарында йөрөргә тура килде. Беҙ юлыҡҡан партизандар махсус задание үтәгән 14-се айырым тәғәйенләнештәге отряд булып сыҡты.

Дошман лагерынан ҡасыуҙы ойоштороусы комиссар Әлим Яҡупов төркөмөндә һигеҙ кеше булып, шуларҙың етеһе элекке полк йәки дивизия командирҙары ине. Араларында мин ярҙамсы ролен үтәгән, ауыр заданиелар йөкмәтелгән кеше булдым. Тәүҙә төркөмдә һигеҙ кеше булһаҡ та, икеһе юлда астан үлде, тағы икәүҙе фашистарға хеҙмәт итеүсе полицайҙар эләктерҙе. Үҙебеҙ ҡушылған отряд составында Көнбайыш Украина һәм Көнбайыш Белоруссияла Берлин – Варшава, Киев – Минск йүнәлешендәге тимер юлдарҙа дошмандың ғәскәр, ҡорал тейәлгән алты эшелонын шартлатыуҙа, «Юнкерс-54» хәрби самолетын атып төшөрөп, документтарын алыуҙа һ.б. мөһим хәрби заданиелар үтәүҙә ҡатнаштым. Бынан тыш, дошманға хеҙмәт иткән 829-сы татар һәм башҡорттарҙан торған легионерҙар полкының 18 һалдатын ҡоралды килеш партизандар яғына сығырға күндерҙем. Уларҙың араһында ауылдашым Ғәбделғәни Вәлишин да бар ине. Бер һуғышта Ғәбделғәни ҡул пулеметы менән фашистарға ҡаршы торғанда ҡаты яраланып, әсирлеккә эләгә һәм язалап үлтерелә. Икенсе яҡташым, Әлшәй районының Ташлы ауылы егете Динәхмәт Әҙелгәрәев, һуғыштың аҙағына тиклем алғы һыҙыҡта булып, тыуған яғына наградалар алып ҡайтты.

1944 йылдың декабрь аҙаҡтарында Ҡыҙыл Армияның регуляр частарына барып ҡушылғас, 6-сы дивизияның 4-се полкында разведка командиры булып хеҙмәт итеп, Эльба йылғаһынаса ара үттем. 1945 йылдың 25 апрелендә Дрезден ҡалаһы өсөн барған һуғышта яраланып, госпиталгә оҙатылдым. Һауығып сыҡҡас, Австрияның Баден ҡалаһында урынлашҡан полк мәктәбендә писарь вазифаһын башҡарырға тура килде. Шул уҡ йылдың көҙөндә Венгрия, Чехословакия, Румыния аша Советтар Союзына сығып, Башҡортостанға ҡайтып төштөм. Был юлы шул уҡ Мәсетле районының Теләш ете йыллыҡ мәктәбенә уҡытырға ебәрҙеләр. Артабан ун өс йыл Салауат районында завуч, директор вазифаларын башҡарҙым. Алтмыш йәшем тулғас, персональ пенсионер булып, тыуған яғым Ғафури районына ҡайттым. Хаҡлы ялда булһам да, тик ятманым, район мәғариф бүлегендә 13 йыл инспектор-методист булып эшләнем. Мәктәп һәм ата-әсәләр араһындағы эшемде юғары баһалап, район Советы миңә «Почетлы граждан» тигән юғары исем бирҙе.

Миңә арнап Белоруссияның Столин ҡалаһындағы 2-се, Украинаның Сарный районы Миляши һәм үҙебеҙҙең Яңғыҙҡайын урта мәктәптәрендә хәрби хеҙмәт юлым тураһында материалдар урынлаштырылған. Шулай итеп, оҙон һәм һикәлтәле юлдар үтеп, 93 йәшемде тултырыуыма ышанмай ҙа торам.

**Сәйфулла МӘЖИТОВ,**
**Бөйөк Ватан һуғышы ветераны.**
**Ғафури районы.**

## Үҙегеҙ ғәйепле!

Гәзит-журналдарҙы ҡулға алған, телевизорҙы асҡан һайын күңелем болоҡһой: ата-әсәһе иҫән булып та, етем һаналған балаларҙың яҙмышы тураһында күп яҙалар, һөйләйҙәр. Кемеһенәлер яҙмыш аяулы: һәйбәт ғаиләгә тәрбиәгә алынғандар, өҫтәре бөтөн, тамаҡтары туҡ, ата-әсә наҙын күреп йәшәйҙәр; ҡайһылары тәрбиәгә алған ғаиләләрҙән уңмаған, туҡмалған, йәрәхәтләнгән, хатта үлтерелгәндәре лә бар. Балалар приюттары, балалар йорттары тулы социаль етемдәр.

Бөйөк Ватан һуғышы һәм унан һуңғы йылдарҙа ла был ҡәҙере етемлек бөтә ил өҫтөнә сыҡмағайны. Ни булды әҙәм балаларына? Тормош ауырлығына һылтанып үҙ балаларынан баш тартҡан ата-әсәне аҡлап буламы? Революция, һуғыш, аслыҡ йылдарында ла кеше үҙенекен дә, сит баланы ла бауырына баҫты. Хәҙер тормош матур, аслыҡ-юҡлыҡ та йонсотмай, ә етем балаларҙың иҫәбе артҡандан-арта. Эскелек, әҙәпһеҙлек ғәйепле бында...

Һуғыштан һуңғы ауыр йылдарҙа төҙөлөштә эшләнем. Хеҙмәттәшем, фронтовик Йәғәфәр Ялалов ағайҙы айырыуса йылылыҡ менән иҫкә алам. Кешелекле, алсаҡ, көләс йөҙлө ине ул. Бер телем икмәкте лә бүлешеп ашай торғайныҡ. Һуғыш яландарын арҡырынан буйға үткән. Смоленск ҡалаһын немецтар бомбаға тота башлағас, Йәғәфәр ағай бер өйҙөң подвалына инеп боҫа. Ҡапыл сабый бала илауы ишетә. Ипләберәк ҡараһа, сүп-сар өйөмө аҫтында нимәлер ҡыбырҙай. Бәй, тупраҡҡа, балсыҡҡа буялып бөткән ир бала үле әсәһенән имсәк таптыра ла баһа! Йәғәфәр ағай атыш баҫылғанын көтә лә, сабыйҙы шинеленең итәгенә төрөп алып сығып, етем балалар йыйған обозға тапшыра. Документтәләне булмау сәбәпле, малайҙы үҙенең исем-фамилияһына яҙҙыра.

Йылдар үтә. Йәғәфәр ағай ҙа тыуған ауылына ҡайта, өйләнә, донъя көтә, еңгәй менән биш бала тәрбиәләй.

– Бер көн телеграмма алдым, әлеге мин һуғышта тапҡан малай ғаиләһе менән ҡунаҡҡа киләсәге тураһында белдергән. Эй еңгәгеҙ туҙынып китте, һуғышта йөрөмәгәнһең һин, мәрйәләр артынан сапҡанһың, ишшу, ниместәрҙе ҡыуҙым, тигән булаһың бит әле, – тип тетмәкәйемде тетә генә. Әйтеп тә ҡарайым, ҡайҙа инде тыңлау! Саҡ тынысландырҙым, – тип һөйләгәйне Йәғәфәр ағай. – Алтынсы улым үҫкән, хәрби училище тамамлаған. Кәләше, ике ҡыҙы менән килеп төштө был. «Здравствуй, папа!» – тип иҫәнләште, ҡосаҡлап алды.

Башҡаса араларҙы өҙмәнек, атай тип йыл да ҡайтып торалар, балаларҙы үҫтергәндә хатта аҡса менән ярҙам итеште. Бына ошондай хәлдәр ҙә була икән, ҡустым. Үҙем үҫтерә алмаһам да, табылдыҡ улымды ныҡ яҡын күрәм, еңгәң дә «ах!» итеп тора, – тип һөйләгәйне ул.

Йәғәфәр Ялалов кеүек яугирҙар күп ине. Икмәккә интеккән саҡтарҙа ла улар тормош иптәштәре менән итәк тултырып бала үҫтерҙе, эскелеккә һалышманы, балаларын да етем итмәне. Өйҙә айыҡ аҡыллы, көслө рухлы, уңған хужа булғанда, ҡатын-ҡыҙ ҙа үҙ урынын белә, эскелекте лә уйламай. Бер ҡайҙа ла эшләмәй, тапҡанын араҡыға тотоноп, йәмһеҙ ҡыланып, ғаиләһе алдында яуаплылыҡ тоймаған ир-егеттәрҙең күбеһенең ҡатыны ла ошо юлдан китә. Балаларығыҙҙың етем ҡалыуына үҙегеҙ генә ғәйепле, эскесе, ялҡау ата-әсә!

**Ирек ИШМОРАТОВ.**
**Ҡырмыҫҡалы ауылы.**

***

Башҡортостандың халыҡ шағиры, БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайҙың мәғариф, мәҙәниәт, фән, спорт һәм йәштәр эше буйынса комитет рәйесе Рауил Бикбаев, шағир Зөфәр Вәлит, яҙыусы Хәйҙәр Тапаҡов Баймаҡ районы хакимиәте башлығы Илшат Хәмит улы Ситдиҡовтың саҡырыуы буйынса «Баланы – ғаилә өсөн, ғаиләне бала өсөн һаҡлайыҡ» исеме аҫтында үткән конференцияла ҡатнашты. Улар бынан тыш Баймаҡ лицей-интернатында (директоры Салауат Әхмәҙи улы Азаматов) уҡыусылар менән осрашты, лицейға үҙҙәренең китаптарын бүләк итте. Артабан үҙәк китапхана (директоры – Луиза Ҡаһарман ҡыҙы Дәүләтшина) осрашыу булды.

Яҙыусылар район хакимиәте башлығы урынбаҫары Илдус Зәйнуллин етәкселегендә Башҡортостандың беренсе баш ҡалаһы Теләстә Башҡорт хөкүмәте йорто музейын да ҡараны.

***

Стәрлетамаҡ районында Имен бала саҡ һәм ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу йылына арналған Башҡорт балалар әҙәбиәте көндәре үтте. Әҙиптәр Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Рәшиҙә Бик, Илдус Тимерханов, Гүзәл Ситдиҡова, Әнисә Таһирова, Факил Мырҙаҡаев, Әлфиә Әсәҙуллина, Любовь Әфләтунова, Рәшит Заһиҙуллин, өс төркөмгә бүленеп, Ишбарс, Оло Ҡуғанаҡ, Айыусы, Яңы Федоровка, Талас, Үрге Уҫылы ауылдарында мәктәп уҡыусылары менән осрашты, ижадтары менән таныштырҙы, китаптарын бүләк итте.

***

Нуриман районы үҙәге Ҡыҙыл Ярҙа республикала беренсе тапҡыр Уҡытыусыға һәйкәл асылды. Проект инициаторҙары – район хакимиәте башлығы А.Р. Носратуллин менән мәғариф бүлеге мөдире М.Д. Ғәлиәскәров, һәйкәл спонсорҙары – Р.И. Байназаров, РСФСР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, Брест герой-крепосы оборонаһында ҡатнашыусы Р.С. Исмәғилев, Башҡортостан Республикаһы Президенты аппараты, Мәғариф министрлығы вәкилдәре һүҙҙәренсә, мәғрифәтселек традициялары менән дан алған был районда уҡытыусы шәхесенә һәм яҙмышына шундай оло иғтибар һис осраҡлы хәл түгел. Тап Нуриман, Ҡариҙел, Мишкә, Асҡын районлары урмандарында 30-сы йылдарҙа меңәрләгән репрессияланғандар яҙмышын бүлешкән уҡытыусылар һәм уларҙың балалары интеккән ГУЛАГ структураһының Башлаг бүлеге урынлашҡан була.

М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессорҙары К. Әхиәров, Р. Әмиров һәйкәлдең юғары әхлаҡи һәм профессиональ мәғәнәгә эйә булыуын билдәләп, Халыҡ мәғарифы музейына үҙҙәренең китаптарын һәм БР Яҙыусылар союзының, «Ағиҙел» журналының автографлы китаптарын бүләк итте.

***

Ғафури районының мәҙәниәт һарайында Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ғәли Ибраһимов, Жәлил Кейекбаев исемендәге премиялар лауреаты шағир һәм драматург Кәбир Аҡбашевҡа 80 йәш тулыуға арналған ижад кисәһе уҙғарылды.

Юбилярға район хакимиәте башлығы Рәмил Бохаров, Башҡортостан Яҙыусылар союзы исеменән шағирә һәм прозаик Гөлнур Яҡупова ҡотлау еткерҙе. Сарала танылған йырсылар Булат Йосопов, Рәзилә Хәбибуллина, Фруза Ишмөхәмәтова, Зилара Бикбова, Хызыр Нәзиров Кәбир Аҡбашев һүҙҙәренә Роза Сәхәүетдинова, Рәмил Ғимрани һәм башҡа композиторҙар яҙған йырҙарҙы башҡарҙы. Ә халыҡ

театры артистары Рәзилә Хәбибуллина, Азат Баҡыев, Эльвира Насирова, Гөлфирә Бәширова драматургтың «Һипкелле ҡыҙ» комедияһынан өҙөк уйнап күрһәтте, Илшат Хәбибуллин башҡарған бейеүҙәр, Наил Вәлиевтың баян моңдары кисәгә матур биҙәк өҫтәне.

Икенсе көндө юбилярҙы элек үҙе уҡыған Сәйетбаба урта мәктәбенә саҡырып ҡотланылар. Тантанала шулай уҡ шағирҙар Рәшит Сабит, Кәрим Булат ҡатнашты.

***

Ғафури районында бына ун бер йыл инде әҙәби ижад менән мауығыусы уҡыусы балалар араһында «Өмөтлө ҡәләм» бәйгеһе бара. Күптән түгел 300-ҙән ашыу йәш ижадсы ҡатнашҡан быйылғы бәйгегә йомғаҡ яһалды.

Сарала район мәғариф бүлеге, йыл һуҙымында бәйгене яҡтыртып барған «Табын» гәзите, райондың башҡорт һәм татар мәктәптәре уҡытыусылары һәм ҡәләм тибрәтеүсе уҡыусылары ҡатнашты.

Тантана Жәлил Кейекбаев исемендәге Красноусол башҡорт гимназияһында үтте. «Өмөтлө ҡәләм»де ойошторған яҙыусы Гөлнур Яҡупова әҫәрҙәре иң талантлы тип танылған 3 бәйгесегә үҙенең аҡсалата премияларын һәм автографлы китаптарын тапшырҙы .

Бынан тыш, 16 баланың ижады район ойошмалары һәм предприятиелары булдырған төрлө номинацияларҙа баһаланды, бер уҡыусы «Йәш ҡобайырсы» призына лайыҡ булды.

«Өмөтлө ҡәләм» бәйгеһендә шағир, прозаик Рәшит Сабит сығыш яһаны, республика «Йәншишмә» гәзите редакцияһы призДарын журналист Зөбәржәт Миңлебаева тапшырҙы.

***

Прозаик Сабир Шәрипов менән шағир, әҙәби тәнҡитсе Фәнил Күзбәков Яңауыл ҡалаһы мәҙәни үҙәгендә (мәғариф бүлеге етәксеһе А.А. Шәрәфисламов, методика кабинеты мөдире Л.Р. Ғарипова, башҡорт теле буйынса методист Г.Ф Миңлейәрова), Тәтешле гимназияһында (мәғариф бүлеге етәксеһе Ә.М. Фәрүәзетдинов, туған телдәр буйынса методистар Л.Ф Йосопова, Ф.Ә. Минәзева), Мишкә районы мәҙәни үҙәгендә (башҡорт теле буйынса район мәғариф бүлеге методисы С.М. Исмәғилева), гимназияларҙа уҡыусылар, уҡытыусылар, китапхана, почта хеҙмәткәрҙәре, әҙәбиәт һөйөүселәр менән осрашыуҙар үткәрҙе. Уларҙа алдағы ярты йыллыҡҡа «Ағиҙел» журналына яҙылыу мәсьәләһе, әҙәбиәт, мәҙәниәт, тел проблемалары ҡаралды. Әҙиптәргә һорауҙар бирелде, баҫманы уҡымлыраҡ итеү йәһәтенән кәңәштәр әйтелде.

***

«Ҡазан утлары» журналының сыға башлауына 90 йыл тулды. Ошо айҡанлы Татарстандың баш ҡалаһындағы Ғ. Камал исемендәге Татар дәүләт драма театрында тантаналы кисә үткәрелде. Унда «Ағиҙел» журналының баш мөхәррир урынбаҫары, шағир Рәмил Йәнбәк ҡатнашты, ҡотлау һүҙе әйтте, бүләк тапшырҙы.

Иртәгәһе көндө Татарстан яҙыусыларының XVII съезы булды. Уның эшендә Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Риф Тойғонов ҡатнашты һәм телмәр менән сығыш яһаны.

***

Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрында драматург Наил Ғәйетбайҙың пьесаһы буйынса «Ере юҡтың – иле юҡ» спектакленең премьераһы булды. Тамашаның режиссеры һәм рәссамы – Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Сәлих Әфләтунов, композиторы – Юлай Үҙәнбаев. Төп ролдәрҙә – Башҡортостандың халыҡ артискалары Нурзиә Әбдрәшитова, Фариза Хәсәнова, Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Салауат Итбаев, Арсен Шәйхетдинов һ.б.

Йыл башында Наил Ғәйетбай әҫәрҙәре буйынса Сибайҙың «Сулпан» балалар театрында «Урал батыр» менән «Теүәтәй һәм Өфө», Әлмәт татар драма театрында «Ҡыҙҙар, ишек асығыҙ!», Минзәлә татар драма театрында «Ҡыҙҙар-йондоҙҙар», Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында «Санаторийҙа булған хәл» спектаклдәренең премьералары уҙҙы.